# Ағиҙел

Өфө,
ноябрь
2011

11(1063)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Азамат ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Хәзиева *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 08.11. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 265 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0191.11.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2011 (11,1063)**

# БЫЛ ҺАНДА:


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Радик Әхмәтов.** Эй, ағыла болот... Р о м а н . ....................................5
**Гүзәл Ситдиҡова.** Уйынсыҡ һыйыр. Х и к ә й ә . .............................46

ШИҒРИӘТ

**Мөхәммәт Закиров.** Матурлығың менән һин мәңгелек...
Ш и ғ ы р ҙ а р . .....................................................................................56
**Зөфәр Вәлит.** Рәсәйҙә генә түгел... Ш и ғ ы р ҙ а р . .........................62
**Әхәт Ниғмәтуллин**. «Юҡ, әйләнеп ҡайтмаҫ инде...»
Ш и ғ ы р ҙ а р . .....................................................................................68

СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Нәжиб Асанбаев.** Сейәлетау. Д р а м а . ..........................................74

ШИШМӘЛӘР

**Ринат Сөләймәнов.** «Әкрен генә йылға көйләй көйөн...»
**Рәзилә Ҡотлогилдина.** Рәхмәтлемен һеҙгә...
**Фәнис Бикташев.** Әбетем – изге төйәгем. Ш и ғ ы р ҙ а р . .............97

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Юрий Ергин.** Башҡорт тел ғилемен нигеҙләүсе педагог
*(Закир Шакировтың тыуыуына 130 йыл ).* .................................104
**Гөлназ Ҡотоева.** Йән йылыһын өләшеп...
*(Ғәбиҙулла Зариповтың тыуыуына 50 йыл).* ...............................111

*Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына – 100 йыл*

**Эрнст Ишбирҙин.** Ж. Ғ. Кейекбаевтың ғилми-ижади мираҫы. ..116
**Әхмәт Сөләймәнов.** Фольклор менән рухланып. ........................120
**Зөһрә Кейекбаева.** Ебәрелгән һәм алынған хаттар. *Дауамы.* ....144

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Ҡасим Аманжолов.** Һайра, һайра, һандуғасым.
Ш и ғ ы р ҙ а р . ...............................................................................176

РУХИ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

**Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.** Белем һандығы. ...................................181

*4 декабрь – Дәүләт Думаһына һайлау көнө*

**Мәхмүт Хужин.** Вәғәҙәләр гөлләмәһе. .........................................187

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА

**Р. Ахметов.** Эй, плывут облака… *Роман.*
**Г. Ситдыкова.** Игрушечная корова. *Рассказ.*

ПОЭЗИЯ

**М. Закиров, Зуфар Валит, А. Нигматуллин**. *Стихи.*

СЦЕНИЧЕСКИЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

**Н. Асанбаев.** Вишневая гора. *Драма.*

РОДНИКИ

**Р. Сулейманов, Р. Кутлугильдина, Ф. Бикташев**. *Стихи.*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Ю. Ергин.** Педагог, основоположник башкирского языкознания
*(130 лет со дня рождения Закира Шакирова).*
**Г. Кутуева.** Теплота души поэта
*(50 лет со дня рождения Габидуллы Зарипова).*

*100 лет со дня рождения Ж.Г. Киекбаева*

**Э. Ишбирдин.** Творческое и научное наследие Ж.Г. Киекбаева.
**А. Сулейманов.** Воодушевленный фольклором.
**З. Киекбаева.** Отправленные и полученные письма. *Продолжение.*

МОСТЫ ДРУЖБЫ

**К. Аманжолов.** Пой, пой, соловушка. *Стихи.*

КОРНИ ДУХОВНОСТИ

**Ф. Губайдуллина.** Сундучок знаний.

*4 декабря – день выбора в Государственную Думу*

**М. Хужин.** Букет обещаний.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

*Сәсмә әҫәрҙәр*



**Радик**
**ӘХМӘТОВ**

# ЭЙ, АҒЫЛА БОЛОТ...

## Роман

Һөт төҫөндәге «Волга» федераль юл сатына етәрәк, тормоздарын сыйнатащыйырҙата, туҡталғандай итте лә йәнә алға ынтылды. Машина борхотҡан ҡар бураны артында ҙур ауылдың һирәк-һаяҡ емелдәшкән уттары тороп ҡалды.

Февраль айы. Көңгөрт күктә, ергә тейә яҙып, йыртыҡ болот киҫәктәре йөҙә. «Беҙ, билгеле, колхоз киттек, ә һеҙ, болоттар, ниндәй илдәргә, ниндәй ерҙәргә шулай ашығаһығы-ы-ыҙ, ҡайһы яҡтарҙа ҡар яуҙыраһығыҙ?» – тип ҡысҡырғы килә...

Ҡырҙарға ҡар ҡалын ятҡанға оҡшай. Юл буйында ул, аҡ мамыҡтай төҫөн юғалтып, ҡарая төшкән. Тегендә-бында, оло юлды киҫә үтеп, фермаларға тарттырылған эҫкерт эҙҙәре ярылып ята. Урыны менән ҡойолған һалам өйөмдәре, ҡар япмаһы аҫтында ҡалып, төрлө йәнлектәрҙе хәтерләтә.

Иртә таңда юл буш. Шуға ла ул ҡотһоҙ һәм ят күренә.

Оло юл ағастары һирәкләнә төшкән урман аша килә-килә лә, ҡырҡ-илле шәхси хужалыҡтан торған ауылды ситләтеп үтеп, һөҙәк яр аҫтына төшә. Аҫтараҡ ҡар-боҙ ҡаплаған йылға аша һалынған һәм шығыр-доғор сәләмләп ҡалған ағас күпер аша сыға. Күперҙән алыҫ түгел, текә яр буйлап киң ат юлы үтә. Уның бер осо йылғаға, икенсе осо, борғалана-борғалана, ауылға йүнәлә. Фар яҡтыһында мәке тирәләй ҡар шаҡтай тапалып, ялтыр боҙға әйләнгәнлеге күҙгә салына. Ағас күперҙе үтеп, уйһыулыҡтан күтәрелгәс, машина тигеҙ яланға килеп сыға. Юлдың уң яғында уны тура һынлы, бер сафҡа баҫҡан ҡайындар оҙата ҡала.

Бында һикәлтәләр, соҡор-саҡырҙар аҙым һайын. Руленде ҡайһы яҡҡа борһаң да, соҡор һағалай. Донъя күргән шофер халҡы нәҡ ошондай юлды «мина баҫыуы» тип йөрөтә лә инде. Юлдың әле бер, әле икенсе ситенә тайпылып барған машина алдынан фаралар һипкән ут һикерә.

---

*Радик Әхмәтов (1949) — Төркмәнстанда тыуған, Күгәрсен районы Теләүембәт ауылында буй еткерә. Ауыл хужалығы институтын тамамлағас Кушнаренкола төпләнә, ветеринария тармағында эшләй. Оҙаҡ йылдар инде ауыл хужалығы техникумында уҡыта. Прозаға бер ни тиклем һуңлабыраҡ тотонһа ла, һуңғы йылдарҙа бик емешле эшләй: хикәйәләр, повестар, драмалар ижад итә. Әлеге романы журнал вариантында баҫыла.*

Машина йөрөтөүсенең һиҙгер күҙҙәре алда үтәһе юлды өҙлөкһөҙ барлай, яняҡтағы тауыштарҙы, бер көйгә һалынған мотор геүләүен аңғара килә. Уның юлдашы машина креслоһына һыйына биреп, ойоп киткән аяҡтарын һуҙып ебәргән, күҙ ҡабаҡтары бер күтәрелә, бер төшә – бар көсөнә йоҡоһо менән алыша. «Бирешмәҫкә серәшә», – тип уйлап ҡуйҙы водитель. Уға тәбиғәтте таң йоҡоһонан уятып, үҙҙәре алға барған кеүек түгел, ә юл ҡаршыға сыҡҡан һымаҡ тойола...

Ә юлдашы йоҡламай, күҙ ҡырыйы менән шоферҙың машина йөрөтөү һәләтенә һоҡланып, һәр хәрәкәтен күҙәтеп бара. Рулде тотҡан тилбер ҡулдар юл михнәттәрен күп күргәндер, моғайын... Тик, ниңәлер, шофер бойоҡ күренә. Кабина эсендәге приборҙарҙы яҡтыртҡан ут сатҡыһында маңлай тирәһендәге тәрән йыйырсыҡтарҙы, төпкә батып уҡ киткән күҙҙәрҙе шәйләп була.

Бөгөнгө юл уның уй-фекерҙәрен буталдыра, үткәндәренең берәй киҫәген йолҡоп ала ла күҙ алдына килтереп баҫтыра. Юҡ-юкта йөҙөн күңелле, йылы күренештәр ҙә яҡтыртып ебәрә. Ул, онотолоп китеп, ҡыҫҡа курткаһынан бармаҡ остары менән сигарет сығара ла теш араһына ҡыҫтыра, шунан, кеҫәләрен ҡапшап, шырпы эҙләй, әммә салон эсендә тартырға ярамағанлығын иҫенә төшөрөп, тәмәкеһен кире һалып ҡуя.

Һөт төҫөндәге «Волга» Ташҡайыр ауылына табан елә. Рулдәге ир ул тарафҡа яҡыная барған һайын нығыраҡ тулҡынлана.

...Фаил теле асылғандан алып, үҫкәс шофер булам, тип хыялланды. Ә хыялдарын тормошҡа ашырыуға әсәһенең ҡустыһы, МТС-та шофер булып эшләгән Миҙхәт ағаһының йоғонтоһо ҙур булды. Һирәкләп булһа ла, ағаһы иҫке генә «ЗИС»ы менән килгеләп китер ине. Нисектер, бер килеүендә ул Фаилды кабинаға, үҙенең алдына, ултыртты ла, ҡулын рулгә тотондороп, ауылды әйләнеп сыҡты. Бензовоз артынан күтәрелгән саң аҫтында Фаилдың тиҫтерҙәре, машинанан ҡалышмаҫҡа тырышып һикеренә-һикеренә, сандыр аяҡтарын ялтыраталар ине. Ағаһының тубығына ултырып алған Фаил иптәштәренең сапҡын ат төҫлө сабышыуҙарын күрмәне лә, шәйләмәне лә. Шәйләрлектер шул: танауы сөйөлгән, ауыҙы йырыҡ. Ҡыуанысы эсенә һыймай, ташып барған кеүек. Был уның балалыҡ йылдарындағы иң бәхетле кисерештәре булғандыр.

Һәр кешенең үҙенә бик ҡәҙерле һәм бәхетле минуттары иҫендә ҡала. Ошо тиҙ үтеүсән мәлдәрҙең кешенең киләсәге өсөн йоғонтоһо айырыуса ҙур. Һәр кемде бәхетле лә, бәхетһеҙ ҙә иткән минуттар – аҙ ваҡытҡа бирелгәнгә һәм һуҙылғанға күрә – үтә ҡәҙерле булаларҙыр. Теге мәлдә Фаил да үҙен бик бәхетле тойғайны. Был онотолмаҫлыҡ ваҡиғанан һуң ул малайҙар араһында бер башҡа үҫеп китмәһенме! Хатта үҙенән олораҡ үҫмер егеттәр уны ситләтмәй, бәғзе уйындарына ҡатнаштырып, эйәртеп йөрөтә башланы. «Фаил руль артына ултырып машина йөрөтөп барған» тигән хәбәр һә тигәнсе – «ҡоҙоҡтан бер биҙрә һыу алып ингеләгәнсе» ауыл, өҫкө урам малайҙары араһында таралып өлгөрҙө. Шул көндө, төштән һуң, мәктәп йәшенә етер-етмәҫ малай-шалайҙар Юшатыр йылғаһы буйына, ҡомлоҡҡа йүгерешеп килеп, ҡыҙынырға ятты. Әле береһе, әле икенсеһе алмаш-тилмәш тәкмәсләп һыуға һикерә. Йөҙөп туйғандан һуң тағы ҡом өйөмөнә ташланалар. Ҡыҙыныусыларҙың урталарында үҙен тотанаҡлы, ғорур, бер ни тиклем өҫтөнөрәк тотҡан Фаил ултыра. Уға һыу ҡойонорға ла, ятып ҡыҙынырға ла ирек бирмәйҙәр, баяғы хәлде төпсөнөп-төпсөнәләр.

Фаилдарға күрше Баҡый исемле малай уның алдына сүгәләп алған да һорау артынан һорау яуҙыра:

– Фаил, ә, Фаил! Һин рулде ысынында үҙең борғоланыңмы? Нисек көсөң етте? Машинаның турмыҙына кем баҫты? Ағайыңмы?

Малайҙар араһында иң кесеһе – өс йәшлек Таһир. Ул туған тейешле, шуны белептер, Фаилдың аяҡтарына атланып уҡ алды:

– Ниңә инде ағайың мине лә бизобозына утыртманы? Минең дә машинала йөрөгөм килә, – тип ләпелдәп аптыратып бөтөрҙө. Инде нисәмә ҡат Фаил, ҡулдарын уйнатҡылап, ым-ишаралар ҡушып, урам уртаһынан бөтә мал көтөүен ҡурҡытып, выжылдап үтеүҙәре тураһында һөйләй ҙә һөйләй. Малайҙар уны хайран ҡалып тыңлай.

Әйтергә кәрәк, малайҙар араһында төрлө холоҡло, төрлө тәрбиә алғандары, алып еткермәгәндәре лә осрағанға күрә, барыһы ла Фаилға һоҡланып, уға илтифат биреп бармай ине шул. Хасланып, күпсеп торғандары, йә булмаһа ярамһаҡ, нәжәғәй булып ҡыланыусылары ла етерлек ине.

Ярлы ғаиләнән булып, ун йәше менән барһа ла мәктәпкә йөрөмәгән, этлеккә башын һалған сибек кәүҙәле Дамир, тиҫтере өҫтөнә төшкән был тиклем данды күтәрә алмайынса: «Әй, хәстрүш! Нимә борсаҡ шыттырып ултыраһың? Рулгә ҡоламаҫ өсөн тотоноп барғанһың. Машинаһын ағайың үҙе йөрөткән. Һиңә ҡалған тағы – байғошҡа...» – тип кәмһетергә тотондо. Фаил – бик күндәм, ауан малай, был алама һүҙҙәрҙе ишетеп ҡаушап ҡалды. Әммә шул, ҡуҡрайған Дамирҙың нахаҡ әйткәндәренә риза булып, түҙеп ултырырғамы? Юҡ!

– Ә-әй, үҙеңде бел йәме! Ҡалай тартай сандарға әйләнгәнһең. Һинең ул, ауыҙың асылһа, үпкәң күренеп тора!

– Нимә, нимә? Кипкән һыйыр тиҙәге бит һин, сығынсылап торған булаһың. Берәйҙе тамыҙғанды көтәһеңме? Әйҙә, тороп баҫ!

– Ярай, ҡуҡрайып торма әле! Ҡурҡҡандар, ти, бер кәкрешкәнән...

Бер-беренә кәмһетеү һүҙҙәре яуҙырып әйтешкәндән һуң, әүмәкләшеп ергә ҡоланылар. Ҡыҙыу ҡом өҫтөндә тәгәрәшеп һуғышҡан ике «кәзә тәкәһе»н иптәштәре көскә айырып алды.

Ошондай эләгешеүҙән һуң да Дамир тыныслана алманы, һаман Фаилды түбәнһетеүен белде.

– Улай шәп булғас, башҡа малайҙарҙы ла йөрөттөрөргә ине! Ағайың булмаһа әле...

– Көнләшә ул, – тине Зәйнулла, Фаилды яҡлап.

– Шофер ағаһы булмағанға күрә шулай ямаҡ ҡылана, – тип өҫтәне Фаил яҡлы Баҡый.

– Унының ҡарауы, минең ағайым тракторист, горыдта эшләй. Һуғышта танк йөрөткән. Бына ул мине, бер һүҙһеҙ, тракторында йөрөтәсәк. Белдең?

Ҡом өйөмөнә аяғүрә баҫҡан малайҙар хихылдап ҡуйҙы.

– Өс һум аҡса бирһәләр ҙә ултырмайым мин шул дөмбөр-дөмбөр йөрөгән тимер арбаһына... – тип әйтеп ҡуйҙы Ғәйзулла.

– Кем әле һине тракторға ултыртырға тора!? Кәрәгең бер тин. Ҙурайғас үҙем шофер булам. Бына күрегеҙ ҙә тороғоҙ, – тине Дамир, иҫе китмәй генә.

– Мин дә шоферлыҡҡа уҡыясаҡмын, – тип яуап ҡайтарҙы Фаил, артыҡ аптырамай.

– Ә ниндәй машина йөрөтөргә итәһең? «Победа»ла ҙур-ҙур ағайҙарҙы йөрөтһәң икән дә ул, йә берәй генералды... Һин шуға ризамы?

– Юҡ, Ғәйзулла! Иң һәйбәте «ГАЗ-51» инде, «ЗИС-5» тә ярай. Ағайым йөрөткән иҫке бизовоз миңә кәрәкмәй. Яңыһы булһын, үҙе йөк бушата торғаны...

«У-ух! – тиеште барыһы бергә, унан: – Мин дә шофер булам, мин дә уҡыясаҡмын, ҡалаға курсҡа барам», – тигән тауыштар, һөрәнләүҙәр ҡапыл ғына күк күкрәп, ҡойоп яуған ямғыр тамсылары аҫтында күмелеп ҡалды. Малайҙар уҙыша-уҙыша өйҙәренә йүгереште.

Шул көндән аҙаҡ ауылдағы бала-саға ошоғаса уйнаған уйындарын онотоп торҙо. Үҫмерҙәрҙең минут һайын үҙгәреүсән нескә күңелдәрен машина яһау, шофер булып ҡыланыу, тәгәрмәс тәгәрәтеү һымағыраҡ мауығыуҙар ылыҡтырҙы. Тубыҡтан соҡор ҡаҙып, тимерлек сүплегенән руль тәгәрмәсенә оҡшағанырыраҡ тимер-томор һөйрәп алып ҡайталар ҙа, берәй торба йә булмаһа таяҡ осона кейҙереп, соҡорҙарына соҡоп ултырталар. Арҡырыһына бер нисә ҡыҫҡа таҡта киҫәктәре теҙәләр. Ошоноң менән машина әҙер. Унан китәләр ыжылдап та выжылдап! Тәүҙә районға юлдары, аҙаҡ Өфөгә һыҙалар, Себерҙе урап ҡайтып, Мәскәүгә һыпырталар. Мәктәп йәшендәге үҫмерҙәр аяҡ педалдәре, ҡул этәргестәренә ҡәҙәр эшләйҙәр ине. Фаил да ер ҡаҙып маташтц, тимер эҙләп йөрөмәгән ере ҡалманы, уның ҡарауы, шәп, һоҡланғыс машина килеп сыҡты. Ул руле тиһеңме, ул прибор таҡтаһы! Урындығын ташланған комбайндан һалдырып алып ҡуйҙы. Тәгәрмәстәре генә етмәй…

Ҙурыраҡ малайҙар бәләкәстәрҙе, «шәп машина»быҙға ултыртабыҙ, тип уларҙан икмәк-шәкәр килтертәләр ине. Фаил улай итмәне. Киреһенсә, үҙе ҡорған машинаға ултыртып йөрөттө, сабый балаларҙы ҡайҙа кәрәк шунда алып барып еткерҙе.

Туҡтау белмәҫ ваҡыт үтә торҙо. Юҡҡа-барға мауығыусы шуҡ ауыл малайҙары уның тиҙ үткәнлеген һиҙмәне лә. Иртәне кистән айырмай, бөтә донъяларын онотоп, ата-әсәләре эҙләп алғансыға тиклем шофер уйындарын уйнанылар ҙа урам буйлап ҡыуыштылар. Фаил да улар менән бергә.

Шофер уйындарын уйнау ауыл малайҙарын һис тә ялҡытманы, киреһенсә, көндән-көн ҡыҙыштыра барҙы. Ҡайҙа ғына бармаһындар, йомошҡа-фәләнме, гел генә машина тауышы сығарып йүгереп йөрөр булдылар. Ҡулдарына ниндәй түңәрәк нәмә эләгә – шуны борғолайҙар.

Бер көндө шулай әсәһе, Миңнеямал апай, Фаилды күршеләренә таба һорарға ебәрҙе. Бына көтә малайы ҡайтҡанын, ә тегеһе юҡ та юҡ. Инде ҡамыры ла ҡабарҙы, мейесе лә һүрелә башланы – ә таба юҡ. Көтөр әмәле ҡалмағас, үҙе китте күршеләренә. Фаилдың табаны күптән алып сыҡҡанлығы асыҡланды. Аптырағас, Миңнеямал апай малайын урам буйлап эҙләп китте. Фаил бер көтөү малайҙар араһында, ҡулындағы табаны тегеләй ҙә былай әйләндереп, выж да выж сабыулап йөрөй ине. «Күрер көндәрем бар икән дә! Йә, Хоҙай!» – тип әсенде лә, малайын ары-бире сәпәкләп, өйҙәренә әйҙәне. Шул туҡтауһыҙ шофер булырға хыялланыу арҡаһында бер көндө Фаил бәхетһеҙлеккә осраны. Атаһы, Ниғмәт ағай, ҡулына балта-бысҡы тотоп, ауышҡан ситән ҡоймаһын йүнәтеп йөрөй ине. Төшкө аш ваҡыты, ә ире инмәй ҙә инмәй. Миңнеямал апай күтәрмәгә сығып ҡысҡырҙы:

– Атаһы, аш өлгөрҙө, йә, инә һал инде. Һыуына ла баһа. Ташла, тим, эшеңде.

– Миңнеямал, һиңә мәғлүм дә баһа: башлаған эшемде ярты юлда ташлаған юҡ. Бер ҙә булмаһа, ашыңды ошонда ғына сығар. Өйгә инһәң, оҙаҡҡа китә, итекте һалыр-кейер кәрәк... Пәртәнкәһен урағансы... Киске яҡҡа урманды әйләнеп ҡайтаһы ла бар…

– Шул инде һинең, шул итек һалыуҙы ла эшкә һанайһың.

Ҡайнар ашты ҡоштабаҡҡа тултырып һалғас ҡына Миңнеямалдың иҫенә төштө: Ниғмәте туҡмаслы ашты ҡатыҡ ҡатымай ашамай. Уйлап та бөтөрҙө – ҡар баҙына төшөп тә китте. Ошо мәлдә өй тирәһендә һыбыҙғылап йөрөгән Фаил – йәнәһе, эшкә ярағанлығын күрһәтә – тиҙ генә теге ҡоштабаҡты эләктерә һалды ла болдорҙан төшә башланы. Инде баҫҡыстың һуңғы киртләсенән ергә баҫтым тигәндә, машина руле кеүек күреп уңға-һулға борғолай башлаған ҡоштабағы

ҡулынан ысҡынып китте лә, майлы ҡайнар аш һурпаһы өҫтөнә һирпелеп, тубыҡтан түбән яндырып ағып китте. Унның йән өҙгөс тауыш менән ҡысҡырғанын ишетеп, Ниғмәт ағай ҡулындағы балтаһын ергә бырағтырып, өйгә табан сапты. Миңнеямал апай ҡар баҙынан атылып килеп сыҡты ла, йәш тамсыларын йота-йота, малайын ҡулына эләктерә һалып, һикегә ятҡырҙы.

Бер аҙҙан йорт эсендә ҡысҡырыш китте, әйтерһең дә, дауыл ҡупты…

– Башың бармы һинең? Дыуамал, шул баланан ҡайнар аш сығарталармы? Уйлар кәрәк бит – шул бер балаңды ла ҡарай алмайһың, бисәлегеңде әйтер инем инде…

– Әйт, әйҙә, әйт! Ярамайым икән, – әйҙә, ишек асыҡ, теләгән ереңә кит, дүрт яғың ҡибла… Ниңә саҡырғанда инмәнең? Аш бешкәнде беләһең бит. Гаспадин тиерһең, ишек алдына сығарғанды көтөп ултыра берәү. Сабака нәмә.

– Күрһәтермен мин һиңә сабаканы, үҙең эткә әйләнмәгәйең. Сығып кит, имеш… Һин һалған донъялыр шул…

– Мин юрый түккәнме ни? Кем ҡушҡан уға аш сығарырға? Үҙе бит, тиктормаҫ – эш тә ҡылмаҫ нәмәкәй! Ҡушһаң тыңламаҫ ине әле.

Фаил һикелә ятҡан еренән, әллә ауыртыныу-һыҙланыуға түҙә алмай, әллә атаәсәһенең ошондай ваҡытта ыҙғышып, бер-береһенән ғәйеп эҙләп ҡысҡырыныуҙарын ишетеп, үкһеп-үкһеп илай. Улдарының ыҙаланғанын ҡарап тороу ата-әсәгә үтә лә ауыр. Миңнеямал түҙмәне, күҙ йәшенә быуылып, тағы ярһып Ниғмәтенә ырғылды:

– Күрмәйһеңме малайың ҡалай һыҙланып ята, ә һин, алама бисәләрҙән дә былайыраҡ, телеңә хужа булмай, мейемде ашайһың. Бар, тиҙ бул, ат ек! Күрше ауылдан фельдшерҙы алып кил.

Ниғмәт ағай артынан ишек ябылғас, нимә эшләргә белмәй аптырашта ҡалған әсәнең иҫенә бешкән урынды дауалау ысулы килеп төштө. Тиҙ генә ҡоштабаҡҡа ике тиҫтә йомортҡа һытып, бер семтем сода һалып туғыны ла Фаилдың күбекселәнеп сыҡҡан бешкән урындарына әлеге шыйыҡсаны һөртә, һылай башланы.

– Түҙ, улым, түҙ! Өләсәйең гелән ошолай эшләй торғайны, тиҙ уңалта, йомортҡа булмаһа, һейҙек ҡулланығыҙ, теләһә ниндәй яраға, шешкән, бешкән урындарға килешә ул, тип әйтә торғайны. Төтөн менән өтөр ине – ауыртҡаны ла бөтә, шеше лә ҡайта.

– Әсәй, мөрйәнән сыҡҡан төтөнгә тоторға кәрәкме?

Миңнеямал йылмайып ҡуйҙы, улы илауҙан туҡтаны,– күрәһең, йомортҡа шыйыҡсаһының файҙаһы тейҙе.

– Йүләр һин, улым. Бында күп төтөн кәрәкмәй. Бер киҫәк мамыҡ йә марля яндыраһың, тоҡанып киттеиһә, тиҙ генә һүндерә һалып, төтөнөн яра өҫтөндә тотаһың. Өләсәйең хөкүмәт сығарған дарыуҙарҙы бөтөнләй ҡулланманы, береһен дә эсмәне. Дарыу үләндәренең илле төрлөһөн йыйып, киптереп, ҡышҡылыҡҡа әҙерләп ҡуйыр ине.

– Ә нимә эшләп өләсәй төтөндө яра өҫтөнә ебәргән. Төтөн эҫе лә баһа. Яра бешмәйҙер шул?

– Тәүҙә бер аҙ ауыртыр инде. Бая ғына әйткән инем бит: яра төҙәлә, шешмәй, тип. Минең уйлауымса, төтөн яралағы микрубтарҙы үлтерә торғандыр.

– Ә нимә була ул, әсәй, «микруб»?

Фаилдың һыҙланыуҙары баҫыла төштө, шуға ҡыҙыҡһыныуы артып, әсәһенең нимә әйтерен көттө. «Минең бешкән урындарға төтөн ебәреп ҡуйһалар йә фельдшер апай укол яһаһа – иламай түҙер инем микән», – тип уйланды ул. Үтә

төпсөнөргә, күп белергә тырышҡан улының һорауына оҙаҡ ҡына яуап таба алмай ыҙаланды Миңнеямал.

– Һиңә, улым, тиҙерәк уҡырға-яҙырға өйрәнер кәрәк – үҙең уҡып белер инең.

– Әй, мәктәптә өйрәтерҙәр әле, өйҙә өйрәнгем килмәй минең, – тип ҡырт киҫте малай.

– Ә микруб тигәне, Фаил улым, кеше күҙенә күренмәй, ти ул, улар энә осонан да бәләкәсерәк була икән. Үҙҙәре күп, һанап бөтөргөһөҙ, бик тиҙ үрсеүсәндәр, ҡан менән бөтә тән буйлап тарала. Иң яратҡандары – бауыр менән үпкә, бик тә булмаһа, йөрәк, ти. Шулай итеп, айырым-айырым тән ағзаларын ашай ҙа бөтөрәләр икән.

– Әсәй, ә фельдшер апай килерме?

– Өйөндә булһа, килмәй ҡалмаҫ, улым. Эше шул булғас…

– Әсәй, ә уның уколы бармы?

– Барҙыр. Врачтың уколы булмай тиме ни?

– Ниңә атайымды уның артынан ебәрҙең? Әсәй, врач кәрәкмәй – мин унан ҡурҡам, ул бит укол яһай, – тип көйһөҙләнергә, шыңшырға тотондо Фаил.

– Ҡалай ҡурҡаҡ икәнһең дә. Врач апай, бәлки, укол да бирмәҫ әле. Берәй кәрәкле май ҡалдырыр ҙа, уны һорткәс, бешкән урындарың төҙәлер ҙә ҡуйыр, ә һин – тиҙерәк иларға! – тип улын йыуатырға тырышты әсә. Күп тә үтмәй, Ниғмәт арбаһына бите һипкелле, ләкин бик һөйкөмлө, ҡырҡ йәштәрҙәге фельдшер апайҙы ултыртып алып ҡайтты. Өйгә инделәр. Фаил шыңшып ятҡан еренән туҡтаны ла ни булырын көтә башланы.

Фельдшер өҫтөн һалып, малай эргәһенә һикегә ултырҙы.

– Йә, батыр! Хәлең нисек? Бик һыҙламаймы? Ҡана, күлдәгеңде күтәр әле, бешкән урындарыңды тикшереп сығайыҡ, – тине ул, алсаҡ йылмайып. Аҙаҡ әсәһенән нимәлер һораны. Миңнеямал өндәшмәй генә баш ҡаҡты ла бүлмәнән сыҡты. Фельдшер ҡатынҡай был мәлде дарыуҙар һалынған сумкаһынан ниҙер эҙләй ине. Фаил яңынан иларға тотондо:

– Апай! Мин уколдан ҡурҡам.

Фельдшер йомшаҡ, наҙлы ҡулдары менән малайҙың башынан һыйпап ҡуйҙы.

– И-и, балаҡай, – тине ул, – ошондай егеткә укол ҡаҙап булалыр шул? Хәҙер әсәйең инһен дә, бешкән урындарыңа һәйбәт май һөртөрбөҙ, аҙна-ун көн үтеүгә йүгереп тә китерһең.

Тик фельдшер ҡатын әйткәнсә килеп сыҡманы. Фаил ай ярым тигәндә генә ныҡлап аяҡҡа баҫты.

***

Фаил етеһе тулып мәктәпкә барыр йәйҙе иҫтә оҙаҡ һаҡланырлыҡ тағы бер ваҡиға булды. Тиңдәштәре менән ауыл осондағы ағаслыҡта ҡыҙылдар менән аҡтар булып атышып йөрөгән саҡтары. Ҡыҙылдар күтәрелеп, аҡтар өҫтөнә һөжүмгә ташланырға йыйынғанда, ауыл яғынан, бар көсөнә йүгереп, хәле бөткән дүрт йәшлек Рифат исемле малай килеп етте. Ул туп-тура Фаил янына йүнәлде. Уның күлдәк еңенән тартып туҡтатты ла ҡолағына нимәлер шыбырҙаны. Тегенеһе, уйын менән мауығып, Рифаттың һүҙҙәрен аңламай ҡалды.

– Кем саҡыра тиһең?

– Ағайың килгән, тим бит. Бизовозы менән.

– Алдайһыңдыр? Күҙеңә яңылыш күренмәнеме? Биллаһи, тип әйт!

– Биллаһи, алдамайым! Ағайың машинаһын танымайымдыр шул мин. Ҡурҡма, Фаил, мин береһенә лә әйтмәнем.

– Рифат, ҡалай маладис икәнһең! Көтөп тор, хәҙер ҡайтабыҙ. – Артына боролоп: – Әй, ҡыҙылдар! Үҙегеҙ генә күрәгеҙ биреп ебәрмәгеҙ, минең ағайым килгән. Мин ауылға сап-ты-ы-м,– тип ҡысҡырҙы ла, ағас мылтығын да алырға онотоп, Рифатты күпкә артта ҡалдыра биреп, ауыл яғына йүгерҙе.

Миҙхәт ағаһының машинаһын алыҫтан уҡ танып алды. Аҙыраҡ яңырғанға оҡшай, буяғандыр, ахыры. Фаил бар булмышын биләп алған ҡыуанысынан өйгә атылып инергә лә ағаһының күкрәгенә һарылырға уйлағайны, ләкин ниндәйҙер тылсымлы көс уны ары ебәрмәне, машина эргәһенә тартып тигәндәй килтерҙе. Башта малай унан һаулыҡ һорашты: «Имен генә килеп еттеңме? Тимер арҡаң бысрап, туҙанға ҡатып бөткән, тимәк ауылға тиклем юл насар. Ағайым үҙенде буяштырған, әлбиттә...» Машина менән һөйләшеп бөткәс, ҡулдары менән уны һыйпаштырып, иркәләп сыҡты. Тәгәрмәстәрен ҡараштырҙы, бер-ике мәртәбә типкеләп, тыны барлығын-юҡлығын тикшерҙе. Бөтә яҡлап та ентекләп ҡарап сыҡҡандан һуң, Фаилдың кабина эсенә инеп, элекке ваҡыттағы кеүек рулгә тотоноп, уны борғолап ултырғыһы килде. Машина ишеген һаҡ ҡына үҙенә тартты. Тегенеһе шығыр-шығыр килеп асыла төштө. Шуны ғына көткән Фаил, йылдам ғына үрмәләп, руль артына менеп ултырҙы. Ағаһының: «Был машина күпте күрҙе, Ватан һуғышында ла бергә ҡатнаштыҡ, йөк ташыныҡ, икебеҙ бергә янған да бар» – тигән һүҙҙәре иҫенә төштө малайҙың.

Рулде уңлы-һуллы борғолап оҙаҡ ултырҙы ул. Был эш ялҡытҡас, аяҡ осо менән руль аҫтына сумып, педалдәрҙе баҫҡылап сыҡты. Былары ғына етмәне, күҙҙәре алда һерәйеп торған ике оҙон этәргескә ҡаҙалды. Уларҙың машинаны туҡтатҡанын, ҡайһыһы тиҙлекте үҙгәртеү өсөн кәрәк икәнлеген Миҙхәт ағаһының элекке килеүендә үк үҙләштергән ине лә, тик хәҙер онотҡан... Ул береһен абай ғына урынынан ҡуҙғатырға булашты. Көс юҡҡа китмәне – ҡаршы этәргес ҡуҙғалып, артҡа табан шыуҙы. Ошонан һуң Фаил уны ҙур ауырлыҡ менән ҡайтанан үҙ урынына күсерҙе. Шулай итеп, ул был этәргесте тегеләй ҙә былай, алға-артҡа бер нисә тапҡыр йөрөттө. Машина урынынан ҡуҙғалыу түгел – ҡымшанманы ла. Тимәк теге оҙоно тормоздыҡы, тип уйланы, уныһына тейергә ярамай, тигән ҡарарға килде. Фаилды кабина эсендәге кәрәк-яраҡ һалырға тәғәйенләнгән бардачок үҙенә йәлеп итте. Нимәләр йөрөтә икән Миҙхәт ағаһы уның эсендә? Бәлки, берәй ашамлыҡ яталыр әле... Бәлки, тәмәке... Фаил, һул ҡулы менән руль тәгәрмәсенә тотоноп, уңы менән бардачокка үрелде.

Ул да булмай, руль тәгәрмәсе һул ҡулынан ысҡынып, борғоланып алып китте. Күкрәге бар көсө менән башта ҡуҙғатырға ла ҡурҡытҡан һалмауырға килеп төртөлдө. Рычаг урынынан ҡуҙғалып ҡуйҙы. Фаил шулай, аңғармаҫтан, һалмауырҙы икенсе тиҙлеккә һалынған еренән нейтралкаға күсерҙе. Бензовоз дерелдәп, һелкенеп ҡуйҙы ла яй ғына алға – тау аҫтына тәгәрәне... Әйткәндәй, Фаилдарҙың йорто тау башында, ҡалҡыулыҡта, урынлашҡан. Ә аҫта – арҡыры ятҡан оло юл, уның ашаһында – аръяҡ урам, теҙелешеп киткән йорттар...

Машина урынынан ҡуҙғалып ҡуйҙы, ә артынса Фаилдың ҡурҡыуынан сыйылдағаны бөтә тирә-яҡҡа яңғыраны. Ошо мәлдә Миҙхәт, апаһы һәм еҙнәһе ҡала күстәнәстәре менән тәмләп-баллап сәй эсергә йыйына ине. Йөрәк ярғыс тауышҡа Миҙхәт һиҫкәнеп китте. Йүгереп тәҙрә янына килде. Күҙенә нимә булған – машинаһын күрмәй... Ҡалдырған урынында булмағас һуң... Миҙхәт асыҡ тәҙрә аша урамға уҡтай атылды. Түбәнгә табан тиҙлеген арттыра барған бензовозын ете-һигеҙ һикереүҙә ҡыуып етеп, кабинаһы эсенә ырғып менде. Ҡаршылағы йорттарға ни бары дүрт-биш метр ара ҡалғайны. Ҡот осҡос һәләкәттән алып ҡалған аҙымдар...

Машинаһын туҡтатҡас, Миҙхәт бик оҙаҡ кабинаһынан төшә алмай ултырҙы. Уның бөтә тәне ҡалтырана, төҫө ҡасҡан. Хәлһеҙләнгән ҡулдары менән руль тәгәрмәсен ҡосаҡлаған, башын да шунда һалған. Ул тамам әлһерәп, һушын йыя алмай ултыра ла ултыра. Ауылды ниндәй фажиғәнән йолоп ҡалыуына әле булһа үҙе лә ышанмай, шикелле. Бензовозы буш булһа – бер хәл, берәй йорт мөйөшөнә төртөлөр ҙә торор ине. Иң хәтәре лә шул: ике тонна ярым бензин тултырылған машинаһына…

Тьфү-тьфү, Хоҙай күрһәтмәһен, әгәр ҙә мәгәр ошо тиклем бензин шартлап китһә, ярты урам күккә осҡан булыр ине… Нисәмә ғәйепһеҙ ғаилә һәм… шул уҡ Фаил сыраҡ булып яныр ине… Ә хәҙер Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтеңде еткер. Кешеләрҙе ҡотҡарғаның өсөн рәхмәт һиңә, Аллам, тип әйт, Миҙхәт! Әлегә илама, Миҙхәт, только илама! Берәй, үҙең генә ҡалғанда – ярайбы? Берәй ялан уртаһында машинаңды туҡтатып... Еңеләйеп ҡалырһың, туғаныңды ла кисерерһең.

Бер аҙ тынысланғас, туғандары менән хушлашты ла, уға тип ҡайнатҡан сәйҙе лә эсеп тормай, китеп барҙы…

Фаил, ағаһынан ҡурҡып, машина йорттар алдында туҡтағас та, уң яҡ ишекте асып сығып һыҙҙы. Өйөнә ҡайтырға ла ҡурҡты. Ике-өс саҡрымда ҡарайып ултырған шомло һәм серле урманға юлланды. Шунда күпмелер йәшәп-йәшенеп торор. Әлегә йәй бөтмәгән, белгән кешегә урманда ашамлыҡ етерлек. Кәрәкһә, ҡышҡа ла әҙерләп була. Йыбанмай икәнһең, йый ҙа киптер, йый ҙа киптер. Атлаған һайын – урман ҡарағаты, урман еләге, ҡыҙыл бөрлөгән, һаҙ еләге; урман ситендә – арыш башағы, көнбағыш, сәтләүек, муйыл; ашарға ярағлы һары умырзая, бесәй тарыһы, ҡыуаҡлы үлән, йылан көпшәһе, киндер орлоғо, төрлө тамырһабаҡ үҫентеләре... Былары – Фаил белгәндәре, әсәһе күрһәткән, танытҡандары ғына. Ә күрһәтмәгән, танытмағандары? Урман тулы. Тик ашарға ярамаған тилермән, ҡаразирә үләндәрен, бүре еләген йыя күрмә! Фаилды өйрәтергәлер шул: әсәһе менән аҙ тапанымы ағас араларын, кеше ярған һуҡмаҡтарҙы, аҙ йыйҙымы еләктәрен, атаһы менән бергәләп аҙ утын ағасы йыҡтылармы? Урманды ул һыу кеүек эсә.

Беренсенән, ҡыуышҡа оҡшаған берәй нәмә ҡорорға кәрәк – ел-ямғырҙан ышыҡланыр, йылыныр өсөн. Рогаткаһын алырға башы етмәгән, ҡош-фәлән атырға мөмкин булыр ине. Ана, кейгән ыштанында өр-яңы резинка ултыра. Их, бәкеһе өйҙә ҡалған…

Фаил илап ебәреүҙән саҡ тыйылып ҡалды. Унһыҙ урманда бер көн дә, юҡ, бер сәғәт тә йәшәп булмаç. Ҡалай итергә? Ҡараңғы төшөү менән күренмәй генә ауылға ҡайтырға ла… Юҡ, күреп ҡалыуҙары бар. Кистәрен ата-әсәһе өйҙән бер аҙым да атламай. Һуң, ҡунаҡҡа саҡырыуҙары бар бит уларҙы. Нисек инде? Мин урманда үҙ көнөмдө үҙем күрәм. Мин – юҡ! Мине эҙләй торғандарҙыр. Кисен, ҡунаҡҡа ла бармай, илашып ултыралраҙыр әле. Юҡ! Минең өсөн иламаҫтар, йәһәннәмгә олаҡты, тип ҡыуанырға тейештәрҙер. Әллә...

Урманда август, сентябрь, октябрь айҙары түҙергә булыр. Ә ҡыш етә башлаһа? Өҫтөндә ҡыҫҡа балаҡлы ыштан да йоҡа ғына күлдәк. Аяғы яланаяҡ. Урман төпкөлөндә ҡышлау өсөн ҡыуыш ҡына етмәҫ бит. Тимәк, тәрән соҡор ҡаҙып, өҫтөнә ағас түшәп, землянка төҙөргә кәрәк. Унһын ғына эшләргә көсө лә, сослоғо ла етер, тик көрәк-балтаһын ҡайҙан алыр? Бәлки, сит ауылдан?.. Юҡ. Ҡурҡыта. Урлау – гонаһ, әсәһе шулай өйрәтә Фаилды. Былары ярай инде – табырға ла булыр, ә землянканың ауыҙын, кереп-сығып йөрөү урынын нисек эшләргә? Мейес тә кәрәк булыр бит, мөрйәһе лә… Унда дөм-ҡараңғы, ҡалай итеп яҡтылыҡ индерергә?

Эйе, был эш донъя хәсрәттәрен күп кисергән, бәлиғ булған ирҙәрҙең дә һәр бере башҡарып сыға алмаҫлыҡ шул. Шуларҙы уйлай башлаһа, ҡасҡын малайҙы ҡурҡыу ала ла китә. Ҡайҙа ғына ҡарашын йүнәлтмәһен, нимә тураһында ғына уйламаһын, Фаилдың күҙ алдына кәпәренгән булып, билен ҡыйшайтып, башын эйеп һорау билдәһе килә лә баҫа. Онотҡан биләгән урыны һөйләм аҙағында икәнлеген – баш ватҡыс нәмә. Ошондай уйҙар менән ҡаңғырып йөрөнө лә йөрөнө «урман малайы». Етмәһә, көнө лә эҫе, бөркөү. Ағастар араһында тынлыҡ, елдең заты ла һиҙелмәй. Өҫтәүенә, һыуһаттыра. Ҡайҙандыр һыу табырға кәрәк. Оҙаҡ ҡына эҙләнеп йөрөй торғас, ул һаҙлыҡҡа барып сыҡты. Унда тәлмәрйендәр һикерешә, баҡылдаған булып, Фаилға һаҙ донъяһында ғына күреп булған үҙенсәлекле концерт бирә. Тик ҡасҡын малай уларҙың һикерә-һикерә уйнағандарына ла, «баҡ-баҡ» тип аяғы аҫтында буталып йөрөгәндәренә лә иғтибар итмәне. Эскәрәк, һыулыраҡ ергә инеп, һаҙлыҡ һыуын туйғансы, һыуһынын ҡайтарғансы эсте. Уйҙарына сыуалып, арый-тала, ни ҡылырға белмәйенсә бик оҙаҡ йөрөнө Фаил.

Көн дә арыны шикелле – төнгөлөккә, әүен баҙарына китергә йыйынды, ҡояшы ла, көндән ҡалышмаҫҡа теләп, урман артына ҡасырға самалаған кеүек.

Бер маҡсатһыҙ йөрөй торғас, малай, кинәт кенә, иртәнән бирле ашамағанлығын иҫенә төшөрҙө. Шул ҡәҙәр асыҡҡан икән – хатта күңеле болғанып китте, быуындары ҡалтыранды, хәлһеҙләнгән аяҡтары ары бер аҙым да атларға теләмәй. Ирекһеҙҙән ул бер түмәргә ултырҙы. «Ағайым ниндәй күстәнәстәр алып килде икән, дүрт-биш ус кәнфит, прәнек, хәлеүәһе лә булғандыр әле, йә булмаһа, епкә элгән керәндир... ә мин уларҙы татып ҡына түгел, еҫкәп тә өлгөрмәнем… Тәмләп ҡарау ғына түгел, ауыҙыңды бөгөп, тамағыңа тығылғансы, туйғансы ашар инең дә бит, бер семтем аҡылың булғанда… Ағайымдың рөхсәтенән башҡа машина ҡырына биш аҙымға ла яҡынлашырға тейеш түгел инең… Ә һин нимә ҡыйратып ҡуйҙың?..»

Фаилдың күҙ алдына төрлө ризыҡ-ашамлыҡтар килә лә баҫа, килә лә баҫа. Ул аҙыҡ тураһында уйламаҫҡа тырыша, ләкин унынса барып сыҡмай. Бына, әсәһенең хуш еҫле икмәге, йоҙроҡ ҙурлығы ҡыҙҙырылған ит киҫәге уның алдында, үрел дә йот… Ә өйҙә нисек ҡылана ине ул, һике өҫтөндә ашау-эсеү барышында, әсәһе үҙе генә белә… Миңнеямал апай улының алдына әле бер нәмә ултырта, әле икенсеһен: иң татлыһын, кетерҙәп торғанын. Айырыуса атаһы юҡ саҡта Фаил көйһөҙләнә лә китә: «кәрәкмәй миңә ит, балыҡ килтер, ҡылсығы булғас ашамайым, ҡош-ҡорт ите була ҡалһа – тиреһен һалдыр, күрмәйһеңме ни, йөнө ҡалған – ашамайым; ит кәрәкмәй, кәтлит бешер». Миңнеямал апайҙың теңкәһенә тейеп, йөҙәтеп бөтә. Әсәһе үҙе лә:«Ошо Фаилды ашарға ултыртһам, бер ҡартаям», – ти торғайны. Атаһы барҙа малай бер ҙә кәзәләнмәй, шым ғына ашағанға һалышып ултыра ла йәшертен генә этенә сығарып һала. Ҡуйһындар ине ошонда шул майлы итте, йөнлө өйрәк тиреһен, тештәрен батырып йолҡор ҙа сәйнәмәй йотор ине, тас ас эт һымаҡ…

Ирекһеҙҙән ул һеләгәйен ағыҙып, тештәрен шығырҙатып ҡуйҙы. Исмаһам, машиналағы бардачокты ла асып өлгөрмәне, бәлки, ағаһынан ҡалған һыныҡ әпәй ятҡандыр… Бөртөгөн дә ҡоймай, ус эсенә һалып ҡына ашар ине лә. Фаил ергә тубыҡланып, ҡуйы үлән араһынан урман еләге эҙләп ҡараны, әммә еләк япрағынан башҡа бер нәмә лә юҡ ине. Август айы бара ла баһа, ниндәй еләк, ти ул?

Ашҡаҙаны олой. «Фаил, ишетәһеңме? Аҙыҡ давай, аҙыҡ! Мин эшһеҙ ултыра алмайым», – ти, гүйә. «Ҡайҙан алайым мин аҙыҡты?» – тип әйткеһе килә Фаилдың бүре һымаҡ олоған ҡарынына. Фаил ошолай, үҙенсә һөйләнеп, түҙемлеге

бөткән ашҡаҙанын тиргәштереп, урман аҡланынан аҡрын ғына килә. Бер аҙ бара ла, туҡтап, үлән араһына инеп китә: ашарға яраҡлы үҫентеләрҙе, үҙе танығандарын эҙләп тапмаҡсы. Күпме генә йөрөмәһен, ауыҙ тултырып сәйнәрҙәй үләндәр осрамай, хатта ҡуҙғалағы ла ҡайҙалыр юҡҡа сыҡҡан.

Асығыуҙан түҙер әмәле ҡалмағас, ағас ҡайырыһын тәмләп ҡарарға уйланы. Уныһы тел-ирен тирәләрен әсеттереп, бөрөп алғас, Фаил ауыҙын йолҡоп ташларҙай сиккә етте. Ағас япраҡтарын да ҡапты, ҡый үләндәрен дә йолҡоп-йолҡоп ауыҙына тултырҙы. «Астан үлһәм үләм, тик башҡаса һыйыр ашын ауыҙыма ла алмайым, мин башмаҡтыр шул», – тип үҙ алдына һөйләнгән булды. Йөрөй торғас, көн кискә ауышты, урман эсенә эңер төшә башланы. Тирә-яҡ ҡараңғылыҡҡа күмелә барған һайын, малайҙың йөрәге урынынан ҡубып, нығыраҡ типте. Уны ҡурҡыу солғап алды. «Әгәр ҙә төнгөлөккә урманда тороп ҡалһам, йөрәгем ярылыр ҙа үлермен», – тип уйланы, һәм, үҙе лә һиҙмәҫтән, аяҡтары уны ҡайтыр яҡҡа борҙо.

Урман тамам ҡараңғылыҡҡа сумып, күктә йондоҙҙар ҡалҡҡан, ә ҡасҡын малай, юлды ла айырмай, арыған аяҡтарын аҡрын ғына өҫтөрәй. Ҡапыл алда ауыл уттары күренде. Фаилдың эсенә йән ингәндәй булды. Ҡаршыға яҡынлашып килгән уттарға табан ҡушаяҡлап саптырып китмәһенме?! Аһылдап өйҙәренә ҡайтып инде. Миңнеямал, ҡайғырып, һикелә башын тотоп ултыра ине.

– Ҡайҙа йөрөйһөң, балам? Атайың һине төштән алып эҙләй. Башта ауылды бергә ҡыҙырып сыҡтыҡ. Һорамаған әҙәм ҡалманы. Ғәйебең ҙур, Фаил. Ҡот осҡос ҡайғынан саҡ-саҡ ҡалдыҡ. Шул машина эсендә шартлап һәләк булыуҙан. Миҙхәт ағайың әйтә, яҡын-тирәләге йорттар береһе лә ҡалмаҫ ине, ти. Ағайыңдың кәйефе ҡырылып, яһаған сәйен дә эсмәй китеп барҙы. Инде һине өйгә инер тип көтәбеҙ, ә һин юҡ та юҡ. Ҡурҡышып бөттөк. Берәй ергә китеп әллә нимәгә юлыҡмаһа, берәй зыян күрмәһә ярар ине, тип көнө буйы, кис буйы хафаландыҡ. Белмәйем, һине артабан нисек тәрбиәләргә, нисек үҫтерергә? Әле ошо йәшеңдә, уҡырға төшмәҫ борон, беҙгә күпме ҡайғы килтерәһең, михнәт күрһәтәһең, үҫә төшкәс һинән тағы нимә көтөргә? Бар ата-әсә лә балаһының һәйбәт, бәхетле булырын теләй. Беҙҙең ырыуҙа бер кем һинең һымаҡ булманы, бер туғандарым да ата-әсәһен ошолай ҡан илатып ултыртманы. Ике йәшлек сағыңда көтмәгәндә ҡапыл сирләп киттең. Атайың фронтта. Һине больницаға алып барыу өсөн колхозда машинаһы ла, аты ла юҡ, шундай ауыр заманалар ине. Ни эшләмәк кәрәк? Һине арҡама аҫтым да егерме биш саҡрымда ятҡан район үҙәгендәге больницаға алып киттем. Юлда, исмаһам, бер ултырып ял итһәм…

Миңнеямал апай күҙ йәштәрен ағыҙып иларға кереште. Фаил да әсәһенә ҡушылды һәм, йүгереп барып, уны ҡосаҡлап алды.

Ошолай ҡосаҡлашып, илашып ултырғандарында Нигмәт ағай ҡайтып инде.

– Ҡайҙа йөрөгән? – тип ҡырт ҡына һорап ҡуйҙы ул.

– Урманда. – Фаил ишетелер-ишетелмәҫ кенә бышылданы.

– Шулай тип уйлағайным да, – тине Нигмәт ағай һәм тыштан тал сыбығы алып инде.

Эштең нимә менән бөтөрөн аңлап алған малай әсәһенә нығыраҡ һыйынды. Ләкин ул атаһы бирәсәк язанан ҡотола алманы. Тал сыбығы өҫкә лә, аҫҡа ла һыҙғырып йөрөй башлағас, балауыҙ һыҡмай ғына түҙеп ятырға тырышты. Атаһы бар ҡул көсөнә шыйырмаған икән малайын. Аҙаҡ Фаил көҙгө ҡаршына баҫып, киндер ыштанын теҙенә тиклем төшөрҙө, күлдәген башына тиклем кейҙереп ҡуйҙы ла ҡояш нурҙары аҫтында янып шоколад төҫөнә ингән тәнен һыйпаштыра һәм ҡараштыра башланы, тик ҡаны ағып һыҙылып төшкән юлаҡтарҙы күрмәне. Юрамал ғына һуҡтырған шул атаһы, йәлләп кенә.

***

Сентябрь башында Фаил беренсе класҡа уҡырға төштө. Аҙ-маҙ яҙыуһыҙыуға өйрәнгәс тә, ағаһының ғәфү итеүен һорап, ҡыйыш-мыйыш сыймаҡланған хат һалып ебәрҙе. Оҙаҡ та үтмәй, Миҙхәт ағаһынан яуап хаты килеп төштө. «Һау-сәләмәтмен, яңы ГАЗ-51 машинаһы бирҙеләр. Берәй юл төшкәндә хәл белеп сығырмын. Һин, Фаил, тиҙерәк үҫә төш, үҙеңде машинала ныҡлап йөрөргә өйрәтермен»,– тигән хатында.

Өс-дүрт йыл ваҡыт үтеп китте. Был үткән ваҡыт Фаилдың тормошонда әллә ни үҙгәрештәр индермәне. Буйға шаҡтай ғына үҫеп, үҫмер егеткә оҡшап китте. Уҡыуы ла һәйбәт ине. Уҡытыусылары уны өлгө итеп телгә ала. Ата-әсәһенә ярҙамсыл булды, йәйен бесән сабыша, утын әҙерләшә. Ҡыш айҙарында мал аҫтын көрәй, каникул ваҡыттарында колхозда ла эшләй. Иптәштәре менән бесән йыйыуҙа, кәбәк ҡойоуҙа ҡатнаша. Бушыраҡ саҡтарында тимерлектә механизатор булып эшләгән ололарға булыша, кәрәк-яраҡ йомоштарға йүгерә.

Миҙхәт ағаһы һүҙендә торҙо. Бер килгәнендә, өс йыллап ваҡыт үткәс, Фаилды машинаһына ултыртып яланға алып сыҡты. Тигеҙ ерҙә энеһенә рулде биреп, үҙ аллы машина йөрөтөргә өйрәтеп китте.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа тормош бик еңелдән түгел ине әле. Әммә ҡыйынлыҡты һәм мохтажлыҡты күреп, шуны татып үҫкән ауыр замана балалары төшөнкөлөккә бирелмәне. Барын ашап, барын кейеп, булғанына риза булып үҫте. Тамаҡтары туйғанда туйҙы, туймағанда юҡ. Ҡыштарын өлкәндәрҙән ҡалған төплө бейма һөйрәнеләр, сабата булһа, сабатаһын кейҙеләр. Яҙҙан көҙгә тиклем ялантәпәй йүгереп, табан аҫтары ҡалынайып, ҡайышланып китә. Сәнскеле үләнде генә түгел, осло ҡырсынташты ла һиҙмәй башлай. Ҡыш килеү менән, Фаил көн дә тиерлек өҫтөнә ҡырылып бөткән тоҡос зипунын, аяғына ҡат-ҡат төплө биймаһын кейә лә, ҡайын таҡтаһынан юнып эшләнгән саңғыһын эләктереп, йүкә бауы менән уратып бәйләп, өс саҡрымда ятҡан Яҡут тауҙарына елдерә. Нисектер ул йылдарҙа тау шыуырға бала-саға ғына түгел, олоғайып барған, ҡырҡ-илле йәштәрҙәге ағай-апайҙар ихласланып китеп, ошо битләүгә килә ине. Саңғы-санаһы юҡ тип тормайҙар, ҡулдарына ниндәй шыуырҙай нәмә эләкһә – таҡта киҫәгеме, тимер ялғашмы – барыһы ла ярай. Тартып йөрөтөргә лә йәтеш, йығылып ҡалам, тип ҡурҡмайһың. Ләкин иң ҡыҙығы тауҙан ат санаһына ултырып шыуыу ине. Бер төркөм үҫмер егет санаға һикерә, тотоноп өлгөрмәгәндәре өҫтөрәлеп бара. Ул тәкмәс аталар, ул ҡысҡырышалар, әйтерһең дә, ен санаһы килә… Ауыр сана ахырҙа ҙур тиҙлек ала, ҡаршыға шыйлап иҫкән ел-һауа ҡолаҡ төбөндә һыҙғыра, тынды ҡура. Тау битләүен төшөп еткәс тә әле, сана берәй саҡрым тигеҙ ерҙән шыуыуын дауам итә.

Унда ҡупҡан ығы-зығы, уйын-көлкө, бөтә тирә-яҡҡа яңғырап тора. Арып-талып, кейемдәре боҙға әйләнеп, айыу ашарҙай булған тау шыуыусылар ҙур ҡәнәғәтлек менән төнгө ике-өстәрҙә генә өйҙәренә таралыша.

Бер шулай февраль айының буранлы йылы көнөндә, ҡар һеперткәндән файҙаланып, унлаған малай ауыл осондағы ихатанан туғарылған ат санаһын алып сыға. Уйҙары – шыуып туйғас, кире килтереп ҡуйыу. Сананы тау түбәһенә этәрә торғас, хәлдән таялар. Шул арала ел-буран тағы ла көсәйә төшә. Алда-артта бер нәмә күренмәй. Тау аҫтына ултырып төшөрҙәр ине, тәртәләре һалдырылмаған сана ҡаҙала ла тора. Көслө буран аҫтында аҙашыуҙан ҡурҡып, сананы тау битләүендә ҡалдыралар ҙа ҡайтыу яғын ҡарайҙар. Иртәгәһен хужа ағай ихатаһына сыҡһа, санаһы юҡ. Тик өс көндән һуң ғына бөтөнләй тиерлек ҡар аҫтында күмелеп ҡалған сананы соҡоп алып, ауылға ҡайтара.

Бер аҙнанан тағы ла шул хәл ҡабатлана. Был юлы санаға егелгән ат юҡҡа сыға. Шул уҡ малай-шалай, санаға тейәлешеп, тау шыуырға һыпырта. Иҫәптәре атты тау түбәһенә мендерергә лә, туғарып, санала шыуып төшөргә. Шунан атты етәкләп тауҙан төшөрөргә һәм яңынан егеп ҡайтырға ла хужаһына ташлап китергә... Ҡар анауы көслө бурандан һуң йомшаҡ булғанлыҡтан, ат тау битләүенән бер аҙ үрләгәс тә бата башлай, ахыр сиктә ҡорһағына ҡәҙәр ҡарға сума. Малайҙар атты ярты тауҙа туғарып, ҡамыт-дуғаларын санаға һалып, сана тәртәләрен күтәрә биреп дилбегә менән бер-береһенә тартырып бәйләйҙәр ҙә ултырышып төшөп китәләр, ҡыҙыу ғына шыуып, инде сананы кире тау һыртына мендергеләре килмәй, менәләр ат артынан. Тик малҡай алға ынтылып ҡарай ҙа, ҡар әсирлегенән сыға алмаясағын аңлағас, ҡымшанмай ҙа тора бирә.

Инде нишләмәк кәрәк – малайҙар атты тау битләүендә ҡалдыралар ҙа сананы сбруйы-ние менән һөйрәтеп алып ҡайталар һәм хужаһына йәшертен генә ҡалдырып ҡасышалар. Ә төнөн иһә хужа ағай ҡуҙғатҡан ауыл ирҙәре килеп, хәлһеҙләнгән атты көскә тартып сығара – теге хәлдән һуң юғалған әйберҙе ҡайҙан эҙләргә беләләр бит инде.

Шул малайҙар араһында Фаил да булған, тигән хәбәр йөрөй башланы ауылда. Йөрөмәҫ, таралмаҫ ине – сана менән ат уға туған тейеш кешенеке булып сыҡҡан. Эттәре өрмәгән – Фаилды танығандыр? Әммә малайҙар бер-береһен һатмаған...

Улар үҙҙәренә әленән-әле яңы, ҡатмарлыраҡ һәм мауыҡтырғыс уйындар уйлап сығара. Ә инде төндәрен ун ике-ун дүрт йәштәрҙәге бер төркөм үҫмерҙең «ысын» тормоштары башлана. Уларҙың төнө төрлө ҡылыҡтарҙан, мажараларҙан тора, таңға ҡәҙәр урам ҡыҙырып, ниндәй булһа ла этлек ҡылып йөрөйҙәр. Ваҡыты-ваҡыты менән йәштәр саманан тыш шашынып, йүләрләнеп, тамам бәйҙән ысҡынып китә. Ауылдаштарының донъяларынан мәрәкә эҙләп, көлкөгә сығарып йөрөү һөҙөмтәһендә, уларға юҡ-юҡта ярайһы ғына зыян килтергән осраҡтары ла булғылай. Йәш ҡыҙҙар йә тол ҡатындар йәшәгән йорттарҙың ишектәренә тыштан келә һалып, ҡапҡаларына терәү ҡуйып китеү һымаҡ шаярыуҙарҙы үҫмерҙәр айырыуса хуп күрә. Береһенең йорт кәрәк-яраҡтарын күршеһенә, башҡа урам кешеләренә ташлап китһендәрме, баҡса артында ултырған бураны таратып йә урам уртаһына килтереп өйһөндәрме; бригадир ағайҙың тарантасын аласығы башына мендереп ҡуйһындармы – ҡыҙыҡҡа һанайҙар. Үҫалыраҡ ҡыланған ҡайһы бер кешеләрҙең әбрәкәйҙәрен урынында ауҙарып йә булмаһа картуф баҡсаһына ултыртып китәләр. Мал-тыуар менән шаярыу осраҡтары ла бар. Бер хужаның һыйырын икенсеһенекенә килтереп бәйләйҙәр йә бер нисә ғаиләнең малдарын бер аҙбарға туплайҙар.

Ошо рәүешле ауылдаштарына йоҡо бирмәй, ҡалыпҡа һыймаҫ төрлө эштәр, туҙға яҙмаған ҡылыҡтар ҡылып, төндәр буйы ҡысҡырынышып, йырҙар һуҙып, колхоз баҡсаһына төшөп йөрөүҙәр – былар барыһы ла үҫмер егеттәргә хас ҡылыҡтар. Улар уйлап сығарған уйындарының, ҡайҙа мәкерле, ҡайҙа мәрәкәгә әйләндерелгән шаянлыҡтарының иге-сиге юҡ, башы-ахыры ла булмаҫ кеүек.

Ауыл халҡы үҫмерҙәрҙең ҡылыҡтарына, ямаҡай эшләп йөрөүҙәренә артыҡ хафаланмай ине. Уларҙы һағалап йөрөүселәр ҙә, эҙәрләүселәр ҙә йә, директорығыҙға әйтәбеҙ, милиция саҡыртабыҙ, тип янаусылар ҙа осраманы. Шул яғы ла бар: нисек кенә малайҙар шаян булмаһын, улар кеше нәмәһенә теймәне, урлашыу менән мауыҡманы. Һорамай алып китеп, кире хужаһына ҡайтарып бирәләр. Был инде уғрылыҡҡа инмәй. Шул-шул кешенең утындарын күсергәндәр, урам яҡтан бик һалып киткәндәр, тип һөйлә, берәүҙең дә иҫе китеп бармай, «беҙ ҙә йәшлектә шулай этләшә торған инек» ти ҙә ҡуялар. Уларға көлөшөп, бер-

береһен шаяртып, иҫтәлектәргә бирелеп-гәпләшеп ултырырға һылтау сыға. Ә иртән, таң атып килгәндә, үҫмер «хулигандар», «мәлғүндәр» ауыл эсендә ҡупҡан шау-шыуҙы ла, көләшкән, ҡысҡырышҡан, һуҡранған тауыштарҙың береһен дә ишетмәй-күрмәй, арып-талып, тәмле йоҡоға киткән була.

Ҡояш офоҡтан арыу уҡ күтәрелеп, иртәнге ығы-зығылар тымып ҡалғас, ауыл ҡатындары ҡоҙоҡҡа һыуға килә. Бында улар араһында ғаилә хәлдәрен, ауылдың иң һуңғы яңылыҡтарын һөйләп ишеттереү, йәғни ләстит минуты башлана.

Яңылыҡтары иртәнге көтөү ҡыуғандағы хәлдәргә ҡайта ла тора. Һыуға Фаилдарҙан урам аша күршеһе Ғәзимә апай ҙа килә. Ул тулы биҙрәләрен буяулы көйәнтәһенә элеп, елкәһенә ултыртып ҡуя ла бөтә донъяһын онотоп, һыҙлап йонсоткан биленә лә иғтибар бирмәй, әхирәттәренә «политинформация» үткәрә.

– Бисәләр! Бире, яҡыныраҡ килегеҙсе! Бисәләр, нимә эшләйбеҙ? Биҙа! Былай барһа, беҙгә көн булмаясаҡ, малай аҡтыҡтары тамам бөлдөрә бит. Уларға ла ниндәй-то закун барҙыр ул? Бөтөнләйе менән ысҡынып баралар ҙа баһа… Һөйләһәң һүҙ инде... Көндәгесә, өйрәнгән ваҡытта тороп, һыйырымды һауырға тип йыйынып бөтһәм, солан ишеге асылмай. Бәдбәхеттәр, тыштан терәтеп киткәндәр. Эске яҡтан этәгән булам, шаҡарып та ҡарайым – ҡатын-ҡыҙҙың көсөн үҙегеҙ беләһегеҙ бит инде. Ишеккә бәрелеп, һуғылып, тауыш та биреп ҡарайым: һин кемгә кәрәк, кемеһе ишетһен… Башҡаса сара ҡалмағас, Ғәшүрә ҡыҙымды уята һалып, этә-төртә форточканан төшөрөп ебәрҙем. Уныһы ла, «айыу тәпәне», ергә башы менән ҡаҙала биреп килеп төшмәһенме! Аңын юғалтып ятты меҫкенкәйем. Аҙаҡ тороп, башын тота-тота ишекте асты ла кире инеп йоҡларға ятты. Башына алай-былай «сәтрәсинйә» булмаһа ярар ине. Шунан, күнәктәремде күтәреп, аҙбарға һыйыр һауырға сыҡтым. Суҡынғыры, эстә ҡараңғыраҡ шул, берәй нәмә күрермен тимә.

– Һуң, Ғәзимә еңгә, һарайыңа ут индертһәң булмаймы ни?

– Һарайға тиһең, Миңниса, йортҡа ла инмәгән бит электр уты. Ҡасан ултыртылған бағаналары, мин һеҙгә әйтәйем, тәккә һерәйеп тора. Әй… Тәүҙә һыйырымдың арҡаһынан һөйөп, иркәләп алдым. Ә һыйырҡайым, ғүмер шулай ҡыланмағанды, әллә нишәгән дә ҡуйған. «Йә, һәүкәш, йә! Тик тор! Ярар, тыпырсынма, һин бит аҡыллы малһың! Бөгөн ниңә ҡыйшанып тораһың?» тип һөйләнә-һөйләнә, яйлап ҡына сүгеп, ҡулымды имсәктәренә тейҙереүем булды… Атаҡайым, һыйырым кәзәләнеп, тыпырсынып китте лә башта күнәгемде, унан үҙемде лә шарт-шорт типте лә осорҙо. Мәтәлләп китеп, көскә аяғыма баҫтым, үләм тип торам… «Бына хәҙер үҙеңә әләгә, түҙеп тор!» – тинем дә, ҡулыма һәнәк эләктереп, бөтә үсемде сығарырға була һелтәнеп ҡуйҙым. Һыйырым, үҙемдең бер туған һыйырым, имәнес ят тауыш сығарып баҡырып ебәрмәһенме! Нимә эшләп әле, мин әйтәм, һәүкәшемдең тауышы үҙгәргән? Шырпы һыҙып ҡараһам, сәпсим икенсе һыйыр тора бәйҙә?! Нисек бында эләккән? Әһә, мин әйтәм, был – анау малайҙар эше, уларҙың төнгө ҡылыҡтары. Һыйырҙы бәйенән ысҡындырып, сығарып ебәрҙем. Ғәйникамалдың һыйыры икән... Инде үҙемдең малҡайымды ҡайҙан эҙләргә? Шул саҡ ишетәм: күрше Мәфтуха ла һуҡранып йөрөй. Уларға индем, шул уҡ хәл: сит һыйыр бәйләп ҡуйғандар. Быныһын да урамға ҡыуып сығарып, киттек Мәфтуха менән үҙебеҙҙең һыйырҙарҙы эҙләргә. Мин малҡайымды баҡырған тауышынан тыҡрыҡ башындағы Әнисәләр аҙбарында таптым, алып ҡайтҡылағансы, һауғансы көтөү китеп барған. Аҙаҡ, әйҙә инде, көтөү ҡыуа киттем. Көтөүселәр көлә, шаярта, апай, берәй ярты ҡуйһаң, һыйырыңды үҙебеҙ йортоңдан алып китер инек, тиҙәр. Бына бит, ҡалай ямаҡ, ҡыйын хәлгә ҡалдыра ул төн ҡараҫҡылары, йүнһеҙ малайҙар!

– И-и, Ғәзимә күрше, – тине оҙонса буйлы, асыҡ сырайлы Рәғиҙә, биленә ҡәҙәр төшкән толом сәстәрен рәтләп. – Егет йораттарының этлектәре бер бөгөн генә тиһеңме әллә? Ғүмер баҡый, беҙ үҫкәндә лә шулай булдылар. Ярай әле, малдарығыҙ иҫән, һуйып алып китмәгәндәр. Ана, Суфиян ҡорҙаштар йәшәгән Илсебай ауылында һыйыр малы күпләп юғала башлаған, ти. Урманға йә кеше йөрөмәҫ уйһыулыҡҡа алып бара ла икәндәр, урынында һуйып, һөйәк-тиреләрен ҡалдырып, итен машинаға һалып алып китәләр, ти.

– Абау, улары бит – ысын бурҙар, малай-шалай түгел. Еңел кәсеп тапҡандар, ҡулдары ҡороғоро әҙәмдәр. Бында бер һыйырыңа табынып йәшәйһең, уны ла алып китә ҡалһалар, белмәйем…

– Ә бына беҙҙең ҡоҙалар йәшәгән Балтамаҡ ауылында ошондай хәл булған, – тип һөйләргә ниәтләнде Рәзилә инәй. – Ғарифулла ҡоҙаларҙың күршеһе көҙгө ҡараңғыла өйҙәренә ҡайтып килгән, шул саҡ ҡаршыһына таныш булмаған ирекәй осраған, һатып алған һыйырҙы машинаға һалышып ебәреүен үтенгән, «магарычы» булыр, тигән. Күп кәрәктер шул беҙҙең ирҙәргә? Барғандар, бортты асып, һыйырҙы көскә мендереп бәйләгәндәр. Теге ир быға бер яртыһын тоттороп, рәхмәт әйтеп китеп барған. Иртән торһа…

– Эйе, иртән торһа, һыйыры юҡ, ти. Ҡуранан ярылып ятҡан һыйыр эҙе туп-тура төнөн машина торған соҡорға килтергән, – тип Рәзилә инәйҙең һүҙен бүлдерҙе күп белеүсе Вәсимә. – Һин, инәй, юҡ-барҙы һөйләп торма әле, беҙ был әкиәтте ун биш йыл ишеткән инде. Был хәл бер ниндәй ҙә Балтамаҡта түгел, ә мин беренсе килен булып төшкән Әбдрәғол ауылында булды. Үҙ һыйырын үҙе тейәп, бер яртыға биреп ебәргән кеше минең ҡайным ине, бик тә белгегеҙ килһә!

Һыуға килеүселәрҙең береһе ҡапыл:

– Күпме ваҡыт һүҙ ҡайнатып торабыҙ. Йәгеҙ, бисәләр, таралышайыҡ! Ирҙәрегеҙ төшкө аш һорап ҡайтыр, нимәгеҙҙе ашатырһығыҙ?

– Беҙҙең өсөн борсолма, үҙеңде уйла.

– Усаҡ аҫтына ут тоҡандырып, төшкө аш һалып киткән инем, һеҙҙең әкиәтегеҙҙе тыңлап... Ҡайнап бөткәндер инде, уф!

– Эйе, эйе, бисәләр, ҡайтышайыҡ булмаһа. Иртәгә лә көн бар ҙаһа.

* * *

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, Фаилдың ауыл буйлап халыҡты яфалап, башын иҫәргә һалып, мәрәкә эҙләп йөрөгөһө килмәй. Уҡыуҙан һуң Тимур командаһы сафында ололарға ярҙам итеп йөрө, утын ҡырҡып-ярып, уны ышыҡ урынға ташып, өйөп ҡуй ҙа төндә шул өйөлгәндә кире ергә быраҡтыр әле. Ошо ла буламы ҡыҙыҡ?

Йәйҙең иң йәмле айҙарында Фаил тиңдәштәре менән Әбей батша заманында һалдырылған таш оло юлға эйәләшеп китте (Ырымбур өлкәһе менән Башҡортостанды тоташтырыусы юлды Екатерина тракты тип тә йөрөтәләр). Таш юлда машина өҙлөкһөҙ, тәүлек әйләнәһенә тиерлек туктамай. Ниңәлер оло юл өҫтө үҫмерҙәрҙе гел генә үҙенә тарта. Улар бында ғәләмәт ҡыҙыҡ нәмәләр күрә, төрлө хәлдәргә тарый һәм шаһит була. Ошо үткән-һүткән машиналарға ултырып ҡайҙалыр алыҫтарға киткеләре, сит ерҙәрҙе гиҙеп ҡайтҡылары килә малайҙарҙың.

Ауылдан ике саҡрым алыҫлыҡта, оло юл менән килә-килә, ағас күпергә барып төртөләһең. Үҫмер егеттәр шул күпер аҫтында йыйылышып, төндәрҙе шунда уҙғарыуҙы ҡыҙыҡ күрә. Улар бында мең төрлө пландар ҡора, киләсәк тураһында уйлана. Хыялдар донъяһында гиҙеп йөрөйҙәр, бер-береһенә серҙәрен һөйләйҙәр. Ҡасып-боҫоп түгел, ә асыҡтан-асыҡ атай-ағайҙарының кеҫәһенән сәлдергән папиростарын көйрәтә. Өйрәнсектәре төтөнгә сәсәй, күҙҙәренән

йәштәре бәреп сыға: баштары ҡапылдан ғына әйләнеп китеп, ҡоларға етешәләр, лып итеп ергә ултыралар. Күҙҙәре, тамаҡ төптәре әсетеүҙән йәндәре өҙгөләнә, тартылып бөтмәгән папирос төпсөгө ситкә оса. Тартыусы егеттәр былдай эште хупламай, меҫкенде тиргәп, ары-бире төрткөләп ташлайҙар. Улар бер төпсөктө лә ырғытмай, тапҡанын да кеҫәһенә йәшерә һала. Ә өҫтән дөбөр-шатыр килеп машиналар үтә. Күпер былдай дерелдәүҙән һәм шығырҙауҙан бына-бына емерелеп төшөр төҫлө. Ошо ваҡытта иң ҡыҙығы: тән ҡыбырлап-земелдәп китеүсән, әйтерһең дә, һинең аша ток ебәрәләр.

Күпергә менгәндә машиналар тиҙлектәрен әкренәйтеп, яй ғына уҙып китә. Ошонан файҙаланып, етеҙерәк егеттәр бер һикереүҙә борт эсенә осоп ҡуна. Ундағы күҙгә эләгерлек, эшкә яраҡлы нәмәләрҙе, тоҡтарҙы, йәшниктәрҙе юл ҡырыйына ташлай бара. Аҙаҡ, уңайлы берәй урында, кузовтан ырғып төшәләр. Икенселәре ташланған нәмәләрҙе йәһәт кенә күпер аҫтына ташып ҡуя. Һуңынан янған усаҡ яҡтыһында табыш барлау башлана. Аҙыҡ-түлекте бергә ултырып ашайҙар, ҡалған нәмәләрҙе үҙ-ара бүлешәләр. Әммә был кәсепте һәйбәт кәсеп тип булмай ине шул. Әллә ниндәй машинаға эләгәһең, ҡараңғыла нимә табаһың, ташлағаның да ҡыйралып, сүп-сарға әйләнеп бөтә. Башҡортостан яғынан күп осраҡта күмер, ағас ташыйҙар, Ырымбурҙан йәшелсә, ҡарбуз-маҙар килә. Ҡорһаҡ күптергес ул нәмә, кәрәк булһа, колхоз баҡсаһында ла тәгәрләшеп ята. Шофер, һиҙеп ҡалып, машинаһын туҡтата икән – бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп... Етмәһә бер ҡараңғы төндө Нурис исемле егет машинанан йәпһеҙ һикереп, аяғын һындырып ҡуйҙы. Ошонан һуң машина талау онотолдо, был хәтәр кәсептән ваз кистеләр.

Күпер аҫты элеккесә – үҫмер егеттәрҙең йыйылыр урыны, штаб вазифаһын үтәй. Улар хәҙер «Шоферҙарҙы ҡыҙыҡ итәбеҙ, бер аҙ шаярып алабыҙ!» тигән девизға таяна. Мәҫәлән, күперҙең арҡырыһына ике-өс ҡатланған кәтүк ебе бәйләйҙәр ҙә, ситкә төшөп, машина килерен көтәләр. Төнгө машина утында был еп үтә ҡалын күренә. Руль артынан төшкән шоферҙар башта һуҙылған епте тотоп, һәрмәп ҡарай, кәтүк ебе икәнлеген белгәс, шартлатып өҙгөләй ҙә ороша-һүгенә ары ҡуҙғалып китә. Һирәк-һаяҡ, күпер аҫтында көлөшөп-хихылдашып торғандарын шәйләп, асыуынан ярһыған шоферҙар, ҡулдарына лом киҫәге, рукоятка эләктереп, малайҙар артынан баҫтырырға тотона. Тегеләре төрлө яҡҡа ҡасышып бөтә лә алыҫтан алама, урыҫса һүгенеү һүҙҙәре ҡысҡыралар, таш аталар. Билгеле, шофер кешенең икмәге еңелдән түгел; көнө-төнө йоҡламай, ваҡытында ашамай; алама юлдарҙан йонсоп килә, етмәһә былары теңкәләрен ҡорота. Юлдың арҡырыһына эре-эре таштар, балсыҡ киҫәктәре, ташландыҡ машина тәгәрмәстәрен килтереп, баррикада төҙөйҙәр. Йә булмаһа ҡосаҡ-ҡосаҡ һалам, сыбыҡ-сабыҡ ташып һалалар. Машина килеп етте тигәндә генә шырпы һыҙып ебәрәләр ҙә үҙҙәре ситкә тайышып бөтә. Меҫкен шофер ыҙалана-ыҙалана үҙенә юл аса йә ҡоро-һарының янып көлгә әйләнгәнен көтөп тора.

Шоферҙарҙы ошолай яфалап, уларҙың этләнгәнен ситтән мәҙәк итеп, ауыҙ йырып тороусы үҫмер егеттәр үҙҙәре ҡасан ғына әле шофер булып уйнап, ошо һөнәргә эйә булырға теләп йөрөмәнеләрме ни?

Күпмелер ваҡыттан йәштәрҙең төнгө ҡылыҡтары, мажаралары хаҡындағы хәбәр мәктәп дирекцияһына барып етте. Район үҙәгенән тәфтишсе саҡыртыптылар. Икенсе көндө милиция капитаны килеп төштө. Үҫмерҙәр менән осрашып, һорау алып, тикшеренеүҙәр ойошторҙо. Кемдең хулиганлыҡ ҡылғанлығын асыҡлап, аңлатма яҙҙырып алды. «Район үҙәгенә, эске эштәр бүлегенә, бәлиғ булмаған тәртип боҙоусылар менән шөғөлләнеүсегә килергә!» тигән ҡағыҙ ҡалдырып китте.

Бер тәгәрәһә тәгәрәй бит… Иртәгәһен Фаилды, әсәһе менән, ауыл Советына саҡырттылар. Төндәрен ауылда ҡылынған ямаҡ эштәре лә ҡалҡып сыҡты. Эйе, урындағы власть юҡҡа ғына эш хаҡы алмай: уларға бары ла мәғлүм икән… Шулай булғас, ниңә ваҡытында тейешенсә сара күрмәгәндәр?.. Ауыл Советы рәйесе Әбделмәнов ағай Фаилға яҡшы ғына итеп нотоҡ уҡыны, иҫкәртеү яһаны. Тағы ла берәй аламалыҡ ҡылып йөрөгәнеңде күрһәк йә ишетә ҡалһаҡ, тотабыҙ ҙа үҫмерҙәр колонияһына оҙатабыҙ, тип ҡурҡытты. Һуҡ бармағы менән янай-янай, бүлмәһенән сығарып ебәрҙе. Бүтән тиҫтерҙәренә лә шул уҡ әр эләккән...

Өйҙәренә ҡайтҡас, һүҙ ҙә юҡ, Фаилға эләкте тек эләкте. Ата-әсәһенең йөрәк төпкөлдәренән илатҡыс, инаныс һүҙҙәрен һурып алып, улдарының мейеһенә һеңдерергә өҙгөләнеүҙәре уның өсөн үҙе бер ғазап ине.

– Минең өсөн, – тип башланы атаһы ҡарлыҡҡан тауыш менән, асыуын саҡ-саҡ баҫып. – Эйе, минең өсөн Ватан һуғышы Германия ерендә, Берлин ҡалаһында алған контузия менән бөттө. Госпиталдән сыҡҡас, киттем комендатураға. Һалдат, иленә ҡайтыр алдынан берәй аҙна-ун көн ял итеп ал, тинеләр. Емерек ҡалала йөрөп ятһам да, күрәм: немецтарҙа байлыҡ черт-чурама етерлек. Нимә алһаң да мул, затлы әйберҙәре лә күп ине, машина ҡыуып ҡайтҡандары ла булды. Миңә фашистыҡы кәрәкмәй, тинем мин үҙ-үҙемә. Арҡама аҫҡан бер тоҡсай менән ҡайтып индем. Әсәһе, дөрөҫ һөйләйемме?

– Харап инде, намыҫлы кеше! Бүтәндәр сумаҙан-сумаҙан тултырып… Эй... Эйе, атаһы, һинең намыҫың саф, раҫ әйтәһең.

– Миңә күршенеке лә, колхоздыҡы ла кәрәкмәй, ғүмергә кешенең һүрентеһенә лә теймәнем. Юлдағы әҙәмдең машинаһын талап, юл баҫып бәхетле булып булмай. Ишетһен ҡолағың! Өс көн элек бер шоферҙың тауарҙарын ырғытҡылап, юлын быуып, ярһытып ебәргәнһегеҙ, шулаймы? Ул авария яһаған, машинаһының ҡарар ере юҡ, ти, үҙе дауаханаға эләккән. Ике көндән һушына килгәс, милицияға ғариза яҙған, унда беҙҙең ауыл малайҙарын ғәйепләгән, шул бандиттар арҡаһында һәләкәткә осраным, язаға тарттырыуҙы һорайым, тигән. Белдеңме инде һин нимә эшләгәнеңде, маңҡа малай?.. Йә, әйт, төрмәгә һин китәһеңме, әллә беҙ әсәйең менән оялыштан икенсе районға күсенеп кенә китәйекме? Йәшәр әмәл ҡалдырманың бит, кеше күҙенә күренерлек түгел. Ғәрлеге ни тора.

– Атаһы, нимәгә ҡыҙаһың? Малайың кеше үлтергәндер шул? Бәлки, оло юлда булмағандыр ҙа әле.

– Етте һиңә, бисә! Гел малайыңды яҡлайһың. Бер һүҙ әйтер хәл юҡ. Нимә, малайыңдың кеше үлтергәнен көтәһеңме? Шул ғына ҡалды ла инде. Әйҙә, яҡла, итәк аҫтыңа керт тә ултырт.

– Оятһыҙ! Ул һинең дә балаң түгелме ни? Ниңә әле гел генә мин ғәйепле булам да ҡалам? Һин үҙең, атай кеше, ҡайҙа булдың һуң? Ниңә улыңа төнө буйы теләһә ҡайҙа йөрөргә юл ҡуйҙың? Ә хәҙер быуып ташлайыҡмы инде? Төрмәгә оҙатайыҡмы? Фаил, йә әле, әйт дөрөҫөн! Атайың һөйләгәнсә булдымы? Йә, телеңде йотоп торма!

– Атай, әсәй! Эйе, ул көндө… беҙ бер машина ла таламаныҡ, күптән тейгәнебеҙ юҡ бит. Элгәре лә ул эшкә ҡатнашмай инем – гел ситтә, һаҡта, торҙом. Теге көндө, танмайым, шул машина үтер алдынан кәтүк ебе һуҙышҡайным. Машина туҡтаны. Унан лыҡма иҫерек ағай сыҡты, аяғында көскә баҫып тора. Беҙгә әшәке һүҙҙәр менән ҡысҡырынды. Шунан мин егеттәргә:

– Шофер ағай иҫерек! Машинаһын юлдан ситкә сығарып, бер аҙ серем итеп, айнып алһын, тип әйтәйек, – тинем.

– Барыбер тыңламай ул. Һүҙең үтһә, бар ҙа үҙең әйт! – тип ҡул һелтәнеләр. Үҙемә күпер өҫтөнә менергә тура килде.

– Ағай, машинаңды ситкәрәк тарттырып, аҙ ғына хәл алыр инең. Төнөн ошолай йөрөргә ярамай ҙа! – тинем.

– Һин, малай, иҫән сағыңда ысҡын ҡырымдан! Вәт, башлы хәҙерге йәштәр. Пландары шә-ә-әп! Мине йоҡлатып, машинамды таламаҡсылар. Кит, тим, башкиренок, һаман китмәнеңме ни әле, пошел вон! – Шофер шулай ҡысҡырына башлағас, боролоп күпер аҫтына төшөп киттем.

«Иҫерек кеше тыңлай буламы һуң? Алйот ағай, берәй ерҙә әүмәкләп ятырға итәлер ул…» – Ошолай һөйләндек тә ҡайтырға сыҡтыҡ. Теге машинаһында китеп барҙы... Һин уға яҡшы телә , ә ул? Үҙенең иҫереклеге арҡаһында авария яһаған, ә хәҙер, аҡланыр өсөн, беҙҙе ғәйепләмәксе. Беҙҙе таныйҙыр шул ул?

– Балам! Милициянан килгән ағайыңа нәҡ ошолай һөйләнеңме? Иҫерек ине, тип әйттеңме?

– Юҡ, әсәй. Беҙҙән бит ул эскән шофер тураһында һорамаңы. «Кемдәр, нисә кеше булдығыҙ, унда нимә эшләнегеҙ, ҡасан ҡайттығыҙ?» – тип төпсөндө. Шунан ҡағыҙ тотторҙо ла сығарып ебәрҙе.

Ни сәбәптәндер, егеттәрҙе районға ҡабат саҡыртманылар, тәфтишсе лә башҡаса күренмәне. Ҙурға китә яҙған эш үҙенән-үҙе бөтөп ҡуйҙы.

Ауыл үҫмерҙәренең оло юлдағы мажаралары ла туҡталды.

Буйға ата-әсәләрен ҡыуа килгән егеттәрҙең клуб тирәһендә сыуалып йөрөгөләре, йырлап-бейеп киске уйындарҙа ҡатнашҡылары килде.

Ҡыҙҙарҙың күҙ ҡараштары, буй-һындары, баҡса артындағы осрашыуҙар, тәүгә үбешеүҙәр егеттәрҙе хыялый итә. Йәштәрҙе яңы, тулҡынландырғыс уй-хыялдар, йәшлек әйҙәй, әүрәтә, ымһындыра...

...Ете класты тамамлау менән, Фаил, ата-әсәһенә лә әйтмәй, документтарын шоферҙар әҙерләүсе училищеға тапшырҙы. Ләкин уға үҙе һайлаған уҡыу йортонда белем алырға, ғүмере буйы ынтылған хыялына ирешергә насип булманы. Атаһы, ай-вайына ҡуймай, улының документтарын училищенан алып, Стәрлетамаҡ ауыл хужалығы техникумының ветеринария бүлегенә биреп ҡайтты. Унда директор фронтташ дуҫы ине.

– Теләһә нимә эшләгеҙ, мин унда үлгәндә лә уҡымаясаҡмын, – тип ярһыны Фаил. – Уҡып диплом алған хәлдә лә, ветеринар булып эшләмәйем, бына күрерһегеҙ. Ситкә сығып олағам, көтмәгеҙ ҙә, ҡайтмайым да. Түмәндә нефть асҡандар, шунда китәм!

Ниғмәт ағай улының ҡыҙыулыҡ менән әйткәненә иғтибар итмәне, ҡырт киҫте:

– Алйотланма. Себергә лә китмәйһең, чертыма ла бармайһың! Әле оҡшамаһа, һуңынан оҡшар. Ауыл ерендә ошонан да изге эш бармы һуң? Халыҡ араһында иң кәрәкле кеше буласаҡһың бит. Кем әле һиңә, ғүмере буйы ветеринар бул, ти, үҙеңде арыу ғына күрһәтһәң, колхоз башы ла булып китерһең. Так что, киләсәге бар был эштең! Әйҙә, йыйын, киске поезға сығабыҙ.

Бер нисә көндән техникумда уҡыу, көҙгө эштәр башланды. Төрлө хужалыҡтарға картуф ҡаҙырға, кишер, сөгөлдөр йолҡорға йөрөттөләр. Октябрь башында парта артына ултырҙылар. Фаилдың уҡыуға бер ҙә иҫе китмәне. Дәрескә барһа барҙы, бармаһа, ҡала урамдары буйлап йөрөнө, баҙар тирәһендә уралды.

«Һағындым, аҡсам ҡалмағайны, ашарыма бөтөп китте» тигән һылтау менән ҡайҙа ике аҙнаға бер йә аҙна уртаһында Фаил ауылға ҡайта ла төшә.

– Улым, ризыҡ, аҡса алып киткәнеңә ун көн дә булманы, ҡайҙа итәһең? Ҡайҙа ҡуяһың? – тип ғәжәпләнә әсәһе.

– Йәкшәмбегә өс көн бар, әллә техникумда уҡыу юҡмы? – тип аптырай атаһы.

– Аҙна башында иртәнән кискә тиклем колхозда эшләнек тә, дүрт көн ял бирҙеләр,– ти Фаил, әсәһенең үтә тиҙ ышанып барыуын иҫәпкә алып. Ниғмәт ағай иһә йышыраҡ улының уҡыу барышы тураһында төпсөнә. Атаһының һорауҙарына ла Фаилдың яуабы әҙер.

– Уҡыу ни ул, ҡайҙа китһен, бара. Кисә, эштән ҡайтҡас, зачет тапшырҙыҡ. Декабрь айында ике экзамен, алты зачет бар. Белмәйем, йырып сығып булырмы? Уҡытыусылар, харап ҡаты һорайҙар. Яңылыш берәй һүҙ ысҡындыр – «икеле»не сәпәй ҙә ҡуялар.

– И-и, балам, зинһар итеп әйтәм, үтә күп уҡып, башыңа йә күҙеңә зарар килмәһен инде, Алла һаҡлаһын. Ярар, түҙ инде, түҙ, балаҡай. Атаһы, улыңа аҡсаны ҡыҫмай бир, – ти Миңнеямал апай, малайының һәр һүҙен ысынға алып.

Өс-дүрт ай эсендә Фаил туған-тыумасаларын да йөҙәтеп бөтөрҙө: барып инә лә, икешәр-өсәр көн уҡырға бармай, ашап-эсеп ята. «Әллә һин уҡымайһыңмы?» – тиһәләр, «Уҡыйымсы, һәйбәт өлгәшкәнгә дәрестәргә ирекле йөрөү хоҡуғын бирҙеләр», – тип шыттыра егет. Ошолай аҙналар ғына түгел, айҙар буйы өҙләкһеҙ уҡыу ҡалдырып, өҫтәүенә, ҡулына китап тотоп ҡарамауы арҡаһында, «икеле» билдәләре уның яҡын дуҫына әйләнде. «Сабата туҙҙырып» ярты йылды йөрөп уҙғарырмын да, уҡырға һәләтһеҙ, өлгәшмәүсе исеме аҫтында техникумдан ҡыуып сығарырҙар, шунан шоферҙар курсына китермен, тип йөрөнө Фаил. Ләкин һөрөп сығарыу түгел, исмаһам, ата-әсәһен дә саҡыртманылар. Ул ғына ла түгел, стипендияһынан да мәхрүм итмәнеләр. Директор – атаһының дуҫы, шуға яҡлаша инеме? Шулайҙыр.

Беренсе ярты йыллыҡ уҡыу ғинуар уртаһында тамамланды. Фаил да ҡышҡы каникулға ҡайтып китте. Тик ул, иптәштәре һымаҡ шатланып, ҡанатланып түгел, ә көйөнөп, шөрләберәк ҡайтып инде. Көймәҫлектер шул, ете фәндән сиреккә «икеле» билдәһе сыҡһын әле? Ләкин уның борсолоуҙары юҡҡа ғына булған икән – ата-әсәһе улдарын шатланып ҡаршыланы. Уҡыу тураһында, ярты йыллыҡтың һөҙөмтәләре хаҡында иҫкә алыусы ла, һүҙ ҡуҙғатыусы ла булманы. Шулай ҙа Фаил атаһының бер ни ҡәҙәр борсоулы, һалҡынораҡ ҡарашын һәм үҙен тотошон өйгә инеү менән тойҙо. Бәлки, Ниғмәт ағай улының эштәре бик шәптән түгеллеген, хатта мөшкөл икәнлеген һиҙенеп кенә түгел, ишетеп тә белә торғандыр. Һәр хәлдә Фаилға шулай тойолдо.

Миңнеямал апай иһә улы тирәһендә бөтөрөлөп, уны нисек кенә һыйларға белмәне. Төрлөһөнән бешерелгән, ҡыҙҙырылған ашамлыҡтарын өҫтәл өҫтөнә килтерә торҙо: ул ҡоштабаҡ тулы ит, ул бәлеш, ҡорото, ҡаймағы…

Ниғмәт ағай улы менән һике өҫтөндә ултырып бер семтем ҡапҡыланы ла, мал ҡарау һылтауы менән, ишек алдына сығып китте.

– Улым, атайыңа ҡарама, беләһең бит, ул тиҙ туйына, ә һин аша, тамағыңды туйҙыр. Уҡый торғас, ҡалай йонсоп, тартылып киткәнһең. Балаҡайымды, күҙ төптәренә тиклем күгәреп бөткән бит…

Каникул дауамында Фаилдың техникумда уҡыуы тураһында һүҙ күтәрелмәне, үҙе лә ата-әсәһенә барыһын да асыҡтан-асыҡ һөйләп бирергә ҡыйманы. Ваҡыты менән ауыр күңел кисерештәренә бирелеп, киләсәге хаҡында уйланды, күңелен китеп йөрөгән һорауҙарға яуап эҙләне. Атаһының яңылышҡанлығын төрлө дәлилдәр аша иҫбат иткеһе, үҙенә аҡланырлыҡ һүҙҙәр тапҡыһы килде. «Шулай ҙа кем яғында дөрөҫлөк? Атаһындамы? Улының теләктәренә һәм хыялына ҡаршы төшөп, күҙ йәштәре менән ялбарып илағандарын иҫәпкә алмайынса, ветеринар яһарға тырышыусы атаны ғәйепләү дөрөҫмө? Фаилдың техникумда уҡымай, ыштан туҙҙырып йөрөүен атаһына ҡарата протест ризаһыҙлыҡ билдәһе кеүек ҡарарғамы?

Әлбиттә, атай кеше үҙ балаһына насарлыҡ теләмәй. Малайын мал врачына уҡытып сығарыу – уның өсөн дә күптәнге хыял ҡапҡаһын асыуҙыр, бәлки… Билгеле, күп кенә осраҡта ата-әсәләр балаларына үҙ аллы тормош ҡорорға, үҙҙәренсә эшләргә һәм йәшәргә ирек ҡуймай. Үҙ балаларына ҡарата аталыҡ-әсәлек хистәрен, хоҡуҡтарын, ихтыярҙарын баҫым аҫтында тормошҡа ашыра. Баланы типкеләп эшләтеү, мәжбүри уҡытыу, иркенән тыш ғаиләле итеү, араларына инеү ҡасан да булһа киҫкенле күренештәргә, ҡыйынлыҡтарға килтереүе ихтимал һәм килтерә лә… Үҙең, үҙ көсөң менән тапҡан бәләкәс кенә бәхет тә атай алып биргән тауҙай бәхеттән ҡәҙерлерәк, әһәмиәтлерәк була торғандыр ул?..» Нәҡ ошондай уйҙар борсоно Фаилды, ләкин, күпме генә уйланмаһын, уларҙың осона сыға алманы.

Ике аҙна буйы йәш егет гел генә уйланып, уфтанып ултырманы, әлбиттә. Тауҙай утын ярып ырғытты, мал аҫтын көрәне, ҡура таҡталарын нығытып сыҡты. Кистәрен китап, гәзит уҡырға әүәҫләнде. Миңнеямал апай:

– Улым, каникулың бөтөп килә, клубҡа йөрөп килер инең, әтеү өйҙә лә өйҙәһең, – тип борсолдо.

– Унда миңә ни ҡалмаған?

– Бәй, ауылда иптәштәрең бар, күрер инең, һағынманыңмы ни?

– Юҡ, әсәй, клубҡа бармайым, күңелем дә төшмәй, ә дуҫтарымды күрҙем инде.

Аҡыллы һәм иғтибарлы кеше ул Фаилдың әсәһе, һәр саҡ изге теләктәр менән йәшәй. Ә атаһы? Ул насар кешелер шул? Көн-төн колхозда эшләй, уның өсөн тырыша түгелме? Фаил ата-әсәһен йәлләп ҡуйҙы, йүнләп уҡымай йөрөгәненә үҙ-үҙен тиргәне. Уҡып бөтөп, ҡулға диплом алғас күҙ күрер ине әле, бәлки, ветеринар һөнәре лә оҡшап китер. Ауылда йәшәгән берәй етем ҡатын, килеп: «Фаил, аҡыллым, беҙҙең һыйырҙы ҡарап китә алмаҫыңмы, иртәнән бирле бер нәмә лә ашамай, көйшәмәй ҙә, гел ята ла ята. Терелтә күр инде, зинһар», – тип Аллаға табынғандай Фаилға килеп ялбарһа, сирле һыйырын терелтер ҙә мең рәхмәттәр уҡыған апайҙың һылыу ҡыҙы менән танышып, ҡанатланып ҡайтыр ине. Шулай булмаҫ инеме ни? Уның күңелендә һәм күҙ алдында ошондай матур күренештәрҙең сағылып китеүе, әлбиттә, Фаилдың күҙе асыла барыуы, күңеле төпкөлөндә өмөтлө бөртөктәр шытып сығыуы тураһында һөйләй ине.

Ҡалай мәрхәмәтле, һәйбәт эш икән дә баһа, уйлап ҡараһаң, мал врачы эше. Юҡҡа ғына атаһы көсләп уҡытмай икән уны. Күпме ваҡыт уҡытыусыларҙы, ата-әсәһен рәнйетеп, күңелдәренә тоҙ һалып йөрөгән бит, аҡылһыҙ баш, һайыҫҡан ҡойроғо… Юҡ, ары былай йәшәп булмаҫ, килешмәҫ. Ошо рәүешле кешенән ҡалып, әҙәм көлдөрөп йөрөр егетме ни ул? Клубҡа сығыу өсөн әсәһенең әйткәнен көтөп ултырыр сағымы? Ҡалай итеп иптәштәреңдең күҙенә күренмәк кәрәк, ә? «Уҡыуҙар нисек?» – тип һорай ҡалһалар, ҡалай яуап бирергә? Ыҡ-мыҡ, эйе, бара шунда, тиергәме… Кем белә, бәлки, уның дуҫ малайҙары Фаилдың ниндәй «яҡшы» студент икәнлеген белә лә торғандарҙыр. Ниңә, берәйһе Стәрленән ишетеп ҡайтып, уның «икеле» ҡапсығына әйләнгәнен һөйләһә…

Бына, әйтегеҙсе, берәй кешенең ғәйебе юйылмаҫлыҡ, утә ҙур булған хәлдә лә, үҙе теләп туҡмалғыһы килә микән? Ә Фаил ныҡ көткән ине, хатта ышанған ине, ҡапҡанан күренеүе менән атаһы ағас күҫәге күтәреп, әсәһе уклау менән дөмбәҫләп ташларҙар, тип. Туҡмау түгел, бармаҡ менән дә сиртмәнеләр. Уның урынына – ҡоштабаҡ тулы ит, кетерләп торған ҡуян бәлеше…

Ата-әсәһенә әйтер яуап һүҙҙәрен дә әҙерләп ҡуйған Фаил. «Һеҙ мине тапҡанһығыҙ, үҫтергәнһегеҙ икән – рәхмәт! Йәшәргә ҡанат биргәнегеҙ өсөн дә рәхмәт. Һуң, ни өсөн ҡанатлы ҡоштоң үҙенә осорға бирмәйһегеҙ? Мине көсләшеп шул

техникумығыҙға алып барып тыҡтығыҙ. Кем минән һораған да ризалығымды алған? Теләктәремә ҡаршы төшөп, пландарымды ватҡан өҫтөнә, тумһаҡҡа әйләндергәнсе туҡмайһығыҙ, етмәһә эттән дә былай әрләйһегеҙ. Шулай булғас, үҙегеҙ ятраҡан һәм миңә тип һайлаған ветеринар һөнәренә барығыҙ ҙа уҡығыҙ, ә мине, зинһар, азат итегеҙ. Мин алыҫҡа, һеҙ таба алмаҫлыҡ ерҙәргә, хыялымды ашырырға китәм!» Ошо һүҙҙәрен Фаил тел осонда тота ине каникулға ҡайтып төшкән мәлдә, әгәр ҙә мәгәр... Әммә сәбәбе сыҡманы әйтергә.

Кире Стәрлегә уҡырға киткәндә Ниғмәт менән Миңнеямал улдарын тимер юл стансаһына тиклем оҙата килде. Вагонға ултырып, поезд ҡуҙғалған саҡта Фаилдың:

– Атай, әсәй, мин уҡый башлаясаҡмын, бына күрерһегеҙ, минең өсөн борсолмағыҙ, – тип һөрән һалғыһы килде, тик, тамағына төйөр ултырғанлыҡтан, ләм-мим әйтә алмай ҡалды. Күҙҙәренән мөлдөрәп аҡҡан йәштәрен башындағы сәскәле яулығының бер осо менән һөртә-һөртә, әсәкәйе хушлашыу һүҙҙәре ҡысҡырып өлгөрҙө: «Хуш, балам, иҫән йөрө! Беҙ һиңә ышанабыҙ! Уҡы, балам, уҡы!» Әсәһенең оҙатҡанда әйткән ошо ябай ғына һүҙҙәре Фаилға айырыуса ныҡ тәьҫир яһаны. Ул шығырҙатып тештәрен ҡыҫты, күңеле тулып, илағыһы килде. Үс иткәндәй, ҡолағы төбөндә генә поезд тәгәрмәстәре лә әсәһенең әйткәндәрен ҡабатлай: «Уҡы, балам, уҡы, уҡы...»

Фаил булдыҡһыҙ егет түгел. Уҡырға һәләте лә, тырышлығы ла бар. Ул быны бик тиҙ иҫбат итте: ай ярым тигәндә барлыҡ «икеле» билдәләрен төҙәтеп сыҡты, ә инде уҡыу йылының икенсе яртыһын ударниктар сафында тамамланы. Уҡытыусылар, курсташтары Фаилға, уның ҡапыл ғына уянып киткән уҡыу һәләтенә хайран ҡалды.

Өсөнсө курста ул тик «бишле» билдәләренә генә өлгәшеүсе алдынғы уҡыусыларҙың береһе ине. Шәп саңғысы булыуы ла асыҡланды, йырға әүәҫлеген дә йәшермәне Фаил: башҡорттоң оҙон көйҙәрен йырлап, Стәрле сәхнәләрендә танылды.

Уҡып бөтөргә лә инде күп ҡалмай. Нисек үҙ аллы эшкә тотонасағын күҙаллай башлаған Фаилға, ғәфү ит, туғанҡай, һиңә техникумды уҡып сығырға яҙмаған, тиһәләр, ул, моғайын, ҡысҡырып көлөр ҙә ҡуйыр ине. Ветеринар булырына бер тамсы ла шиге ҡалмаған, ауыл хужалығында иң изге һәм мәрхәмәтле һаналған һөнәрҙе яратып, үҙләштереп барған егеттең, бер айҙан үҙ колхозында практика үтергә тейешле, ҡыҙыл дипломға дәғүә итеүсе Кәримов Фаилдың техникумдан ҡыуылыуы тураһында директор ҡултамғаһы менән раҫланған әмер иғландар таҡтаһында эленеп торһа, кем генә ышаныр ине икән? Нисек инде, тәртипле уҡыусы, спортсы, йырсы, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашып йөрөгән егетте ҡыуһындар, хаталыр был, тиерҙәр ҙә ҡуйырҙар. Ләкин техникумдың фойеһында элегән белдереү таҡтаһында директор әмере ысынбарлыҡ ине. Унда өс студент егеттең ҡыуылыуы хаҡында иғлан ителә. Ҡыуылғандар араһында Фаилдың фамилияһы беренсе тора.

Техникумға телеграмма менән саҡыртылған Ниғмәт ағай килеп төштө. Ул тура уҡыу йорто директоры Әмирхановтың бүлмәһенә йүнәлде. Йәш аралары апаруҡ булһа ла, улар күптәнге таныш. Ватан һуғышында Икенсе Украина фронтының бер разведротаһында хеҙмәт иттеләр, «тел» алырға бергә йөрөнөләр, 1943 йылдың февраль айында, командованиеның үтә мөһим бурысын үтәп ҡайтып килгәндә, Сабит ауыр яраланып, госпиталгә оҙатылды. Ошонан һуң уларҙың юлдары оҙаҡҡа айырылды. 1946 йылдың көҙөндә Ниғмәт армиянан ҡайтып

төштө. Ғаиләһе ҡырында бер аҙна булғандан һуң, әсәһен күрергә тип, тыуған төйәге  Маҡар районына юл алды. Әсәһе, Хәнифә инәй, инде нисәмә йыл яңғыҙы ғына Баяҙы ауылында йәшәй. Балалары кемеһе ҡайҙа таралышып бөткән. Бер ҡыҙы Төркмәнстанда, кейәүҙә, уртансы улы һуғыш яланында ятып ҡалды. Өлкәне, Ниғмәте, ҡырҡынсы йылдарҙан Көйөргәҙелә нигеҙ ҡорҙо.

Әсәһе йортона ҡайтып инһә, ни күрһен: түрҙә фронтташ дуҫы  Сабит баҫып тора. Уны мәктәп директоры итеп эшкә ебәргәндәр икән. Егерме биш йәшлек өйләнмәгән егетте, яңғыҙ, ипле инәйҙә уңайлы булыр тип, Хәнифәгә фатирға ҡуйғандар. Өс йыл үтеүгә, йәш директорҙы урындағы хужалыҡҡа рәйес, артабан район Советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары итеп күсерҙеләр. Һуңғы биш йылда ул – ауыл хужалығы техникумында директор. Сабит Әмирович дуҫы тупһанан күренеү менән  ҡаршыһына сыҡты. Бер-береһенән һаулыҡ, хәл-әхүәл һорашҡандан һуң, һүҙ үҙенән-үҙе Фаилға күсте. Сабит берике һөйләм менән хәлдең асылын аңлатып бирҙе. Унан, бик ауыр көрһөнөп, ҡулын дуҫының иңбашына һалды:

– Ниғмәт, мине аңла! Һиңә бер ҙур үтенесем бар: үпкә тотма! Фаилды мин улым кеүек күреп ярата инем. Беренсе курста бөтөнләй  уҡырға иҫәбе юҡ ине, ярты йыл йүнле-башлы дәрескә йөрөмәне, беренсе семестрҙа етеме-һигеҙме «икеле»һе сыҡты. Шулай ҙа һине, Ниғмәт, техникумға саҡыртманым, стипендияһын да ҡырҡманым. Яйлап аңлар, төҙәлер, тигән өмөт, ышаныс бар ине. Фаил ышанысымды ысын мәғәнәһендә аҡланы. Ҡайһы яҡтан ғына алма,  ул – беренсе, ул – лауреат, ул... Нимә һөйләп торорға, үҙең дә беләһең. Фаил урынында үҙемдең улым булһа, шул уҡ әмер эленеп торор ине. Горком секретары: «Ул егеттәреңдең техникумда эҙе булмаһын, – тип киҫәтте, – бөтә ҡалаға позор!» Айныҡҡысҡа   өсәүләп эләккәндәр, шунда ҡундырып сығарғандар. Фаил үҙе генә булһа – бер хәл булыр ине, юҡ, өсәүҙәр шул, мальчишкалар! Ниғмәт дуҫҡай, мин һинең алдыңда аҡланырға йыйынмайым, горком секретарынан да ҡурҡмайым...  Эшемдән дә ҡыуып сығарһындар, ти... Мин тик бер нәмәнән ҡурҡам: беҙҙең ҡан ҡойоп, бер окопта ятҡанда,  «тел» аулағанда, икешәр тәүлек фрицтар тылында ҡарҙа аунап, бер-беребеҙгә тән һәм йән йылыһын биргәндә яралған дуҫлығыбыҙ ҡаҡшамаһын,  тим. Фаил  ҙур хата яһаған. Ләкин ул башын юғалтып, ебеп торғандарҙан түгел. Миңнеямалға аңлатырға тырыш. Иламаһын. Тормош бит – ул  ҡуласа, алдын  да, артын да күрһәтә, тигәндәй. Мин Фаилға әйтеп ҡараным, берәй йыл эшләп тор ҙа аҙаҡ ситтән тороп уҡып бөтөрөрһөң, тип, юҡ, тыңларға ла теләмәне, оялам, нисек кеше күҙенә күренәйем, ти ҙә тора.

– Ҡайһы көндө милицияға эләккәндәр һуң улар? Беҙгә телеграмманы һуң бирҙегеҙме ни?

– Был хәл булған бере көндө, бөгөн етеһе, иҫәпләһәң – алты көн. Һеҙгә хәбәр итмәй тороуҙың сәбәбе шунда: өс-дүрт көн горком был турала белмәй ине. Был эште ҙурға ебәрмәй генә йомдорорға иҫәпләгәйнем, килеп сыҡманы.

– Әле ҡайҙа һуң Фаил? Өйгә ҡайтманы. Ҡайғыһынан эсеп-нитеп ...

– Юҡ, юҡ, Ниғмәт. Мин унан ошонда барын да һөйләттем. Аяныс хәл, әлбиттә. Ни ҡылаһың инде. Русса әйтмешләй, глупее не придумаешь, уйламағандар шул шулай килеп сығырын. Документын алғанда, бәлки, өйгә ҡайтып, күренеп, аңлашып булыр, тигәйне.

– Һуң?

– Шунан иртәгәһенә ишетәм: Фаил, бер иптәшенә эйәреп, Алыҫ Көнсығышҡа китеп барған. Һеҙгә ҡайтып өлгөрмәгән, тимәк, группаһындағы егеттәр шулайыраҡ һөйләне.

– Иптәше тип, бергә милицияға эләккән егет менән киткәндәрме ни?
– Юҡ, теге икәүһе үҙ райондарына ҡайтып, эшкә урынлашырға ҡарар иткәндәр.
– Фаилды үҙе менән алып киткән егет тураһында нимә әйтә алаһың?
– Дөрөҫөн әйткәндә, Ниғмәт, уны бер ҙә күргәнем булманы, ниндәй кеше икәнлеген белмәйем. Беҙҙең егеттәр уның менән ҡайҙалыр танышҡандар ҙа фатирына инеп, эсеп ултырғандар. Төнгө икелә, ятаҡҡа ҡайтҡанда, милицияға ҡапҡандар. Аңлатмаларында «контракт буйынса сезонлы балыҡсы ҡунаҡ итте» тип яҙғандар. Күрәһең, аҡсалылыр тегеһе.
– Тимәк, беҙҙең Фаил да оҙон аҡса артынан киткән?
– Нимә эшләйһең инде, башы иҫән булһын.
– Уныһы шулай. Тик, ҡайтҡас, әсәһенә нимә тип әйтергә? «Малайҙы ҡайҙа ҡуйҙың?» тип һорар бит... Булды бит башҡа бәлә-бала. Инде аңланы, рәтләнде тиһәң, тағы әллә нәмәләр килтерә лә сығара. Аптыраған...
– Һиңә лә ауыр, миңә лә еңел түгел, Ниғмәт. Ниндәй генә кәңәш бирергә? Ә-ә-ә! Миңнеямалға, комсомол путевкаһы менән эшкә киткән, тиһәң, нисек булыр? Хәҙер күп йәштәр шулай китә.
– Минең Миңнеямалды улай ғына ышандырырһың. Шунда уҡ, атаһы, минән нимәлер йәшерәһең, тип әйтәсәк. Дөрөҫөн һөйләү яҡшыраҡ булыр, тим. Хатымаҙары килә ҡалһа...
Оҙаҡҡа һуҙылды ике дуҫтың әңгәмәһе. Һуңынан Сабит Әмирович фронтташын үҙҙәренә ҡуна ҡалырға саҡырҙы, ләкин Ниғмәт ҡайтырға ашыҡты.

* * *

Ял көнө ине. Дүрт айырылғыһыҙ дуҫ, бер группала уҡыусы егеттәр, иртән тороп, тимер юл стансаһына йүнәлде. Унда бер вагон күмер бушатырға тәҡдим иткәйнеләр. Улар йыш ҡына шулай кәрәк-яраҡҡа тотонорлоҡ аҡса эшләп ала. Сәғәт биштәргә алтмыш тонна күмерҙе бушатып, ярайһы ғына аҡса алып, ҡәнәғәтләнеү тойғоһо менән ҡайтырға сыҡтылар.
Юл ыңғайы ашханаға инеп тамаҡ туйҙырыу теләге егеттәрҙең барыһының да башына бер юлы килде, әйтерһең, алдан һөйләшеп ҡуйғандар. Ашарҙарына, берәр көрөшкә һыра алып, өҫтәл артына ултырҙылар.
Апаруҡ арығанлыҡтары һиҙелә, шуға тиҙ генә сығып китергә ашыҡманылар. Эсемлектә булған дүрт-биш градуслы алкоголь шауҡымы эстәрен зымлатып, баш мейеләренә йүгерҙе, телдәрен сарлай төштө. Ошолай, еңелсә генә арығандарын сығарып ултырғандарында, яндарына киң яурынлы, уртаса буйлы егет килеп баҫты. Егеттәрҙән бер ни тиклем өлкәнерәк күренгән, егерме биш йәштәрҙәге был кеше ипле генә итеп һүҙ башланы..
– Егеттәр, сәләм. Бер үҙем һыра эсеп ултырыуы, нисектер, күңелһеҙ булып китте. Ҡаршы килмәһәгеҙ, мин һеҙҙең өҫтәлегеҙ артына ултырырға, компанияғыҙға ҡушылырға ине.
Егеттәрҙең, әйҙә, ултыр, рәхим ит, тигәндәрен дә көтмәй, ҡулындағы сумкаһынан киптерелгән ҙур балыҡ сығарып, өҫтәлгә һуҙып һалды.
– У-ух, вот это! – Егеттәрҙең күҙҙәре маңлайҙарына менә яҙҙы. Ике-өс кило тартҡан быңдай балыҡты ашап ҡарағандары түгел, кәртинкәлә лә күргәндәре булмағандыр. Балыҡҡа иҫе китеп ултырған егеттәрҙең Мансаф исемлеһе:
– Ҡайҙан был мөғжизә? – тип һораны.
– Билгеле, һыуҙан, – тип шаяртты яңы егет.
– Беләбеҙ һыуҙан икәнлеген, ә шулай ҙа?

– Егеттәр, был – Алыҫ Көнсығыштан, палтус тигән балыҡ. Әйҙәгеҙ, таныш булайыҡ, мин Андрей булам.

Һәм һәр егеткә ҡулын һуноп сыҡты. Ҡапыл ғына йәнләнеп киткән һөйләшеү ыңғайынан икенсе көрөшкә һыраны ла түңкәрҙеләр. Палтус иҫ киткес танһыҡ ине, оҫта ҡаҡланған, майы һарҡып тора – ашап туйғыһыҙ.

– Әллә тағы берәрҙе ҡабатлайбыҙмы? Балыҡ та шәп...

Ҡыҫҡа буйлы, йыуантыҡ Ишбулды, күҙҙәрен селт-селт аса-йома, иптәштәренә өндәште.

Фаил, Мансаф, Әхәт бер-береһенә ҡараштылар ҙа һүҙһеҙ генә баш ҡаҡтылар.

– Егеттәр! Ә-әй, былай дөрөҫ булмай ул. Беҙҙә улай эшләмәйҙәр. Мин һеҙҙе үҙем һыйлайым. Һеҙ – студенттар, уҡыйһығыҙ, ә мин эшләйем бит әле.

Андрей, егеттәрҙең ай-вайына ҡуймай, һыраға үҙе китте. Шунан файҙаланып, Фаил дуҫтарын иҫкәртте:

– Донъяғыҙҙы онотмағыҙ! Беҙҙең әле ҡайтаһы, дәрес уҡыйһы бар. Тағы берҙе генә... – Һәм күҙе менән ишек яғына ымланы. Егеттәр, аңлағандарын белгертеп, баш ҡаҡты.

Яңынан һыра килгәс, туҡталып торған әңгәмә тағы ла ҡыҙа төштө. Андрей үҙе тураһында һөйләне. Ул ошо ҡалала тыуып үҫкән, мәктәпте тамамлағас, ПТУ-ла ташсы һөнәрен үҙләштергән. Аҙаҡ өс йылға хәрби хеҙмәткә алына.

– Армиянан һуң отделение менән Находканан алыҫ түгел, диңгеҙ порты төҙөлөшөнә эшкә ҡалдыҡ, – тине Андрей. – Әлегә тиклем бетонщик булып эшләнем, эше ауыр, әммә аҡсаһы яҡшы, айына алты-ете йөҙ сыға...

– Әллә-лә-лә, – тип ҡуйҙылар егеттәр,– бер йылда машиналыҡ йыйырға була ла баһа...

– Эйе, була, – тип кеүәтләне Андрей. – Һуңғы ваҡытта япондан машиналарҙы күпләп ҡайтара башланылар. Күпселек – йөрөлгән машина. Владивосток менән Хабаровск ҡалаларында машина баҙарҙары эшләй.

– И-их, берәй япон машинаһы ҡыуып алып ҡайтырға, – тип һөйләнде Әхәт.

– Мөмкин түгел, – тине Андрей, – машина юлы юҡ, бына БАМ төҙөргә итәләр. Байкалдан Амурғаса магистраль, шуға БАМ тип йөрөтәләр. Өс-дүрт мең километр оҙонлоғонда буласаҡ.. Бәлки, йәнәш машина юлы ла үтер. Үәт, шунан машина ҡыуырға мөмкин буласаҡ. Әле мин отпускыламын, ике-өс көндән кире китәм. Ә балыҡҡа аптырамағыҙ, быныдай «добро» һәр мөйөштә һатыла. Үҙем менән утыҙ кило самаһы алып ҡайтҡайным, бөтөрөп киләбеҙ инде. Ҡарағыҙ әле, егеттәр! Һеҙ миңә бик оҡшанығыҙ, әйҙәгеҙ, минең менән Тымыҡ океанды күрергә китәбеҙ. Ә, егеттәр? Эшсе ҡулдары кәрәк. Эш хаҡын әйткәйнем инде, тәү мәлдә, һөнәрең булмаһа, саҡ ҡына аҙыраҡ сыға. Барыбер өс-дүрт йөҙҙән ҡалмайһың.

– Беҙгә техникумды уҡып сығаһы бар шул, – тине Фаил, башын күтәрмәй генә.

– Китегеҙ әле, тапҡанһығыҙ кемгә уҡырға. Шул да булған һөнәр... Ветеринар, имеш... Ғүмере буйы һыйыр артын йыуып йөрөргә... Тегендә, исмаһам, – ысын ирҙәр эше... Романтика!

Андрейҙың һүҙҙәре ныҡ тәьҫир итте егеттәргә. Суҡынған урыҫ, тип әрләгеһе килде Фаилдың был яңы таныштарын, ҡотортоп йөрөй шунда, ныҡлап төҙәлеп бөтмәгән яраға тоҙ һибә... Нисек, техникумды ташларғамы? Уҡып бөттөм тигәндә, нисә йыл этләнеп уҡы-уҡы ла, имеш... Ә ата-әсәһе нимә әйтер? Фаил – ғаиләлә берҙән- бер бала, башҡа туғандары юҡ. Киләсәктә ата-әсәһенең терәге, уларҙы ҡарар кеше, ҡалай итеп уҡыуҙы ташлап сығып китһен... Ә ни өсөн ғаиләлә ул бер үҙе? Кемгә ҡарама, кәмендә биш йә алты бала, ун балалы ғаиләләр ҙә күп.

Ашхана эсендә ярайһы ғына оҙаҡ ултырып, һүҙ көрәштергәндән һуң, бер-береһенә ҡул бирешеп, шулай килештеләр: диплом алғас, Алыҫ Көнсығышҡа эшкә китәсәктәр. Ил ҙур, кеше ҡайҙа ла һөнәре буйынса эшен таба ала. Унда ла колхоз-совхоздар бөтмәгәндер ҙәһә?

Андрей яңы таныштарын бер аҙ оҙата килде лә кинәт барған еренән туҡтап ҡалды:

– Егеттәр, тим, егеттәр, минең башҡа бик шәп идея килде: барыбыҙ бергә – барабыҙ беҙгә...

– Йәле, йә, Андрей, ҡабатла шул һөйләмде, бик ҡыҙыҡ килеп сыҡты түгелме: «Ба-ры-быҙ бер-гә – ба-ра-быҙ беҙ-гә...» Юҡ, улай түгел, ә былай: «Барабыҙ бергә – барабыҙ үҙебеҙгә». Юҡ, Андрей, һуң инде, унан ата-әсәйең, теләһә кемдәрҙе эйәртеп ҡайтаһың, тип орошор.

– Ярай инде, әйҙәгеҙ. Нимә һин, Фаил, ҡыҙҙар һымаҡ ҡыланаһың? Әле киске туғыҙ ғына, ә минең ҡарттар өйҙә юҡ, «рәт» тә булырға тейеш. Күп түгел-түгеллеген, ни бары бер «пузырек». Йә, нисек? Киттекме?

Байтаҡ эселгән һыранан ҡыҙмасаланып алған йәштәр Андрейҙың ныҡышыуына оҙаҡ ҡаршылашып торманы. Ҡалай итеп яңы дуҫтың һүҙен кире ҡағаһың инде?

Эйе, Андрей алдашмаған: иркен, ике бүлмәле фатирҙа улар үҙҙәре генә ине.

– Әйҙәгеҙ, төпкө бүлмәгә, – тип өлтөрәне Андрей. – Ултырығыҙ, ҡайҙа уңайлы тип табаһығыҙ. Үҙегеҙҙе өйөгөҙҙәге һымаҡ хис итегеҙ. Ана, өҫтәлдә журналдар ята, мин тиҙ генә ашарға әҙерләгәнсе уҡый тороғоҙ. Фаил, кәштәлә пластинкалар бар, үҙең һайлап, радиоланы уйнатып ебәр.

Робертино Лореттиҙың хайран ҡалырлыҡ тауышы бүлмәне тағы ла йәнләндереп ебәрҙе. Андрей рюмкаларға араҡы ҡойған арала, Фаил һабаҡташтарына һиҙҙермәй генә күҙ ҡыҫып алды. Был инде, ғүмерҙә араҡы күрмәгән һымаҡ ҡыланмағыҙ, нормағыҙҙы белегеҙ, берҙе һалабыҙ ҙа табандарҙы ялтыратабыҙ, тигәнде аңлата ине.

– Андрей, һинең туғандарың бармы? – Ишбулдының шулай кинәт кенә һорау биреп ҡуя торған ғәҙәтен белгән Мансаф:

– О-о-о! Беҙҙең Ишбулды бик хәйләкәр һәм мәкерле кеше ул. Күрәһегеҙме, рамка эсендәге ҡыҙ һүрәтенән күҙен алмай, ғашиҡ булып та өлгөргән, шуға урата-сурата уның тураһында һорамаҡсы итә.

– Нимә ҡыҫылып ултыраһың, һинән һорайҙар что-ли? – Ишбулды ҡыҙып, ҡабарынып киткәйне лә, хужа егет уның һүҙен бүлдерҙе:

– Был – минең һеңлем, Танюша. Мединституттың өсөнсө курсын тамамлай. Бик һәйбәт ҡыҙ, әле кейәүҙә түгел... – Андрей Ишбулдыға мәғәнәле ҡараш ташлап ҡуйҙы. Уныһы берсә ҡыҙарынды, берсә бүртенде, берсә ағарҙы. – Минән олоһо, – тип һүҙен дауам итте Андрей, – Карина исемле апайым, ғаиләһе менән Ҡаҙағстанда йәшәй. Жамбул ҡалаһына һуғылып, аҙна буйы ҡунаҡ булдым.

– Ниндәй матур, һөйкөмлө исем – Карина!

– Ә һин, Әхәт, беләһеңме, был матур исем ҡайҙан килеп сыҡҡан?

– Юҡ, белмәйем, ишеткәнем булманы.

– Апайым 1934 йылда тыуған. Бәлки, уҡығанһығыҙҙыр: шул йылды «Челюскин», полярниктар йөҙгән карап, Төньяҡ Боҙло океанында боҙҙар араһында ҡыҫылып, һыу аҫтына китә.

– Ә-ә, иҫкә төштө, полярниктар боҙ өҫтөндә ҡала, эйеме? Начальниктары – Шми-и...

– Ә-ә, Шмидт! Академик Шмидт – экспедиция етәксеһе.

– Аҙаҡ, поляр летчиктар уларҙы боҙ өҫтөнән алып сыға. Экспедиция карабы Карск диңгеҙендә йөҙгән осорҙа, бер ғаиләлә ҡыҙ бала тыуа. Шул ҡыҙға диңгеҙ исемен ҡушалар – Карина. Ҡыҙыҡайҙың тыуыу тураһындағы танытмаһында тыуған ере итеп Карск диңгеҙе яҙылған, ти.

– Китсәле, булмаç...

– Үәт инде, ысынлап шулай булған. Минең апайға ла шул исемде ҡушҡандар.

– Ҡыҙыҡ бит, ә!

– Донъяла ғәжәп нәмәләр күп ул, егеттәр. Ә бына тағы бер мөғжизә. Ишеткәнегеҙ бармы?

– Юҡтыр, – тиеште барыһы бер юлы, ҡолаҡтарын ҡарпайтып.

Береһе бөтөүгә, икенсе ҡыҙыҡлы ваҡиғаны егеттәр үҙҙәре лә иҫтәренә төшөрә торҙо. Уңарсы булмай, бер мәл Андрей фатирҙан юҡҡа сыҡты. Эскән башы менән берәй нәмәгә юлыҡмаһа ярар ине, тип ҡурҡышып бөттө егеттәр, ни ишекте бикләмәй сығып китеп булмай. Таныштарын көтә-көтә көтөк булып, йоҡомһорап, ни ҡылырға белмәй тамам аптырашып ултырғанда, ҡулындағы шешәһен болғай-болғай, Андрей ҡайтып керҙе. Араҡыһын шап иттереп өҫтәл уртаһына ултыртып:

– Таптым тәки ҡәһәр һуҡҡан самогонканы, – тип маҡтанды ул, – аҫҡы ҡаттағы знакумдарға инәм дә сығам тиһәм – ебәрмәй ҙә ҡуялар. Ҡунаҡтарым көтә, тип тә ҡарайым, көскә ысҡындым. Унын ҡарауы, яңы анекдот отоп сыҡтым әле, тыңлағыҙ!

Андрей донъя анекдот белә булып сыҡты. Белеү, иҫтә ҡалдырыу ғына аҙ, тыңлаусыларға уларҙы һөйләй белергә лә кәрәк. Андрей шундай оҫта һөйләй – көлмәҫкә ант иткәндә лә көлөрһөң. Утыҙ-ҡырҡлап анекдотты бер-бер артлы сәпәй генә.

Ярайһы ғына иҫергән егеттәр ҡайтыр яҡты тамам онотто, күҙҙәре йылтырап, телдәре көрмәкләнде, ваҡыт тураһында иҫкә алыусы ла юҡ. Төнгө икеләрҙә, Андрейҙың үҙе әйтмешләй, «предоктары» ҡайтып керҙе. Егеттәр иҫтәренә килеп өлгөргәнсе, хужабикә уларға йоҡларға урын әҙерләй башланы. Үҙе ипләп кенә өгөтләй.

– Егеттәр, йыйынмағыҙ, бер ҡайҙа ла ебәрмәйем. Ваҡыт бик һуң, әллә ниндәй бәләгә осрауығыҙ бар, урын һалам. Ятығыҙ ҙа йоҡлағыҙ. Һеҙҙе бер кем дә ҡыумай бит, ниңә уңайһыҙланып тораһығыҙ?

– Борсолмағыҙ, ҡайтабыҙ, – тип үҙһүҙләнде йәштәр. – Беҙ бит иҫерек түгел, төндә беренсе тапҡыр йөрөмәйбеҙ. Бер нисек тә ҡала алмайбыҙ, иртәгә – уҡыу, рәхмәт. Андрей, ваҡыт тапһаң, киткәнсе беҙҙең яҡҡа ла килеп сыҡ. Йә ярай, пока!

Урамға сыҡтылар. Ҡараңғы. Күк йөҙөндә – офоҡҡа ҡәҙәр – ҡайҙалыр ашығаашыға аҡҡан ҡара болоттар араһынан ай киҫәге күренеп ҡала ла юғала. Урамдың ян-яғына һуҙылған өс ҡатлы таш йорттар ҡараңғылыҡҡа сумған. Бик һирәк, тегендә-бында тоноҡ ҡына янған электр лампалары тротуарға яҡтылыҡ ташлай. Урам буп-буш, бер йән эйәһе лә юҡ, машина хәрәкәте лә туҡтаған.

Һалҡынса төнгө саф һауа егеттәрҙе айнытҡандай итте, шуға ҡарамаҫтан, үҙ аяҡтары үҙҙәренә бойһоноп бөтмәй ҙә ҡуя. Тротуар уртаһынан барыр урынға, әле бер, әле икенсе яҡҡа ҡыйыш-мыйыш атлап сыға ла китәләр. Ҡулдарын берберeһенең яурындарына һалып, һөйрәлеп тигәндәй баралар. Бер аҙҙан уларға тротуар ҙа тар күренә башланы – шул ҡосаҡлашҡан килеш урам уртаһына сыҡтылар.

– Малайҙар, – тине Ишбулды, – Әйҙә йырлайыҡ, тегеләрҙә ниңәлер ҡыйманым. Фаил, әйҙә, һин башла, беҙ ҡушылырбыҙ.

Төнгө ҡала урамынан башҡорт йырҙарын һуҙып дүрт егет килә. Кинәт кенә артта ут тоҡанды. Етеҙ елгән машинаның ут яҡтыһынан егеттәр ситкә, тротуар яғына, тайпылып өлгөрҙө.

– Егеттәр! Әйҙәгеҙ, туҡтатабыҙ, такси... – Яҡынлашып килгән машинаға берҙәм ҡул болғарға керештеләр. Машина, тормоздарын шығырҙатып, юлға арҡыры төшөүселәр ҡаршыһына шып итеп килеп туҡтаны.

– Егеттәр! Ҡасайыҡ! Милиция! – Мансафтың ҡурҡыу ҡатыш быуылып сыҡҡан тауышы яңғыраны. Ул секунд эсендә ҡойма буйлап һулға ташланды һәм ҡараңғылыҡ эсендә ултырған ике ҡатлы ағас йорттоң ишек алдына йәшеренде. Ҡалған өсәүһенә ни булды – әллә аяҡ быуындары йомшаны, әллә ҡаушанылар – ҡасырға түгел, хәлде аңлай ҙа алмай ҡалдылар...

Төнгө патруль машинаһынан ике милиция сержанты һикереп төштө лә аптырашып ҡалған егеттәрҙең алдарына килеп баҫты.

– Һеҙ дүртәү инегеҙ, ҡайҙа булды иптәшегеҙ? Ҡасып өлгөрҙөмө? – Ҡаҡса кәүҙәле, оҙонса йөҙлө сержант шулай һүҙ башланы.

Егеттәр, һүҙ ҡатырға ла ҡурҡышып, нимә эшләргә, ни ҡылырға белмәй, баҫҡан ерҙәрендә шымып ҡалдылар.

– Серёга, күрәһеңме, малайҙарҙың телдәре әйләнмәй, лыҡа булғандар. Әйҙә, тейәйбеҙ машинаға.

– Марсель, ашыҡма! Китәрбеҙ, – тине лә Серегаһы егеттәргә өндәште: – Йә, Салауат тоҡомдары, һөйләп ебәрегеҙ, ни өсөн, ни тип патруль машинаһына ҡаршы сыҡтығыҙ? Махсус фанарҙы күрмәнегеҙме ни? И-их һеҙ, күҙле бүкәндәр! Ярай, черт с ним, берегеҙ тайҙы ла, ти, ә һеҙ? Һеҙ ни бысағыма ҡасманығыҙ? Был тиклем эскәс – ҡасырһың, пажалуй...

– Мөмкин булһа, беҙҙе ғәфү итегеҙ. Шулай килеп сығырын уйламағайныҡ, – һәр ваҡытағыса, Фаил иҫенә килеп, сержанттар менән һөйләшеп ҡарамаҡсы булды. – Беҙ һеҙҙең машинаны танымай ҡалдыҡ шул, такси тиһәк...

– Ишеттеңме, Серега, беҙҙе таксист тип уйлағандар, беҙҙең машина такси булып күренгән... Ха-ха-ха. – Урам яңғыратып көлөүҙән туҡтап, милиционерҙар егеттәргә машинаға ултырырға бойорҙо .

– Беҙҙе аңлағыҙ, егеттәр. Һеҙҙе нисек тә бында ҡалдырып булмай. Берәй машина аҫтына инеүегеҙ бар. Отделениеға барғас, барын да һөйләп бирерһегеҙ. Ә хәҙер марш – машинаға!

Хәлдәре мөшкөл икәнлеген әле генә аңлап өлгөргән Ишбулды ҡапыл ситкә тайпылмаҡ булды, ләкин сержанттарҙың Марсель исемлеһе уны ике һикереүҙә ҡыуып етеп, ергә быраҡтырҙы ла типкеләп алып китте.

– Ах һин, сволочь, беҙҙән ҡасырға итәһеңме? Не выйдет!

Фаил нисек кенә тыйнаҡ егет булмаһын, был күренешкә түҙмәне, сержанттың елкәһенән эләктереп алды:

– Әтәс, теймә уға, ятҡан кешене типкеләргә хаҡың юҡ... Беҙ енәйәтселәрҙер шул? Һеҙгә нимә эшләгән ул? Һиңә типтеме? Йә берәй ҡаршы һүҙ әйттеме?

Ләкин сержант был һүҙҙәргә иғтибар итмәне, кинәт кенә яртылаш боролоп, Фаилдың ҡулдарын артҡа шаҡара башланы. Икенсеһе Әхәтте һуҙып һалған да: «Лежать, лежать!» – тип һөрәнләй.

Фаил сержантҡа бирешеп барманы, ҡулын шаҡарырға бирмәне. «Башлап һуғышмаҫҡа, нисек тә милиция формаһындағы кешегә һуҡмаҫҡа!» тигән уй ҙа быраулай ине уның мейеһен. Көтмәгәндә сержант егеттең ҡулын ебәрҙе лә, бер аҙым артҡа сигенеп, бар көсөнә яңағына һуҡты. Көнө буйы эшләп арыған, араҡынан хәлһеҙләнгән Фаил салҡан барып төштө.

– Порядок, – тине Марсель.

– Милиция сотрудниктарына ҡаршылыҡ күрһәткәндәре өсөн ун биш суткаға ултыртабыҙ, – тип өҫтәне Сергей тигәне.

Ишбулды, аяғүрә баҫып, үҙен типкеләгән сержантҡа ынтылып ҡуйҙы ла ҡулы менән аҙ ғына сыйып алды, һуғыуын да һуҡманы, тейҙереп алды. Тегеһе шунда уҡ, алмаш-тилмәш һелтәнеп, егетте йыға һуҡты. Ишбулды, тәкмәс атып, ике метр алыҫлыҡҡа тәгәрәне. Һыҙланыуҙанмы, көсһөҙлөктәнме, рәнйеүҙәнме – быуыла-быуыла, эткә оҡшатыбыраҡ шыңшып илай ине ул.

Сержанттар, егеттәрҙе эткеләй-төрткөләй тоҡкондар өсөн эшләнгән ситлек эсенә ултыртып, ҡуҙғалып та китте.

«Бөттө, барыһы ла бөттө, селпәрәмә килде, инде техникумдан ҡыуыу ғына түгел, хулиганлыҡ ҡылған, милицияға ҡаршылыҡ күрһәткән өсөн кәмендә ун биш тәүлеккә ултыртасаҡтар, – тип тәрән хафаға ҡалды егеттәр. – Ниндәй оят! Нисек кеше күҙенә күренмәк кәрәк? Ҡотолоу сараһын эҙләргә кәрәк. И-их, Андрей, Андрей! Үҙең шәп егетһең дә, тик беҙҙе харап иттең шул. Ҡайҙан осраның, беҙ, эшкинмәгәндәр, ашханаға ник индек? Күрәсәктер инде. Маңлайға яҙылғандыр. Сержанттар нимә әйтһәләр ҙә, уларға ышанасаҡтар. Закон улар яғында. Ә беҙҙе кем тыңлаһын?.. Ике кешегә бер ярты ла күтәрә алмаған, ярым ас йөрөгән ауыл малайҙары...»

Милиция бүлегендә уларҙы урта буйлы, мыҡты кәүҙәле капитан ҡаршы алды.

– Иптәш капитан, һеҙҙең ҡарамаҡҡа өс егет алып килдек.

– Дүртәүҙәр ине, береһе ҡасып өлгөрҙө. Иҫерек булмаһалар, моғайын, патруль машинаһын туҡтатмаҫ инеләр. Үҙҙәре килеп ҡапты.

– Төнгө өстә нимә эшләп йөрөгәндәр – билдәле түгел. Беҙҙең һорашып торорға ваҡыт юҡ ине, тейәнек тә – тура бында. Аңлатмаларын үҙегеҙ яҙҙыртығыҙ, беҙгә иртәнге 8-гә тиклем патрулдә йөрөр кәрәк.

Капитан егеттәрҙе ҡаршыһына ултыртып, һорау ала башланы. Тик шунда ғына Фаил ҙур бәләгә, аяныс хәлгә тарығандарын аңланы. Нисек тә ҡотолорға, офицер менән һөйләшеп ҡарарға булды, был хәлдән сығыу мөмкинлектәрен, ҡотолоу юлдарын эҙләне.

– Иптәш капитан. – Тауышына баҫым яһарға тырышып һүҙ башланы Фаил. – Иптәш капитан, тыңлағыҙ инде, беҙгә бында ҡалырға ярамай, аңлағыҙ, уҡыуҙан ҡыуып сығарыуҙары бар... Иптәш капитан, беҙгә нисек тә техникумды тамамларға... юғиһә – хана. Ата-әсәләр күҙенә хыть күренмә.

– Бына нисек! Бик һуң иҫегеҙгә төшкән. Ата-әсәгеҙ йәл булып киттеме? Шуғаса нимә уйланығыҙ? Совет студенты булараҡ, иҫерек килеш ҡала урамында төнгө өстә нимә тип йөрөнөгөҙ? Һеҙгә кем ҡушҡан? Бер тинлек эсәһегеҙ ҙә, үҙегеҙҙе бөтә донъяға фаш итеп, ун тинлек эскән һымаҡ күрһәтеп йөрөйһөгөҙ: бына беҙ эстек, ҡарағыҙ, ҡалай беҙ батыр егеттәр, йәнәһе. Ата-әсәләрегеҙ һеҙгә ышанып, беҙҙең малайҙар уҡып, белем алып йөрөйҙәр, тип уйлай торғандарҙыр. Ә һеҙ, икмәк сереткестәр, рәхәтлеккә сыҙай алмай, ни ҡыланаһығыҙ... Баш күтәрмәй уҡыу урынына, мәжбүри айныҡтысҡа тапшыралар үҙегеҙҙе...

– Иптәш капитан, беҙҙе икмәк сереткестәр тип атарға хаҡығыҙ юҡ. Һеҙ бирҙегеҙме ул икмәкте? Һеҙ таптығыҙмы?

– Нисек? Хаҡым юҡмы? Минең... Хөкүмәтебеҙҙең, халыҡтың аҡсаһын пыранзаран килтереп эсеп йөрөргә һеҙҙең хаҡығыҙ бармы? Беләһегеҙме һеҙҙе уҡытыр өсөн күпме аҡса түгелгәнен? Стипендия аҡсаһын араҡыға алыштыраһығыҙ.

– Үҙебеҙ тир түгеп, вагон бушатып алған аҡсаға эстек. Ә беҙгә тип тотолған аҡсаны йөҙләтә ҡайтарырбыҙ әле, әгәр ҙә...

– Һеҙме? Белмәйем, что-то сомнение ҙур. Ышанғы килмәй. Былай итеп йөрөһәгеҙ...

– Йәгеҙ инде, иптәш капитан, нимәгә инде беҙҙе битәрләп, нотация уҡып тораһығыҙ. Тиҙерәк ябығыҙ ҙа ҡуйығыҙ.

– Һеҙ үтә гонорлы студенттар булып сыҡтығыҙ әле. Тегеләй-былай берәй затығыҙ Эске эштәр министерствоһында эшләмәйме?

– Эшләй-эшләй. Ҡайҙа, трубканы бирегеҙ әле – шылтыратып алайыҡ полковник ағайға... Бына, Ишбулдының атаһы һарыҡсылыҡ министерствоһында көтөүселек бүлексәһе мөдиренең өсөнсө ярҙамсыһы булып эшләй, бер ҙә булмаһа, уға шылтыратҡанда ла ярай...

– Етте! Ҡалай юморный булып киттегеҙ әле. Милиция вытрезвителенә ҡапҡан егеттәр тимәҫһең...

– Үлеп ҡалһаң да – көлөп ҡал, тиҙәр бит. Беҙгә инде барыбер. Меҫкен студенттарҙы ошонда япмаһағыҙ, планығыҙ тулмайҙыр. Әйҙә-әйҙә, керетеп бикләгеҙ, һәр беребеҙгә икешәр һаҡсы ҡуйығыҙ. Әйҙә, уҡыуҙан ҡыуҙырығыҙ! Һеҙ бит ул яҡҡа мастер...

– Етте, тим, һиңә. Йом ауыҙыңды хәҙер үк. Ун биш суткаға ултыртҡанды көтәһеңме? Сержант, был өс хулиганды камераға индереп бикләгеҙ. Иртәнгә тиклем ултырһындар, бәлки, аҡыл ултырыр үҙҙәренә, һөйләшергә өйрәнерҙәр. Сығармаҫҡа! Аңлашылдымы, сержант?

– Так точно, иптәш капитан!

Тормош – ул ҡатмарлы нәмә, яҡшы яғын да, насар яғын да күрһәтә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Ҡуй инде, һәләк эш бит, ә! Егермегә лә етмәй айныҡтысҡа эләгеп ят инде. Ни капитаны менән йүнле-барлы, аңлайышлы һөйләшә алманылар. Етмәһә, Фаил ҡабарына ла китә, ҡабарына ла китә. Кем инде ҡыҙып һөйләгәнде ярата? Милиция хеҙмәткәрҙәренең һеркәһе һыу күтәрмәй ҙә инде.

Арттарынан тимер ишек зыңлап ябылғас, егеттәрҙең йөрәктәре жыу итеп китте, күңелдәре әрнене. Улар ситлеккә эләккән ҡоштарҙы хәтерләтә ине. Шул ҡәҙәр ҡотһоҙ, ямаҡ күренде айныҡтыстың эске күренеше, хатта егеттәрҙең үкһеп-үкһеп илағылары килде. Стена буйлап ауыл һикеһенә оҡшаш ағас урындыҡтар тора. Төпкө нарала кемдер йоҡа одеялын башына тиклем ябынып, мышнай-мышнай йоҡлап ята.

Өс дуҫ ситтәге нараға һуҙылышып ятты. Ләкин аҫтарында ҡаты булғанғамы, алдағы билдәһеҙлек көткәнгәме, һис йоҡо алманы үҙҙәрен. Әйләнгеләп-борғоланып ята бирҙеләр. Юҡ-юҡта бер-береһе менән һөйләшеп тә алалар.

– Фаил, нисек уйлайһың, Мансаф тоғро дуҫмы? Әллә шкурникмы?

– Насар егет түгел ул. Уны хәҙер нимә тип ғәйепләйһең инде?

– Фаил, һин нимә? – Әлегә ынһыҙ-тынһыҙ салҡан ятҡан Ишбулды урынынан һикереп тороп ултырҙы. – Мансаф тоғро дуҫ була алмай. Асылында һатлыҡ йән ул. Беҙ бында ятабыҙ, ә ул ятаҡта ғырылдап йоҡлай. Әйҙә, йоҡлаһын, уҡыһын, ветеринар булһын. Минең өсөн ни...

– Ишбулды, ни тигән һүҙ был? Һин үҙ аҡылыңдамы? Әллә һаман айнығып бөтмәгәнһең инде?

– Айнымай тиме, милиция машинаһына төрткөсләп ултыртҡас та градустар әллә ҡайҙа сығып осто...

– Шулай булғас, нимә әтәк-һәтәк һөйләнеп ултыраһың? Нисек килеп һатлыҡ йән булһын, ти, ул, уйлап ҡара.

– Һин, Фаил, үҙең уйлап ҡара! Ул бит үҙе беҙҙе ташлап ҡасты. Шулай донъяһы кәкрегә киткән икән – аҙағына ҡәҙәр бергә булырға, бөтә михнәттәрҙе бергә уҙғарырға ине.

– Ишбулды, техникумдан өс кеше урынына дүрт кешене ҡыуһалар, уларҙан кемгә еңел булыр тиһең? Ул молодец, ҡасып дөрөҫ эшләне. Ә беҙ өсәүебеҙ ҡаса алмай ҡалдыҡ. Ни тиһәң дә, ул беҙгә ҡарағанда аҙыраҡ эсте – шуға иҫереп тә барманы, ә беҙ, мәшәүҙәр, һәр бер рюмканы йотоп торҙоҡ, араҡыны ныҡыраҡ ашаныҡ, шуның нәтижәһендә ошонда ятабыҙ.

– Фаил, хәҙер нимә эшләйбеҙ инде?

– Аптыраған, әй, малай! Исмаһам, баш та «варить» итмәй. Ҡайҙан был суҡынсыҡ Андрей осраны. Милиция машинаһы... Бер килһә килә бит. Егеттәр, беләһегеҙме, беҙҙең хата нимәлә? Ә, Әхәт, Ишбулды? Андрейҙың фатирында ҡуна ҡалып, бөгөн ҡайтыр кәрәк булған. Шулай эшләгәндә , беҙҙән дә аҡ һаҡаллы ҡарттарҙы донъя йөҙөндә  табып булмаҫ ине...

– И-их, малай, терһәкте тешләп булмай шул, йығылырымды белһәм,  һалам түшәр инем, тиҙәрме.

– Егеттәр, бәлки, техникумға хәбәр итмәҫтәр?

– Унығын, Әхәт, кем генә белә... Белмәйем, хәбәр итмәй ҡалдырырҙармы? Күрҙегеҙ бит, капитан ҡалай  ҡоторона.

– Ҡыуһалар нимә эшләрбеҙ икән?

– Күҙ күрер, Ишбулды. Иллә-мәгәр шулайға ҡалһа, ата-әсә йортона ҡайтмайым мин, уларҙың күҙенә күренә алмайым. Шул бер юл ҡала, ул да булһа – Андрей менән Себер сығып китергә. Ә һин, Әхәт, нимә эшләр инең?

– Минме? Мин, Фаил, дөрөҫөн генә әйткәндә, сит ерҙәргә башты алып сығып китергә ҡурҡам. Ауылға ҡайтырға самалармын.  Эшкә. Ә һин, Ишбулды?

– Әлегә белмәйем. Әллә...

– Һуң, егеттәр, ашханала ултырғанда, Андрей менән бергә китәбеҙ, тип һөйләшкәйнек  бит...

– Унығы бит, Фаил, эскән баш менән ҡорған пландар. Юҡ, беҙҙән булмай. Ҡурҡыта.

– Э-эх, егеттәр, егеттәр, һеҙҙең берәй ҡурҡмаған ваҡытығыҙ булырмы икән ул?

– Ярай, Фаил, бар кеше лә һинең кеүек батыр булмай ҙа...

– Әйҙә, булмаһа, йоҡлайыҡ. Тик аҫта ла ҡаты, өҫтән дә һалҡын.

– Ҡалай ҡыҙыҡһың һин, Ишбулды. Һиңә был ял йортолор шул. Хәйер, беләһегеҙ килһә,  беҙ иң ҡыйбатлы «ҡунаҡхана»ла ятабыҙ...

– Фаил, һин һаман шаяраһың. Илағы килә, ә һин?

– Илап ултырып ни файҙа, ә? Мине көлә, шаярта тиһегеҙме? Юҡ! Ошо беҙ ятҡан түшәккә  иртәнсәк ни саҡлы аҡса һораясаҡтарын беләһегеҙме? Император түшәгенән осһоҙ булмаясаҡ.

– Ҡайҙан беләйек, әллә беҙҙең бында йоҡлап ҡараған булдымы? Таптың тағы...

– Егерме һумыңды әҙерләп ҡуй, иптәш Әхәт, иптәш Ишбулды, э-э, иптәш Фаил. Бына шулай ул, эсеп йөрөһәң. Бында һеҙгә ауыл түгел.

– Һин ҡот осҡос кешеһең, Фаил, һыҙлаған яраға тоҙ һибеп кенә тораһың...

– Ә-ә, әйтергә онотоп торам, сәсеңде лә төптән...

– Нимә, ҡыралармы?

– Ой-ой-ой! Сәсте ҡалдырһалар нимә була инде?

– Унығын иртәгеһен мундирлы кешеләрҙән һорарһың.

– Үәт ҡаптыҡ тәк ҡаптыҡ. Ғүмереңә ауыҙыңа алмаҫлыҡ итеп сығаралар икән беҙҙе, былай булғас. Ант итерһең эсмәҫкә...

– Фаил, Ишбулды! Ишетәһегеҙме? Ни...

– Эйе,  эйе, Әхәт, һайра!

– Ни, малайҙар! Шулай ҙа Мансафтың ҡасып ҡотолғанына, техникумда ҡала- сағына ғәләмәт шатмын.

– Ә беҙ һуң? Беҙ шат түгелдер шул, Әхәт?

– Уның бит атаһы юҡ, ә әсәһе ҡаты ауырый. Врачтар сирен дә әйтмәйҙәр икән. Мансаф һиҙенә булһа кәрәк:  рак сирелер, ти. Һуңғы ваҡытта түшәктән дә тормай, шикелле.

– Кем ҡарай икән әсәһен?

– Туғандары. Шуға ла уның күп саҡта настроениеһы булмай, бойоҡ  йөрөй.

...Мансафтың ҡыҙғаныс һәм фажиғәле тормошо тураһында аңлатма биреү урынлылыр. Өс айҙан техникумды тамамлап, ҡулына диплом алғас, эшкә үҙ- ҙәренә ҡайта. Бер аҙ ваҡыттан әсәһе яҡты донъя менән хушлаша. Атаһы Мансаф мәктәптә уҡыған сағында уҡ үлеп ҡалған була. Бер йыл эшләгәндән һуң, егетте хеҙмәткә алалар. Армиянан ҡайтып оҙаҡ та үтмәй, эш урынын ташлап, Сахалиндан ҡайтҡан бер егеткә эйәреп Алыҫ Көнсығышҡа китә. Сезонлы балыҡсы булып йөрөй. Бер йылдан ҙур аҡса эшләп, ике иптәше менән ауылдарына ҡайтып төшә. Башта уның тыуған колхозында ҡалып, эшкә урынлашырға ла уйы була, тик иптәштәре ҡаршы килә. Өс-дүрт ай буйы бар аҡсаларын тиненә тиклем эсеп бөтөрөп, кире Көнсығышҡа, балыҡ ауларға, китәләр. Ошонан һуң Мансаф ике-өс йылға күҙҙән юғала. Аҙаҡ уны күрше ҡалала күрәләр. Элеккесә эсеүҙән башы сыҡмай. Тапҡан аҡсаһын эсеп бөтөрә, кем тура килде шуны һыйлап, теләһә ҡайҙа ҡунып, тамам алкоголикка әйләнә. Ауылдаштары һөйләүенсә, сезонлы балыҡсылар һуңынан Мансафты ниндәйҙер яуызлығы өсөн Тымыҡ океанға ташлаған булһа кәрәк.

Мансафтың фажиғәле яҙмышы Фаилды ныҡ тетрәтте. Ул был хәбәрҙе бер нисә йылдан һуң,элекке дуҫының ауылына эш менән килгән сағында, ишетте.

Егеттәрҙе кутузканан иртәнге ете тулғанда сығарҙылар. Капитан эш урынында юҡ ине. Уның килгәнен көтөргә ҡуштылар.

Күп тә үтмәне, милиция бүлегенә, тыны ҡурылып, Мансаф килеп инде. Ҡулына портфель тотҡан, үҙе хәйләкәр йылмая.

– Егеттәр, бында өс шешә араҡы ята. Ҡайҙан алғанды һорамағыҙ. Менттар ошоға «клюнуть» итмәҫтәрме? Тәҡдим итеп ҡарарға кәрәк. Фаил, һин ундайға оҫта, бәлки, берәй нәмә сығарырһың. Капитан килеп еткәнсе сержанттары менән һөйләшеп ҡара.

– Мансаф, беҙҙең турала техникумда берәй нәмә ишетелмәйме? Фу, нимә һөйләйем мин, сәпсим баш эшләмәй, – тип һөйләнде Ишбулды, уңайһыҙланып.

– Әллә мине ятаҡта ҡунған тиһеңме?

– Әйттем бит мин һеҙгә, егеттәр, Мансаф ысын дуҫ ул, тип, – шатлығын йәшерә алмай йылмайҙы Фаил.

Мансафтың килеүе бойоғоп, ҡайғыға ҡалған егеттәр өсөн бик ваҡытлы булды, уларҙың күңелендә өмөт яҡтыһы ҡабынды. «Ятып ҡалғансы атып ҡал» тигәнсә  эш итергә булдылар.

Ләкин дежурҙағы  сержант Фаилдың күҫтәнәстәренән ҡырҡа баш тартты.

– Мин араҡыға һатылмайым, башҡаса ул турала ауыҙыңды асма, ҡара уны, егет, яңылыштан  капитанға тәҡдим итә күрмә – яратмай ул, бөтәгеҙҙе яңынан каталажкаға ултыртып ҡуйыр, – тип  иҫкәртеп сығарҙы,  етмәһә.

Шул арала төнөн егеттәрҙе ҡаршылаған капитан килеп етте.

– Йә, бунтовщиктар, нисек йоҡланығыҙ? Фатир оҡшанымы? – тип башланы ул һүҙен. Тик егеттәр, өндәшмәйенсә, урындарында тапанып торҙо.

– Тәк, тәк, ә һеҙ дүртәүгә әйләнгәнһегеҙ икән. Төнөн ҡасҡан егет ошо буламы? Егеттәр, һеҙгә мәғлүмдер, беҙҙә бушҡа йоҡлау юҡ. Һәр берегеҙгә егермешәр һум ҡалдырырға кәрәк булыр. Квитанцияһын яҙып бирерҙәр. Тағы ла һеҙгә, студент иптәштәр, шуны әйтәһе килә: дөрөҫ аңлағыҙ, беҙ план артынан ҡыумайбыҙ. Юҡ ул ундай план. Кәримов, студенттарҙы ултыртып, план тултыраһығыҙ, тигән ғәйепләү урынһыҙ. Яҡшы түгел. Башҡа саҡта һүҙегеҙҙе үлсәп һөйләгеҙ. Донъяны белеп булмай, бынан да хәүефлерәк хәлдәргә осрауығыҙ ихтимал.

– Иптәш капитан! Мин аңланым. Беҙҙән булған ғәйептәребеҙҙе аңлайбыҙ. Әгәр ҙә мөмкин булһа, кисерегеҙ беҙҙе! Айырыуса мине, – тип бышылданы Фаил.

– Кисерегеҙ, имеш... Ғәфү үтенеүҙән алда боҙоҡ эштән тайпылыу, кәрәкмәгән һүҙҙәрҙе ҡулланмау, нимә менән бөтөрөн алдан уйлап эш итеү хәйерле. Әле һеҙ йәшһегеҙ – ошо йәштән араҡы менән мауығыу кәрәкме?.. Ҡарап тороуға үҙегеҙ бына тигән, һөлөк кеүек егеттәрһегеҙ, ә, шул рюмкаға алданып, күпме ҡыйынлыҡтар кисерәһегеҙ, ата-әсәләрегеҙгә, ауылығыҙға, уҡыған йортоғоҙға ниндәй хурлыҡ. Бынан һуң улай итмәгеҙ! Нимә ҡалған һеҙгә үҙегеҙҙән көлдөрөп, оятҡа ҡалып йөрөргә? Һеҙҙең техникум исеменә хәбәр итмәҫкә, тип үҙебеҙҙең отдел егеттәре менән һөйләшеп алғайным, белмәйем, милиция начальнигы ниндәй уйҙалыр, әлегә әйтеүе ҡыйын. Шуға, егеттәр, ҡотолдоҡ, техникумда ҡалабыҙ, тип шатланырға иртәрәктер ҙә... Минең әйткәндәргә ҡолаҡ һалығыҙ, иҫегеҙҙән китмәһен. Бынан ары яңылышмағыҙ! Аҡыл булһын үҙегеҙгә. Хушығыҙ.

– Һау булығыҙ, иптәш капитан! Рәхмәт һеҙгә!

– Донъя булғас, бәлки, осрашырбыҙ әле.

Төнгө ваҡиғалар егеттәргә тетрәткес тәьҫир итте. Уларҙың әлегә ҡыҫҡа ғына ғүмерҙәре эсендә был иң ауыр төндәрҙең береһе булғандыр. Ҡыҙарып, ҡыҫылып ҡалған күҙҙәре, борсоулы йөҙҙәре шул хаҡта һөйләй ине. Йоҡолары туймай, арыған-йонсоған булһалар ҙа, уҡырға бармаҫҡа баҙнат итә алманы улар. Бер ни булмағандай, кластарына инеп, үҙ урындарына, һәр ваҡыттағыса артҡы парталарына ултырыштылар. Хәйер, уларға әллә ни иғтибар итеүсе лә юҡ ине. Беренсе парлы сәғәттән торған дәрес шыма ғына үтеп китте. Икенсеһендә тамам әлһерәгән егеттәрҙе үлтереп йоҡо баҫа башланы. Улар көс-хәлгә, үҙ-үҙҙәре менән тартҡылаша-тартҡылаша, йомола барған күҙ ҡабаҡтарын бер аса, бер йома, уҡытыусыға төбәгәндәр ҙә уның нимә тураһында һөйләгәнен дә ишетмәй ултыралар.

«Китсәле, шул тиклем дә хәлһеҙ муйын буламы, бер меҫкен, арыҡ башты ла тота алмағас», – тип уйлай Әхәт, башы эйелә-төшөп китеп, маңлайы менән парта ҡырына терәлә биреп ҡуйғас. Юҡ-юҡта ул һиҫкәнеп китә лә башын ҡайтанан ҡалҡыта. Аҙаҡ тәки баш башлығын итә, муйынды һығып, үҙенән ҡалдырмай, йәнә аҫҡа өҫтөрәй. Ошолай этләнә-этләнә, йоҡлар-йоҡламаҫ ултыра торғас, икенсе дәрес тә бөтөп ҡуйҙы. Иң ауыры өсөнсө дәреҫкә тура килде.

Фаил йомолоп, ҡыҫыла төшкән күҙ ҡабаҡтарын ҙур ҡыйынлыҡ менән аса, янъяғына ҡараш ташлай. Бәй-бәй, барыһы ла тырышып-тырмашып конспект яҙа түгелме?

– Ә хәҙер, – тине Степан Петрович, уҡыусыларға мөрәжәғәт итеп, – яңы теманы нисек үҙләштерҙегеҙ икән – иҫкә төшөрөп алайыҡ. Йә, кемегеҙ һөйләргә теләй? – Һәм артҡы партала ҡулдары менән башын тотоп ултырған Мансафҡа өндәште:

– Кәбиров! – Бер-ике секунд эсендә уның һыны парта артында ҡалҡмағас, уҡытыусы йәнә Мансафтың фамилияһын ҡабатланы. – Һеҙҙең группала Кәбиров фамилияһын йөрөтөүсе юҡмы әллә? Журналда яҙылған да баһа...

– Бар-бар, ана, артҡы партала беҙҙең Кабирчик үҙенә буйһонмаған башын тотоп ултыра, – тине Гөлнур исемле шаян ҡыҙ.

– Кәбиров! Ниңә өндәшмәйһең? Әллә ҡолаҡҡа ҡатыландыңмы?

– Юҡ, Степан Петрович, ҡолағыма себен инмәне...

– Ниндәй себен? Мин һинән бөгөнгө үткәнде ҡабатлауыңды һорайым.

– Степан Петрович! Мин – ысынлап та ҡолаҡҡа ҡаты кеше. Әле бына бер нәмә ишетмәнем. Ишетмәгәнгә күрә – аңламаным. Әллә яңынан аңлатып бирәһегеҙме? Йәки икенсе дәрескә үҙем тукһан минут буйы һөйләрлек әҙерләнеп килермен.

Шартлау яңғыранымы ни? Класс быуылып көлөргә тотондо. Мансаф иһә, ниндәй шаянлыҡ, көләмәс һүҙ ысҡындырҙым, тигәндәй, аптыраған булып ҡылана.

– Кәбиров, ултыр! Икенсе килгәнеңдә ҡолағыңа аппарат кейеп кил. Әлегә – «икеле». Йә, тағы ла ошо уҡ һорауға кем яуап бирергә әҙер? Бәлки, Ғәзизов?

– Ҡайҙа ул, Степан Петрович, рәхмәт! Бөгөн һөйләп торорға иҫәп тотоп килмәгәйнем шул – ғәфү итегеҙ, мин бөгөнгә – пас.

– Иҫәп тотмаһаң – тот «икеле»ңде, ә рәхмәтеңде имтихан тапшырғас әйтерһең. Тәк-тәк, артҡы партала, Кәбиров менән йәнәш кем башын һәлендереп ултыра әле?

– Ә, ул – беҙҙең круглый отличник Каримчик! – тиеште иптәштәре, йылмайышып. Ул арала Фаил йоҡлап киткәйне, күрәһең, оҙон итеп хырылдап ҡуйҙы.

– Кәримов! – Фаил ҡабаттан үҙенең фамилияһын ишетеү менән һиҫкәнеп ҡуйҙы, ҡуҙғалырға, тороп баҫырға самалағайны, тик үҙен баҫтырып ҡуйырҙай көсө лә, дарманы ла юҡ ине.

Ахырҙа уҡытыусы Фаилдең эргәһенә килеп баҫты.

– Кәримов! Баҫ!! – Кинәт ҡысҡырҙы Степан Петрович.

Был тиклем тауышҡа егеттең йоҡоһо ла, ҡобараһы ла осто. Ул урынынан һикереп торҙо. Класта яңынан көлөү яңғыраны.

Степан Петрович уҡыусыларҙы көлөүҙән тыйманы, коридорға сығып, тынысланғандарын көтөп торҙо.

– Күрҙегеҙме инде, иптәш уҡыусылар, ниндәй әҙәм мәсхәрәһенә тарынығыҙ, көлкөгә ҡалдығыҙ? – тине уҡытыусы, егеттәргә төрттөрөп...

– Уларҙы көлдөрөп беҙ нимә эшләгән? – тип яуапланы Фаил. – Әллә мин салбарымды баш аша кейҙемме? Беҙҙең группа уҡыусылары сәбәп булһа ла, булмаһа ла ауыҙ йырырға ғына тора. Бында күпселек несерьезный элементтар йыйылған, шуға ла...

– Етте һиңә, Кәримов! Демагогтар курсын бөттөңмө?

– Булырға ла мөмкин, Степан Петрович, иллә-мәгәр һеҙҙең һымаҡ педагогтар курсын бөтөргә кәрәктер уның өсөн...

– Ултыр хәҙер үк, Кәримов! Һиңә – «икеле»!

Фаил урынына ултырып та өлгөрмәне, һынын яңынан турайтып, аяғүрә баҫты.

– Ни өсөн «икеле», Степан Петрович?

– Йоҡлап, тыңламай ултырып, белмәгәнең өсөн.

– Ғәфү итегеҙ, мин йоҡлап түгел, ә ни бары йоҡомһорап ултырҙым. Ә тыңлау-тыңламау мәсьәләһенә килгәндә, уныһы – минең эш. Ә әлеге үткән теманы һөйләп бирә алам. Тыңлағыҙ!

– Ултыр. Әтү икенсе «икеле»не сәпәйем.

Уҡытыусының ҡысҡырыуын, кластың дәррәү көлөүен баҫып ҡыңғырау шалтыраны.

Тағы ла төн килде. Ятаҡтың икенсе ҡатында, Фаилдар йәшәгән бүлмәлә, иртәнгә ҡәҙәр ут янып сыҡты. Дәрестә егеттәрҙе йоҡо баҫып ыҙалатҡан булһа, төнөн йоҡлар ваҡытта йоҡолары осто. Уларҙың күңелдәрен икенсе нәмә өйкәй, тынысһыҙландыра, алдағы билдәһеҙлек борсой. Ошо бер ике-көн эсендә нимәләр булыр һымаҡ, ниңәлер ҡурҡындыра, йөрәктәре һыҡрай, яманһыу булып тора. Дауыл алдынан була торған тынлыҡ... Күңелдәре урындарында түгел, нимәләр һиҙенгәндәй. Инде һөйләшкеләре лә килмәй, тамаҡтарына аш-һыу ҙа үтмәй.

Ошондай борсолоуҙар аҫтында тағы ла ике көн шым ғына үтте. «Ахырыһы, ҡотолдоҡ, тимәк, хәбәр итмәгәндәр»,– тигән уйҙалар. Ләкин иртәрәк ҡыуанғандар икән шул. Көтөлмәгән саҡыртыу дүртенсе көндөң беренсе уҡыу сәғәтенә тура килде. Улар уҡыған кластың ишеген шаҡынылар: «Кәримовты, Кәбировты, Ғәзизовты директор бүлмәһенә саҡырталар» тигән һүҙҙәрҙе ишеткәс тә барыһы ла аңлашылды. Донъя бөтә күркәмлеген юғалтты, йөрәктәре өшөп, һалҡын боҙға әйләнде.

Коридорға сыҡҡас, бер-береһенә ҡарашып алдылар. «Барыбыҙ ҙа бер һүҙле булайыҡ, бер һүҙҙе һөйләйек» тигәнде аңлата ине был. Өсөһөнөң дә кәйефтәре юҡ. Әхәт менән Ишбулдының сырайҙары һытылған, Фаил, ауыр көрһөнөп:

– Директор бүлмәһенә ингем килмәй, унда аяғымды баҫмаҫ өсөн әллә нимәләр эшләр инем. Ошонда ғына, коридор буйында, документтарҙы тоттороп, ҡыуылдығыҙ, тип кенә сығарып ебәрһәләр, еңелерәк булыр ине, – тине.

Ишбулды илһамыраҡ тауыш менән:

– Фаил, һин арабыҙҙа иң төплөһө, бына әйт әле: был донъяла берәй ғәҙеллек бармы, әллә юҡмы? Оятһыҙ «әтәстәр», хәбәр итмәйбеҙ, тип ышандырған булдылар бит әле. Э-эх, менттар ҙа һүҙҙәрендә тора алмағас, уларға ҡарата ихтирам тыуалыр шул. Эйе, шәп капитан булып сыҡты теге, вытрезвителдәге ҡылансыҡ, алдаҡсы, арҡаға бысаҡ ҡаҙаны тәк ҡаҙаны. Уға кеше яҙмышы сүп инде ул...

– Юҡ, юҡ, Ишбулды! Юҡты быҒырлама. Бына ошонда ер убылып төшһөн, тик мин капитандың яуызлығына ышанмайым. Әллә нимә эшләгеҙ – ул түгел.

– Офицер кеше һүҙендә торорға тейеш.

– Эш уның офицер булыу-булмауында түгел. Минең уйымса, погон тағып ҡына кешелекле, абруйлы булып, изге әҙәмгә әүерелеп булмай ул. Тағы ла бер әйтәм, бында капитандың этлеге юҡ, техникумға беҙҙең турала еткереүсе – башҡа кеше. Шул уҡ сержанттарҙың береһе булыуы ихтимал. Хәбәр иткәндәр икән, хәҙер беҙгә барыбер түгелме ни? Уларға нәфрәт тотоп, асыуланып йөрөргә хаҡыбыҙ бармы? Ерҙә ғәҙеллек хөкөм итә, егеттәр, ғәҙеллек – аңлағыҙ шуны! Үҙебеҙ ғәйепле, быны, ҡыйын булһа ла, танырға кәрәк.

Директор бүлмәһендә, хужанан башҡа, уның урынбаҫары Рим Мазһарович, ветеринария бүлеге мөдире Василий Дмитриевич, егеттәрҙең класс етәксеһе Анна Петровна ултыра ине.

Сабит Әмирович техникумдағы барса уҡыусыларҙың фамилияларын ғына түгел, исемдәрен дә белә. Осрағанда туҡталып, һаулыҡ һорашмай китмәй, уҡыу барышы менән ҡыҙыҡһынырға әүәҫ, шул арҡала йыш ҡына төрлө йыйылыштарға, мөһим сараларға һуңға ҡалыусан. Кистәрен ятаҡҡа килгән саҡтарында бер бүлмәгә лә инмәй ҡалмай, шунда ҡыҙыҡлы әңгәмә алып бара, егеттәр менән шашка-шахмат уйнай, ата-әсәләренең хәл-әхүәлен һораша.

Бына әле лә, егеттәргә фамилиялары менән өндәшеп, алға, иҙән уртаһына, үтеүҙәрен һораны.

– Кемдән кемдән, – тине, көрһөнөп, – әммә һеҙҙән был эште көтмәгәйнем,

айырыуса техникум фавориты Кәримовтан. Был күңелһеҙ хәбәрҙе ишеткәс тә, ышанманым, берәй яңылышлыҡ килеп сыҡҡандыр, тинем. Икенсе көнө Рим Мазһаровичтан ҡаланың эске эштәр бүлегенә барып, асыҡлап ҡайтыуын һораным. Ул айныҡтыс хеҙмәткәрҙәре менән дә осрашып һөйләшкән.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, барыһы ла раҫланды. Булған дәлилдәр, факттар менән иҫәпләшмәйенсә булмай. Шунан тәүлек әйләнәһенә уйланып йөрөнөм: ни өсөн беҙҙең егеттәр милицияға эләккән?

Тимәк, иҫерек булғандар, етмәһә сотрудниктарға ҡаршылыҡ күрһәткәндәр. Хәҙер уларҙың ғәйепле-ғәйепһеҙ булыуҙарын иҫбатлап тороуҙың кәрәге бармы? Улар теләһә кемде, урамдан тотоп, тиктомалға япмайҙар. Шул уҡ ваҡытта мине мәсьәләнең икенсе яғы борсой: быға тиклем беҙ, техникум етәкселәре, нимә ҡарағанбыҙ? Ҡайҙа булған партия, комсомол ойошмалары? Бәлки, ғәйептең бер өлөшө беҙгә лә төшәлер, ә, Рим Мазһарович, Василий Дмитриевич, Анна Петровна? Был турала беҙ, һис шикһеҙ, алдағы педагогик совет ултырышында һөйләшербеҙ. Әлегә геройҙарыбыҙҙың үҙҙәрен тыңлайыҡ. Йә, кемегеҙ башлай? Һәр ваҡыттағыса, алыштырғыһыҙ лидер, Кәримов, һин башла. Үҙегеҙҙе аҡлап нимә әйтерһең? Ни өсөн эстегеҙ? Нимә сәбәп булды?

– Сабит Әмирович, беҙ ғәйепле, беҙ уны таныйбыҙ. Һеҙҙән, техникумда ҡалдырығыҙ, тип һорарға минең телем әйләнмәй – уныһын Һеҙ үҙегеҙ хәл итегеҙ. Аҡланып торорға ла кәрәк тапмайым. Шулай килеп сыҡты инде. Вагон бушатып ҡайтып килгәндә, бер егет менән осраҡлы таныштыҡ. Танышыу хөрмәтенә эселгән. Аҙаҡ теҙген ысҡынған, уяулыҡ юғалған. Нәтижәлә, такси тип, патруль машинаһын туҡтатҡанбыҙ. Улар беҙҙең эскәнде белгәс – ултыртты ла алып киттеләр. Бына шул.

– Дөрөҫ булһа, һеҙ унда дүрт егет булғанһығыҙ.

– Эйе, дүртәү инек.

– Кемегеҙ ҡасып өлгөрҙө?

– Беҙҙең группалағы Ғирфанов Мансаф.

– Анна Петровна, ниңә Ғирфанов саҡыртылмаған?

– Сабит Әмирович, ул эләкмәгән дә баһа...

– Сабит Әмирович! Бөтәһенә лә мин  ғәйепле, сөнки егеттәрҙе вагон бушатырға мин алып барҙым, мин ашханаға алып инеп, һыра менән һыйланым, мин... Ғөмүмән, яуаплылыҡтың барыһын да үҙемә алам. Һеҙгә бер генә үтенесем бар: был егеттәрҙе техникумда ҡалдырығыҙ, юғиһә уларҙың  юғалып ҡалыуҙары бар, ә, минең ихтиярым көслө, тормошта урынымды таба алырмын, тип уйлайым.

– Тимәк, Кәримов, егетлек күрһәтәһең инде. Ярай. Ҡалғандарын да тыңлап ҡарайыҡ. Кәбиров нимәләр әйтер?

– Беҙ, дүрт егет, инде нисә йыл – айырылмаҫ дуҫтар. Теге көндөң михнәттәрен дә бергә кисерҙек. Эйе, Мансаф милиция патруле ҡулына эләкмәне, тимәк, ул маладис. Ә беҙ юғалып ҡалдыҡ, шуға өсөбөҙҙө ҡаптырҙылар. Сабит Әмирович! Анна Петровна! Шул төндөң мажараларын һөйләмәҫкә ине. Мөмкин булһа, аңлатмамда ентекләп яҙып бирермен. Бары ла Фаил һөйләгәнсә булды. Яңылышҡанбыҙ – шуның өсөн ғәфү итегеҙ беҙҙе. Фаил дуҫтың кешелекле, намыҫлы булып ҡалыу теләгенә һоҡланырға мөмкин, тик кәрәкмәй беҙгә уның был ынтылышы. Берҙәмлек икән – берҙәмлек булһын. Ул техникумдан ҡыуыла икән, Әхәт менән беҙ ҙә китәсәкбеҙ. Бында ғәйеп – барыбыҙҙа ла. Фаил беҙҙе ни саҡлы һаҡлап йөрөтөргә тырышты, теге егеттә йоҡлап ҡалайыҡ, тип тә өгөтләне. Ә беҙ уны тыңламаныҡ. Ә кәрәк булған...

– Ә һин, Ғәзизов, нимә әйтерһең?

– Мин дә Ишбулдының һүҙҙәренә ҡушылам. Техникумдан беребеҙҙе ҡыуалар икән – барыбыҙ ҙа китәбеҙ. Фаил бер үҙе ҡыуылырға тейеш түгел. Вытрезвителдә беҙҙе алданылар, хәбәр итмәйбеҙ, тигәйнеләр...

– Улар – эш урынында, үҙҙәренең вазифаларын үтәй, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы Василий Дмитриевич.

– Рим Мазһарович! – тип өндәште директор үҙенең урынбаҫарына. – Һеҙ нимә әйтерһегеҙ?

– Сабит Әмирович, минең тәҡдим – ҡыуырға. Техникумды ниндәй хурлыҡта ҡалдырҙығыҙ, аңлайһығыҙмы шуны? Хәҙер ҡайҙа барһаң да, күҙҙе астырмай, бармаҡ менән төртөп күрһәтәләр. Ҡала етәкселәре кәмендә бер ун йыл телдәренән төшөрмәй һәр ултырышта ошо хәлде сәйнәйәсәк. Өсөһөн дә техникумдан ҡыуырға! Ҡалғандарға һабаҡ булыр.

– Анна Петровна.

– Егеттәр миңә бик йәл. Йәшлек дыуамаллығы, контроллек етмәү арҡаһында килеп сыҡҡан хәл был. Инде башҡаса бындай ҡыйынлыҡҡа юлыҡмағыҙ. Ышанам, һеҙ алдағы көнөгөҙҙә юғалып ҡалырға тейеш түгелһегеҙ. Был әле һеҙҙең өсөн трагедия түгел, барыһы ла алда. Әлбиттә, ата-әсәйҙәрегеҙ өсөн ҙур ҡайғы.

– Василий Дмитриевич.

– Мин дә ҡыуыу яғында. Башҡа сара юҡ. Шәп егеттәр ҙә һуң, ләкин үҙ-үҙҙәренә дошмандар икән... Башҡаса өҫтәр һүҙем юҡ.

– Рәхмәт, иптәштәр. Василий Дмитриевич, дәрестәр бөткәс тә, барлыҡ группа уҡыусыларын актовый залға туплап, бөгөнгө приказ менән таныштырайыҡ. Рим Мазһарович, уҡытыусылар ҙа ситтә ҡалмаһын, педсовет уҙғарып алырға кәрәк. Әлегә әҙерләгеҙ. Мин бушағас, яңынан был мәсьәләгә әйләнеп ҡайтырбыҙ.

– Яҡшы, Сабир Әмирович, ойошторорбоҙ.

Директор бүлмәһендә үҙҙәре генә ҡалғас, Сабит Әмирович урынынан тороп, егеттәр эргәһенә килде:

– Йә, нисек итеп, ниндәй йөҙ менән ата-әсәйҙәрегеҙгә ҡайтаһығыҙ, ҡалай итеп улар күҙенә күренәһегеҙ инде? Фаил, һин атайың менән минең арала боевой дуҫлыҡ барлығын беләһең бит. Хәҙер күҙ алдына килтерә алаһыңмы: атайың, полкташым Ниғмәт менән осрашҡанда үҙ-үҙемде аҡлап йә һине яҡлап мин нимә әйтергә тейеш? Ошо бармаҡтарым менән алысаҡ дипломдарығыҙға ҡултамғаларымды ҡуйыр урынға, һеҙҙең ҡыуылыу тураһындағы приказға имза һалырға мәжбүрмен. Һеҙҙең кем булыуығыҙға ҡарамаҫтан, – түбәнге курстамы, сығарылыш курсындамы – әлеге приказ ошо сәғәттә иғландар таҡтаһында эленеп торасаҡ. Күпме генә һөйләһәң дә, үткәнде кире ҡайтарып булмай. Егеттәр, инде алдағы тормошоғоҙҙа яңылышмағыҙ. Киләсәгегеҙ үҙ ҡулығыҙҙа. Үҙ районығыҙға ҡайтып, ең һыҙғанып эшкә тотоноғоҙ, һеҙгә һәр хәлдә ветеринар фельдшеры булып эшләргә була. Икенсе йыл техникумға килерһегеҙ, ситтән тороп уҡыу бүлегенә. Ә-ә, армия сафына алалар, тиһегеҙме? Һуң, хеҙмәттән ҡайтҡас рәхим итегеҙ! Һеҙ минең әйткәндәргә ризаһығыҙмы? Тәҡдимде ҡабул итәһегеҙме?

Егеттәрҙең икәүһе, ризалыҡтарын белдереп, баштарын ҡаҡты.

– Сабит Әмирович, мин ауылға ҡайтмаҫҡа булдым. – Быны ҡырт ҡына белдерҙе Фаил.

– Һин үҙ аҡылыңдамы? Нисек инде ҡайтмайһың? Нимә эшләргә уйлайһың?

– Алыҫ Көнсығышҡа сығып китергә ине иҫәп, бер аҙ эшләп алғас – армияға, унан ҡайтҡас берәй уҡыу йортона инермен әле. Күҙ күрер.

– Бына нисек икән? Көтмәгәйнем. Ата-әсәйең һине аңламаҫ, ғәфү итмәҫ, тип уйламайһыңмы?

– Улар... Теләһә ниндәй аламалыҡты ла, яуызлыҡты ла кисерергә әҙер, барыбыҙҙың да ҡайғы-хәсрәтен күтәрә. Ләкин миңә һеҙҙең алдығыҙҙа ла, улар алдында ла – оят. Ауылда ҡала алмайым. Ғәрлек.

– Яҡшы! Себерҙә һине кем көтә һуң? Берәй йүнле, ҡулға тотоп эшләрлек һөнәрең бармы?

– Юҡ-юҡлығын, белмәһәм – өйрәнермен, кәрәк икән – уҡытырҙар, донъяла һөнәр бөтмәгән.

– Ҡайҙалыр күҙ терәп китергә план ҡорғанһыңдыр бит, баш һуҡҡан яҡҡа китеп булмай ҙа...

– План бар. Теге төндө танышҡан егет менән Ванино ҡалаһына диңгеҙ порты төҙөргә китәсәкбеҙ. Ул шунан отпускыға ҡайтҡан.

– Дыуамалыҡ түгелдер был, Фаил?

– Юҡтыр, Сабит Әмирович. Унан, атайымдың һөйләүе буйынса, Һеҙ ҙә ун биш йәшегеҙҙә, бер үҙегеҙ Урта Азияға сығып киткәнһегеҙ. Һеҙгә ҡурҡыныс булманымы?

– Заманаһы шундай ине, Фаил, заманаһы... Башҡа әмәл юҡ ине. Аптырағандан... Ә һеҙ, егеттәр? Һеҙ ҙә китергә булдығыҙмы?

– Мин уйламаным әле, Сабир Әмирович, – тине Ишбулды, – ул ҡәҙәр алыҫҡа китергә шөрләйем. Үҙебеҙгә ҡайтып эшләрмен, ахырыһы.

– Бына күрҙеңме, Фаил? Иптәшең дөрөҫ ҡарарға килгән. – Директорҙың йөҙө нурланып, яҡтырып киткәндәй булды.

– Мин дә китмәйем, ауылда йәшәүгә етәлер шул. Ҡайҙа беҙ юҡ – шунда яҡшы, тип әйтәләр. – Быныһын Әхәт әйтте.

– Ә һин, Фаил, ауылыңа ҡайтып, ата-әсәйең менән һөйләшеп, кәңәшләшеп ҡара шулай ҙа. Ә хәҙергә хушығыҙ!

Вәссәләм, улар инде студент түгел. Өс йыл уҡығандары юҡҡа сыҡты. Йәшлектең иң саф йылдары бушҡа осто. Күңел илай, унда бушлыҡ, ҡараңғылыҡ. Алда егеттәрҙе нимә көтә? Ошондай уйланыуҙар, билдәһеҙлек йонсотто уларҙы. Ҡасан күңел китеге төҙәлер, үҙ урынына ҡайтыр? Алла белә...

Үҙ ауылдарында ҡаласаҡ егеттәргә еңелерәк. Ә Фаилға? Тыуған тупрағын, илен ташлап, ата-әсәһен күрмәйенсә Себер сығып китеүе – меңләтә ауыр. Ҡалырға ла һуң түгел, түгел... Бәлки... Юҡ! Фаил һүҙенән кире сикмәҫ.

Бер сәғәттән Фаилды техникум менән иҫтәлектәрҙән башҡа бер нәмә лә бәйләмәй ине. Ятаҡҡа инеп, иптәштәре менән һаубуллашты ла, сумаҙанын, төйөнсөгөн күтәреп, Андрей торған йортҡа атланы.

Өсөнсө көнөнә поезд уларҙы Хабаровск ҡалаһына алып китте. Омск ҡалаһынан Фаил ата-әсәһенә ғәфү итеүҙәрен, ҡайғырмауҙарын һорап, йылы һүҙҙәр менән хат яҙып һалды. Хабаровскиҙан самолетта «Советская Гавань» портына – Тымыҡ океан ярҙарына остолар...

Фаил дуҫы Андрей менән Ванино ҡаласығында яңы порт төҙөүҙә ҡатнашты, бетонсы булып эшләне. Бер йылдан урындағы военкомат уны шоферҙар курсына уҡырға ебәрҙе, дүрт айҙан кеҫәһендә шофер танытмаһы ята ине. Ниһайәт, ул күптәнге хыялына иреште. Портта ауыр йөк машинаһында оҙаҡ эшләргә тура килмәне – армияға алынды. Хеҙмәт юлын Чита ҡалаһынан башланы, ГАЗ-66 йөрөттө. Ете айҙан уларҙың полкынан бер төркөм һалдатты Горький ҡалаһына яңы машиналар алырға ебәрҙеләр. Машиналарын кире Читаға ҡыуған саҡта Башҡортостан еренән, Өфө ҡалаһынан, үтәсәктәрен белгәс, Фаил ныҡ шатланды.

Күңеле тулыпмы, сәғәттәр буйы тамағы ҡарлыҡҡансы оҙон йырҙар һуҙҙы. Ул шул тиклем тыуған ауылын, ата-әсәһен һағынғайны, шул ҡәҙәр уларҙы күргеһе килде – машинаһын Көйөргәҙе яғына бороуҙан саҡ тыйылып ҡалды. Алыҫыраҡ ине шул уның ауылына – ике йөҙ илле саҡрым. Шуға күрә Фаил колонна начальнигы майор Свиридовҡа әйтергә лә ҡыйманы. Өфөгә етәрәк, Алкино тирәһендә туҡталып, ял итеп алдылар. Майор Фаилдың Башҡортостандан икәнен белгәнгә, үҙе һүҙ башланы:

– Ну, Каримов, где твоя деревня, далеко ли от нашей трассы?

– Километров двести пятьдесят в один конец будет, товарищ майор, – тип яуапланы Фаил.

Тегеһе ҡулын ғына һелтәне. Йәнәһе, утыҙ машинанан торған хәрби колонна бер Фаилдың ярты көн ҡайҙалыр йөрөгәнен көтә алмай. Дөрөҫ. Майор Свиридов урынында кем генә булмаһын, колоннанан ситкә тайпылырға рөхсәт бирмәҫ ине.

– Исмаһам, бер егерме – утыҙ саҡрым да түгел… – тип көрһөндө Фаил.

Хеҙмәте яҡшы барҙы. Тырыш егетте һәр саҡ маҡтап телгә алдылар. Ата-әсәһенә командование исеменән ике тапҡыр Маҡтау хаты ебәрелде. Ә йыл ярым хеҙмәт иткәндән һуң бер айға отпускыға ҡайтарҙылар.

Өс йыл буйы улын күрмәй, зарығып көткән Миңнеямал апай, ҡапҡанан инеп килгән киң яурынлы, хәрби кейемдәге һалдатты күргәс, ҡойолдо ла төштө. Шатлығынан ҡулындағы күнәген төшөрөп ебәрҙе хатта, шунан асыҡ ҡапҡаға ташланды. Ҡулдарын йәйеп, Фаилды ҡосаҡламаҡ итте, ләкин көслө беләктәр, көрәктәй ҡулдар уның үҙен күтәреп алды.

– Әсәкәйем, – тип бышылданы ул, – әсәкәйем, мин ҡайттым…

– Улым, төшөр… Йән киҫәгем, ниңә шулай оҙаҡ ҡайтманың? Һине көтә-көтә инде, тилерәм тип торам. Ҡара әле, арыҫландай ир-егет булғанһың бит. Оҙаҡламай атайың да ҡайтып етер, үҙеңде танымай ҙа торор микән, и-и шатланыр инде… Ярай, балам, әйҙә, өйгә инәйек. Хәҙер аш һалам, шуға тиклем сәй эсеп алырһың. Ҡайтырыңды белгәс, телеграмма һуғырға ине, улым…

– Уйлағайным да, әсәй, шунан белгертмәйсә ҡайтып төшөргә булдым.

Фаил сәй эскән арала, Ниғмәт ағай ҙа тыны бөтөп, йүгерә-атлай ҡапҡанан атылып инде.

– Иптәш младший сержант, старший ефрейтор Каримов явился домой, тик аҙ ғына һуңлағанский, – тип шаяртты атаһы улы менән ҡосаҡлашҡан арала.

Улар араһында әңгәмә бер минутҡа ла өҙөлмәне, аҙаҡ Миңнеямал апай түҙмәне:

– Атаһы, телеңде аҙ ғына тый, улыңа ашарға ла бирмәйһең дә… Алыҫ юлдан йонсоғандыр, – тип тә бөтмәне, Ниғмәт ағай кеҫәһенән бер яртыһын тартып сығарҙы.

– Улым ҡайтҡан хөрмәтенә, әйҙә, әсәһе, һин дә яҡын кил. Урам осонда һөйөнсө алдылар, ҡыуаныстан лавкаға инеп сыҡтым.

– Атай, рәхмәт, – тине Фаил, – был шешә тороп торһон, һинең өсөн минең дә күстәнәсем бар, – тип сумаҙанынан бер «Виски» шешәһе, консерва, сәй, лимон, башҡа төрлө ашамлыҡтар сығарып өҫтәлгә ҡуйҙы. – Была быныһы, атай, өр-яңы бушлат үҙеңә, туҙҙырғансы кейеп йөрө, ә һиңә, әсәй, – камзул. Йәле, кейеп ҡара, килешә микән? Атай, һин дә кейеп күрһәт!

Был төндө улар йоҡламанылар ҙа…

Фаилдың бер ай отпускыһы һиҙелмәй ҙә үтеп китте, ләкин ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уның тормошонда үтә әһәмиәтле ваҡиға булып ҡалды.

Ҡайтыуының икенсе көнөндә Фаил клубҡа сыҡты, дуҫ-иштәре менән осрашты, мәжлес ҡороп та алдылар. Шунда ул бер һөйкөмлө ҡыҙҙы шәйләп алды. Тиҙ генә дуҫы Фоат аша был ҡыҙ тураһында мәғлүмәттәр йыйҙы.

Өс ай элек культура-ағартыу училищеһен тамамлап, Фаилдарҙың ауылына клуб мөдире итеп эшкә ебәрелгән икән. Исеме Нәзирә, тыумышы менән күрше районан.

– Тағы ла ниндәй «разведка» кәрәк? – тип хихылданы Фоат. – Ҡара уны, иптәш сержант, һаҡ бул, ул ҡыҙға күҙ һалыусылар ауылда бер һин генә түгел.

– Ярай, ҡурҡытма, әһәмиәтле информация биргәнең өсөн рәхмәт, ҡалғанын үҙебеҙ добудем – тине Фаил. Һалдатта был ҡыҙ менән яҡындан танышыу теләге көсәйҙе, тик Нәзирә бик сос булып сыҡты. «Мин эскән егеттәр менән танышмайым»,– тип өҙөп әйтте. Фаил да юғалып ҡалғандарҙан түгел: «Айныҡ егеттәр эҙләүҙә уңыштар теләйем», – тине лә боролоп китеп барҙы. Тик ҡыҙҙың һомғол һыны, яғымлы күҙҙәре, биленә төшкән ҡарағусҡыл сәстәре күҙе алдынан китмәне. Фаил көскә иртәгәһе кисте көтөп алды. Ауыл йәштәре «тамаҡ сылатырға» тип өндәшкәйне, ул төрлө һылтауҙар менән был тәҡдимде кире ҡаҡты. Киске уйын, бейеү-йырлауҙар бөтөп, башҡалар ҡайтышып бөтһә лә, Фаил клубта ҡалды. Нәзирә был юлы һалдатты ситкә этәрмәне. «Ҡалай шәп йырлайһығыҙ, һеҙгә йырсы булырға Хоҙай үҙе ҡушҡан, армияла шул иҫ киткес талантығыҙҙы йәшереп ятаһығыҙ», – тине ҡыҙыҡай. «Юҡ, армияла йәшеренеп ятып булмай, унда ла йырлаталар, хеҙмәт итергә лә ваҡыт ҡалмай», – тип яуапланы Фаил, клуб ишегенә йоҙаҡ элергә булышҡан арала. Ҡыҙҙы йәшәгән фатирына оҙата барҙы. Ҡараңғы төн. Нәзирә юлдашының Тымыҡ океан, порт төҙөлөшө, һалдат хеҙмәтенең ҡыҙыҡлы ваҡиғалары тураһында һөйләгәндәрен иғтибар менән тыңлап килә.

– Фаил, Һеҙ – күпте күргән, күп ерҙәрҙә булған кеше,– тине ул, ҡойма буйына туҡталғас,– ә шулай ҙа әйтегеҙ әле: өс йыл буйы тыуған яҡты, туғандарҙы күрмәй йөрөү бер үҙегеҙгә сит ерҙә ҡыйын түгелме? Мин өс ай ҙа түҙә алмаҫ инем...

– Э-эх, Нәзирә, Нәзирә, билдәле, еңел түгел, һағындыра, ваҡыты менән йүгереп ҡайтып китерҙәй булаһың... Ауыр булһа ла, өйрәндерә инде. Ана шул һағынғанға күрә отпускыға ҡайттым бит.

Ҡыҙ инеп китеп, ҡапҡа ябылғас та, Фаил өйҙәренә ҡайтырға ашыҡты.

Кинәт ҡараңғынан уның ҡаршыһында дүрт шәүлә пәйҙә булды. Ерҙән ҡалҡтылармы улар, күктән төштөләрме – иллә-мәгәр һалдат егетте бөтә яҡлап уратып алдылар. Көн кеүек асыҡ: ауыл йәштәре юҡҡа ғына йөрөмәй. «Тиктомалдан мине һағалап, ҡаршыма сыҡмағандарҙыр», – тип уйлап өлгөрҙө Фаил.

– Йә, һалдат, Нәзирәне оҙаттыңмы инде?– тип әтәсләнде береһе.

– Оҙаттым. Шунан, мин оҙатҡанға ҡытығың киләме әллә?

– Беренсе һәм һуңғы тапҡыр оҙаттың, белдеңме?

– Ул һинең ҡыҙың түгел, Нәзирә занята, пәнәтне?

– Юҡ, не понятно! Ул ҡыҙыҡай миңә оҡшай, мин көн дә уның эргәһенә барасаҡмын.

– Һиңә, ахмаҡ һалдат, бөткәнме башҡа сибәркәйҙәр? Йөрөгән ерҙәреңдә берәй марьюшка табырға ине...

– Мин һеҙгә, маңҡа ауыл малайҙарына, ҡабатлап әйтәм: Нәзирә менән йөрөйәсәкмен. Тиҙ генә минең юлдан шылығыҙ, салагалар.

– Ашыҡмай тор. Белгең килһә, беҙ малай-шалай түгел, улар ыштанһыҙ йөрөй.

Фаил тайпылып өлгөрмәне – тос ҡына йоҙроҡ яңағына менеп тә ултырҙы. Шуны ғына көткән ҡалған малайҙар ҙа уның өҫтөнә ташланды. Береһе һелтәнде, икенсеһе эсенә тибергә ҡыйышты, тик Фаил тегенең аяғынан тотоп алды ла, әйләндереп, ергә быраҡтырҙы. Шул арала ҡайһыһылыр тағы берҙе уның күҙ төбөнә яманы. Күҙҙәренән уттар сәсрәне. «Нисек тә йығылмаҫҡа, юғиһә типкәләйәсәктәр», – тип уйланы Фаил.

Ул да булмай, икеһе уның ҡулдарын шаҡара башланы. Инде сығырынан сыҡҡан, асыуы ҡабарған һалдат терһәктәре менән тегеләрҙе этәреп ебәрҙе лә ике ҡулын да киңкен генә ян-яғына һелтәне. Уны тоторға ынтылған егеттәр «ыһ» итеп һығылып төштө. Инде береһе генә аяғөҫтө ҡалды, уны ҡолатырға Фаилдан күп көс талап ителмәй ине. Һиҙҙермәй генә эшләнгән ҡул хәрәкәте, оҫта ҡулланылған самбо алымы үҙенекен итте: ауыртыуҙан сыҙай алмай ҡысҡырынған егет ер тырнап аунаҡлай башланы. Ике-өс минут барған алыш ауыл егеттәре өсөн күңелһеҙ тамамланды: дүрт егет дүрт яҡта тәгәрәшеп ята ине.

– Ярай, кисерәм үҙегеҙҙе. Тороғоҙ!

– Тороп булмай ҙа ул, беҙҙең ҡайһы ергә һуҡтың һин, Фаил ағай? Һин әллә каратисмы?

– Кем булһам да, һеҙгә барыбер түгелме ни? Тағы бер ҡат иҫкәртәм: Нәзирәне онотоғоҙ. Әгәр ҙә мәгәр уға ҡағыла ҡалһағыҙ, рәнйетергә уйлаһағыҙ йә берәй тапҡыр юлымда осраһағыҙ – бөттө! Шунда уҡ үлтереп һала торған прием ҡулланам йә ғүмерлек инвалид яһайым үҙегеҙҙе. Килештекме? Һеҙҙе бөтә донъя империалистарынан һаҡлап хеҙмәт итеп йөрөйөм, ә һеҙ ағайығыҙға ҡул күтәрәһегеҙ.

– Яңылышлыҡ булған, Фаил ағай, башҡаса ҡабатланмаҫ. Тик туйығыҙға саҡырырға онотма, – тиеште аҡылға ултыртылған ауыл һуҡмайҙары, ятҡан ерҙәренән көс-хәлгә ҡуҙғалып.

Шулай итеп, Фаил менән Нәзирәнең осрашыуҙары өс аҙна буйы барҙы. Хеҙмәт иткән еренә китергә бер нисә көн ҡалғас, Фаил Нәзирәнең ҡулын һораны, беренсе күреүҙән үк ятаҡанлығын әйтте.

– Йыл ярым һинһеҙ мин ни эшләрмен? Хеҙмәтеңде тултырып ҡайтҡас өйләнешербеҙ. Мин һине көтөрмөн.

– Юҡ, Нәзирә, мин риза түгел. Хәҙер ҡауышып булмаһа, һине юғалтырмын тип ҡурҡам.

– Теге малайҙан шикләнәһеңме? Һин уларҙы бик яҡшы дөмбәҫләгәнһең икән, тип һөйләйҙәр.

– Нәзирәкәй, мин уларға «малай-шалай» тип ысҡындырғайным, беләһеңме, улар нимә тине? «Малайҙар ыштанһыҙ йөрөй, ә беҙ – егеттәр» тинеләр.

– Ҡыҙыҡ. Ә бит дөрөҫ!

– Шулайҙыр. Йә нисек, миңә сығырға ризаһыңмы?

– Фаил, ашыҡтырма, аҙ ғына уйлашайыҡ, атам-әсәм янына ҡайтып, уларҙың ризалығын алайыҡ.

– Шулай итербеҙ. Тик онотма, миңә хеҙмәткә китергә өс көн ҡала...

– Өлгөрөрбөҙ, Фаил. Әйҙә, һөйләшкәнсә эшләйек.

– Булды. Беләһеңме, минең атай-әсәйҙе алабыҙ ҙа елдерәбеҙ һеҙгә.

– Ә һинекеләр ҡаршы килмәҫме һуң? Башта үҙ ата-әсәйең менән һөйләш.

– Кисекмәҫтән. Бына бөгөн үк. Һине оҙатам да...

Миңнеямал апай улының ғаилә ҡороп китеүенә шат булыр ине. Хеҙмәтен тултырғас, Себерендә ҡалмаҫ, туп-тура өйгә, ҡатыны янына, ҡайтыр, исмаһам, тип хыялланды.

Фаил иң тәүҙә әсәһенән кәңәш һораны:

– Әсәй, мин хеҙмәткә өйләнеп китһәм, нисек булыр икән? Һин ризалығыңды бирер инеңме?

– Риза булмай ҡайҙа ул, балам, ҡуш ҡуллап «за», ҡойоп ҡуйған ир-егетһең. Хоҙай төҫ тә, буй ҙа, аҡыл да биргән үҙеңә.

– Юҡ, әсәй, төҫ-башты һин биргәнһең, атайым менән бергә... Атай ни тиер ине икән?

– Ҡаршы килмәҫ ул. Бер-берегеҙҙе оҡшатҡанһығыҙ икән – ниңә ғаилә ҡормаҫҡа? Һин ҡайтҡанға тиклем килен беҙҙә тороп торор ине.

Ниғмәт ағай ҙа Фаилдың өйләнеп китергә йыйыныуын дөрөҫ тип тапты. Иң беренсе ҡыҙҙың аталарына барып һөйләшеп ҡайтыу, уларҙың ризалығын алыу кәрәк ине.

Миңнеямал апай иртәнге һөтөн сепараторҙан үткәргән арала, ҡапҡа төбөнә выжлап еңел машина килеп туҡтаны.

Төшкө аштан һуң ғына ҡуҙғалдылар. Буласаҡ ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар: «Килерегеҙҙе алдан хәбәр итергә ине – әҙерләнеп көтөр инек», – тип ихлас ҡаршы алды. Күп тә үтмәне, ҡунаҡ өҫтәле аш-һыу менән тулды. Аңламаҫһың, Миңнеямал апай ҡайһы ваҡытта бешеренеп өлгөргән – уның алып килгән күстәнәстәре өсөн яңынан бер өҫтәл ҡуйҙылар. Өс сәғәт тигәндә генә ҡоҙаларҙы ҡоҙалап, ризалыҡтарын алып, туй үткәреү мәшәҡәттәрен яйға һалып, ашап-эсеп, көн кискә ауышҡас ҡына ҡайтырға сыҡтылар.

Кейәү егеттең китер ваҡыты ҡыҫылғанға күрә, ике яҡ та туй кисәһен егет яғында ғына үткәреүҙе хуп күрҙе. Ике көн барған туй мәжлесе гөрләп үтте. Урам ғына түгел, ярты ауыл кешеләре туйҙан ҡәнәғәт булып, йәштәргә ғаилә бәхете теләп таралышты. Ауылдың бер төркөм йәштәре, ҡасандыр «Нәзирә беҙҙеке», «она занята» тип Фаилға һөжүм итеүсе егеттәр, туйға саҡырылмаған булһалар ҙа, килеп, йәш ғаиләне ҡотлап, бүләк тапшырып киттеләр. Туй үтеүгә, Нәзирә бер әбейҙәге торған фатирынан иренең ата-әсәһенә күсенде. Дөрөҫөрәге, Фаил барып, бар ғына нәмәһен ат арбаһына тейәне лә алып ҡайтты. Ошонан һуң бытылдыҡ ҡарсыҡ урам буйлап һөйләнеп йөрөгән: «Ниндәй ҡыҙҙы алып киттеләр бит! Үҙе һылыу, үҙе эшсән килеп, эй, әрәм иттеләр. Өйләнер улым булһа, алыр ҙа бирер инем. Ниғмәт малайына күрһәтер инем мин кукиш... Был Миңнеямалды әйтәм, бәхете бар, ниндәй ҡыҙҙы килен яһаны: үҙе йырсы, үҙе мандолинала уйнай. Үтә һөнәрле балаҡай».

Ваҡыт тиҙ үтеүсән, дөрөҫөрәге, ағыусан. Әле генә ҡарайһың – йәй, икенсе ҡарағанда – көҙ еткән. Нисек кенә оҙайтырға тырышма, ваҡыт үҙенекен итә, сөнки ул беҙгә буйһонмай. Бәлки, ғәмәл киңлектәрендә уны тиҙләтеүсе йә дилбегәһенән тотобораҡ йөрөтөүсе юғары көстәр барҙыр...

Фаил ошондай уй-фәлсәфәләргә бирелеп йөрөнө. Уйланмаҫ ине – китер көнө килеп етте. Ярай әле, өйләнеп, ғаилә ҡороп өлгөрҙө – шуға ҡыуана ул.

Кире киткәндә Фаилдың күңеле үҙ урынында ине. Ни өсөн тигәндә, Нәзирәһе ата-әсәһе менән бергә йәшәйәсәк. Миңнеямал апай менән Ниғмәт ағай килендәрен йылы ҡаршы алды, үҙ ҡыҙҙары һымаҡ яратты. Нәзирә лә атай-әсәйгә яғымлы, үҙе егәрле, эште йәһәт кенә эшләй ҙә ташлай. Шуға Миңнеямал апайҙың ҡулына эш тә теймәй, килененә һоҡланып туя алмай, былай уңған килен биргән өсөн көн дә Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт уҡый.

Фаилға хеҙмәтенең ҡалған өлөшө лә еңел бирелде: шул уҡ иптәштәре,

офицерҙар, белгән һөнәре. Күп тә үтмәй, өр-яңы ГАЗ-69 машинаһына ултырттылар, дивизион командиры полковник Колобовты йөрөтә хәҙер. Хеҙмәте бик яҡшы барһа ла, Фаилдың бөтә күңеле, уйҙары гел генә тыуған ауылында, атаәсәһе, ҡатыны менән булды. Өйҙән сәләм хаттары йыш ҡына килеп торҙо, үҙе лә яуапһыҙ ҡалманы. Өс айҙан һуңғы хатында Нәзирә үҙенең ауырлы икәнлеген яҙҙы. Фаилға ҡанат үҫеп сыҡтымы ни – уйындыр шул: ул бит – буласаҡ атай.

Фаилға бик оҙаҡ тойолһа ла, йәнә алты ай артта ҡалды. Туғандары, ҡатыны менән һаубуллашып өйҙән сығып китеүенә туғыҙ ай... Тик ниңәлер ул һуңғы ваҡытта бик бойоҡ, кәйефһеҙ күренә. Айҙан ашыу өйҙән, һөйгәненән хат-хәбәр булмағанғамы? Хатта полковник Колобов та иғтибар итте быға.

– Что с тобой, Федя? Почему без настроения? Вид у тебя как у кислой капусты....

– Так-то все нормально, товарищ полковник! Только...

– Ну-ну, договаривай!

– Жена вот-вот должна родить. Потому и беспокоюсь. Да и писем давно нет.

– Да ты что? Не она первая, не она последняя, так что все будет хорошо. А кого ждешь-то?

– Да мне все равно кто родится. Но хотелось бы сына.

– Выше голову, Федя! Будет у тебя сын! Увидишь!

– Спасибо за добрые слова, Андрей Васильевич!

«Улың тыуыр» тип полковник юҡҡа ғына әйтмәгән. Икенсе көндө Фаилдың ҡулына телеграмма тотторҙолар: “Родился сын. Как назвать сообщи. Целуем». Шул уҡ көндө Фаил алыҫ Башҡортостанға яуап телеграмма һуҡтырҙы: «Поздравляю. Ринат. Назовите так. Всех обнимаю».

Ошо минуттан алып Фаил ҡалған айҙарын ғына түгел, ҡайтыр көндәрен дә һанай башланы. Алты айлап хеҙмәт итәһе бар ине әле уға.

1961 йылдың көҙөндә тулырға тейеш Фаилдың хеҙмәте. Ләкин, дембелгә ҡайтарыу урынына, маршал Малиновскийҙың айырым приказы менән уларҙы яңынан өс ай ҡайтармай тоттолар. Алыҫ Көнсығышта, ғөмүмән АҠШ менән СССР араһында тыуған көсөргәнешле хәл бөтә пландарҙы бутаны. Ошо ваҡыт эсендә хәрби подразделениеларға юғары әҙерлектә торорға тура килде. Инде өс йыл буйы хеҙмәттән бүккәйне Фаил. Һуңғы айҙар хеҙмәт башындағы карантинда ятҡан осорҙан да ауыр тойолдо.

Ҡайтыр көн ғинуар урталарына тура килде. Хеҙмәт итеү ауырлығын бергә күтәргән һәм татыған дуҫтары менән айырылышыу, хушлашыу минуттары Фаил өсөн ни ҡәҙәр ауыр булһа ла, йөрәге уның әллә ҡасан тыуған ерендә, атаһы йортонда, өҙөлөп көткән ғаиләһе ҡосағында. Иркутск ҡалаһында поезды өс сәғәт ебәрмәй тоттолар. Шул арала Фаил тиҙ-тиҙ генә магазиндарҙы йөрөп сыҡты. Бар булған аҡсаһына яҡындарына ике сумаҙан тултырып бүләк алды.

Биш тәүлек үтеүгә, старшина Фаил Кәримов урам ҡапҡаһының тотҡаһына тотондо. Өй эсенән «Фаил ҡайтты!» тигән тауыш яңғыраны...

*(Аҙағы бар.)*



Гүзәл
СИТДИҠОВА

# УЙЫНСЫҠ ҺЫЙЫР

## ХИКӘЙӘ

Йүкәләр сәскә атҡан мәл... Ҡолас еткеһеҙ йыуан ағастарҙың сәскәләре эре, бөрөләре борсаҡтай. Тик есе барыбер беҙҙәгенән ҡайтыш. Өфө йүкәләре сәскә атҡанда тотош ҡала үҙәге бал есе аңҡыта бит.

Торғаны Белорет, Асҡын тау-урмандары, тик ҡомалаҡ беҙҙә үҙе ишелеп үҫә, ә бында тотош плантациялар менән мәж киләләр. Сания, Прагаға елдергән машина тәҙрәһенән асылған күренештәрҙе күҙәтә-күҙәтә, гел тыуған яҡтары менән сағыштыра барҙы. Чехия һыраһы менән дан тота бит, шуға сеймал етештерәләр инде. “Коммунизм” юҡҡа сығып, коллектив хужалыҡтар бөтөрөлгәс, ауылдары ҡаҡшаған шулай ҙа. Трасса буйындағы йорттары кеше күҙе төшкән яҡтан ғына буяп, матурлап ҡуйылған, тәү ҡарашҡа барыһы ла ал да гөл кеүек; тик ташландыҡ биналар барлығы һиҙелә. Йәштәре ҙурыраҡ ҡалаларға, хатта сит илдәргә китеп эшләй, тиҙәр.

Тау баштарында боронғо замоктар күренеп ҡала. Афарин халыҡ был чехтар: текә сағыл ҡаяларҙың дауамы итеп таш пулаттар һалғандар борон. Ер ҡыйбат булғанлыҡтан, күршеләр төкөтмә итеп үҙ йортон терәгән дә барған. Бер диуар, шул рәүешле, бушҡа тиерлек сыҡҡан. Карл Ҡайнаҡтарында, ана, йорттоң ал яғынан да инеп була, артҡы яғының өсөнсө ҡатына шоссе кимәленән һалынған баҫма аша ла уҙып йөрөйҙәр.

Ҡәнәғәт ҡайта Сания ялынан, тыуған көнөнә сит ил шифаханаһына юллама бүләк иткән балаларына бөткөһеҙ рәхмәтле булып ҡайтып бара.

Әллә күпме кисерештәр, тәьҫораттар… Ғүмере буйы кеше дауаланы, ә үҙен хәстәрләргә ваҡыты етмәне. Ҡайҙан етһен: бәләкәй генә хеҙмәт хаҡы, әҙәмсә йәшәйем тиһәң, ике-өс урында эшләргә тура килә ине. Ибраһимы ла шулай итте, кеше ғүмерен оҙайтты, тик үҙенә бер көн генә лә өҫтәй алманы. Машинаһы түңкәрелеп имгәнгән берәүгә операция яһап бөткәс, хәл алырға ултырам тип ынтылған ерендә йән бирҙе...

---

*Гүзәл Ситдиҡова (1952) — йәмәғәт эшмәкәре, шағирә, публицист. Проза әҫәре менән „Ағиҙел“дә тәүләп сығыш яһай.*

Ирен юғалтҡас ҡына Сания йоҡонан уянып киткәндәй булды. Эш тигән дә сапҡан, иренә, балаларына иркә һүҙҙәр әйтергә форсаты ла булмаған. Ҡайҙа иркә һүҙ – уны былайтмағанһығыҙ, быны тегеләй иткәнһегеҙ, тип сөңкөлдәргә генә етеп торған ваҡыты. Э-эй...

Яңғыҙы уҡытып сығарҙы Сания улы менән ҡыҙын. Береһе һигеҙенселә, икенсеһе бишенселә генә ине әле. Әлдә тәүфиҡлы, ихлас, бөтмөр, уҡыуға сос булды балалары, әсәләрен борсомаҫҡа, бәләләрен һалмаҫҡа тырышты. Атаһына оҡшап, Искәндәр улы ла үтә баҫалҡы. Өйләнмәй оҙаҡ ҡына йөрөп ташлағас, бик борсолғайны әсә, көнө-төнө, йүнле килен тура килһә ярар ине, тип теләне. Улы буй еткергәс, ире менән йәшәгән йылдарын ҡабат-ҡабат хәтер иләгенә һалып һелкетеп, төбөндә ҡалған сүп-сары өсөн йәне әрнеүенә сыҙай алмай киткән саҡтары йышайҙы. Аһ, буласаҡ килене яратып ҡына сығып, яратып ҡына йәшәһә ярай ине улын! Теләктәре ҡабул булды кеүек былай, шөкөр, һүҙ тейҙерерлек түгел әлегә. Ҡәйнәм тип өҙөлөп тора, юллама алыуҙы ла ул тәҡдим иткән.

...Медицина институтына төпкөл ауыл мәктәбен алтын миҙалға тамамлап уҡырға инде Сания. Ул саҡта ришүәт биреү, танышлыҡ тигән нәмәне белеү ҙә юҡ, тик үҙ белемеңә, көсөңә таянырға кәрәк, тип тәрбиәләгән ине шул уҡытыусы атаһы менән әсәһе лә. Үҙе лә аптырай: ни ғиллә менән инеп китә алды икән шул һынлы уҡыу йортона?! Ул саҡтың вуздарға ҡабул итеүселәре лә намыҫлы булғандыр...

Ҡылғандай аҡһыл-һары сәсле, берсә йәшкелт зөмрәт нурҙар, берсә аяҙ көндөң төпһөҙ күл зәңгәрлеге инеп сер бикләгән һоро күҙле ҡыҙҙы үҙен тотошо менән, әйтерһең, юлһыҙ, һаманғаса кәрәсин шәм яҡтыртып, батарейкаларының көсө бөтмәһен өсөн көнөнә 1-2 сәғәт кенә радио тыңлап үҫкән тимәҫһең – кәм тигәндә хан һарайында иң шәп остаздарҙан тәрбиә алған аҫылһөйәктер. Баштан уҡ иғтибар итеп, үҙе тирәһендә бөтөрөлә башлаһалар ҙа, өсөнсө курсҡа еткәнсә бер кемгә лә әйләнеп тә ҡараманы. "Ҡырағай" тинеләр егеттәр, ә үҙҙәре һаман-һаман унан һоҡланыулы күҙҙәрен алманы.

Өсөнсө курста араларына Силәбенән күсеп килгән егет өҫтәлде. Ыҫмалалай ҡуйы ҡара бөҙрәләре үк ҡыҙҙарҙың һушын алырлыҡ. Буйсан, әммә төҫкә әллә ни һылыу түгел. Һәр хәлдә Сания, башҡа курсташтарынан айырмалы, бер күреүҙән йығылып уҡ китмәне. Шул туҙғаҡ сәстәре генә лә ауыҙ һыуҙарын ҡороттора ала икән ҡыҙҙарҙың, тип эстән йылмайып та ҡуйғайны.

Үҙен Славик тип таныштырған егеттең, исемлекте барлай башлағас, Сәлмән булып сығыуы ла уға ихтирамды кәметә төштө. Нимә тип ҡылана инде, йөҙөнә башҡорт тип яҙылып ҡуйылған да баһа! Хәйер, ул осорҙа студенттар араһында исемен урыҫсаға ҡулайлаштырыу таралып өлгөргәйне шул, быныһына ғына күҙ йоморға мөмкин.

Егет уҡыуға башкөллө сумды, ҡыҙҙарға әллә ни илтифат күрһәтмәне. Саниәның тәкәбберлек мөгөҙө төртә биреп тә ҡуйҙы: нисек инде, барыһы уның өсөн "аһ" итеп торғанда, был яңыҡай – уны күрмәмеш тә белмәмеш. Бүлмәләш әхирәте Мәрйәм егеткә тәүге көндән үлеп ғашик булып өлгөргәйне (уның гел шулай – һәр "мөхәббәте" мәңгелек һәм һуңғы була), Славик былай ҙа Славик тегеләй, тип көн дә уның хаҡында әллә ниҙәр белеп ҡайтып, тәмләп бәйән итә, "Их, шул егет менән бер генә үбешһәң ине" тип үк ебәрә. Ә Сания уның һайын битарафыраҡ ҡылана, мәгәр һәр яңылыҡҡа ҡолағы ҡарп итеп ҡала. Үҙе егеттән етешһеҙлек эҙләй, үҙе уны уйлай ҙа тора. Мәрйәмдең көн дә туҡып тороуынан әллә.

Уҡыу йылы, сессия ваҡытындағы йоҡоһоҙ төндәре, семинарҙары, практикалары менән ҡайнап-урғылып, тамамланыуға ла яҡынлашты. Яҙ килде. Егеттәр,

ҡыҙҙар, имтихандар тапшырыр ваҡытҡа һанаулы ғына көндәр ҡалыуын да онотоп (дөрөҫөрәге, оноторға тырышып), кис менән Салауат һәйкәле янындағы ярға эркелә. Ҡая башындағы был мөһабәт һәйкәл әллә күпме ғашиҡтарҙың ҡайнар һүҙҙәрен, талпынышлы вәғәҙәләрен ишеткәндер, яҡты өмөттәренең, әрнеүле йәштәренең дә шаһиты булғандыр. Бынан ҡулсаланып-ҡулсаланып аҡҡан Ағиҙел, уның ярҙарын, улай ғына ла түгел, ярты Башҡортостанды тиерлек баш ҡала менән тоташтырған күпер, офоҡҡа барып олғашҡан урман-ҡырҙар, улар араһында үҙ тормошо менән йәшәп ятҡан йорттар, ҡоролмалар күренә. Алма сәскәләре, сирендәр, ҡуҡтән төшкән өрпөй болот кеүек тау итәген һарып, әкиәти хуш еҫтәр тарата. Ошо күренештәрҙән Санияның күңеле әллә ҡайҙарға, алыҫҡа, алҡына башлай, ҡоштай осоп киткеләре килә, күҙҙәренә йәш эркелә.

Бөгөн дә үҙҙәре оҡшатҡан урынға килеп баҫты ла әҫәрләнеп әхирәтенең ҡулын ҡыҫты:

– Беҙ ниндәй бәхетле, Мәрйәм, ошо матурлыҡтарҙы күрәбеҙ, тәмле еҫтәр һулайбыҙ, хыял иткән һөнәргә уҡып йөрөйбөҙ!

Мәрйәм уның ниңә шулай хисләнеүен аңлай – бөгөн моргта практика үттеләр бит. Ҡыҙҙар башта һуштан яҙып та йығылғыланы, хәҙер теге сиккә күскәндәрҙе уҡыу әсбабы рәүешендә ҡарарға күнегеп киләләр. Егеттәр хатта шунда мәрәкәләргә лә яйын таба, бәлки, эске көсөргәнештәрен йәшереү өсөн дә ҡыланыуҙарылыр. Иң ҡыйыуы Славик: патологоанатом ҡырҡып тикшергәндә, мәйет ағзаларын тотоп, әйләндереп-тулғандырып, һорауҙар ҙа бирә, уны „хатта операция эшләгәндә ярҙам итә башларға әҙер“ тигәндәре лә бар педагогтарҙың. Операция яһау күнекмәһендә Славик теккән йөй өлгөләре оҫта тегенселәрҙекенән һис ҡалышмай, „тыумыштан хирург“ тип маҡтап ҡына торалар үҙен.

– Славик, Славик! – Мәрйәмдең ҡапыл ҡысҡырып ебәреүенә Сания хатта тертләп ҡуйҙы.

Һәйкәл торған ҡаяның аҫҡы өлөшөндәге юлда бер төркөм йәштәр араһында, ысынлап та, курсташтары күренде. Егет шау-шыуҙа ишетмәнеме, әллә, ишетһә лә, иғтибар итмәнеме, – Славик тигәндәр бер ул ғынамы ни! – Йылға яғына ҡарап, бетон ҡоймаға таянып тороуын дауам итте.

– Әйҙә, уның янына төшәйек. – Әхирәте Санияның ҡулынан һөйрәне.

– Ҡуйсәле, шуны әллә кем итеп! Теләһә, үҙе килер, ҡысҡырҙың да инде.

– Ишетмәне-ишетмәне, әйҙә, төшәйек.

Үҙенекен итте барыбер, еңмеш.

Егет уларҙы күргәс, йылмайып ебәрҙе. Мәрйәмдең килеүенә ныҒыраҡ һөйөнгән кеүек тә тойолдо Санияға. Йәнә мин-минлеге ҡуҙғалып ҡуйҙы. Әллә башҡа хисме икән… Юҡ-юҡ, башҡаларға эйәреп ғашиҡ булырға йыйынмай әле ул. Килеп тороп беләге йөнтәфи генә икән. Бығаса иғтибар итмәгәйне; әле, ҡыҫҡа еңле күлдәк кейгәс, күреп ҡалды. Үҙенең атаһының ҡулдары ла, күкрәге лә таптаҙа була торғайнысы, бәс, ире лә шундай булырға тейеш! Сания ҡарашын ситкә йүнәлтте.

Йомоҡай күренгән Славик ғәмәлдә йор телле булып сыҡты, ҡыҙҙарҙы ниҙер һөйләп көлдөрҙө; Өфөгә килгәненә әле йыл да юҡ, әллә күпме тарихын һөйләп ташланы. Ә көләмәстәрҙе, әйтерһең, һауанан һоҫоп алып ҡына тора! Буласаҡ медиктар өсөн тыйылған темалар юҡ та кеүек, әммә егет, билдән түбәнгә төшмәһә лә, эс тырнап көлөрлөк анекдоттарҙы күп белә икән:

– Ҡышын киҙеү таралғанда саҡырыу буйынса бер студентты ауырыу янына ебәргәндәр. Килгән был, ауырыуға бер генә ҡараш ташлаған да тегенең ҡатынына әйтә икән: “Уны ҡотҡарырға һуң инде, күрәһегеҙме, ҡулы күм-күк булған!” Ҡатыны: “Һуң, ул бит буяусы булып эшләй, йыуып өлгөрмәгән!” – тип яуаплай.

“Бәхете, – ти икән студент, – буяусы булмаһа, күптән мәйеткә әйләнер ине ирегеҙ!”

Ҡыҙҙар, үҙҙәренең дә практикаһынан ҡыҙыҡ хәлдәрҙе иҫкә төшөрөп, көлөштө.

Һөйләшә-гөрләшә ятаҡҡа ҡайтып еттеләр. Славик ятаҡта тормай, тиҫтерҙәренең үҙе баш, үҙе түш булып йәшәүенә күҙе лә ҡыҙа ине, буғай. Ҡыҙҙарҙы ишеккә хәтле генә оҙатты ла, һиҙҙермәҫкә тырышып, сәғәтенә ҡарап алғас, баш ҡағып ҡына һаубуллашып, туҡталыш яғына ыңғайланы.

– Пфи, – тине Мәрйәм, иренен бүлтәйтеп, – әсәһе, ун икенән дә ҡалма, тип әйтеп ҡуйғандыр инде, ҡайһылай елдертте алды-артына ҡарамай. Маменькин сыночек…

– Ҡуй әле шул йөнтәфиҙе, һөйләмә, – тигән булды Сания. – Әллә кем итеп...

Ә эстән генә оҡшатты Славиктың был ҡылығын. Тимәк, тәртипле ғаиләнән, оло һүҙен йыҡмай, ата-әсәһен борсоғоһо килмәй. Ә ниндәй күңелле уның янында! Яратмай Сания танауын һәлендереп, гел бәхетһеҙ төҫ менән йөрөгән йә бик аҡыллы күренергә тырышып, ҡуҡырайып, “дәрәжәһен төшөрмәҫ өсөн” бер артыҡ һүҙ ҙә ысҡындырмаҫ бәндәләрҙе. Эсең бошоп үлерһең улар янында!

…Сессияның һуңғы көнө лә килеп етте. Теге кистән һуң ҡыҙҙар баш баҫып уҡырға ултырҙы, һәр имтихан һайын бер төн йоҡо туйҙырып, йәнә дәреслеккә йәбешә улар. Һуңғы һынауҙы ла елкәләренән төшөргән студенттар кеме байрам итергә, кеме юлға әҙерләнә башланы. Мәрйәм көндөҙ үк ҡайтып киткән, ул Славиктың теге саҡта “иртә” хушлашыуынан, уның менән борсаҡ бешмәйәсәк, тигән һығымта яһап, ауылға, Мәскәүҙән ҡайтасаҡ “запас егете” янына, ашыға ине – башҡа берәйһе ҡармап өлгөрә күрмәһен! Сания ла кейемдәрен бөхтәләп ике сумаҙанға тултырҙы. Йыл да бер сумаҙанын әсәһенең баш ҡалала йәшәгән әхирәтендә ҡалдыра, әле лә шунда барырға йыйынды.

Ишеккә кемдер туҡылдатып:

– Сания, һиңә килгәндәр, – тип һөрәнләне.

Ҡыҙ бер кемде лә көтмәй ине, аптыраны. Уҙып барғанда ғына көҙгөгә күҙ ташлап, вахтаға төшөп китте. Сыҡһа, Славик тора. Ап-аҡ күлдәк, көлһыу салбар кейгән, туфлийына хәтлем аҡ. Сания уның килеүенә бер аҙ аптырап ҡалды: ”Берәй йомошо төштөмө, әллә…” Әллә күҙе төштөмө, тигән уйын үҙенән дә йәшерергә тырышты, йә улай булмай ҡуйһа, ғәрлеге ни тора – фаразыңды үҙең генә белһәң дә…

Егет уны күреп балҡып китте. Артына йәшереп кенә тотоп торған сәскә бәйләмен һоноп:

– Имтиханды уңышлы тамамлауың менән ҡотлайым, – тине.

Сания ҡойолоп төштө, йөҙөн сәскәләр араһына йәшерҙе. Көткән икән ул был минуттарҙы. Татлы минуттарҙы.

– Әйҙә киноға барайыҡ, ваҡытың бармы, әллә бөгөн үк ҡайтып китергә йыйынаһыңмы?

– Юҡ, иртәгә педтағы ауылдаштар менән бергә ҡайтам.

Сумаҙан алып барырға кәрәклеген белгәс, кинонан баш тартып, ярҙамлашырға ихлас теләк белдерҙе Славик.

Әсәһенең әхирәте “аслы-туҡлы” йөрөгән студент ҡыҙҙы ғәҙәттәгесә ҡыҫтап сәйгә ултырта алманы, сумаҙанды күрһәткән урынға ҡуйыу менән, туҡталып та тормай сығып йүгерҙе Сания.

Таңға хәтлем етәкләшеп йөрөп сыҡты егет менән ҡыҙ. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Славик, улар уйлағанса, ғаиләһе менән түгел, ә әсәһенең бер туған ҡустыһында йәшәй икән. Юл фажиғәһендә ғаиләһен юғалтып, үҙе лә имгәнеп

ҡалған иргә уколдар, массаждар эшләп, тәрбиәләп торорҙай кеше кәрәк булғас, Славикты ваҡытлыса Өфөгә күсереүҙе ҡулай тип тапҡандар. Көләмәстәрҙе күп белеүенең ғилләһе лә асыҡланды: ҡайғыға батҡан, туҡтауһыҙ һыҙланған яҡынының күңелен аҙ булһа ла күтәрер өсөн ишеткән берен ятлап ала икән. Бөгөн ағаһы янына башҡа туғандары килгән, егетте имтихан тамамланыу айҡанлы үҙ ихтыярына ҡуйғандар.

Таң ҡояшы тәүге нурҙарын Салауат һәйкәленә йүнәлдерҙе, килешеп торған модалы нейлон күлдәк кейгән ҡыҙҙың ҡылған төҫлө сәстәрен балҡытып ебәрҙе.

– Алтынсәс, Алтынсәсем минең, – егет ҡыҙҙы һаҡ ҡына ҡосағына алды. Тик үпмәне. Оялдылар. Ул заман башҡорт йәштәре шулай тәрбиәләнгәйне – ирең булмаҫтайға иренеңде бирмә, тигән мәҡәл менән генә үҫтерҙеләр бит Санияны.

Иртәгәһенә ҡыҙ ауылына ҡайтып китте, оҙата килергә рөхсәт итмәне – ауылдаштары алдында „егеттәр менән йөрөй башлаған“ тигән дан нимәгә кәрәк?

Ауылда бесәнгә төшөргә торалар ине. Яфа бит ул таулы төбәктәрҙә бесән эшләү! Таңдан тороп, ун саҡрым самаһы йәйәүләп бараһың, көнө буйы аяҡ өҫтө, ултырып торорға форсат әҙ тәтей. Ағастарҙы ботай-ботай таҙартып алынған болондарҙа үҫкән тау үләне былай ҙа шыйыҡ, сабылғаны тиҙ генә кибеп бармай, икенсе көнөнә бик һирәк бакуйҙар йыйырлыҡ була. Инде әйләндереп, улары елләгәс йыя башлауыңа, һырттан болот килеп сығып, сылата ла китә. Китһә әле. Тау араһына бер инеп алдымы, ҡаяларға „эләгә“ лә тора, ҡармаҡҡа эләккән балыҡтай. Ул осраҡта инде лыҡма һыу булып, ямғырҙы ҡәһәрләй-ҡәһәрләй, өй яғына лыстырҙайһың. Ҡабат килеүеңә бесән ҡарайып бөтә.

Быйыл эш ыңғайыраҡ булды шулай ҙа. Яуынға бик һуғылманылар. Һуңғараҡ төшөүселәр тамам биҙрәне бесәндәрен теткеләп, тоҙ һирпә-һирпә, нәҙек кенә кәбәндәр ҡойҙолар. Уларының да ҡайһы берҙәре янды, йәғни боҫ сығарып серене.

Алыҫтағы ботамала ауырлыҡ менән генә бесән эшләһәләр ҙә, малды күп тота ине Санияның ата-әсәһе. Ихата тулы ҡош-ҡорт – ҡаҙын, өйрәген, тауығын аҫранылар. Ҡулың ырыҫлы, тиерҙәр ине әсәһенә ауылдаштары. Колхоз яғы булмағас, иген юҡ, ҡош-ҡортҡа алабуталыр, кесерткәндер турап, орлоғон йыйып ашаталар. Үҫмер сағында ҡыҙҙың ҡулы ат ҡуҙғалағы орлоғон һыҙырыуҙан тупаҫланып бөтә торғайны. Әле малды кәметкәндәр шулай ҙа, олоғаялар бит. Етмәһә, аяғы имгәнеп, атаһы сатанлап ҡалды, һыр бирмәҫкә тырышһа ла, күрә бит инде ҡыҙы – ифрат ауыр уға.

Санияның ауылға табип булып ҡайтырын ата-әсәһе генә түгел, ауылдаштары ла дүрт күҙ менән көтә: участка хәстәханаһының мөдире Илфат ағай ҙа күптән пенсия йәшенә еткән, был төпкөлгә килеп эшләргә теләгән йәштәр булмағанлыҡтан, һаман бер үҙе тотош ауылды дауалай. Улай ғына ла түгел, фельдшер белеме генә булһа ла, уны „профессор“ тип йөрөтәләр, тирә-яҡ ауылдарҙан да ауыр осраҡтарҙа уға мөрәжәғәт итәләр.

Илфат ағай Санияның каникулға ҡайтҡанына бик һөйөнә – ҡулынан эш төшәсәк бит. Ҡыҙ йәй буйы бер аҙ тәжрибә туплап китәсәк. Хәйер, ауыл ерендә һирәк ауырыйҙар, ауырыһа ла, мөрәжәғәт итеп бармайҙар. Күберәген шул имгәнеү-йәрәхәтләнеү инде.

– Хирург булырға кәрәк һиңә, – ти ине йыш ҡына Илфат. – Ҡулың килешеп тора, яра-йөйҙәрҙе сигеү сиккән кеүек кенә итеп тегәһең.

Уныһы шулай. Ауыл йәштәре иһә моңло тауышлы, бейегәндә ут сәсеп баҫыр Санияның киске уйындарға сыҡмаҫ булыуына аптырап баш ватты. Эреләнгән, тинеләр. Тағы әллә ниндәй сәбәптәр эҙләнеләр, ғәйеп таҡтылар.

– Медиктар бик йөрөмтәл була бит ул, ауырға ҡалманымы икән? – тип үк ебәрҙе уға һәр саҡ көнләшеп ҡараған, егетен үлә яҙып ҡыҙғанған берәүһе. Былай ғына, үҙенекеләр араһында ғына әйтте. Фекер алышҡан рәүештә генә. Әммә ауылға был инде бойомға ашҡан хәл һымаҡ таралып китте. Эте лә, бете лә Сանияның исемен тел өҫтөндә бейетте, әллә күпме ғәйбәт таратты.

Сания быны ишетмәне лә, белмәне лә. Сабынлыҡтан ҡайта ла, әсәһенә еңелерәк булһын тип, йорт эштәренә тотона. Славик тураһында уйлана, хыялдарға сума. Клубта ҡыҙыҡ та түгел уға – күпме бейеп-йырлап, һикерәндәп йөрөргә була ыбыр-сыбыр араһында. Ана, йөрөгән үсмерҙәр йөрөһөн! Унан тыш, медицинала уҡыу гел ятлауға ҡоролған. Китаптарын йыш алып ултыра. Һөнәренә һөйөү, ысынтылап ҡыҙыҡһыныу уянғайны уның күңелендә. Башта бит йәштәрҙе медик һөнәренең абруйлы булыуы, аҡ халаттар ҡыҙыҡтыра, ә һөнәр серҙәрен мауығып өйрәнеү, һәр осраҡтың төбөнә тоҙ ҡойоп ҡуйыу теләге һуңғараҡ, кешеләрҙе дауалай башлағас, уяна.

...Һағынышып осраштылар Славик менән. Тик ҡыҙ, ниндәйҙер эске һиҙемләү менән, быны Мәрйәмдән йәшерҙе.

– Алтынсәсем минең, – тип бер кистә, ниһайәт, егет уны үбеп алырға ла йөрьәт итте. Битенән генә.

Икеһенең дә тәүге мөхәббәттәре, икеһе лә был хисте ағын һыуға тәүләп кергәндәй кисерә. Ул заманда, хәҙерге кеүек, “мөхәббәт уйнамайҙар”, ысынлап ғашиҡ булалар ҙа саф килеш өйләнешәләр ине. Ошо “ғишыҡ-ғишрәт” уйындары арҡаһында йәштәрҙең күңелдәре лә, тәндәре лә сирлегә әйләнә бөгөн. Хирург булырға йыйынһа ла, белгес етешмәгәнлектән, ҡатын-ҡыҙ табибы һөнәренә күсергә тура килгәйне уға, әллә күпме аяныслы ваҡиғалар, шәхси фажиғәләр күҙе алдынан үтте. Ә бит заманында, ул уҡыған ваҡытта, Өфөлә сифилис менән ауырыған ике генә кеше бар ине: береһе – йыраҡ яҡтарға йөҙөп йөрөүсе капитан, икенсеһе – сит илгә барып килгән ҙур түрә ҡыҙы. Уны студенттарға битен йәшереп кенә күрһәтһәләр ҙә, бөтә Өфө уның кем икәнен белә ине шикелле…

Бер аҙнанан колхозға, уңыш йыйышырға, ебәрҙеләр.

Сания, ауыл ҡыҙы булһа ла, ғөмүмән, иген иккәнде күргәне лә юҡ. Шулай ҙа балта, һәнәк-көрәк, салғы ҡулында уйнап тора, ат туғарып егә лә белә, кәрәк икән, елдереп сығып та китә – тау ҡыҙҙары өсөн был ғәйре тәбиғи ғәмәлдәр, эшкә кәрәкле кейем-һалым, монаятты ла алдан хәстәрләп ҡуйғайны. Иртәгәһенә автобусҡа тейәлеп колхозға юл тоттолар. Егеттәр – станда, ҡыҙҙар клубта урынлаштырылды. Колхоз бригадиры килеп, студенттарҙың етәкселәренә бурысты аңлатты, ит-һөттө, бәрәңгене түләүһеҙ генә бирергә вәғәҙәләне, күпмелер аҡса түләргә лә тейештәр, тине. Эсте тишәме ни!

Ашты йәштәр үҙҙәре яраштырырға килеште. Аш бешерергә күпте күргән ике ҡаҙан, сәй ҡайнатырға биҙрәләр килтерелде. Киске аштан бушаған ҡаҙандарҙы ялтыратып йыуып, усаҡ янына түңкәреүгә, клубҡа йәштәр ағыла ла башланы. Ҡыҙҙар түшәк-яҫтыҡтарын, төйөнсөктәрен сәхнәгә тәкләп һалып, шаршау менән ышыҡлап ҡуйҙылар ҙа клуб залына һикереп төштөләр. Курсташтарынан Ибраһим шәп баянсы ине, ул бейеү көйҙәрен һыҙҙырҙы ғына, ауылдыҡылар ҙа тырыштырҙы. Ауылдаш ҡыҙҙарын студенттар менән бейергә төшөрмәҫкә лә маташтылар. Бер-ике егетте саҡырып сығарып, “өшкөргөләп” тә алдылар әллә…

„Фантик“ уйнағанда Санияға йырларға тура килде. Тәүге мөхәббәт хистәренән әҫәрләнгән ҡыҙ тәбиғәттән бирелмеш моңона саф тойғоларын да ҡушып йыр башҡарғанда залда “шылт” иткән тауыш та ишетелмәне. Аһ, йәшлек, хыялый йәшлек – шул ләззәтле минуттарға кире ҡайтҡандай булып, Сания ваҡыт сиктәрен дә, ҡайҙа китеп барғанын да онотто бер мәлгә.

Шул кисте Славик яратыуын әйтте, беренсе тапҡыр Санияның ирендәренән һурып үпте…

Иртәгәһенә бер төркөм – бәрәңге алырға, икенсеһе комбайн инә алмаған ҡултыҡтарҙа ашлыҡ сабырға тәғәйенләнде. Санияның тупраҡта ҡаҙынып йөрөгөһө килмәне, үҙе һорап, салғысылар менән барҙы. Етмәһә, Славик та ошо төркөмдә ине. Аҙаҡ аңлашылыуынса, ябай ғына түгел, мөнәсәбәттәрен хәл итерлек ҡарар булған был.

Һөйгәне ни салғы, ни тырма тота белмәй булып сыҡты. Сания алдында баҙай ҙа булһа кәрәк – һәр хәрәкәте килешһеҙ, эш ҡоралдары ҡулынан төшөп бара (майғул, тиер ине ҡыҙҙың атаһы, быны күрһә.) Әйтерһең, егет түгел, хан ҡыҙы: күпмелер эшләгәс, ҡулының ҡабарып сыҡҡаны мәғлүм булды.

“Ата-аҡ, бының менән нисек донъя көтмәк кәрәк? – тигән уй йүгерҙе ҡыҙҙың башынан. – Ай-һай, ашыҡтым, ахыры, хистәремде белгертергә. Атайыма ярҙамсы түгел, бер имгәк кенә буласаҡ бит был, ауылдаштар ҙа көлөр...”

Ана, беренсе курстан бирле артынан да ҡалмай йөрөгән Ибраһимдың ҡулында ут уйнай ҙаһа. Нишләп быға шуға иғтибар итмәй йөрөгән, беренсе йыл ғына түгел дәһә колхозға килеүҙәре!

Күңеле ҡайтты ҡыҙҙың һөйгәненән. Кисә генә күктәргә осортоп алып китерҙәй мөхәббәт ҡанаттары ауырайҙы, хатта яурындарын аҫҡа тарта башланы кеүек. Ул егетте мыштым ғына күҙәтә бирҙе лә, күңеле биҙеп, бар асыуына салғыһын һелтәргә кереште. Тәүге мауығыу хистәренең шулай тиҙ селпәрәмә килгәненә лә әрнене, йәлләне, әрләне үҙен. Ирең булмаҫтайға иренеңде бирмә, ти инеме әсәһе. Ул кисәге үбешеүҙе хәтерләгән ирендәрен ҡанатҡанса тешләне, күҙҙәренә йәш эркелде.

Бөгөнгө тормош бейеклегенән шул ваҡытҡа әйләнеп ҡайтып, Сания йәштән үк артыҡ йортсол, артыҡ етди булғанлығына үҙе лә аптырап, көлөп ҡуя – тәүге мөхәббәт һәм… һыйыр! Ә мөхәббәт мотлаҡ ҡауышыу менән тамамланырға тейеш!

Киске уйынға йыйылғас, ниҙер һиҙенеп, Мәрйәм уның ҡолағына бышылданы:

– Ҡарасы, Славик һинән күҙен дә алмай, тәки арбағанһың бит!

– Кит әле, юҡты һөйләп торма бында, салғы ла тота белмәй, бер һыйыр ҙа аҫрай алмаясаҡ бит ул.

– Һы, ә нишләп ул һыйыр аҫрарға тейеш һуң әле, ҡалала йәшәр, моғайын.

– Ҡалала йәшәр булһа, ҡала ҡыҙҙарын күҙләһен.

Сания, һүҙ тамам икәнлеген белдереп, арты менән боролоп баҫты. Унан күмәк йәштәр артынан һиҙҙермәй генә шаршау арьяғына уҙып, бер үҙе ҡалғас, хистәренә ирек бирҙе, түгелеп иланы ла иланы.

Иртәгәһенә Славикты Өфөгә саҡыртып алдылар – ағаһын ҡарарға ҡалған туғандарына икенсе ҡалала ниндәйҙер кисектермәҫлек мәшәҡәт өҫтәлгән икән. „Бәлки, эш мәнеһе белмәгән егет үҙе берәй һылтау тапҡандыр“ тигән гонаһлы уй ҙа оялап ҡуйҙы көткәндәре аҡланмаған ҡыҙҙың башына.

Колхоздан ҡайтҡас, Сания ла, нишләптер Славик та бер-береһе менән осрашмаҫҡа тырышып йөрөй башланы. Тиҙҙән егеттең ағаһы вафат булып ҡалды, Славик ҡыҙ менән хушлашмай ҙа Силәбегә ҡайтып китте лә башҡаса хәбәрхәтер бирмәне.

Шул арала ауылдарында таралған әшәке һүҙ Санияның ҡолағына ишетелде, һәм тыуған яғына эшкә түгел, каникулға ла ҡайтыу теләге юғалды. Ғәрләнде, әрнене, рәнйене ҡыҙ ауылдаштарына. Илай-илай күл итте. Йәйгеһен практикаға Өфөлә ҡалды.

Икенсе йылына Санияның атаһы көтмәгәндә яҡты донъяны ҡалдырып китте, ауылда кейәүгә сыҡҡан апаһы әсәһе янында төйәкләнде. Үҙ елкәһенә һалырға торған йөктәр шулай бер-бер артлы хәл ителде лә ҡуйҙы.

Ибраһим менән өйләнештеләр, район үҙәгенә эшкә ебәреп, йәш белгестәргә тәғәйенләнгән фатирын да шунда уҡ бирҙеләр. Улдары тыуҙы.

Тик ни ғиллә: йылдар уҙған һайын тәүге мөхәббәте баҙыҡлана биреп, йөрәген телгеләне лә торҙосо. Район үҙәгендә йәшәгәнлектән, ысынлап та, мал тотоу мөмкинлеге лә, хәжәте лә ҡалманы. Махсус медицина журналдарында Славиктың фәнни мәҡәләләре сыға башланы, фамилияһына „фән кандидаты“, „фән докторы“, „профессор“ тигән дәрәжәләр ҡушылды. Был хеҙмәттәрҙе ҡат-ҡат уҡый ҙа китап шкафына, иң ҡәҙерле һанаған баҫмалар янына, тығып ҡуя ҡатын. Төштәрендә ҡара бөҙрә сәсле, ап-аҡ күлдәкле, көлһыу салбарлы сибәр егет сәскә бәйләме һуҙа. Гел бер төш. Һәм ҡолағында теге саҡ клубта йырланған мөхәббәт йыры яңғырай. Әммә гармунда Ибраһим түгел, нишләптер, Славик уйнай. Онотоорға, йөрәгенән йолҡоп ташларға тырышҡан һайын, төштәре йышая бара, таңдарҙа илатып уята. Егеттән етешһеҙлек эҙләүе мөхәббәттән ҡурҡыу булғанын йылдар уҙғас ҡына төшөндө ул. Тик һуң ине инде, былтырғы ҡарҙы быйыл эҙләп табып булмай.

...– Килеп еттек, – тигән тауыш Санияны һиҫкәндереп ебәрҙе. Прага аэропорты алдында торалар, имеш.

Водитель пассажирҙарына әйберҙәрен тотторғас, һеҙгә туғыҙынсы юлдан инергә, тип өйрәтеп ебәрҙе.

Иртәрәк килгәндәр, теркәү башланыуҙы оҙаҡ ҡына көтөргә тура килде. Африкалы бер ҡатын янына ултырып, ул сумкаһынан судоку тартып сығарҙы ла тултырып бөтөлмәгән шаҡмаҡтар өҫтөндә баш ватырға тотондо. Ә уйҙар барыбер ҡалдырмай, ғауғалы ҡоштар шикелле, ялпылдап ҡуба ла бер ни күрмәҫ, ишетмәҫ хәлгә индерә.

...Ҡыҙын да ҡулына алғас, болоҡһоноуҙары бер аҙ баҫылғандай булғайны, етмәһә, башкөллө эшкә сумдылар, ауырыуҙарҙы ҡабул итеп ҡайтҡандан һуң район хәстәханаһына көн-төн нәүбәткә сығып, машиналыҡ аҡса йыйҙылар. Дөрөҫөрәге, Ибраһим әлүмин көрөшкә менән ҡалаҡ ҡына булһа ла ҡәнәғәт йәшәр ине, Сания үҙе, беҙ кешенән кәмме ни тип, донъя ҡыуҙыртты ла ҡыуҙыртты. Машинаға сират еткәнен хәбәр иткәстәр, Өфөгә килеп төшкән төн эсендә хаҡы күтәрелде. Ибраһим бошоноуын бик белгертмәҫкә тырышһа ла, Сания илап алды. Йәнә йыйҙылар аҡсаны, алдылар, ниһайәт. Тик ире мантытып йөрөп тә өлгөрмәне – төнө буйы аяҡ өҫтә тороп эшләгән операциянан һуң ял итергә ултырған еренән генә китеп барҙы. Һуңғы юлына оҙатырға район үҙәгенең барса халҡы сыҡҡайны – күпме кешенең ғүмерен оҙайтты бит ул оҙон булмаған тормош юлында, игелекле, намыҫлы булды.

Исмаһам, күпмелер ятып ауырыһа, аяҡҡа баҫтырыр, ҡәҙер күрһәтер инем, вафат булһа ла, еңелерәк булыр ине, тигән уй хәҙер нисәмә йылдар Санияға тынғы бирмәй. Һуңғы йылдары бергә ултырып ашағандары, байрам ҡаршылағандары ла һирәк булды шул. Балаларҙы яңғыҙ ҡалдырмаҫ өсөн алмашлап, береһе ҡайтыуға икенсеһе нәүбәткә юлланды. Аҡса, машина тигән дә сапҡандар. „Бер-беребеҙҙе ҡәҙерләп тороуҙан машина ҡәҙерлерәк булған“ – шулай тип үҙен аяуһыҙ битәрләй ҡатын. Иремә, балаларыма бирер йылымды, наҙымды ете ят бер кешегә оҙатып торғанмын, етмәһә! Хәҙер уйҙарҙың да матди булыуына ышана ул. Түшәктә лә – Славик, аш бешергәндә лә – ул, кер йыуһа ла, баҡса емештәре ултыртһа ла... Ә өсөнсө – артыҡ, тип әйтәләр бит. Артыҡ кеше Ибраһим булып

сыҡҡан. Дөрөҫөрәге, үҙе уйҙары менән кәрәкһеҙгә сығарған. Шуға киткәндер ҙә ул тормошонан. Ә бит донъяла Сания мөхәббәтенә унан да лайыҡ кеше булмаған, булмаҫ та, уйлап ҡараһаң!

…Аэропорт таблоһында Санкт-Петербургҡа теркәү башланыуы хаҡында яҙма пәйҙә булды. Сания судокулы журналын сумкаһына тығып, тәгәрмәсле сумаҙанын әйтелгән турникет яғына ыңғайлатты. Үҙе бер оҙайлы мәшәҡәт бынығы. Ниһайәт, багаж оҙатылып, йәнгә теймәле тикшереүҙәр, ҡапшауҙар тамам булып, толомонда шикле нәмә юҡлығына инаныр өсөн һүттерелгән сәстәрен рәтләне лә, еңел сумкаһын яурынына аҫып, дьюти-фри кибеттәре яғына йүнәлде.

Бында хаҡтар арзанырак тиме – ул ейәнсәрҙәренә бүләк һайларға тотондо. Күҙе бала сағында үҙҙәрен тәмле ҡуйы һөтө менән туйындырып үҫтергән Сыбарҡай исемле һыйырҙарына оҡшап торған йомшаҡ уйынсыҡҡа төштө. Ҡулына алып, бер төймәһенә баҫыуға һәүкәш баҡырып та ебәрҙе. Бәләкәсенә дан бүләк таптым бит әле, тип һөйөнөп, олоһона ни алырға белмәй байтаҡ йөрөп ташланы. Унығына хәҙер әйбер алып оҡшатыуы бик ҡыйын, ҡайҙан тапҡан һүҙен: „параша“ тип кенә ҡуя. Бер аҙ күстәнәс, һәҙиәләр һалынған ҡупшы пакеттарҙы тотоп, иркенерәк тойолған эскәмйәлә урын алды. Сумкаһынан судокуһын сығара ғына башлағайны, көтмәгәндә баш өҫтөндә һаҡ ҡына бәрхәт тауыш яңғыраны:

– Алтынсәс?!

Сания терт итеп ҡалды – сит ил аэропортында шул тауышты ишетсе әле: уға былай тип бер генә кеше, ул да булһа ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында, өндәшә ине лә баһа! Славик-Сәлмән… Ҡаушаны, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, ултырыуҙы килештермәй, тора башланы.

– Ултыр…ығыҙ, борсолмағыҙ! – Ялтас башлы, тулы кәүҙәле ир уның яурынан йомшаҡ ҡына баҫып кире ултыртты ла, янына урынлашып, ҡул һуҙҙы. – Әйҙә, күрешәйек, булмаһа!.. Таныныгыҙмы?

– Эйе, әлбиттә. Үҙгәрмәгәнһегеҙ, – тигән булды ҡатын, уның яңы ҡиәфәте төштәрендәге һомғол егетте бик аҙ хәтерләтһә лә. Икеһенә генә билдәле ҡушаматтан танының, тип әйтә алмай бит инде. Икеһенең сере, икеһенең мөғжизәүи хистәре. Тәүге тапҡыр илереп ғашиҡ булып, бер генә үбешеп айырылышыуҙарының әсе әрем тәме.

– Ә мин Һеҙҙе сәстәрегеҙҙән таныным, тикшереү үткәндә тағатҡанда. Һаман шулай һары, матур икән толомдарығыҙ. – Ул саҡта тәбиғи алтын ине, хәҙер яһалма шул, тип эстән генә әсенеп көлөмһөрәне Сания. – Ҡайҙан ҡайтып, ҡайҙа осоп барыш?

– Карл Ҡайнаҡтарында ял иттем дә, арзанырак булған өсөн, Петербург аша ҡайтыуым. Өфөлә, балалар янында, йәшәйем хәҙер.

– Ә Ибраһим?

Бынығын ҡайҙан белә икән, тип ғәжәпһенеп уйланы ҡатын.

– Курсташтар менән ҡайһы саҡ осраштырып ҡуйғылай инем симпозиумдарҙа, – тине ғалим, уның кисерештәрен уҡыған төҫлө. – Күптән бер кемде лә күргән юҡ инде.

– Уның вафатына байтаҡ шул… – Ҡатын, күңеле тулышып, туҡтап ҡалды. Тамағындағы төйөндө көслөк менән йотоп ебәрҙе лә һүҙҙе икенсегә борорға ашыҡты. – Фәнни эштәрегеҙ йыш сыға ине, нишләптер туҡтап ҡалдығыҙ.

Ир, Саниянан хәлен аңлап, Ибраһим тураһында башҡаса һүҙ ҡуйыртманы. Һорауҙан ҡатындың да үҙенә бик үк битараф ҡалмағанлығын төшөнөп, ҡәнәғәтлек кисерҙе һәм шуға яуап биреүҙе хуп күрҙе:

– Туҡтаманым. Балаларым менән бер фамилияла булайым тип, алмаштырып

алдым, улар бит әсәләренекен йөрөтә – Гольденбергтар. Израилдә йәшәйҙәр. Үҙҙәрендәге эҫенән ҡасып, йыл да йәй уртаһында шул уҡ Карл… Ҡайнаҡтары, тинегеҙме әле, ҡыҙыҡ – Карловы Варыға киләләр. Ҡатыным менән мин дә балалар, ейәндәр менән шунда осрашабыҙ. Улыбыҙҙың курсташы ҡунаҡхана, ял итеүселәр өсөн фатирҙар тота. Бөтөнөбөҙ фатирға урынлашып, кинәнеп ял итәбеҙ, шифалы һыуҙарын эсәбеҙ. Балалар Һайфанан тейәнеп, кошерный… хәләл итенә тиклем алып киләләр. Быйыл да бер ай бергә булдыҡ. Нисек осрашмағанбыҙ Һеҙҙең менән! Ҡайһы ҡунаҡханала йәшәнегеҙ?

Шул мәл бала тауышы ишетелде:

– Йося, бына һин ҡайҙа, Циля юғалтты бит үҙеңде. Йүгертеп кенә алып килергә ҡушты.

Ҡаршыларында ҡара бөҙрә сәсле, ҙур ҡара күҙле, ун йәштәр самаһындағы малай баҫып тора. Славикка, тфү, Йося-Йосифҡа оҡшап тора, әммә йәһүд нәҫеленә нығыраҡ тартҡан, буғай.

– Таныш булығыҙ, ейәнем Алон, – тине ир. – Миңә һуйған да ҡаплаған, тиҙәр, шулаймы?! Олатай, өләсәй тип әйттермәй ҡатыным. Ғәфү итегеҙ, мин хәҙер кире килермен, адресығыҙҙы, координаттарығыҙҙы әҙерләп ҡуйығыҙ әле, зинһар. – Ул, малайҙы етәкләп, залдың икенсе яғына йүнәлде. Бер аҙҙан артына боролоп, шаярҡан төҫлө: – Нисә һыйыр тотаһығыҙ, килгәс бәйнә-бәйнә һорашырмын, яраймы? – тине.

Санияның йөҙөнә ут ҡапты. Теге саҡта үҙе уның менән осрашмаҫҡа тырышып йөрөһә лә, Славик яғынан берәй аҙым булһа, бәлки, ирер ҙә ине. Ирер ине. Тик ул да ҡыҙҙы күрмәмеш булып ҡыланды. Һиҙенгәйне һаҡһыҙ һүҙҙәрен Мәрйәм алып барып еткергәнен, һиҙенгәйне… Ә, бәлки, яҡшыға булғандыр. Шулайҙыр. Сәлмәндән – Славик, шунан Йося-Йосиф булып, тиреһен ҡырҡ төләтер кеше менән ғүмер итә алыр инеме икән ул?

Буш хыялдарға арбалыу арҡаһында сәғәҙәтле миҙгелдәренең ҡәҙерен белмәй, ҡәнәғәтһеҙ булып, үҙ бәхетен үҙе кәметеп йәшәгән нисәмә йылдар буйы! Ире эштән ҡайтып ингәндә: “Атай, мин һине үлеп һағындым, мин һине үлеп яратам”, – тип балалары уға һарыла торғайны. Сабыйҙарының – йәненең, тәненең дауамдарының – мөхәббәте икән, тимәк, уның үҙенеке лә булған бит! Аңлай белмәгән, баһалай белмәгән.

…Самолетҡа үткәрә башлауҙарын иғлан итеү менән, адресын яҙып, телефон номерын сыймаҡларға тотонған еренән ҡағыҙын йыртып ташлап, Сания алға уҡ барып баҫты. Турникет аша уҙғас, ул шулай ҙа артҡа әйләнеп ҡараны – теге остан килгән ағымда ул ап-аҡ күлдәкле, ҡуйы ҡара бөҙрә сәсле егетте шәйләне:

– Славик!

Күкрәгенән сыҡҡан һағышлы ауазды йөрәгенә йомдо ҡатын.

Егет янында ауыр кәүҙәле, ялтас башлы ир ашығып атлай, ҡарашы бая ғына Сания ултырған эскәмйә яғында. Ҡасандыр төштәрендә илатып уятҡан буйсан, ҡара бөҙрә сәсле сибәр егет менән һис уртаҡлығы юҡ бит быныӊ! Хатта исемендә лә.

– Бәхил бул, Славик, – тине Сания эстән генә һәм аэропорт бинаһын осҡос менән тоташтырған “еӊ” эсенә шәп-шәп атлап инеп китте. Үҙенә тәғәйен урындыҡҡа урынлашҡанда яңылыш пакет эсендәге һәүкәштең кнопкаһына ҡағылды, шәт уныһы мөӊрәп тауыш бирҙе. Сания уйынсыҡты сығарып, ҡуйынына ҡыҫты ла көлөп ебәрҙе...



**Мөхәммәт**
**ЗАКИРОВ**

# МАТУРЛЫҒЫҢ МЕНӘН ҺИН МӘҢГЕЛЕК...

## *Ҡыштарҙың да...*

*Ҡыштарҙың да матур саҡы була:*
*Епшек ҡары ла юҡ, һалҡын да.*
*Көмөш балыҡ тәңкәһеләй, күктә*
*Һирәк ынйы ҡарҙар талпына.*

*Күктәр зәңгәр. Февраль ҡояшында*
*Ап-аҡ ҡала. Нindәй иртәләр!*
*Аҡ ҡарҙарға ятып аунар инем,*
*Иҫерек тип алып китерҙәр.*

*Аҡ тынлыҡта машиналар йөҙә.*
*Ҡараш һалам уҙған-барғанға.*
*Туҡталышта ҡыҙҙар көлгән ауаз*
*Сыңлағандай ынйы ҡарҙарға.*

*Ҡайтмаҫ кеүек еңел-елпе хистәр,*
*Мәғәнәһеҙ ҡупшы шау-шыуҙар.*
*Киләсәккә, бәлки, көс туплайҙыр*
*Әлегә тынып торған ярһыуҙар.*

*Йомшаҡ көрттәр, гүйә, — тырмаһыҙ ҙа*
*Өйөп ҡуйған ап-аҡ күбәләр.*

---

*Мөхәммәт Закиров (1950) Ҡариҙел районының Дәүләт ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай, телерадиокомитетта, „Ҡыҙыл таң“ гәзите редакцияһында эшләй. РФ һәм БР Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Рәсәйҙә быйылғы ҡыш ҡарын*
*Күтәрәлмәй хатта түбәләр.*

*Ишелә тора. Саҡ салынып күҙгә,*
*Елбәҙәк ҡар уйнай ҡояшта.*
*Түбә ишелеү түгел, ауырлығын*
*Керпектәрең мөмкин тоймаҫҡа.*

*Әй, аҡ миҙгел. Күңел азат миҙгел:*
*Йәшәү насип — бәхете барҙарға.*
*Тәү күргәндәй ҡарап торам бына*
*Аҡ ҡышыма, ынйы ҡарҙарға.*

## Матурлығың менән һин мәңгелек

**Айгөлгә**

*Китһәм, һине юғалтырмын кеүек:*
*Әллә ышанмайһың, ысын бына.*
*Ә сәстәрең иңдәреңә нисек*
*Шундай наҙлы булып һибелә.*

*Ни әйтерһең, иңдәреңә ҡулым*
*Һуҙып, иркәләһәм шуларҙы.*
*Мин шул матурлығың әсирендә,*
*Ә әсирҙең бәйле ҡулдары.*

*Матурлығың наҙлай мине. Ерҙе*
*Күмгәндәй яҙ сәскә наҙына.*
*Китһәм, һине юғалтырмын кеүек,*
*Ҡалайымсы бында аҙ ғына.*

*Әллә ни һөйләйем. Көлгән булам,*
*Эҙләгәндәй сәбәп китмәҫкә.*
*Матурлыҡҡа шулай табынып та,*
*Мөмкин икән бер ни көтмәҫкә.*

*Белһәң ине, ниңә шулай серле —*
*Ҡараштарың бағалар көлөп.*
*Мин гонаһлы бер йән. Һин шул, һин шул*
*Матурлығың менән мәңгелек.*

## Ул ҡайтауаз

*Ауыҙлыҡлай бер мәл ваҡыт*
*Хатта мөхәббәтте.*
*Ҡуралағы ҡарт ат һымаҡ*
*Дарманы юҡ, дәрте.*

*Дәрт — йәш айғыр,*
*Ҡушаяҡлап*
*Ватты ҡураларҙы!..*
*Улмы мөхәббәтен даулап*
*Йыһан ураманы.*

*Үрһәләнде. Йәшен-ҡамсы*
*Эләктеме тайға?*
*Тояҡ эҙе ярылып ҡалды*
*Ағарынған айҙа.*

*Кешнәүен парлы сыҡтарҙың*
*Күкһел офоҡ йотто.*
*Ҡайтманы ул ҡайтауаз —*
*Күк*
*Төпһөҙ булып сыҡты.*

*Мәңгелек башланған миҙгел —*
*Етте ғүмер сиге.*
*Ҡайталмаған ул ҡайтауаз*
*Минең ғүмер ине.*

## ***Ник көтмәнең?***

*Донъя гиҙеп, ҡыҙыҡ эҙләп йөрөгән*
*Ҡарт бер турист һымаҡ, эш юҡтан,*
*Тыуған ауылымда йөрөп ятам*
*Фотоаппарат асып, шортиктан.*

*Ҡыҫҡа ине ыштан малай саҡта.*
*Әле лә шул. Мин дә шул һаман.*
*Күңел һаман — малай... Әйтерһең дә,*
*Ғүмер тигән юлды уҙмаған.*

*Сабый саҡтар сирәмenә баҫам,*
*Атлау көскә — ҡорһаҡ тау ҡәҙәр.*
*Ҡарттар үлеп бөткән. Әй, барыбер*
*Танымаҫтар ине, күрһәләр.*

*Нигеҙҙәрҙе алабута баҫҡан,*
*Кәртә-ҡураларҙы — кесерткән.*
*Һирәк ҡалған өйҙәр, мине көтөп,*
*Нисәмә йыл оҙон ҡыш сыҡҡан.*

*„Ҡайттым“ тиеп шатланып та булмай,*
*Күҙ йәштәрен түгеп илап та.*
*Урамында баҫып торған ауылым*
*Хәҙер минән ниндәй алыҫта.*

*Тыуған нигеҙҙә лә яттар ҡорған*
*Ишле ғаилә торған йорт-ҡура.*
*Ул ғаилә лә, ахыры, ташлап киткән —*
*Тап-таҙа йорт — ҡура буш тора.*

*Ҡаҡ түпһаңа иҫерек башты һалып,*
*Ҡаҡ иҙәндә аунап ятмалы, —*
*Әй, тыуған йорт, ҡайҙа һин олаҡтың?*
*Ник көтмәнең минең ҡайтҡанды?*

*Тыуған нигеҙҙәге буш, ят йортто,*
*Нимә типтер, төшөрәм фотоға.*
*Иҫем китмәгәндәй китеп барҙым:*
*Башҡа миңә бында ни ҡала?*

*Донъя гиҙеп, ҡыҙыҡ эҙләп йөргән*
*Ҡарт бер турист һымаҡ, эш юҡтан,*
*Тыуған ауылымда йөрөп ятам*
*Фотоаппарат аҫып, шортиктан.*

***

*Быуат баштарында — китғаларҙы*
*Дер һелкеткән тетрәү, зилзилә.*
*Пушкин, Туҡайҙарҙың балҡыуы ла*
*Быуат баштарына тап килә.*

*Булмаҫ инем үткәндәрҙе данлап,*
*Күрер күрәсәктән ҡурҡыусы:*
*Быуат башы. Пушкин тыуыу ҡайҙа —*
*Һирәк Пушкиндарҙы уҡыусы.*

*Булмағандай, эҙһеҙ юғалырмын,*
*О, ул бәхет миңә эләкмәҫ.*
*Тыуыр яңы Пушкин — тиңһеҙ даһи,*
*Бер кемгә лә ләкин кәрәкмәҫ.*

***

*Рәсәй тигән илдә бизмән*
*Бигерәк тигеҙ тарта:*
*Олигарх арта, тиһең,*
*Фәҡир халыҡ та арта.*

## *Һөйөү тураһында баллада*

**Рәфҡәт Юнысовҡа**

*Ҡыҙ егеткә үлеп ғашиҡ ине*
*Шашып һөйөр йәшкә еткәндә.*
*„Яратмайым. Мине көтмә“, — тине*
*Егет армияға киткәндә.*

*Ҡыҙ нишләһен? „Көтмә“, — тип торғанда*
*Нисек көтһөн уны ут йотоп?!*
*Армиянан һалдат ҡайтып төштө,*
*Ауыл урамдарын балҡытып.*

*Егет ҡайтҡан өйҙөң тупһаһында*
*Ултырып ҡыҙ картуф әрсей ине.*
*„Мине яратмаған булған инең,*
*Барыбер ағайыңа сыҡтым“, — тине.*

***

*Шағирҙарҙың — бөйөк яҙмыштары:*
*Балҡыштары, хәсрәт, яңылыштары.*
*Аҙ йәшәп тә, һүнгәндән һуң, йыры менән*
*Быуаттарҙы ярып барыштары.*
*Йырҙарында данға күмгән халыҡтары*
*Шағирҙарын*
*Алла итеп күрәсәк.*
*Унан — үлтерәсәк,*
*Унан —*
*Илап күмәсәк.*

## Ят киләсәк

*Һеҙҙе яҡшы аңлайым: автобусҡа,*
*Трамвайға ауыр менгәндәр.*
*Ҡайҙа ҡалды бер нәмәһеҙ килеш,*
*Бер ҡайғыһыҙ рәхәт көлгәндәр?..*

*Күңелдәге өмөт тигән гөлдө*
*Ят киләсәк дауылы иҙҙе.*
*Ғүмерҙәргә йыраҡ Римдән ҡалған*
*Ҡоллоҡ бығауҙарын кейҙерҙе.*

*Кемлегемде ҡайҙан белмәк кәрәк, —*
*Үҙ илемдә, тимен, йәшәйемме?*
*Декабрҙең ҡарлы еле һөртә*
*Керпегемдә туңған йәшемде.*

***

*Ниндәй буш һин, мин ятаһы урын,*
*Һин — кисәге, шул уҡ юғиһә.*
*Хыял үҙе ирешалмаҫ хатта,*
*О, бәхетле инем мин кисә.*

*Ул бәхетте үлсәр үлсәүҙәр юҡ:*
*Булмай уны, булмай ҡабатлап.*
*Ер күсәрен кире әйләндерәм —*
*Һин, кисәге таңым, ҡабат ат.*

*Был донъяла һөйөү генә мәңге:*
*Ялған, алдау — унан ҡалғаны.*
*Миңә ҡайтар һин, кисәге таңым,*
*Мөхәббәттә дөрләп янғанды.*

*Татлы вулкан булып халәтемдә*
*Ҡайтмаç йәшлек ҡабат ҡабынһын.*
*Наҙ һарҡылған аҡҡош беләгеңде*
*Иңдәремә, бәғерем, һалырһың.*

*Асылы түгелме ни йәшәйештең*
*Шулай беҙҙең һүҙһеҙ аңлашыу.*
*Уға бит ят яһалмалыҡ, ялған,*
*Уға бит ят алдау, алдашыу.*

*Тиңһеҙ көстәр тойоп күкрәгемдә,*
*Яҙғы тәбиғәттәй яңырам.*
*Күпме хәсрәт һәм фажиғә аша*
*Был донъяға ҡабат яралам.*

*...Ниндәй буш һин, мин ятаһы урын, —*
*Мәңге атмаç кеүек яҡты таңым.*
*Ятыуыма, гүйә, көтөп тора*
*Үкенеүҙәр, хәсрәт, һағыштарым.*

## ***Тост***

**Мәүлиҙәгә**

*Мин тост әйттем ҡыҙым тыуған көндә,*
*Ул тост иç китерлек шәп сыҡты.*
*Әллә хистәр, әллә ташты шарап —*
*Хәтерләтеп таңғы ысыҡты.*

*Йәш егеттәр, ҡыҙҙар... Улар менән*
*Йәшәрҙемме, тамам ысҡындым.*
*Булғас булһын типме, мин тосыма*
*Пушкинды уҡ килтереп ҡыçтырҙым.*

*... Ә тышта көҙ. Дымлы, елле кистә*
*Ҡоя ағас һуңғы япрағын.*
*Йәшлек табынында беҙ икәүбеҙ:*
*Мин һәм йәнәшәмдә тын ханым.*

*Ҡайҙан белһен ханым Пушкин ғына*
*Аңлаталыр минең хистәрҙе?*
*...Гәрсә ҡыҙҙы яңғыҙ ул үçтергән*
*Һәм ул әҙерләгән өçтәлде.*



**Зөфәр**
**ВӘЛИТ**

## *Рәсәйҙә генә түгел...*

Страну украли. И потерян след.
До послезавтра доживем едва ли...
**Сергей Соколкин.**

*Рәсәй генә түгел, донъя яна,*
*Күп илдәрҙе баҫа һыу-туфан...*
*Һыуҙан ҡала, уттан ҡалмай, тиҙәр,*
*Беҙ ҡалырбыҙ иҫән, ут булһаҡ.*

*Ярҙарынан сыға алһыу таңдар*
*Һуғарырға моңһоу йәндәрҙе...*
*Олигархтар кеҫә ҡалынайта,*
*Файҙаланып ауыр мәлдәрҙе.*

*Ни булһа ла, улар астан үлмәҫ,*
*Уларға бит яйы табыла,*
*Беҙ күрмәҫтәй миллиард-миллиард доллар*
*Улар кеҫәһенә ағыла.*

*Эте лә, бете лә ришүәтле,*
*Тик ришүәт йыуа ҡулдарҙы...*
*Сталин заманында йә атырҙар,*
*Йә аҫырҙар ине уларҙы.*

*Зөфәр Вәлит (1949) Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуған. Мораҡ ауыл хужалығы училищеһын, Өфө урман хужалығы техникумын тамамлап, халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарында эшләй. Байтаҡ шиғри китаптар авторы, Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Был заманда хәҙер тыныслыҡтың*
*Булырына хатта өмөт юҡ.*
*Миллиондар араһында, ыстрам,*
*Илгә хужа булыр Егет юҡ!*

*Ер генәме, хатта тел һатыла,*
*Заманалар хәтәр боларҙы...*
*Сталин заманында йә атырҙар,*
*Йә аҫырҙар ине уларҙы.*

## Бисмиллалы ғүмер

*Йәшендәрҙе ауыҙлыҡлап,*
*Ләйсән булып яуҙылар.*
*Ҡырауҙарҙан һыуылғанда*
*Яҙҙы маҡтап яҙҙылар...*
*Һыуыштан һуң тыуған быуын*
*Үҫте эшкә егелеп.*
*Ҡорос кеҫәк сыныҡтылар,*
*Төшмәнеләр бөгөлөп.*
*Әҙәпле лә булды улар,*
*Иманлы ла булдылар,*
*Ҡиләсәккә ышандылар,*
*Доғаһын да ҡылдылар.*
*Аслы-туҡлы булғанда ла,*
*Булманылар тиҫкәре.*
*Бөгөн дә тырыш йәндәрҙең*
*Бисмиллалы эштәре...*

## Көҙгө алдында

*Көҙгөләр ҙә алдай беләме икән:*
*Миңә ҡарай моңло бер бабай,*
*Бер ҡараһаң, бик һынамсыл үҙе,*
*Бер ҡараһаң, үҙе бик ябай.*

*Ҡарашында уның уҫаллыҡ юҡ,*
*Уҫалланып ҡайҙа бараһың!*
*Ул ҡараштар, белмәйһеңме, тиҙәр,*
*Йәшәреүҙең берәй сараһын?*

*Нишләп белмәйем, ти, беләм, тимен,*
*Йәш булғанда һинең күңелең,*
*Үлгәнсегә тиклем беләсәкһең*
*Олоғайыу ҡартлыҡ түгелен!*

*Күҙгөләр ҙә алдай белә икән,*
*Әйтте миңә кинәт шул бабай:*
*Күңел һөйөү талап итә әле,*
*Мөхәббәтле булайыҡ, давай!*

## *Яңы яҙҙарға саҡлы*

**Миңлебай Вәлитовҡа**

*Күпме мине саҡырҙың һин:*
*„Бөтөнләйгә ҡайт!“— тиеп.*
*Ә мин ҡайттым ауыр саҡта,*
*Һиңә башымды эйеп,*
*Унан тағы сығып киттем,*
*Яраларым уңалғас...*
*Тутыҡ күҙҙәр һалҡынлығы*
*Йөрәгемә уралғас,*
*Йәнә ҡайтып башты эйҙем*
*Һыуһыҙ ҡалған дөйәләй.*
*Әсәкәйем йөрәгемә*
*Бәйләп бирҙе бейәләй...*
*Сығып киттем, шунан бирле*
*Саҡырмайһың „Ҡайт!“ тиеп.*
*Хәл белергә генә ҡайтам,*
*Нисәнсегә баш эйеп?..*
*Мин һинеке, Күгәрсенем,*
*Башым-тояғым менән.*
*„Тағы ҡасан ҡайтаһың?“ — тип*
*Һорамаһаңсы минән.*
*„Бер ҡайтырһың китмәҫкә!“ — тип*
*Әйтеүҙәрең бик хаҡлы...*
*Хуш, минең Күгәрсенкәйем,*
*Яңы яҙҙарға саҡлы.*

## *Сирләгәндә*

*Маңлайымды терәп быялаға*
*Күҙ төшөрәм күҙгө баҡсаға.*
*Был һаулыҡты бер нисек тә һатып*
*Алып булмай икән аҡсаға.*

*Уны хатта хәстәханалар ҙа,*
*Дауаханалар ҙа яңыртмай...*
*Рухым йәшәй әле дуҫ-иштәрҙе,*
*Туғандарҙы һис тә ҡаңғыртмай.*

*Япраҡтарҙы өҙгән көҙгө елде*
*Мәхрүм итеп булмай иркенән.*
*Мин көнләшәм япраҡ араһынан*
*Алма йыйып йөрөгән терпенән...*

*Йыш сирләйем хәҙер, ә шулай ҙа*
*Тере булыуыма ҡыуанам.*
*Ҡарабаш турғайын күргән һайын:*
*„Йәнем оса!“— тиеп йыуанам...*

## Власть ғүмере

*Етмеш биштә донъя ҡуйҙы*
*Ғәййәр совет власы.*
*Хәҙер беҙҙе сирек быуат*
*„Демократтар“ һауасы.*

*Быныһының ҡырҡҡа ла*
*Етеүҙәре икеле, —*
*Рухы ла юҡ, намыҫы ла,*
*Наркомандар шикелле...*

*Фашистарҙы дөмөктөргәс,*
*Бары ун йыл эсендә*
*Илде аяҡҡа баҫтырҙы*
*Совет власы, иҫемдә...*

*Иҫемдә, ғаләмде яулап,*
*Донъяны таң ҡалдырҙы,*
*Дошмандарҙың ҡара уйлы*
*Хыялдарын яндырҙы.*

*Совет власы бер аҙым да*
*Ел ыңғайы күсмәне.*
*Алға барҙы, маҡсатына*
*Тик ышаныс өҫтәне...*

*Уны илдә ҡуйырыусы*
*Битарафлыҡ бөтөрҙө,*
*Ил башлығы „Бөкөрө“нөң*
*Хыянаты үлтерҙе.*

*Әҙәм йәшенән уҙмай микән*
*Һәр властың ғүмере?*
*Бынығының, илде талап,*
*Сығыр, ахыры, көмөрө...*

*Һәр властың үҙ ожмахы,*
*Үҙ тамуғы булалыр.*
*Тик тамуҡта үкенестең*
*Иң һуңғыһы тыуалыр...*

## Берләшәйек...

*Күңелдәге моңло эҙләнеүҙәр*
*Тулҡынлана, телдә тулғана.*
*Ә донъялар уға ҡарап тынмай,*
*Тулҡынланған һайын болғана.*
*Тик уңғандар ғына был донъяла*
*Тыныслыҡ һәм һиллек тоялыр.*
*Изгелеккә ынтылғандар ғына*
*Изгелеккә һәйкәл ҡоялыр.*
*Офоҡтарҙың зәңгәрлеге күсә*
*Тырышҡандың күңел күгенә.*
*Тормоштағы ҡара болоттар ҙа*
*Ваҡытлыса булып күренә.*
*Йә, нимә һуң ҡамасаулай беҙгә*
*Изгелектең тәмен тойорға?*
*Беҙ — кешеләр, йыртҡыс түгел даһа*
*Яҡындарҙың йәнен ҡыйырға!..*
*Берләшәйек, гөрләшәйек бергә,*
*Яуызлыҡҡа урын булмаһын,*
*Ул — хәшәрәт, беҙгә көсө етмәй,*
*Йәһәннәмдә телен болғаһын!*

## Булдыралһаң...

*Ҡосағыма алыр инем,*
*Арала намыҫ тора.*
*Минең нимә уйлағанды,*
*Теләһәң, унан һора.*

*Мине ул күп хаталарҙан*
*Аралап алып ҡалды.*
*Түҙемһеҙлек кенә бик йыш*
*Уттарға илтеп һалды.*

*Аралаъы шул намыцты*
*Ҡыуа алмай телем дә.*
*Шуъа йөрәк утта яна*
*Олоъайъан көнөмдә.*

*Теләктәр бер булъанын да*
*Һиҙәм, һөйөц бик кәрәк!*
*Булдыралһаң, шул намыцты*
*Ҡыуып ебәр ситкәрәк...*

## Бцреләрем менән...

*Бәхетлеләр шиъыр яҙмай, тиҙәр,*
*Шиъыр яҙам иркен һуларъа...*
*Өстәп Хоҙай ҡырыҫ яҙмыш биргән*
*Бцре булып ъорур оларъа.*

*Бцреләр бит кцккә црелеп йәшәй,*
*Мин донъяла шулай йәшәйем.*
*Аъас кецек кцккә црелеп цҫ, тип*
*Әйтә ине миңә Әсәйем.*

*Ергә тамыр йәйеп, кцккә црелеп*
*Йәшәцҙәргә илдә ни етә!*
*Тамыр йәймәгәнде яҙмыш цҙе*
*Һыуъа һала, утта бейетә.*

*Мин дә бейенем тормош уттарында,*
*Һыуҙарына сумдым — батманым...*
*Сит ерҙәргә китеп олаҡманым,*
*Бцреләрем хәтерен һаҡланым.*

*Мин уларҙан башҡа йәшәмәнем,*
*Йәшәмәм дә — ъцмерем бар саҡта!*
*Улар менән, теге донъяла ла,*
*Урыным булыр минең тцр яҡта.*

---



**Әхәт**
**НИҒМӘТУЛЛИН**

# «ЮҠ, ӘЙЛӘНЕП ҠАЙТМАҪ ИНДЕ...»

## *Дөрөҫлөк – ялғанлыҡ*

*Дөрөҫлөк ул – идеалда,*
*Эштә лә бар,*
*Ишараһы – һаташыуҙа,*
*Төштә лә бар.*

*Өҙөлөп һөйһәң, «һөйәм» тип*
*Әйтеүҙә бар,*
*Кемдәрҙелер үҙ артыңдан*
*Әйҙәүҙә бар.*

*Сын күңелдән илай белһәң,*
*Илауҙа бар,*
*Асыу килгәндә борсолоп*
*Тулауҙа бар.*

*Ялғанлыҡтың иң ҙурыһы –*
*Алдау үҙе,*
*Алдашыуҙа ҡатып ҡалған*
*Иблис йөҙө.*

---

*Әхәт Ниғмәтуллин (1921) Ырымбур өлкәһе Үтәй ауылынан. Өфө театр училищеһында уҡый, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Ҡазан университетын тамамлай. БДУ, БДПУ-ла уҡыта. Монографик тикшеренеүҙәре Мәжит Ғафури, Шәриф Камал ижадына арналған. Филология фәндәре докторы, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ.*

*Алдаҡсылар алдамайса*
*Тора алмай;*
*Ә шулай ҙа изге тормош*
*Ҡора алмай.*

*Үҙ һүҙенә хужа булыу*
*Кемдә етмәй —*
*Шуның барыбер дөрөҫлөккә*
*Теше үтмәй.*

*Кем алдауға йәнен һата,*
*Тәнен һата,—*
*Тормош уны юл ситенә*
*Алып ата.*

## Баҙар

*Баҙар — тормоштоң иҡтисад*
*Һәм сәйәсәт үҙәге.*
*Ләкин дә әхлаҡи яҡтан*
*Тиҙ үҙгәрә бизмәне.*

*Сөнки бизмән — иман түгел,*
*Нәфселектә тартыша;*
*Ә нәфселек йыш ысҡына —*
*Алдашыуға тоташа.*

*Баҙар шулай: кемдер алдай,*
*Ә меңләгән алдана,*
*Кемдер илай, кемдер көлә —*
*Бөтә нәмә булғана.*

*Бында хатта кеше — әйбер,*
*Ә әйбер, — гүйә, кеше.*
*Хатта кемдер намыҫ һата,*
*Юҡ кемдә кемдең эше.*

## Донъя ул...

*Фани донъяны кем тиһең —*
*Һин, ул, һеҙ, беҙ, мин бит ул;*
*Елдәр сыҡһа, дауыллана,*
*Ел юҡта имен бит ул.*

*Донъя бит ул — әлләниҙәр,*
*Ҡояш, йондоҙ, ай бит ул;*
*Бер ҡараһаң, ярлы кеүек,*
*Бер ҡараһаң, бай бит ул.*

*Фани донъя — ер, һыу, һауа —*
*Йәшәргә дауа бит ул,*
*Афәт тә, шифа ла булып*
*Күктәрҙән яуа бит ул.*

## *Мин*

*Мин — бер шәхес, йәмғиәттең*
*Тиң хоҡуҡлы ағзаһы,*
*«Бәхет» тигән усағым бар,*
*Бар уны ҡабыҙаһы.*

*Ҡояш бала саҡ ишеген*
*Киң итеп асҡан ине.*
*Ҡараңғылыҡ, ҡото осоп,*
*Упҡынға ҡасҡан ине.*

*Йәш сағымда шатлыҡтарым*
*Һыйманы ҡосағыма.*
*Хәҙер ҡайғы иңгә баҫты*
*Һәм асты ҡапсығын да.*

*Ҡайғыларым өлгөрләнде,*
*Шатлыҡты тапап уҙа.*
*Миңә тейешле шатлыҡтар*
*Туҙандар булып туҙа.*

*Ҡайғыларым Ҡаф тауылай,*
*Шатлыҡ бер төйөн генә.*
*Гүйә, йәшлектә йырлаған*
*Бер моңло көйөм генә.*

## *Һин*

*Һөйөнә лә беләһең һин,*
*Көйә лә беләһең һин;*
*Ҡатмарлы хәлгә, төшөнөп,*
*Күнә лә беләһең һин.*

*Тураһын ярып һалаһың,*
*Урата белмәйһең һин;*

*Дуҫ-иштәр таба беләһең,*
*Юғалта белмәйһең һин.*

*Яндыра ла беләһең һин,*
*Яна ла беләһең һин;*
*Һәр осраҡта пак зат булып*
*Ҡала ла беләһең һин.*

*Көттөрә лә беләһең һин,*
*Көтә лә беләһең һин;*
*Йөрәктең тәрән түренә*
*Үтә лә беләһең һин.*

*Һинең бик үҙенсәлекле*
*Көҙөң-ҡышың, яҙың да.*
*Кисә бураныңда тыуҙым,*
*Бөгөн янам ҡуҙыңда.*

## *«Юҡ» юҡмы, әллә бармы?*

*Барҙы «юҡ» тип әйтеп булмай,*
*Ә ниңә «юҡ» үҙе юҡ?*
*Күҙ алдына баҫтырырлыҡ*
*Ниңә «хаслыҡ» күҙе юҡ?*

*Ә бит булмаһа ла, уның*
*«Юҡ» тигән бер йөйө бар.*
*Шул «юҡ» тип аталған йөйҙөң*
*Ҡайҙалыр бер сөйө бар.*

*Гүйә, шул сөйҙөң ауазы —*
*Тел төбөндә өнө бар.*
*Ҡояшһыҙ-көнһөҙ йәшәүсе*
*Оҙон-оҙаҡ төнө бар.*

*Үҙе булмаһа ла, уның*
*«Юҡ-юҡ» тигән һүҙе бар:*
*Ана шул һүҙҙең ярлыла*
*Кибеп бөткән йөҙө бар...*

*Юҡлыҡ йөҙөләр инде,*
*Юҡлыҡ үҙелер инде.*

## *Ярлылар хәле*

*Донъя киң, һәр кем өсөн ул*
*Тигеҙ булып яралған.*
*Ә бәхетле тормош ҡороу*
*Яҙмыш тиеп ҡаралған.*

*Һәр кемдең ни кисереүе*
*Үҙенең һәләтендә,*
*Ә һәләт шарты йә ыңғай,*
*Йә кире ғәҙәтендә.*

*Һәләткә тиң эш табылһа,*
*Йәндә уй-хис ҡабына,*
*Кәрәк-яраҡты алырлыҡ*
*Аҡсаһы ла табыла.*

*Аҡсаң булмаһа, бер ни ҙә*
*Төҙөп йә һүтеп булмай,*
*Йәшәргә рухландырырлыҡ*
*Миҙгелгә үтеп булмай.*

*Донъя киң булғанға күрә*
*Үтеү ҡыйын түренә,*
*Үр донъяһы хыялға тиң —*
*Табыш булып күренә.*

*Аҡсалылар, баҫҡыс яһап,*
*Үрҙән үргә үрелә,*
*Ярлы, аҡсаһы юҡлыҡтан,*
*Ҡайғыларға күмелә.*

*Аҡсалы зат ҡулда тота*
*Нәфселе дилбегәһен.*
*Ярлы, аҡсалы эш өсөн,*
*Бөгә үҙ билгенәһен.*

*Эшсе ҡулы — эшсе көсө*
*Заводтар ҡора ала.*
*Хатта йылғаның ағымын*
*Төрлөсә бора ала.*

*Мәктәп, мәсет, клуб һала,*
*Ситтәрен биҙәй ала.*
*Емеректәрҙе торғоҙа,*
*Яңыны төҙөй ала.*

*Иген игә, бала ҡарай...*
*Күп нәмә эшләй ала.*
*Ләкин эш юҡ,*
*Эш табылмай.*
*Эшһеҙ ул нишләй ала?!*

## Ғүмер ағышы

*Әжәл аҙымы ғүмерҙең*
*Мөҙҙәтен һүтә кеүек.*
*Бер көн эсендә бер йыллыҡ*
*Көндәрем үтә  кеүек.*

*Ҡисә булып алған бер көн*
*Йыраҡта ҡалған кеүек.*
*Йылдың бер көндән ҡалғанын*
*Шул әжәл алған кеүек.*

*Юҡ, әйләнеп ҡайтмаҫ инде*
*Сәскәле ғүмер яҙы.*
*Күҙемә асыҡ күренмәй*
*Ҡисемдең дә аяҙы.*

*Был хистең башты бутауын*
*Аңланым йылдар үткәс,*
*Һушыма килдем яңыраҡ,*
*Иман маңлайға сирткәс.*

*Яҙмыштың илаһ ҡиблаһы*
*Иманлы булыу икән.*
*Иманлы булыу — тормошта*
*Дарманлы булыу икән.*

**Нәжиб АСАНБАЕВ**

# СЕЙӘЛЕТАУ

## Драма, ике бүлектә

**Ҡатнашалар:**

*Зөһрә*
*Аяз*
*Гөлнара*
*Бөрйән*
*Шәмсиә*
*Ансаф*
*Фатма*
*Хариза*
*Фридрих*

*Ваҡиғалар беҙҙең көндәрҙә Башҡортостандың Сейәлетау ауылында һәм Швейцарияның Цюрих ҡалаһында бара.*

### Беренсе бүлек

#### Беренсе картина

***Ауыл өйө ишек алды. Ҡапҡанан Аяз инә. Өйҙән Зөһрә сыға.***

**Аяз.** Зөһрә! Зөһрә!

**Зөһрә.** Аяз, һин ҡайҙа юғалдың, таңдан юлға сығаһым бар бит!

**Аяз.** Мин зыяратҡа әсәйемдең ҡәберенә сәскә һалырға барҙым. Алдағы яҙмышым хаҡында уның менән һөйләшкәндәй булдым, күп нәмәләрҙе уйҙан кисерҙем...

**Зөһрә.** Хәйерлегә булһын.

**Аяз.** Эйе, булыр тип ышанам, Зөһрә! Бында олатайым йорт һалған, шул йортта атайым донъяға килгән, ә фажиғәле вафат булғас, уны ошонан һуңғы юлға

---

*Нәжиб Асанбаев 1921 йылдың 7 ноябрендә Баҡалы районының Ахман ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, батырлыҡтары өсөн I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм миҙалдар менән награддана. „Ҡыҙыл таң“ гәзите редакцияһында, Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләй. Ижад юлын прозаик булараҡ башлай, 1947 йылда „Кәрим“ исемле хикәйәләр йыйынтығы баҫыла. Үткән быуаттың 50-се йылдарынан драматург булып танылa. „Беҙгә егеттәр килде“ комедияһы, „Рәйсә“, „Фәйзи“, „Ҡыҙыл паша“, „Әхмәтзәки Вәлиди Туған“ драмалары театр сәхнәләрендә уңышлы барҙы.*

*Нәжиб Асанбаев — Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БР һәм РФ-ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы. Өлкән ҡәләмдәшебеҙҙе олпат юбилейы менән ҡотлайбыҙ, иҫәнлек-һаулыҡ, ижади балҡыштар теләйбеҙ.*

оҙатҡандар. Әгәр мин ауылдан китһәм, ата-бабаларҙың нигеҙе бөтөнләй ҡороясаҡ бит... Мин ҡалырға хәл иттем.

**Зөһрә.** Һин ниңә әле шулай ебеп төштөң?

**Аяз.** Һин дә ҡал! Китмә!

**Зөһрә.** Мине был ауылда бер кем дә, бер нәмә лә тотоп ҡала алмаясаҡ!

**Аяз.** Ә мин?

**Зөһрә.** Һин дә бында ҡалмаҫһың! Оҙаҡҡа һуҙмай өйөңдө, һыйырыңды һатырһың да минең янға, ҡалаға, килерһең. Шулай һөйләшкәйнек бит...

**Аяз.** Һиңә бында бер нәмә лә йәл түгелме ни?

**Зөһрә.** Ә нимәне йәлләргә? Ошо бөтөп барған ауылдымы? Бөтә ир-ат эсә, бисәләре лә, иҫерешеп, ишек алдында аунап ята. Балаларын да ҡарамайҙар! Баҫыу-ҡырҙар, баҡсалар ҙа ташландыҡ хәлдә. Һин минең дә ошо һаҙлыҡҡа батыуымды теләйһеңме? Аяз, бында һиңә лә эш юҡ бит.

**Аяз.** Эшләгән кешегә эш табыла ул, Зөһрә. Икмәк бешереп, селек-һеперткә бәйләп, бумала эшләп һатырмын, ҡарт-ҡороға утын ташып, ғаилә ҡаҙнаһын байытырмын да һинең менән яҙмыштарыбыҙҙы бәйләп, балалар үҫтерербеҙ...

**Зөһрә.** Хоҙайым, ни һөйләйһең һин! Яҙмыштарыбыҙҙы бәйләп, имеш.

**Аяз.** Зөһрә! Бына мин балта оҫтаһы, быйма баҫыусы, туҡыусы, йылҡысы, умартасы була алмайыммы ни? Китмә, Зөһрә! Ҡалала һин һәләк буласаҡһың!

**Зөһрә.** Ни өсөн?

**Аяз.** Үткән йыл барып ҡайттыҡ бит инде. Унда һинең менән минән башҡа ла эшһеҙҙәр эт тубығынан! Ҡайҙа, кемдә йәшәрһең? Берәй дөйөм ятаҡтың ҡыҫыҡ, тынсыу бүлмәһенә эләкһәң ярай ҙа. Эш таба алмаһаң, унда ла индермәҫтәр... Пропискаһыҙ ярамай ҙа инде...

**Зөһрә.** Аяз! Ниңә әле һин миңә шундай ҡот оҫҡос яҙмыш юрайһың? Ниңә әле мин ул бәхет тигәндәренән мәхрүм булырға тейеш? Ошо сәскә кеүек ваҡытымда... Ун һигеҙ йәшемдә? Бына күрерһең! Күрерһең! Кистәрен уҡып, университеттарын да бөтөрмөн, дизайнер, топ-модель булып эшләрмен! Банктарын да яулап алырмын. Әллә мин менеджер булмаҫлыҡ ҡыҙмы? Һис юғында, тәржемәсе булып эшләрмен!..

**Аяз.** Эйе, һин немец телен яҡшы беләһең. Ә хәҙер бит донъяға инглиз теле хужа...

**Зөһрә.** Ауыҙ асып ҡалмам, инглизсәһен дә өйрәнермен!

**Аяз.** Ә ғаилә?

**Зөһрә.** Ғаилә? Ниндәй ғаилә?

**Аяз.** Ә ҡасан кейәүгә сығырға уйлайһың? Балалар үҫтерергә?

**Зөһрә.** Ҡасанмы? Һинең һаҡалың биленә еткәндә! Ярай, Аяз, хуш! Был, бәлки, беҙҙең һуңғы һөйләшеү булыр...

**Аяз.** Тотҡан ерҙән һындырырға ашыҡма, Зөһрә!

**Зөһрә.** Уҙған йыл һин, алтын миҙалың булғас, университетҡа инә алдың, ә мин конкурстан үтмәнем. Минең өсөн уҡыуыңды ташлап, кире ауылға ҡайтыуың төптө хата булды. Һиңә бер нәмәгә ҡарамай юл ярырға ине, һиңә тотоноп мин дә өҫкә ҡалҡыр инем. Ә һин минең итәгемә йәбештең, һәм беҙ бергә ҡоланыҡ!

**Аяз.** Зөһрә, былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡыҫҡырмайҙар!..

**Зөһрә.** Тимәк, миңә хәҙер үҙ көсөмә генә ышанырға ҡала! Әйҙә, йәшә шул шүрәлеләрең менән ҡытый-мытый уйнап!..

**Аяз.** Күпме аҡсаң бар?

**Зөһрә.** Унһы ниңә тағы? Әйтмәйем...

**Аяз.** Оҙон юлға аҙ аҡса менән сыҡмайҙар. Бигерәк тә ҡыҙҙарға ярамай...

**Зөһрә.** Аҡсам етерлек...

**Аяз.** Иш янына ҡуш булыр.

**Зөһрә.** Рәхмәт! Кәрәкмәй!

**Аяз.** Байығас түләрһең! Түләмәһәң дә иҫем китмәҫ.

**Зөһрә.** Нимә, мине һатып алмаҡсы булаһыңмы?

**Аяз.** Күрше ҡыҙына миһырбанлы булыу егеттәргә килешмәй, тиһеңме? Мә, ал, Зөһрә!

**Зөһрә**. Ырымламаныңмы һуң?

**Аяз.** Ырымланым! Ғүмере буйы Зөһрәнең кесәһенән аҡса өҙөлмәһен, тинем... Әммә донъялағы бар аҡсаның да бәхетеңә бер төрлө лә ҡатнашы булмауын теләйем, Зөһрә.

**Зөһрә.** Һин артыҡ аҡыллыһың шул, Аяз. Тик был донъяла аҡсаһыҙ ҙа йәшәп булмай бит... Рәхмәт һиңә.

***Өйҙән Гөлнара сыға.***

**Гөлнара.** Нимә эшләйһең һин? Ебемә!

**Зөһрә.** Әсәй! Аяз, ауылдан бер ҡайҙа ла китмәйем, ти...

**Гөлнара.** Хоҙай шулай ҡушҡандыр инде, ни хәл итмәк кәрәк... Әсәһенең ҡырҡын да үткәрмәгән бит әле. Йә, Алла! Бөтә донъяһы, өйөлөп, уның өҫтөндә ҡалды бит...

***Машина килеп туҡтаған тауыш. Урамда ят кеше пәйҙә була. Был – Бөрйән.***

**Бөрйән.** Әссәләмәғәләйкүм!

**Гөлнара.** Вәғәләйкүмәссәләм!

**Бөрйән.** Ҡапҡағыҙ асыҡ...

**Гөлнара.** Әйҙә, рәхим итегеҙ!

**Бөрйән** *(инеп)*. Рәхмәт! Был Ҡаһарманов Ишмулла Хәсән улы менән Таңһылыу Илшат ҡыҙы йортомо?

**Гөлнара.** Эйе. Ә мин уларҙың ҡыҙы Гөлнара булам. Атайым да, әсәйем дә мәрхүмдәр инде...

**Бөрйән.** Бик ҡыҙғаныс, әлбиттә!..

**Гөлнара.** Ә үҙегеҙ кем булаһығыҙ?

**Бөрйән.** Бөрйән булам мин. Бик алыҫтан килдем, Швейцариянан...

**Гөлнара.** Швейцариянан? Шунда башҡорттар бармы?

**Бөрйән.** Атайым Зиннәтулла Ишемйәров ошо ауылда тыуған...

**Гөлнара.** Зиннәтулла? Зиннәтулла ағаймы? Теге, һуғышта үлгән...

**Бөрйән.** Юҡ, һуғышта үлмәгән ул, немецтарҙа пленда булған, унан уларҙы Америка ғәскәрҙәре фашистар концлагерынан ҡотҡарып, үҙҙәре менән океан аша алып киткәндәр...

**Гөлнара.** Ярабби! Ул иҫәнме ни?

**Бөрйән.** Юҡ, атайым да вафат инде...

**Гөлнара.** Ятҡан тупрағы ҡайҙа?

**Бөрйән.** Швейцарияла. Америкала бер генә йыл йәшәгән ул, мин дә Швейцарияла тыуғанмын.

**Гөлнара.** Йә, Аллам! Йә, Аллам! Зиннәтулла Ишемйәров! Уны бит әсәйемдең иҫкә алмаған көнө булманы... Ҡыҙым, таныш Бөрйән ағайың менән!

**Зөһрә.** Зөһрә...

**Бөрйән.** Зөһрә!.. Үҙебеҙҙең мосолман ҡыҙҙарының исеме ҡалай матур! Хоҙай Тәғәлә һеҙҙе гүзәл итеп яратҡан, мин һеҙҙең бәхетле булыуығыҙҙы теләйем!

**Зөһрә.** Рәхмәт, Бөрйән ағай!

**Бөрйән.** Ә был егет...

**Гөлнара.** Күрше малайы ул... Аяз...

**Бөрйән.** Гөлнара ханым! Атайымдың нигеҙе һаҡланмаған. Мин, оҙаҡҡа түгел, һеҙҙә генә туҡталһам, рөхсәт булырмы?

**Гөлнара.** И, туғанҡайым! Нишләп рөхсәт булмаһын, ти инде!

***Аласыҡта сәй эсергә ултыралар.***

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, һеҙ ниндәй бәхетле, Швейцарияла йәшәйһегеҙ!

**Бөрйән.** Эйе, Швейцария – донъялағы иң матур илдәрҙең береһе! Әле бында килгәс ишеттем, Башҡортостанды икенсе Швейцария тип йөрөтәләр икән.

**Аяз**. Юҡ, мин килешә алмайым! Швейцария үҙ урынында, ә беҙҙең Башҡортостан – ожмах баҡсаһына тиң ил!

**Гөлнара.** Бөрйән, ә ниңә атайың Американан киткәс, тыуған иленә ҡайтмаған? Уны бит ата-әсәһе, бөтә туғандары ғүмер буйы тилмереп көттө!

**Бөрйән.** Гөлнара ханым! Уларҙың бит ҡайтҡан береһен тотоп атҡандар. Быны һеҙ яҡшы белергә тейеш. Атайым ҡырҡ йәшендә генә өйләнгән...

**Гөлнара.** Әсәйегеҙ иҫәнме әле?

**Бөрйән.** Юҡ. Улар бик аҙ торғандар.

Ҡытайҙа тыуып үҫкән мишәр ҡыҙы булған минең әсәйем, йәшләй ауырып вафат булған. Мин уны хатта хәтерләмәйем дә. Мине әсәйемдең һеңлеһе – Шәмсиә апайым тәрбиәләп үҫтерҙе. Атайымдың бәхете булманы... Ғүмер буйы алыҫтағы мөхәббәтен – Таңһылыу апайҙы һағынып йәшәгән кешенең ниндәй бәхете булһын, ти инде?!

**Гөлнара.** Бөрйән, сит илдә йәшәп тә, башҡортса матур һөйләшәһең!

**Бөрйән.** Атайым мине сәңгелдәктән үк башҡортса һөйләшергә өйрәткән. Йәшәүенең бөтә аҫыл мәғәнәһе лә ошо булғандыр, моғайын... Гөлнара ханым! Зөһрә! Аяз ҡустым! Ырыуҙаштар! Мин бында атайымдың изге васыятын үтәргә тип килдем. Ҡәберенә һалырға тип, уның тыуған төйәгенән бер ус тупраҡ алдым... Бынан ары атайымдың рухы кинәнер, Хоҙай Тәғәлә алдында ла йөҙөбөҙ яҡты булыр. Сәфәремдең тағы ла бер маҡсаты бар. Атайым ун һигеҙ йәшендә яратҡан ҡыҙына алтын беләҙек бүләк итергә хыялланған, әммә, һуғышҡа китеп барыуы сәбәпле, теләгең тормошҡа ашырырға Хоҙай насип итмәгән. Атайым, ошо йәшлек хыялын ғүмер буйы һаҡлап, үлер алдынан ғына: „Улым, Башҡортостаныма, Сейәлетауыма барып, Таңһылыуымды эҙләп тап һәм ошо алтын беләҙекте уның беләгенә кейҙер!“ – тине...

**Гөлнара.** Өнөммө был, төшөммө?

**Бөрйән.** Гөлнара ханым, тынысланығыҙ! Беҙҙе күктән әруахтар күҙәтә, яҡындарыбыҙҙың изге йәндәре... Атайым исеменән мин килдем, ә әсәйегеҙҙең төҫө – һеҙ! Атайымдың изге васыятын үтәп, ошо беләҙекте...

**Гөлнара.** Эй, Хоҙайым! Эй, Хоҙайым! *(Ҡулдарын йәшерә.)* Утыҙ йыл колхоз һыйырҙарын һауып... Алтын беләҙек ҡыҙыма булһын!

**Бөрйән.** Эйе, эйе... Зөһрә, кил әле, һылыуым! *(Беләҙек кейҙерә.)*

**Гөлнара.** Ҡалай матур! Иҫән булһа, эй һөйөнөр ине әсәйем! Йәшлеген иҫкә алыр ине... Бөрйән туғаным! Һин ысын кешеме ул: әллә күктән генә төштөңмө? Теге... кем әле, ҡыҙым? Инопланмы?

**Зөһрә.** Инопланетянин, әсәй...

**Гөлнара.** Эйе, эйе... Швейцариянан булһаң да, үҙебеҙҙең Зиннәтулла ағайҙың улы бит һин, бер яратайым әле үҙеңде, туғаным итеп! Ҡыҙым, кил, һин дә ҡосаҡла, рәхмәт әйт!

**Зөһрә.** Рәхмәт, Бөрйән ағай!

**Аяз.** Алтын булғас, бик ҡиммәттер инде ул?

**Бөрйән.** Ҡиммәт? Беҙҙә ундай һүҙ юҡ.

**Аяз.** Хаҡы барҙыр әле?

**Бөрйән.** Донъяла хаҡ ҡуйып булмай торған, хаҡтың үҙенән бик ҡиммәт булған нәмәләр ҙә бар: һөйөү, һағыныу, мәңгегә айырылышыу һәм бәхилләшеү. Ә киткәндәр тураһындағы иҫтәлек – беҙгә иң ҡәҙерлеһе... Бында минең үҙемдән дә бүләктәр бар ине. Швейцариянан килеп тә, һеҙгә сәғәт бүләк итмәһәм, гонаһ булыр.

**Гөлнара.** Улай ҙурлағас, рәхмәт инде. Мине һыйырҙарым танырмы икән?

**Аяз.** Таныр-таныр, һөтөн дә күберәк бирерҙәр!

**Бөрйән.** Бында тағы ла бар икән әле...

**Зөһрә.** О, сотовыйҙар!

**Аяз.** Нокиа... яңы марка... уны Швейцария түгел, ә финдар эшләгән...

**Гөлнара.** Бөрйән туғаным, һин бик бай кешеме әллә? Ниндәй кәсептә?

**Бөрйән.** Кибеттәр тотам.

**Гөлнара.** Кибеттәр? Шулай бик күпме ни?

**Бөрйән.** Күпме икән? Һанағаным юҡ... Эх, башҡорт иле! Башҡорт иле! Башҡортостан! Ниндәй хозур ерҙәр! Ә быларҙың ҡайһыһы Сейәлетау?

**Гөлнара.** Бәй, беҙ Сейәлетауҙың итәгендә ултырабыҙ инде! Урал тауҙары ошонан башлана. Аллаға шөкөр, алтын-көмөш өҫтөндә генә йәшәйбеҙ! Тимер рудаһы менән баҡыры ла күп,

тиҙәр. Ә мәрмәр таштар, ана, күренеп үк тора, ҡыҙылы ла, ағы ла аяҡ аҫтында ғына ята, үрел дә ал!

**Бөрйән.** Ә ниңә был тауҙарҙа бер йән эйәһе лә юҡ? Бөтә донъя тып-тын?

**Аяз.** Элек айыуҙар күп була торғайны, хәҙер бүреләр үрсене...

**Бөрйән.** Сейәлетауҙың хужаһы кем?

**Гөлнара.** Тауҙың хужаһы булмайҙыр ул. Ерҙе, ана, пай итеп бүлеп бирмәкселәр ҙә, беҙҙең ауыл халҡы бик үк ашығып бармай әле...

**Бөрйән.** Ә был күлдәр кемдеке?

**Гөлнара.** Әллә тағы...

**Бөрйән.** Балыҡсылыҡ кәсебе менән шөғөлләнмәйһегеҙме ни?

**Аяз.** Силәбенән килеп ҡармаҡ һалалар.

***Бөрйәндең кеҫә телефоны шылтырай.***

**Бөрйән.** Эйе... Шәмсиә апай, тыңлайым! Эйе, эйе, мин! Башҡортостанда! Бына атайымдың тыуған төйәгендә баҫып торам! Юҡ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Таңһылыу апайҙы дәфел ҡылғандар... Бына ҡыҙы Гөлнара һәм иҫ киткес һылыу ейәнсәре Зөһрә менән сәй эсеп ултырабыҙ. Зөһрәме? Йәш әле ул, йәш... Күп булһа ун һигеҙҙәлер. Уныһы тураһында ҡайтҡас! Ҡайтҡас, тим, Шәмсиә апай! Эйе... Нимә, ҡунаҡҡа? Әлбиттә! Әлбиттә! Хәбәр итермен, һау булып тор! Гөлнара ханым! Зөһрә һылыу! Һеҙҙе Швейцария тигән ил ҡунаҡҡа саҡыра!

**Зөһрә.** Ой, әсәй!..

**Гөлнара.** Кем саҡыра тиһең, Бөрйән туғаным?

**Бөрйән.** Бына мин саҡырам!

**Зөһрә.** Әсәй! Барабыҙ! Барабыҙ!

**Гөлнара.** Туҡта әле! Ҡапылғара... Ә һыйырҙы нимә эшләтәбеҙ?

**Аяз.** Ниңә, һыйырҙы ла алып бараһығыҙ инде...

**Зөһрә.** Әсәй! Был бит – ҙур бәхет! Швейцария! Ура!

**Бөрйән.** Зөһрә һылыуым! Сейәлетау буйҙарынан урап килмәйбеҙме? Миңә атайым ғүмере буйы һөйләгән Һалҡын шишмәгеҙҙе күрһәтерһең...

**Гөлнара.** Бар, ҡыҙым, Бөрйән ағайыңды атаһының йәшлек эҙҙәренән йөрөтөп алып ҡайт!

**Зөһрә.** Әйҙә, киттек, Бөрйән ағай *(уны ҡултыҡлап ала)*.

***Зөһрә менән Бөрйән китә.***

**Аяз.** Гөлнара апай, Зөһрәне ебәрмә!

**Гөлнара.** Нимә?

**Аяз.** Унан ҡайтмаясаҡ ул!..

**Гөлнара.** Һин нимә һөйләйһең? Швейцария бит ул! Швейцария!

**Аяз.** Гөлнара апай, Зөһрә сит ил өсөн тыумаған!

**Гөлнара.** Һинең өсөн тыуғанмы? Ҡотортма! Мин уны эсеп, бөлөп бөткән ауыл өсөн үҫтермәнем! Ана, өйөрҙәре менән йөрөй йыйын эшкинмәгән! Ҡыҙым береһенә лә тәтемәйәсәк! Ана, станца янындағы кеүек кәтижең булһа, тағы бер хәл...

**Аяз.** Коттедж, Гөлнара апай!

**Гөлнара.** Өйрәтмә! Ҡыҙыл кирбестән һалынған икешәр-өсәр ҡатлы хан һарайҙары! Поле чудес тип йөрөтәләр...

**Аяз.** Ул йорттарҙы бит Себергә вахтаға йөрөгән нефтселәр һала.

**Гөлнара.** Нефтселәрме-түгелме, байҙар төҙөй!..

**Аяз.** Миңә бит әле ни бары ун һигеҙ йәш, Гөлнара апай!

**Гөлнара.** Зөһрәгә лә ун һигеҙ! Ана ҡара, бөтә ере йырлап тора! Ә һин...

**Аяз.** Булды, Гөлнара апай, етте!

**Гөлнара.** Атаҡ-атаҡ, харап икән...

## Икенсе картина

***Швейцария. Бөрйәндең йорто. Ҙур зал, аҫлы-өҫлө бүлмәләр. Һәр ҡайһыһында ҡиммәтле йыһаз. Бындағы зиннәт, алтын-көмөш, биҙәк-һүрәттәр иҫ китмәле. Унда ла, һулда ла – веранда. Тәҙрә шаршауҙары күтәрелгәндә, бүлмәләрҙең береһенән – бейек тауҙар, икенсеһенән зәп-зәңгәр һыу өҫтө күренә. Унда аҡҡоштар, яхталар төҫмөрләнә. Кеҫә телефоны***

*менән һөйләшә-һөйләшә Шәмсиә инә.*

**Шәмсиә.** Һин мине аңланыңмы? Ҡара уны, өҫтәл әҙерләү тулыһынса һинең өҫтә! Табын матур ҙа, бай ҙа булырға тейеш. Данке шон! Фатма!

**Фатма.** Бәңә өндәштегеҙме, остазбикә ҡанатым?

**Шәмсиә.** Оҙаҡламай ҡайтып инерҙәр, бер саң эҙе лә булмаһын!

**Фатма.** Бәне кейәүгә бир, остазбикә ҡанатым!

**Шәмсиә.** Нимә, дәртең таша башланымы? Сыҡ ана Ансафҡа!

**Фатма.** Юҡ, Ансафҡа сыҡмайым, ул бит ғәрип, бөкөрө...

**Шәмсиә.** Улайһа, Швейцария президентына сыҡ!

**Фатма.** Бик сығыр инем дә, ул бәне алмаҫ шул...

**Шәмсиә.** Алйот! Фәҡир һәм етем ҡыҙҙы кем кәләш итеп алһын!..

**Фатма.** Ә Ансаф бәне алырмы һуң?

**Шәмсиә.** Мин әйтһәм, алыр!

**Фатма.** И остазбикә ҡанатым *(уны ҡосаҡлай)*. Ә беҙҙең балаларыбыҙ ғәрип булып тыумаҫмы?

**Шәмсиә.** Ғаиләлә мөхәббәт булмаһа ғына ғәрип балалар тыуа, ә һин Ансафты бөтә йөрәгең менән ярат!

**Фатма.** Ярай, ярай, яратырмын!..

**Шәмсиә.** Ансаф – миллионер улы! Бай ирҙәр барыһы ла матур!

**Фатма.** Миллионер улы... Ә бөкрө булһа ни! Бәлки, бөтә ирҙәр ҙә бөкрөләр ул?

*Коляскала ултырған Ансаф инә.*

**Ансаф.** Ниңә миңә кофе килтермәнең?

**Фатма.** Ансаф, тәмле йоҡлай инең, уятырға ҡыйманым.

**Ансаф.** Ә ниңә үпмәнең?

**Фатма.** Остазбикә ҡанатым күреп ҡалһа...

**Ансаф.** Кил яныма!

**Фатма.** Оялам...

**Ансаф.** Кемгә әйтәләр! Ҡыҫып ҡосаҡла ла үп мине!

*Фатма үбә.*

**Ансаф.** Татлымы?

**Фатма.** Эйе...

**Ансаф.** Рәхмәт әйт!

**Фатма.** Ярай...

**Ансаф.** Рәхмәт әйт, тим!

**Фатма.** Рәхмәт, Ансаф!..

**Ансаф.** Бөгөн кис иртәрәк кил, һуңлама!..

**Фатма.** Ансаф! Көн дә, көн дә... Бән ҡурҡам... Юҡ, Ансаф, бән никахһыҙ...

**Ансаф.** Никах? Ниндәй никах ти ул Швейцарияла, Европала?

**Фатма.** Ә сән бәңә өйләнерһеңме һуң?

**Ансаф.** Ҡарарбыҙ... Үҙеңде нисек тоторһоң... Иртәнге кофе урынына кисен шарап килтерерһең.

**Фатма.** Эйе, килтерермен.

**Ансаф.** Мин көтәм... *(Сыға.)*

**Фатма.** Остазбикә ҡанатым! Хужа ҡайтып төштө, Бөрйән ағай ҡайтты.

**Шәмсиә** *(инеп)*. Ҡайттылар! Әйҙүк! Әйҙүк!

*Бөрйән менән Зөһрә инә.*

**Бөрйән.** Әссәләмәғәләйкүм, Шәмсиә апай!

**Шәмсиә.** Вәғәләйкүмәссәләм, Бөрйән улым! Беҙҙең ҡунаҡ ҡыҙыбыҙ ошо һылыуҡай буламы ни инде?

**Бөрйән.** Башҡортостанда хәҙер ҡыҙ балаларға өс төрлө генә исем ҡушалар икән: Айгөл, Гөлнара һәм... Зөһрә. Ә Зөһрәләр донъяла ни бары икәү генә, ти. Береһе – айҙа, ә...

**Зөһрә.** Ә икенсеһе бына мин!..

**Шәмсиә.** Ысын башҡорт ҡыҙҙарын тәү тапҡыр күреүем. Ҡалай һылыуһың! Ҡалай яҡты сырайлыһың! Йөҙкәйеңдә шәреҡ нуры, иңеңдә-буйыңда фәрештәләр һыны!.. Бөтә башҡорт ҡыҙҙары ла һинең кеүекме?

**Зөһрә.** Минең кеүек! Матурыраҡтары ла бар! Шәмсиә апай, әсәйем һеҙгә бүләк ебәргәйне... (*Сумаҙанынан башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемен алып бирә.)*

**Шәмсиә.** Ҡалай матур! Былай булғас, мине ханбикә тип кенә йөрөтөрһөгөҙ инде... Әсәйеңә лә минән бүләк булыр, Алла бирһә! Фатма, ҡунаҡты

бүлмәһенә оҙат! Зөһрә бәпкәм, иркенләп урынлашығыҙ. Унан сәй эсеп алырбыҙ!..

**Фатма.** Зөһрә ҡанатым, мин һеҙҙең ҡарамаҡта! *(Уны алып сығып китә.)*

**Шәмсиә.** Оҙаҡҡа килдеме?

**Бөрйән.** Швейцарияға бараһыңмы, тигәс, шундай ҡосаҡлап алды, йығылып китә яҙҙым...

**Шәмсиә.** Бөтә Рәсәй ҡыҙҙары ла сит илгә кейәүгә сығыу тураһында хыяллана икән, тип ишеткәйнем... Колхозмы?

**Бөрйән.** Шул инде...

**Шәмсиә.** Ул бахырҙарҙың һыйыр мөгөҙөнә эләрлек тә нәмәләре юҡтыр инде?

**Бөрйән.** Әйттең һүҙ! Улар беҙҙән байыраҡ!..

**Шәмсиә.** Кит, кеше ышанмаҫтайҙы...

**Бөрйән.** Ундағы тәбиғи байлыҡтар! Ундағы хазиналар! Урал бит ул! Ә күлдәре! Ә урмандары! Шәмсиә апай, нәҡ атайым һөйләгәнсә!

**Шәмсиә.** Ә хужаһы бармы һуң ул байлыҡтарҙың?

**Бөрйән.** Иллә һиҙгерһең дә инде, Шәмсиә апай!

**Шәмсиә.** Йә, һөйләп бөт!

**Бөрйән.** Ауыҙыңа бал да май...

**Шәмсиә.** Улай булғас, ҡыҙҙы ҡулдан ысҡындырмайбыҙ, Бөрйән! *(Сығалар.)*

***Зөһрә инә.***

**Зөһрә.** Швейцарияға килдеңме, Зөһрә? Килдем шул! Ни булһа ла булыр, хәҙер Швейцариянан китеү юҡ! Вәт ауылда һөйләрҙәр инде, Зөһрә Алтынбаева Швейцарияла йәшәй, тип! Һәм йәшәрмен дә! Эшен дә табырмын! Кейәүгә лә сығырмын! Ә Щвейцарияның үҙәгендә үҙемдең театрымды асып ебәрһәм? Бөрйән ағай берәй йорт алдына сәхнә ҡороп бирер ҙә, шул матур сәхнәлә милли кейемдәремдә кейеп бейермен, йырлармын... Халыҡ йыйылыр, бер-ике концертымды бушлай күрһәтермен, ә артабан... Байып алһам, бәлки, берәй ашхана ла асып ебәрермен. Башҡорт халҡының милли аштарын: бишбармаҡтарҙы, өлөштәрҙе, ҡаҙылыҡтарҙы, ҙур һәм ваҡ бәлештәрҙе ашарға йөҙәрләгән кеше сиратҡа баҫһа? Бына быныһы инде ысын Швейцарияның үҙе булыр! Ярҙамға әсәйемде лә саҡырып алһам, Зөһрә Алтынбаеваның кем икәнен Швейцария үҙе лә танyр! Танырһығыҙ! Танытырмын!

***Коляскала ултырған Ансаф инә.***

**Ансаф.** Гутен морген!

**Зөһрә.** Гутен морген!

**Ансаф.** Башҡортостандан килдегеҙме?

**Зөһрә.** Эйе... Ә һеҙ кем булаһығыҙ?

**Ансаф.** Мин – Швейцария! Мин — Европа!.. Әйҙә, танышайыҡ! *(Ҡулын һуҙа.)* Ансаф! Бөрйән атайҙың улы...

**Зөһрә.** Зөһрә Алтынбаева...

***Ансаф ҡулын ебәрмәй тора.***

**Зөһрә.** Һеҙ шундай көслө...

**Ансаф.** Эйе, мин көслө... Мин бит – Швейцария! Европа!..

***Зөһрә ҡулын тартып ала.***

**Ансаф.** Бында һеҙгә оҡшаймы?

**Зөһрә.** Иҫ китмәле!

**Ансаф.** Ана, зәңгәр күк! Һеҙгә бүләк итәм!

**Зөһрә.** Зәңгәр күктеме? Рәхмәт!

**Ансаф.** Ҡояшты ла һеҙгә бүләк итәм!

**Зөһрә.** Ҡара, һеҙ ниндәй йомарт!

***Фатма ҡаса-боҫа уларҙы күҙәтә.***

**Ансаф** *(тәҙрә янына саҡырып)*. Бында килегеҙ әле! Бынау баҡсала әлегә тиклем бер мең сәскә ине, һеҙ килгәс, уларҙың һаны ун тапҡырға артты!

**Зөһрә.** Шулайҙыр, шулайҙыр, уныһын мин үҙем дә тоям!..

**Ансаф.** Ә һеҙ миңә нимә бүләк итәһегеҙ?

**Зөһрә.** Минме? О, Ансаф! Айн момент!.. *(Сыға.)*

***Милли кейемдәрен кейеп Зөһрә инә. Бейергә тотона.***

**Зөһрә.** Ошо һеҙгә минең бүләгем булыр, Ансаф!..

**Ансаф.** Рәхмәт!..

**Зөһрә.** Шулай сәхнәгә сығып бейеһәм, Швейцария мине яратырмы?

**Ансаф.** Швейцария... Швейцария таң ҡалыр... Һеҙҙе ҡосаҡлар, һөйөр, аяҡтарығыҙҙан үбер... Һеҙ бит... Һеҙ бит... Зөһрә!

**Зөһрә.** Тыңлайым, Ансаф!

**Ансаф.** Беҙгә оҙаҡҡа килдегеҙме?

**Зөһрә.** Нисек ҡунаҡ итерһегеҙ бит?

**Ансаф.** Донъя буйлап сәйәхәт итергә теләйһегеҙме? Париж... Испания... Лондон... Ә Американан – Японияға!

**Зөһрә.** Матур хыял!..

**Ансаф.** Ниңә хыял? Мин ойоштором. Үҙем оҙатып йөрөрмөн.

**Зөһрә.** Ә һеҙ һуң был хәлегеҙҙә...

**Ансаф.** Нимә?

**Зөһрә.** Ни... Ансаф... Мине бит бында Бөрйән ағай алып килде...

**Ансаф.** Бөрйән атай теләгемә ҡаршы килә алмаҫ! *(Зөһрә сыға.)*

**Ансаф.** Өлөшөмә төшкән көмөшөм һиндер! Миңәме был фәрештә? Миңә! Әсәй! Бына ҡасан һинең ярҙамың кәрәк миңә! Капиталды ҡайтарайыҡ, әсәй! *(Телефондан шылтырата.)* Фридрих әфәнде! Был мин – Ансаф! Әсәйем менән миңә ҡағылышлы һеҙҙә һаҡланған документтарҙы эшкә егергә ваҡыт! Аңланығыҙмы? Гонорары? Йөҙ мең! Эйе, йөҙ мең! Ашыҡтырығыҙ, Фридрих ҡәҙерлем, бөтә мөмкинлектәрегеҙҙе ҡулланығыҙ, һеҙ бит адвокат! Минән – капитал, һеҙҙән – минең бәхетһеҙ әсәйемә азатлыҡ! Килештек! Бөрйән атай, сюрприз менән һеҙҙе! *(Зөһрә инә.)*

**Ансаф.** Бына һеҙгә капитал! Матур бейегәнегеҙ өсөн!

**Зөһрә.** Юҡ, алмайым! Рәхмәт!

**Ансаф.** Алырһың! Ваҡыты етер! *(Сыға.)*

***Фатма инә.***

**Фатма.** Зөһрә ҡанатым, бән уға кейәүгә сығайыммы? Бөкрө, ғәрип булһа ла, бәңә ярай ул. Сәнең кеүек сибәр булһам, әллә кемдәргә сығыр инем дә бит... Ул әллә ҡасан инде миңә тәҡдим яһаны. Сәңә ерәнгес булып күренәлер инде ул...

**Зөһрә.** Ниңә улай тиһең? Уның күҙҙәре матур...

**Фатма.** Әй Зөһрә ҡанатым, улай булғас, мин уны ҡулдан ысҡындырмайым инде! Йоҡларға ятҡас, мин уны ярата алырмын, ҡараңғыла бөкрө икәне күренмәй, шулай бит?

**Шәмсиә** *(инеп)*. Зөһрә бәпкәм, сәй әҙер булғансы, һиңә үҙебеҙҙең тормошто күрһәтәйем әле... Бына быныһы беҙҙең йәшел бүлмә инде. Һүрәттә – Истамбулдың йома мәсете. Ҡөрьән асыу, намаҙ уҡыу кеүек дини йолаларҙы ошонда атҡарабыҙ.

**Зөһрә.** Миңә оҡшай!..

**Шәмсиә.** Бына быныһы зәңгәр зал. Бөтә байрам мәжлестәре ошонда үтә. Ҙур ҡунаҡтар килгәндә табынды ошонда әҙерләйбеҙ. Быныһы инде киске шәфәҡ бүлмәһе...

**Зөһрә.** Матур!..

**Шәмсиә.** Ошонда ял итәбеҙ, музыка тыңлайбыҙ, кем бейей, кем йырлай. Быныһы беҙҙең аҡ бүлмә була инде. Аҡҡоштар, аҡ ҡайындар, аҡ шишмәләр. Балалар бүлмәһе булырға тейеш ине лә, тик бала һөйөү бәхете генә насип булманы беҙгә...

**Зөһрә.** Ниңә?

**Шәмсиә.** Ниңәме? Әйҙә, ана, беҙҙе сәй эсергә саҡыралар!..

***Сәй эсеү бүлмәһе:***
***Бөрйән, Зөһрә, Шәмсиә.***

**Бөрйән.** Йә, һылыу, беҙҙең Швейцария һиңә оҡшаймы?

**Зөһрә.** Әкиәт донъяһындай матур ил икән! Һеҙ ниндәй бәхетле! Минең өләсәйем дә ошонда йәшәргә тейеш булған да бит...

**Шәмсиә.** Ә һин – өләсәйеңдең дауамы! Бына уның өлөшөнә төшмәй ҡалған көмөштө үҙеңә ал да йәшә беҙҙә рәхәтләнеп... Бөрйән ағайыңдың атаһы ғүмер буйы „башҡортом, башҡортом“ тип тилмереп йәшәне. Улы ла

атаһының һыңары, „башҡортом“ тип өҙгөләнә. Бына хәҙер һин дә килгәс, бер оя булып йәшәрбеҙ, Алла бирһә!..

**Зөһрә.** Бер оя булып?

**Шәмсиә.** Башҡортса ғына һөйләшеп, башҡорт йырҙарын йырлап, тип әйтеүем.

**Зөһрә.** Улайһа, хәҙер мин һеҙгә бер йыр бүләк итәм!..

**Бөрйән.** Зөһрә, беҙ бит инде күптән көтәбеҙ!..

**Зөһрә.**

*Сейәлетау буйҙарында*
*Ҡалды йәшлек эҙҙәрем.*
*Диңгеҙ кисеп, сит ерҙәрҙән*
*Мин бәхеттәр эҙләнем!*
*Зәңгәр офоҡтар артында*
*Сейәлетауым ҡалды.*
*Аҡ тирмәле зәңгәр күктә*
*Ата-бабалар ҡалды.*
*Ҡояш сыҡһа офоҡтарҙан,*
*Сейәлетауҙы күрәм.*
*Тыуған илем, һине уйлап,*
*Күҙ йәштәремде түгәм!..*

**Шәмсиә.** Афарин! Афарин! Эй тауышҡайҙарың, бәпкәм! Бөрйәндең атаһы, беҙҙә йырламаған, бейемәгән кеше юҡ ул, ти торғайны...

**Бөрйән.** Шәмсиә апай, был бүлмәнең исеме – Зөһрә!..

**Шәмсиә.** Эйе, шулай булһын...

**Зөһрә.** Аҡ ҡайындар... Аҡ шишмәләр... Сейәлетауҙы хәтерләтә. Рәхмәт!

**Бөрйән.** Зөһрә бүлмәһе! Ниндәй матур яңғырай! Һылыуым! Һеҙҙә „Ғәлиәбаныу“ тигән йыр бармы әле? Атайым көйләй торғайны...

***Йырлай. Зөһрә ҡушыла.***

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, һеҙ – артист!

**Бөрйән.** Егеттәр килһә, был тәҙрәләргә буйҙары етмәҫ инде...

**Зөһрә.** Аптырамағыҙ, үҙем сығып алырмын!.. Бөтә Швейцарияға бер башҡорт егете табылыр әле.

**Шәмсиә.** Алла бирһә...

**Бөрйән** *(кеҫә телефонына)*. Килтереп еткерҙеләрме? Яҡшы? Бәләкәй генә сюрприз!

**Шәмсиә.** Әйҙә әле минең менән, Зөһрә бәпкәм! *(Уны икенсе бүлмәгә алып сығып китә.)*

***Коляскаһында Ансаф килеп инә.***

**Ансаф.** Бөрйән атай, мин өйләнергә булдым!..

**Бөрйән.** Эйе, Шәмсиә инәйең әйткәйне шул...

**Ансаф.** Нимә тине?

**Бөрйән.** Фатихабыҙҙы бирәйек инде, өйләнһен, тине... Ә кәләшең бына тигән!..

**Ансаф.** Шуны белегеҙ: Хоҙай миңә уны үҙе ебәргән!.. *(Сыға.)*

***Зөһрә менән Шәмсиә инә. Зөһрәне хәҙер танырлыҡ та түгел. Өҫтөнә затлы күлдәк, аяҡтарында шундай уҡ матур туфлиҙар кейеп алған, гәүһәр алҡалар таҡҡан. Өҫтөндәге күлдәге һис тә туй күлдәге түгел, ә дәүләт башлыҡтары – президенттар, премьер-министрҙар – үткәрә торған ҡабул итеү мәжлестәренә оло шәхестәрҙең ҡатындары кейеп бара торған үтә ҡупшы күлдәк ул.***

**Бөрйән.** Кил әле, һылыу!.. *(Зөһрәнең муйынына аҫыл таштарҙан – гәүһәрҙәрҙән яһалған ҡиммәтле муйынсаҡ кейҙерә.)*

**Зөһрә.** Уф, Аллам! Өнөммө был, төшөммө? Үҙемде танымайым! Бөрйән ағай! Шәмсиә апай! Быңдай ҡиммәтле бүләктәр алырлыҡ нимә эшләнем әле мин?

**Шәмсиә.** Беҙҙең Бөрйән шундай киң күңелле, йомарт кеше инде ул. Әйттем бит, үҙ башҡорто өсөн йәнен бирергә әҙер тора, тип!

**Бөрйән.** Ә беҙ ике Зөһрәне бергә ҡуштыҡ, хәҙер донъяла бер генә Зөһрә – Башҡортостандың Сейәлетауында тыуып үҫкән башҡорт ҡыҙы Зөһрә Алтынбаева ғына ҡалды...

**Зөһрә.** Ниндәй Зөһрә?.. Юҡ, мин хәҙер фәрештә!.. Минең оҫҡом килә!

Уй, матурлыҡтары! Йөҙөмә йондоҙ килеп ҡундымы ни! Бөрйән ағай, ниндәй аҫыл сифаттарым, ниндәй яҡшылыҡтарым өсөн был ҡиммәтле бүләктәр? Атайығыҙҙың ауылдашы булғаным өсөн генә түгелдер бит инде? Мин, әлбиттә, хаҡым булмаһа ла, бүләктәрегеҙҙе ҡабул итеп алдым... Баш тартырға булдыра алманым... Ә нисек түләрмен? Һеҙгә бөтәһе өсөн дә мең-мең рәхмәт, тик...

**Шәмсиә.** Бәпкәм, беҙ – мосолмандар, изге ниәттә ҡалайыҡ!..

**Зөһрә.** Юҡ, юҡ, минең белгем килә! Белгем килә! Бөрйән ағай, хәйләләшмәй генә яуап бирегеҙ. Былар бөтәһе лә ысын күңелдәнме?

**Шәмсиә.** Ысын күңелдән, ысын күңелдән, бәпкәм! Һин беҙгә оҡшаның, беҙ һине яраттыҡ, шуға...

**Зөһрә.** Юҡ, юҡ, Бөрйән ағайым әйтһен!

**Бөрйән.** Яҡшы. Шәмсиә апай, беҙҙе үҙебеҙҙе генә ҡалдыр, зинһар. *(Шәмсиә сығa.)* Һин килгәс, Швейцария тағы ла матурланды! Беҙҙең тормошобоҙға ла бер яҡты нур өҫтәлде!!!

**Зөһрә.** Юҡ, юҡ, бында ниндәйҙер бер маҡсат күҙ уңында тотола... Бөрйән ағай, мин көтәм!

**Бөрйән.** Яҡшы... Әсәйем Ҡытайҙа тыуған мишәр ҡыҙы булһа ла, минең гендарымда ла башҡорт атайымдың ҡаны уйнай! Һине ни өсөн алып килдем мин Швейцарияға? Һинең дә әсәйеңдең әсе яҙмышын ҡабатланыуыңды теләмәйем...

**Зөһрә.** Әсәйемдең әсе яҙмышы? Ә уға ни булған? Ниндәй әсе яҙмыш ул?

**Бөрйән.** Зөһрә! Әсәйең дә йәш сағында иҫ китмәле һылыу булғандыр! Уның йөҙөндә матурлыҡ сылымдары әле лә һаҡлана. Күҙҙәре нурлы, ҡараштары моңло. Мин бер ваҡытта ла, һис ҡайҙа ла башҡаса был турала һүҙ ҡуҙғатмам, ә хәҙер һиңә шуны әйтәм: әсәйең утыҙ йыл буйына колхозда һауынсы булып хеҙмәт иткән. Мин уның ҡулдарын күреп тетрәндем! Ҡан тамырҙары ҡап-ҡара булып бүрткән, шартларға тора. Аяҡтарында саҡ атлап йөрөй. Ошо йәштә әбейгә әйләнгән ул. Эйе, эйе, уға ҡарауы ҡыҙғаныс хатта...

**Зөһрә.** Юҡ, минең әсәйем ундай түгел! Түгел! Түгел!

**Бөрйән.** Һылыуым, тыныслан! Атайым һөйләүе буйынса беләм, үҙем дә күреп ҡайттым, быны һиңә ҡарап та әйтеп була: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары матурҙар! Бер ҡалаҡ һыуға һалып йоторлоҡ! Ә ниндәй гонаһтары өсөн улар шул тиклем ауыр йәшәй? Күбеһенең ире юҡ, етмәһә, эсеү менән мауығалар. Был хәл бер Башҡортостанда ғына түгел, ә бөтә Рәсәйҙә шулай. Быны бөтә донъя белә... Бөтәһенең дә булмаһа ла, һинең яҙмышыңды был бәләләрҙән ҡурсалаһам, кешелек бурысымды үтәнем тип һанармын!

***Бөрйәндең кеҫә телефоны шылтырый.***

**Бөрйән.** Юҡ, юҡ, француздарҙыҡы кәрәкмәй! Мин Парижда күреп ҡайттым инде ул курткаларҙы. Әрйәләргә тултырып, урамға уҡ сығарып ҡуйғандар, хаҡтарын төшөрөп һатырға. Италияның үҙенән алырға кәрәк. Күпме? Әлегә бер биш мең етәр. Улайһа егерме минуттан офиста осрашайыҡ. Яҡшы! Ғәфү ит, Зөһрә! Һине ҡалдырып китергә тура килә.

***Зөһрә әсәһенә шылтырата.***

**Зөһрә**. Алло? Әсәй! Әсәкәйем!

**Гөлнара.** Атаҡ!.. Ҡыҙым!.. Балам!..

**Зөһрә.** Әсәй, ни хәлдә һин? Сәләмәтлегең нисек?

**Гөлнара** *(ҡыҙыу-ҡыҙыу һөйләй башлай).* Әй, ҡыҙым, бынау аяҡтарым... Ә-ә... юҡ, юҡ... Бик һәйбәт йәшәйем, сәләмәтлегем дә гөлдәр кеүек, аяҡтарым да гөлдәр кеүек... ҡулдарым да гөлдәр кеүек... үҙем дә гөлдәр кеүек... Йә, һөйлә, нисек ҡаршы алдылар Швейцарияла?

**Зөһрә.** Әсәй, ниңә шул тиклем ҡыҙыу һөйләйһең, пулеметтан атҡан кеүек?

**Гөлнара.** Аҡса йыйыла бит телефонға. Һин дә тиҙ һөйлә!

**Зөһрә.** Бөрйән ағай етерлек ҡалдырҙы бит, ашыҡма! Әсәй, мин бәхетле! Мине бында бүләктәргә күмделәр!..

**Гөлнара.** Бүләктәргә күмделәр? Әллә теге „Поле чудес“тағы кеүек, стиральный, электроволновой... бөтәһен дә ал, ҡыҙым, оялып торма! Үтек булһа, үтеген дә ал!..

**Зөһрә.** Алтын-көмөшкә күмделәр, тим, әсәй, ынйыларға, гәүһәр таштарға!

**Гөлнара.** Ҡыҙым, әллә бриллиантҡа?

**Зөһрә.** Эйе, эйе, бриллиант, әсәй! Ул муйынсағы, ул алҡалары! Күп инде, күп, һөйләп бөтөрлөк кенә түгел!

**Гөлнара.** Вәт әй! Ҡыҙым, һин ҡайтырға ашыҡма, бөтөнләйгә ҡал, тиһәләр, бер үк баш тарта күрмә, риза бул! Швейцария бит ул, ҡыҙым! Швейцария!.. Һин минең өсөн ҡайғырма, мин бында гөлдәр кеүек йәшәйем. Бөйрәкәйем дә һөтөн көндән-көн арттыра, тауыҡтарым да оя тултырып йомортҡа һалалар был арала! Өйгә оҙаҡламай газ да керергә тейеш. Беҙ бында бик матур йәшәп ятабыҙ! Гөлдәр кеүек!

**Зөһрә.** Ярай, әсәй, иҫән-һау булып тороғоҙ! Һине ҡосаҡлайым! Үбәм!

***Башҡортостандың Сейәлетау ауылы. Гөлнара янына Аяз инә.***

**Аяз.** Бына, плитканды төҙәттем, Гөлнара апай!..

**Гөлнара.** Эй Аязҡайым! Һуңланың, әле генә Швейцария менән һөйләштем! Ҡыҙым менән!

**Аяз.** Ҡайтмайым, тиме?

**Гөлнара.** Атаҡ, шулай тимәйсә, бөтә Швейцария ҡулында ғына күтәреп йөрөткәс ҡыҙымды! Ҡайтмайым, Швейцарияла йәшәйем, ти. Вәт!..

**Аяз.** Улай икән...

**Гөлнара.** Һин Зөһрәне онот, ул кейәүгә сыға...

**Аяз.** Иблис ул! Һин дә иблис, Гөлнара апай! Ҡыҙыңды Швейцарияға һаттың! *(Телефонын тартып ала.)*

**Гөлнара.** Атаҡ-атаҡ! Ҡотorған был!..

**Аяз** *(Зөһрәгә шылтырата)*. Алло! Зөһрә?

**Зөһрә.** Аяз? Аяз, был һинме? Сәләм! Сәләм! Мин бында бит ожмахҡа килеп эләктем, Аяз!..

**Аяз.** Ожмах? Ожмах бит ул теге донъяла ғына була... үлгәс...

**Зөһрә.** Аяз, һин өйлән!

**Аяз.** Нимә? Нимә тинең?

**Зөһрә.** Өйлән, тим. Тот та өйлән берәй һауынсы ҡыҙға... Һөт эсергә яратаһың!

**Аяз.** Миңә һин кәрәк, Зөһрә!

**Зөһрә.** Мин бит инде һинән бик йыраҡта йәшәйем.

**Аяз.** Улайһа, өйөмдө, һыйырымды һатам да...

**Зөһрә.** Юҡ, Аязҡайым, бер нәмәнде лә һатмайһың! Һин сит илдә йәшәй алмаясаҡһың, һинең күңелең тыуған ереңдән айырылһа һүреләсәк.

**Аяз.** Ә һин үҙең? Һин дә ошо ерҙән түгелме ни, Зөһрә?

**Зөһрә.** Эйе, мин дә шунан инем... Тик ҡыҙҙарға ундай талаптар ҡуйыу дөрөҫ түгел икән ул. Минең әле кейәүгә сығаһым бар. Бәлки, ул кейәүем булаһы кеше Швейцарияла йәшәйҙер...

**Аяз.** Әсәйең, Гөлнара апай, һин китеү менән ун йылға ҡартайҙы. Бөкрәйеп ҡалды, күҙҙәре тулы ҡайнар йәш! Аяғында саҡ баҫып тора. Әгәр уның менән ул-был хәл булып ҡалһа, нисек йәшәрһең был донъяла? Бөтәһе өсөн дә һиңә яуап бирергә тура килер. Әсәһен шундай ауыр хәлдә ташлап киткән әҙәм, беләһеңме, кем була? Намыҫһыҙ, йәнһеҙ, миһырбанһыҙ таш йөрәк була ул. Ә ундайҙар бәхетле була алмай, сит илдә йәшәһәләр ҙә! Улар иблискә әйләнеп, кешелеген бөтөнләй юғалталар!

**Зөһрә.** Ә һин кем әле ул ҡәҙәре миңә ҡот осҡос хөкөм сығарырға? Ни хаҡың бар?

**Аяз.** Хаҡым бар, Зөһрә, хаҡым бар! Сөнки мин һине үлеп яратам! Аңлайһыңмы? Аңлайһыңмы, тим? Әгәр Зөһрәңдән баш тартмаһаң, донъя бөтә

бит, тиһәләр ҙә, мин һинән баш тартмаясаҡмын! Киреһенсә! Тағы ла нығыраҡ яратасаҡмын! Әгәр һине унда тиһәләр, төн уртаһында самолеттан диңгеҙгә һикерергә лә әҙер мин! Әгәр һине унда тиһәләр, утлы вулкандың ауыҙына ла инергә әҙер мин! Ишетәһеңме? Зөһрә! Ниңә өндәшмәйһең?

## Икенсе бүлек

### Өсөнсө картина

***Зөһрә яңғыҙы, йыр көйләй.***
***Ансаф инә.***
***Ҡулында матур сәскәләр.***

**Ансаф.** Һылыу! Был сәскәләр – һеҙгә!..

**Зөһрә.** Ниндәй матурҙар! Рәхмәт, Ансаф!..

**Ансаф.** Әйтәһе һүҙем бар.

**Зөһрә.** Миңәме ни?

**Ансаф.** Эйе, һеҙгә! Зөһрә! Мин һеҙгә Швейцарияла ҡалырға тәҡдим итәм!

**Зөһрә.** Ә мин бында нимә эшләрмен?

**Ансаф.** Виллала йәшәрһегеҙ, һуңғы модель машинала йөрөрһөгөҙ...

**Зөһрә.** Ярай, йәшәргә виллам, ултырып йөрөргә машинам булды, ти. Ә артабан?

**Ансаф.** Артабан, йәнегеҙ нимә теләй – шул булыр!..

**Зөһрә.** Рәхмәт, Ансаф! Һеҙ бик изге күңелле кеше икән, ләкин мин киләсәк тормошом тураһында әле бер нәмә лә әйтә алмайым, бында мин Бөрйән ағай ҡарамағында.

**Ансаф.** Бына һауығайым әле, күрерһең дә аптырап ҡалырһың. Минең докторым бар, профессор. Ул миңә операция яһаясаҡ. Минең буйым бер метр ҙа етмеш биш сантиметр буласаҡ. Һиңә шул етәме?

**Зөһрә.** Ансаф, әллә миңә күҙең төштө инде?

**Ансаф.** Төштө!.. Күңелемә яҡынһың!..

**Зөһрә.** Эй, аҙ ғына алданыраҡ тыуһаң ни була ине?

**Ансаф.** Ниңә?

**Зөһрә.** Минең дә күҙем төшкән кешем бар шул инде, Ансаф...

**Ансаф.** Ҡайҙа ул?

**Зөһрә.** Уныһы — сер!..

**Ансаф.** Баш тарт!

**Зөһрә.** Булмай!..

**Ансаф.** Була! Мин һиңә ярҙам итермен! Минең көсөмдән килә! Донъяға көслөләр хужа!

**Зөһрә.** Ғәфү ит, Ансаф!

**Ансаф.** Мин әйтеп бөтөрмәнем әле... Әгәр ҙә Швейцарияла йәшәргә булһағыҙ, бында һеҙҙе бер генә кеше бәхетле итә ала... Ул – мин!

**Зөһрә.** Һин?

**Ансаф.** Эйе, мин! Мин – Швейцария! Мин – Европа!

**Зөһрә.** Ә Бөрйән ағай? Ул...

**Ансаф**. Бөрйән атай ҙа, Шәмсиә инәй ҙә ҡарттар инде, улар менән нихт проблем!

**Зөһрә.** Ансаф! Һин әйткән вилла, машина кешене бәхетле итеүҙең берҙәнбер сығанағымы ни? Ә мин уйлағайным... Һәр кем үҙенең мөмкинлектәрен белеп йәшәргә тейеш, тип.

**Ансаф.** Мине яҙмыш рәнйетте инде, хәҙер килеп һеҙме? Мине бәхетһеҙ итмәгеҙ! *(Сыға.)*

***Зөһрә яңғыҙы.***

**Зөһрә.** Туҡта, был ни булды һуң әле? Әллә былар мине Ансафҡа димләргә итәләрме? Аллам һаҡлаһын! Бөгөн үк ҡайтып китәм!..

***Шәмсиә инә.***

**Зөһрә.** Шәмсиә апай! Беҙҙә былай тиҙәр: ҡунаҡтың беренсе көнө – алтын, икенсеһе – көмөш, ә өсөнсөһө – баҡыр...

**Шәмсиә.** Алтын ул ҡайҙа ла алтын, бәпкәм!..

**Зөһрә.** Шәмсиә апай, миңә бит инде артабанғы яҙмышымды асыҡларға ваҡыт. Берәй институтҡа уҡырға керергәме, эшкә урынлашырғамы?

**Шәмсиә.** Бәпкәм! Һиңә кейәүгә сығырға кәрәк. Йәмәғәтең үҙ милләтеңдән

булырға тейеш. Был – ата-бабаларыбыҙҙың ҡәтғи ҡануны. Швейцария – немецтар, итальяндар, французлар иле. Аллам һаҡлаһын, балаларың „муттер, муттер“ тип немецса һөйләшеп йөрөһә, йығылып үлерһең! Итальяны ла кәрәкмәй, французы бигерәк тә...

**Зөһрә.** Ә үҙ башҡортонды бында ҡайҙан табаһың?

**Шәмсиә.** Башҡортто уны, бәпкәм, эҙләп тораһы юҡ... Бик яҡында ғына ул...

**Зөһрә.** Кем? Ансафмы?

**Шәмсиә.** Ниңә Ансаф? Ансаф ул әле, белгең килһә, башҡорт та түгел. Беҙгә ят бауыр ул...

**Зөһрә.** Нисек улай?

**Шәсмиә.** Бөрйән бәлиғ булғанда, атаһы – Зиннәтулла еҙнәм һуғышта алған яралары ҡуҙғалып, ҡапыл вафат булды. Бер тин аҡсаһыҙ тороп ҡалдыҡ. Ә Бөрйәндең әсәһе, минең ике туған апайым Орҡия, был донъя менән йәш килеш хушлашҡайны инде. Үлгәндә еҙнәмдең бер байға бурысы ҡалған. Бик ҙур сумма... Атайыңдың бурысын түләмәһәң, хөкөмгә тарттырабыҙ, тип Бөрйәнгә янағандар. Бай әҙәм, бына ошо хәлдән файҙаланып, кейәүҙән айырылып ҡайтҡан ҡыҙы Харизаны йәш балаһы менән Бөрйәнгә килтереп таҡты ла инде. Бөрйән ағайың егет көйөнә балалы ҡатынға өйләнергә мәжбүр булды...

**Зөһрә.** Әле ҡатыны ҡайҙа?

**Шәмсиә.** Ауырыу ине ул, Ансафты беҙҙә ҡалдырып, һиҙҙермәй генә төндә өйҙән сығып киткән дә... юғалды ул. Эҙләтеп тә ҡараныҡ инде, файҙаһыҙ булды... Күп йылдар инде...

**Зөһрә.** Һеҙ мине әллә...

**Шәмсиә.** Бәпкәм, бәхетле булғың килһә, тәүәккәллә! Һинән бит ул күҙен дә алмай... Ҡулында ғына күтәреп йөрөтөр. Йортобоҙҙоң остазбикәһе булып ҡына йәшәрһең, Аллаһ бирһә! Ожмах эсендә! Институты ла, эше лә, ғаилә ҡороу ҙа бер төйөндә сисеү менән хәл ителә. Ә ул төйөн – кейәү! Ә ул кейәү – Бөрйән!..

**Зөһрә.** Уф, Алла! Шәмсиә апай, Бөрйән ағай минән олораҡ бит әле ул.

**Шәмсиә.** Ҡырҡ йәштә ирҙәр оло булмай, бәпкәм. Был йәштә улар мөхәббәттең дә, ғаиләнең дә, тормоштоң да алтын бағанаһына әйләнә...

**Зөһрә.** Әле мин бер нәмә лә әйтә алмайым... Ғәфү итегеҙ! *(Сыға.)*

***Бөрйән инә. Ҡулында ҡап.***

**Шәмсиә.** Мин һөйләштем, алма бешкән, өҙ ҙә ал!..

**Бөрйән.** Минең аяҡ-ҡулдар бәйле бит әле...

**Шәмсиә.** Ә һин Харизаны донъяла юҡ тип иҫәплә!..

**Бөрйән.** Ә Ансаф?

**Шәмсиә.** Ана, Фатмаға өйләнһен дә, башҡа сығарырбыҙ!..

**Бөрйән.** Был – донъяла иң арзан никах буласаҡ! Шулай ҙа ҡурҡыта...

**Шәмсиә.** Ҡурҡыта? Был беҙҙең һүҙ түгел! Ҡурҡаҡ кеше – ауырыу кеше. Бөтә яҡтан да камил булмаған йән эйәһе!..

**Бөрйән.** Йәш айырмаһы ла ҙур бит...

**Шәмсиә.** Ҡырҡ йәш — ир-аттың иң ғәйрәтле сағы! Никах контрактында „Айырылышабыҙ икән, кем нимә менән килгән, шуның менән китә“ тип яҙҙыраһың, ярайсмы? Хәҙрәттәрҙе саҡырып, никах уҡытырбыҙ ҙа, шуның менән – вәссәләм!..

**Бөрйән.** Эйе, эйе... Шәмсиә апай! Зөһрә Рәсәй гражданкаһы булып ҡалһын!

**Шәмсиә.** Бөрйән улым, һин аҡыллы!

**Бөрйән.** Быны һиңә генә әйтәм... Һиңә әйтһәм, ниәтем тормошҡа аша. Шәмсиә апай, мине бөтәһенән элек Урал ҡыҙыҡһындыра!.. Урал! Урал!..

**Шәмсиә.** Юлдарыңа аҡ йәймә!.. *(Ҡапты асып.)* Бәрәкалла! Зөһрә, кил әле, бәпкәм!

***Зөһрә инә. Шәмсиә уның яурынына аҡ тун һала.***

**Зөһрә.** Миңә? Юҡ, юҡ, кәрәкмәй!..

**Шәмсиә.** Нимә?

**Зөһрә.** Юҡ, мин яңылыш әйттем! И матур!..

**Шәмсиә.** Йылы тәнеңдә туҙһын, бәпкәм!..

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, килешәме? Батша ҡыҙҙарына оҡшанымммы?

**Бөрйән.** Юҡ, һин үҙеңә... Сейәлетауҙың иң һылыу, иң һөйкөмлө ҡыҙына оҡшаның!

**Шәмсиә.** Бөрйән улым, бына һиңә бик күп саҡырыу билеттары ҡалдырып киттеләр. Шәмбе көн мэр ҡабул итә. Ике урын... Зөһрә, әҙерлән, бәпкәм! Ә йәкшәмбегә депутаттар клубына саҡыралар. Киләһе дүшәмбелә „Тагес анцайгер“, „Ное цюркер Цайтунг“ гәзиттәре мәжлес үткәрә. Ғәфү итегеҙ, мин һеҙҙе ҡалдырам. *(Сыға.)*

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, мине лә алып бараһыңмы?

**Бөрйән.** Һуң әлбиттә, Ҡарһылыу! Юҡ, Мона Лиза!.. Ниңә һин мине ғазаплайһың?

**Зөһрә.** Нимә? Нимә? Мин һеҙҙе ғазаплайыммы, Бөрйән ағай? Был һүҙегеҙҙе нисек аңларға? Әллә һуң бында килеп, берәй гонаһ ҡылдыммы?

**Бөрйән.** Күпме көтөргә мөмкин, Зөһрә?

**Зөһрә.** Бер нәмә лә аңламайым...

**Бөрйән.** Быға тиклем күңелемдең бар тәҙрәләре лә ябыҡ ине. Һин миңә яҡты донъяға яңы тәҙрә астың. Ошо тәҙрәнән үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр бәхет йылмайҙы...

**Зөһрә.** Йә, Аллам!.. *(Тунын һалып ҡуя.)*

**Бөрйән.** Һиңә эҫеме?

**Зөһрә.** Юҡ, юҡ, борсолмағыҙ!

**Бөрйән.** Ултыр әле, Зөһрә!

**Зөһрә.** Хәҙер мин һөйләйем...

**Бөрйән.** Иң ауыр яра – яратҡан кеше һалған яра!..

**Зөһрә.** Минең дә һеҙгә донъялағы иң матур һүҙҙәрҙе генә әйткем килә...

**Бөрйән**. Мин көтәм бит, көтәм!..

**Зөһрә.** Йәшермәйем, һеҙ ҙә миңә оҡшайһығыҙ!..

**Бөрйән.** Йөрәгеңде тыңла, йөрәгеңде...

**Зөһрә.** Ә яҡшы мөнәсәбәттең мөхәббәткә әүерелеүе мөмкинме?

**Бөрйән.** Юҡ!.. Яҡшылыҡҡа ҡарағанда, мөхәббәттең рухы ҙурыраҡ. Яҡшылыҡтың тора-бара онотолоуы ихтимал, ә йөрәктә яралған мөхәббәт – мәңгелек!..

*Ауыр тынлыҡ.*

**Бөрйән.** Ярай, хәҙер бөтәһе лә асыҡланды... Улайһа, иң тәүҙә шуны хәл итәйек: һиңә ҡайһыһы ҡәҙерлерәк: Сейәлетаумы, әллә Швейцариямы?

**Зөһрә.** Швейцарияла йәшәгем килә, Бөрйән ағай!..

**Бөрйән.** Яҡшы! Хәҙер мине диҡҡәт менән тыңла! Швейцария – капиталистик ил. Бында, бер ҡарағанда, ғаилә лә, хөкүмәт тә, дәүләт тә юҡ һымаҡ. Бында һәр бер әҙәм балаһы бары тик үҙе өсөн генә йәшәй. Бында хатта атаәсәләр ҙә, туған-тыумасалар ҙа торабара бер имгәккә, артыҡ мәшәҡәткә әйләнә. Әлбиттә, был тәртиптәрҙе мосолмандар бик үк ҡабул итеп бармай, беҙҙең менталитет икенсе. Ата-әсә лә, балалар ҙа беҙҙең өсөн – изге! Беҙ һине ташламабыҙ, ярҙам итербеҙ. Беҙҙә генә йәшәрһең, торорға урын етерлек. Ә һиңә, һылыуым, сит-ят ерҙә юғалып ҡалмаҫҡа, алдағы тормошоңда килеп тыуасаҡ йөҙ төрлө һорауҙарға яуап табырға, ҡаршылыҡтарҙы үҙ аллы еңергә өйрәнергә һәм күңелеңдә ҡанатландырған хыялыңды тормошҡа ашырырға кәрәк.

**Зөһрә.** Их, Бөрйән ағай, бәхетең булып, Швейцария университетында уҡыһаң ине ул...

**Бөрйән.** Бына! Бына! Әйҙә, университетҡа юл тотайыҡ!..

**Зөһрә.** Унда бит уҡыуҙар түләүлелер?

**Бөрйән.** Бер юлы ике университетта уҡыһаң да, Бөрйән ағайыңдың мөмкинлектәре етерлек. Беҙҙә аҡса проблемаһы юҡ...

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, һеҙ ниндәй гүзәл кеше!.. Һеҙ...

**Бөрйән.** Гүзәлен гүзәл дә, тик... мин дә шул уҡ капиталист бит...

**Зөһрә.** Һеҙ – һәйбәт капиталист!..

**Бөрйән.** Тимәк, университет?

**Зөһрә**. Эйе, эйе, был – минең иң ҙур хыялым!.. И, әсәйем дә һөйөнөр ине. Бында килеүем дә аҡланыр ине. Әтү, Аяз... миңә хыянатсы тигән тамға ла һалып ҡуйҙы инде... Бына Цюрих университетын тамамлап ҡайтайым әле, унан күрер минең кем икәнемде... алйот...

**Бөрйән.** Һинең өсөн иң яҡшыһы менеджер, финанс, экономика факультеты булыр. Был һинең киләсәгең өсөн кәрәк...

**Зөһрә.** Былай булғас, минең киләсәгем дә һеҙгә бәйләнгән инде...

**Бөрйән.** Юҡ, киләсәгең һинең үҙ ҡулыңда... Беләһеңме, Зөһрә, был донъяға нимә хужа? Донъяға аҡыл һәм аҡса хужа. Аҡыл аҡса яһай, ә аҡса аҡылға юл яра...

**Зөһрә.** Мин дә шуларҙың береһе генә булһа ла...

**Бөрйән.** Һин аҡыллы ҡыҙ! Университетта уҡырға теләк белдергәнһең икән, был инде үҙе генә лә бик күп нәмә тураһында һөйләй... Ә хәҙер иң мөһиме...

**Зөһрә.** Тыңлайым, Бөрйән ағай!..

**Бөрйән.** Сейәлетауҙа әсәйеңдең дә, һинең дә ер бүлеме алыу мөмкинлеге бар. Колхоз пай рәүешендә һеҙгә ерҙе үҙе тәҡдим итә. Хатта көсләп бирәләр икән. Шулаймы?

**Зөһрә.** Эйе, эйе, ер ал, ер ал, тип әсәйемдең теңкәһенә тейеп бөттөләр инде.

**Бөрйән.** Мин һиңә Сейәлетауҙан ер алып, шунда үҙ эшеңде асырға тәҡдим итәм!..

**Зөһрә.** Ҡасан?

**Бөрйән.** Уны оҙаҡҡа һуҙырға ярамай. Бына университетҡа уҡырға кер ҙә шунан икәүләп тотонорбоҙ. Һеҙҙә күлдәр бик күп, берәйһен арендаға алып, балыҡ заводы төҙөргә мөмкин. Мин бөтәһен дә һинең аша үҙем ойоштора. Банкта миллиондарым илап ята. Университетты тамамлау менән, заводты үҙ ҡулыңа алырһың!..

**Зөһрә.** И, Бөрйән ағай, ун һигеҙ йәштә ошо ҙур эште...

**Бөрйән.** Ниндәй ун һигеҙ? Ниндәй ун һигеҙ ти ул? Һиңә хәҙер кәм тигәндә утыҙ йәш! Үҙеңде шулай тип хис ит! Бында бөтөнләй икенсе үлсәмдәр. Мин ун өс йәшемдә кибет һатып алдым. Ун бишем тулғанда, дүрт кибетем бар ине инде. Зөһрә! Мин һиңә ҡеүәт бирәм, һиңә ун йәш өҫтәйем! Һәм һин ғүмереҥ буйы бик бәхетле буласаҡһың! Бына шулай, матур һеңлем!..

**Зөһрә.** Һеңлегеҙгә лә әйләндемме ни инде?

**Бөрйән.** Ә нимә эшләйем һуң?.. Зөһрә! Зөһрә!..

**Зөһрә.** Бөрйән ағай! Мин ике юл сатында тороп ҡалғандай булдым әле...

**Бөрйән.** Юҡ, юлың бер генә һинең! Мин һине оло юлға сығарҙым. Маяҡтарыңды билдәлә лә – алға! Ҡурҡма, ҡыйыу атла!.. *(Сыға.)*

***Зөһрә яңғыҙы.***

**Зөһрә.** Хоҙайым, ниңә бик ауыр башланды һуң әле был тормош тигәнең? Элек бөтәһе лә бик еңел булыр кеүек ине бит... Университетын да бөтөрмөн, кейәүгә лә сығырмын, имеш!.. Ә артабан? Бер ҡатлы сабый... Ә Бөрйән ағай әйткән ул маяҡтарҙы нисек билдәләргә? Йә, Аллам!.. Минең барыр юлдарымдағы иң яҡты маяҡ барыбер Бөрйән ағай инде ул... Ә яратаммы һуң мин уны? Былай оҡшай ҙа кеүек...

Аҡыллы... ғыймлы... ярҙамсыл... Бәлки, йәшәй-йәшәй яратырмын. Шулай ҙа була, тиҙәр бит! Ул да миңә бик яҡын... Тик бына әле генә... Ошо сәғәттә генә... Беҙҙә генә торорһоң, тиҙәр. Алла бирһә, университеты ла булыр төҫлө. Быларҙың бөтәһе лә минең башҡорт ҡыҙы булғаным өсөн

генә түгелдер бит инде?.. Бөрйән ағай миңә үлеп ғашиҡ!.. Беҙҙең былдай мөнәсәбәттәр оҙаҡ дауам итә алырмы? Мине матур һеңлеһе итеп кенә эргәһендә йөрөтә алмаҫ бит инде? Һәр нәмәнең аҙағы була. Исмаһам, әсәйем дә юҡ бит янымда!

*Шәмсиә инә.*

**Шәмсиә.** Зөһрә! Бәпкәм! Бында мин һиңә әсәйең урынына!.. Ҡатын-ҡыҙҙың ғүмере, йылдың дүрт ваҡыты кеүек үк, дүрт миҙгелдән тора. Яҙы, йәйе, көҙө, ҡышы ла бар уның. Ғүмер яҙы егерме бер йәшкә тиклем дауам итә. Һинең инде икенсе миҙгелең – йәйең башланырға тора. Был осорҙа ҡатын-ҡыҙҙың төп роле – әсә булыу, ғаилә ҡороу. Уның сәскә атҡан сағы был. Ҡыҙ сағындағы хыялдарға сәскән орлоҡтар шытып сыға һәм емеш бирә башлай. Тормошоң имен булһа, ул сәскә атҡан емеш баҡсаһына оҡшай. Ә мул уңыш алыу өсөн уны яҡшы итеп тәрбиәләргә кәрәк. Был миҙгелдә һинең инде үҙ урының, үҙ йөҙөң булырға тейеш. Ошо миҙгелдә тормошоң һәйбәт үтһә, көҙөңә һин ышаныс менән аяҡ баҫаһың!..

**Зөһрә.** Шәмсиә апаҡайым! Ә ҡайһылай быға ирешергә һуң?

**Шәмсиә.** Ғаиләлә бәхет теҙгенен үҙ ҡулдарында тотҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙың өсөнсө миҙгеле лә матур үтә... Ә дүртенсеһе инде – Аллаһы Тәғәлә ҡулында. Хөкөмдө ул сығара... Һинең ғүмер буйы йәшәү рәүешеңә ҡарап...

**Зөһрә.** Башым етмәй, Шәмсиә апай!..

**Шәмсиә.** Улайһа, бына әсәйеңде – мине тыңла! Бәхетле ҡатын булғың килһә, тәүәккәллә – хәҙер үк, ошо изге сәғәттә үк Бөрйән ағайыңдың ҡосағына ин!.. Бөрйән ағайың – Швейцарияның иң ҙур капиталистарының береһе. Улар беҙҙә, һигеҙ миллионлы илдә, бер нисә тиҫтә генә... Мин иң байҙары тураһында әйтәм... Һеҙҙең балаларығыҙ ҙа бик бәхетле булыр, Алла бирһә!..

**Зөһрә.** Шәмсиә апай!.. Бөрйән ағай инһен әле!..

*Шәмсиә сыға.*

**Зөһрә.** Ә Швейцарияға ниңә килдем мин Бөрйән ағайға тағылып? Донъя күрергәме? Мин Зөһрә Алтынбаева әле! Танырһығыҙ! Танытырмын! Ошо матурлығым менәнме? Мин...

*Бөрйән инә.*

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, һеҙ миңә йөрәгемде тыңларға ҡушҡайнығыҙ. Мин йөрәгемде тыңланым! Ул...

**Бөрйән.** Зөһрә, мин көтәм! Көтәм!

**Зөһрә.** Ул һеҙҙең яҡлы! Һеҙ миңә Швейцарияны бүләк иттегеҙ, ә мин һеҙгә – йөрәгемде...

**Бөрйән.** Йәнем! Һин минекеме? Минекеме?

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, әйттем бит инде, мин – һинеке, тип!

**Бөрйән.** Был бит – миңә Хоҙай бүләге!.. *(Уның янына килә.)*

**Зөһрә.** Һуңынан! Һуңынан, Бөрйән ағай!..

*Беренсе тапҡыр үбешәләр.*

**Бөрйән.** Зөһрә! Мин бәхетемде күрәм! Бәхетте күреп булмай, тойоп ҡына була, тиҙәр ине, дөрөҫ түгел икән! Мин уны күрәм! Бына һин ул минең бәхетем, Зөһрәкәй!

**Зөһрә.** Мин дә бәхетле, Бөрйән ағай! Хоҙайым, минең был аҙымым бөтә ғүмер юлымды, яҙмышымды хәл итәсәк бит! Бәхетем дә, бәхетһеҙлегем дә һиңә бәйләнгән. Мин һиңә ышандым инде, Бөрйән ағай!

**Бөрйән.** Ышан! Ғаиләлә берәүге бәхетһеҙ булһа, икенсеһе бәхетле була алмай. Беҙҙең осор ҡанаттарҙың береһе – һиндә, икенсеһе – миндә!

**Зөһрә.** Ә барыбер иң ҙур яуаплылыҡ һиндә!

**Бөрйән.** Миндә! Миндә!

**Зөһрә.** Һин – ғаиләнең алтын бағанаһы!..

**Бөрйән.** Бөтәһе лә дөрөҫ! Беҙҙең икебеҙ бергә хәл итәһе мәсьәләләр ҙа

күп әле. Беҙ һинең менән ул турала һөйләштек, Зөһрә...

**Зөһрә.** Эйе, эйе... Һин Сейәлетау, балыҡ заводы һәм Уралды әйтәһеңме?

**Бөрйән.** Эй, аҡыллыһың да инде, Зөһрәкәйем...

***Кескәй тынлыҡ.***

**Бөрйән.** Атай мәрхүм: „Яңғыҙлыҡтар бәхет булһа, ул беҙгә теймәҫ ине“, – тип йырлай торғайны... Һин мине яңғыҙлыҡтан ҡотҡарҙың, Зөһрә!..

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, мин әсәйемдең фатихаһын алайым инде...

**Бөрйән.** Ярай, шулай һин миңә ғүмерең буйы „ағайым“ тип кенә өндәшерһеңме? Әйҙә, һөйләшә һал әсәйең менән! Аҙаҡ мин дә шылтыратырмын уға. *(Сыға.)*

**Зөһрә.** Әсәй! Әсәй! Был мин – һинең бәхетле ҡыҙың Зөһрә!..

**Гөлнара.** Ҡыҙым! Ҡыҙым! Мин, мин! Әсәйең тыңлай!

**Зөһрә.** Әсәй, ни хәлдә һин унда? Сәләмәтлегең нисек?

**Гөлнара.** Сәләмәтлегем... гөлдәр кеүек! Үҙем дә гөлдәр кеүек! Йә, һөйләп ебәр, балам, берәй яңылыҡ юҡмы унда? Швейцарияла, тим?

**Зөһрә.** Әсәй, әгәр һин фатихаңды бирһәң, мин...

**Гөлнара.** Нимә? Нимә? Фатиха тиһеңме? Әллә, ҡыҙым, кейәүгә сығаһыңмы? И-и, балам...

**Зөһрә.** Әсәй! Әсәй!..

**Гөлнара.** Бер үк... Фатиха! Фатиха! Һөйгән йәрең кем? Әллә... Бөрйәнме?

**Зөһрә.** Эйе, Бөрйән ағай, әсәй! Ул ҡулымды һораны!..

**Гөлнара.** Әллә ҡулыңды һораны? Бәй! Атаҡ! Бөрйән үҙе булғас ни... Мин дә ике ҡуллап... Улай булғас ни... Әйтә һал Бөрйән кейәүгә, әсәйем әйтә, тиген, донъяла Бөрйәндән дә яҡшыраҡ... Әллү! Әллү!.. Аяз, ниңә ишетелмәй? Телефоным әллә нимә эшләне, ҡороғоро... Әллү! Әллү! Мә әле, һин һөйләш! *(Телефонды Аязъа бирә.)*

**Аяз.** Зөһрә! Был мин – Аяз!

**Зөһрә.** Сәләм, Аяз!

**Аяз.** Нимә, кейәү ҙә таптыңмы ни инде?

**Зөһрә.** Юҡ, Аяз, ул үҙе ғүмере буйы мине эҙләгән.

**Аяз.** Ә һин, итәгеңә ут ҡапҡандай, уға барҙың да ҡапландың инде!

**Зөһрә.** Бөрйән ағай яратмаҫлыҡ кеше түгел!..

**Аяз.** Ул бит һиңә атай булырлыҡ кеше... Һиңә утыҙ биш тулғанда, һаҡалы биленә еткән бабай буласаҡ ул!..

**Зөһрә.** Аяз, ниңә һин минең менән улай һөйләшәһең әле? Эйе, беҙ һинең менән бергә үҫтек, бергә уҡыныҡ, бергә бәхет тураһында ла хыялландыҡ. Һин шул беҙҙең дуҫлыҡты мөхәббәт тип уйлайһыңмы әллә?

**Аяз.** Белмәгәйнем, белмәгәйнем, мөхәббәттең иң ҙуры Швейцарияла икән!

**Зөһрә.** Аяз, туҡта! Туҡта, тим мин һиңә! Туҡта!.. *(Аяз телефонын һүндерә.)*

**Дүртенсе картина**

**Ансаф**. Оҙаҡланың! Мин һиңә, тиҙ йөрө, тинем!

**Фатма.** Ансаф! Сән бәне алданың!.. Сән бит вәғәҙә биргәйнең бәңә өйләнергә, ә хәҙер әйләнеп тә ҡарамайһың!..

**Ансаф.** Күрмәйһеңме ни, йәш кәләш алырға йыйынам!

**Фатма.** Ә бән?

**Ансаф.** Бән! Бән! Донъяла мөхәббәт тигән нәмә лә бар!

**Фатма.** Улай булғас, ниңә бәне ошондайға әйләндерҙең?

**Ансаф.** Ниндәйгә?

**Фатма ауырлы икәнен аңлата.**

**Ансаф.** Миңә рәхмәт әйт!..

**Фатма.** Ярай...

**Ансаф.** Рәхмәт әйт, тим!

**Фатма.** Рәхмәт!.. Бәне хәҙер кем кейәүгә алһын?

**Ансаф.** Ярай, өлкән бисәм булырһың!

**Фатма.** Ә кем ул йәш кәләш тигәнең? Зөһрәне әйтмәйһеңдер бит, Ансаф ҡанатым? Уға бит атайың өйләнә... Бөрйән ағай...

**Ансаф.** Нимә? Нимә тинең? Ҡабатла әле!..

**Фатма.** Киләһе аҙнала никах уҡыталар. Хәҙрәттәргә лә хәбәр иттеләр инде.

**Ансаф.** Ниңә уны бөгөн генә әйтәһең?

**Фатма.** Беләһеңдер, тип уйлағайным...

**Ансаф.** Әгәр дөрөҫ булмаһа – һаҡлан!

**Фатма.** Күрмәйһеңме ни туйға нисек әҙерләнгәндәрен? Мин инде утыҙ өс саҡырыу билеты ебәрҙем...

**Ансаф.** Юҡ, мин быға юл ҡуймаясаҡмын! Зөһрә минеке! Минеке! Ишетәһеңме?

**Фатма.** Ишетәм дә бит... Ни, Ансаф... Минең тағы ла бер һүҙем...

**Ансаф.** Нимә?

**Фатма**. Бән уларҙың үбешкәндәрен дә күрҙем әле... Һуңынан Бөрйән ағайҙың бүлмәһенә инеп киттеләр...

**Ансаф.** Алдайһың!..

**Фатма.** Баш өҫтө! Үбештеләр шул! Үбештеләр...

***Ансаф телефондан шылтырата.***

**Ансаф.** Фридрих! Хәҙер үк, ошо сәғәттә үк әсәйем менән килеп етегеҙ! Аҡсаны килтереп бирерҙәр. Ышаныслы кеше, ҡулында минең визиткам булыр, ҡаршы алырһығыҙ. Фатма! Бына адресы, бына телефоны. Фридрих тигән кеше сығыр, визиткамды күрһәт. Бына һиңә аҡса, уларҙы шул кешегә бирерһең, ҡалғанын ул үҙе әйтер. Аңланыңмы? Абай бул!

**Фатма.** Ансаф, улар бит бәне тыңламаҫтар...

**Ансаф.** Бик тә тыңлар, йүгерә һал!

**Фатма.** Аңланым, ҡанатым! Ансаф, ә бәне өлкән бисәң итерһеңме һуң?

**Ансаф.** Бер әйттем бит инде!

**Фатма.** Ярай, бән сәнең ҡолоң, остом! *(Сыға.)*

**Ансаф** *(ҡысҡырып)*. Бөрйән атайҙың үҙенә генә әйтәһе һүҙем бар...

**Бөрйән** *(инеп)*. Ни булды?

**Ансаф.** Бер көн нимә әйттем мин һиңә?

**Бөрйән.** Иҫемә төшөр әле!

**Ансаф.** Бик тиҙ онотҡанһың!

**Бөрйән.** Һин өйләнеү тураһындамы? Һеҙ йәшәп ятаһығыҙ түгелме һуң инде? Ярай, минән – фатиха!

**Ансаф.** Фатихаң да, Фатмаң да үҙеңә булһын!

**Бөрйән.** Ни тигән һүҙ был?

**Ансаф.** Минең яратҡан ҡыҙым бар!..

**Бөрйән.** Кем ул?

**Ансаф.** Зөһрә.

**Бөрйән.** Ә Фатманы ҡайҙа ҡуяһың? Ул һинән бала көтә...

**Ансаф.** Минең балаларым күп буласаҡ!..

**Бөрйән.** Ә Зөһрә һине яратамы һуң?

**Ансаф.** Минең өсөн уныһы мөһим түгел. Мин – миллионер!..

**Бөрйән.** Ансаф, аҡылыңа кил!..

**Ансаф**. Минең коляскала ултырыуым оҡшамаймы һиңә?

**Бөрйән.** Хоҙайға үпкәлә!..

**Ансаф.** Мин һеҙҙең барығыҙҙан да матурыраҡ! Һеҙ ул ауырыу, ә мин — сәләмәт! Һеҙ һуҡырҙар, минең коляскамды ғына күрәһегеҙ... Иң тәүҙә улыңды башлы-күҙле ит, башҡа сығар, бына булырһың атай! Ә Зөһрәне мин һиңә бирмәйем!..

**Бөрйән.** Шаулама!..

**Ансаф.** Баш тарт! Хәҙер үк баш тарт Зөһрәнән!

**Бөрйән.** Зөһрәне онот! Ул һиңә...

**Ансаф.** Тиң түгелме? Мин – егет, ә ул – еткән ҡыҙ. Уға кейәүгә сығырға кәрәк, ә һайлап барыр кешеһе юҡ, булмаясаҡ та! Ә мин әҙер. Донъяға аҡса хужа, ә аҡса минең ҡулда!..

**Бөрйән.** Минең һиңә ай һайын биргән пенсияң кәләш алырға етмәй бит әле, донъяла һинән байыраҡтар ҙа бар!

**Ансаф.** Минең ҡарарым шундай. Мин шулай хәл иттем. Мине буласаҡ миллиондарым матурлай. Зөһрәгә мин аңлатырмын. Ул мине матур итеп, ир солтаны итеп күҙ алдына килтерер, шулай тойор. Минең миллиондарымдың

көсө шунда! Ана, Фатманан һора минең ниндәй ир икәнемде. Ул хәҙер минең аяҡ табанымды үбергә лә әҙер! Зөһрә лә шулай буласаҡ!.. Бар, саҡыр Зөһрәне!

**Бөрйән.** Мин уны һинең өсөн алып килмәнем!

**Ансаф.** Ә кем өсөн алып килдең?

**Бөрйән.** Ул миңә Хоҙай бүләге!

**Ансаф.** Һинең ҡатының бар! Ниңә әсәйем менән йәшәмәнең?

**Бөрйән.** Әсәйең менән? Етте! Һинең менән мәғәнәһеҙ һүҙ көрәштерергә минең ваҡытым юҡ.

**Ансаф.** Йәш кәләш алырға ваҡыт тапҡанһың бит! Йәһәннәм төпкөлө – Рәсәйҙән үк барып алғанһың!..

**Бөрйән.** Яҙмышың шулай икән, һин инде уны бер нисек тә үҙгәртә алмайһың!..

**Ансаф.** Һин ошо йәштә ун һигеҙ йәшлек ҡыҙға өйләнергә булдыңмы ни?

**Бөрйән.** Йәшә, ана, Фатмаң менән, Квазимода!

**Ансаф.** Был ниәтең барып сыҡмаç! Абынырһың, һөрлөгөрһөң, ҡоларһың! Йәки үҙем һинең бөтә донъяңдың аçтын өçкә килтерәм! Саҡыр Зөһрәне!..

**Бөрйән.** Һаташма! Әгәр аҡылыңа килмәһәң, мин һине...

**Ансаф.** Нимә? Әйтеп бөтөр!

**Бөрйән.** Мин һине...

**Ансаф.** Зөһрә минеке! Минеке! Бирмәйем мин һиңә Зөһрәне! Бирмәйем!.. *(Бөрйән уны быуа башлай.)*

***Хариза инә.***

**Хариза.** Туҡта! Йыртҡыс!

**Бөрйән.** Һин?

**Хариза.** Нимә? Көтмәгәйнеңме?

**Бөрйән.** Һин ни эшләп бында? Кем керетте һине?

***Тауышҡа Шәмсиә менән Зөһрә сыға.***

**Хариза.** Ансаф? Улым! Бәғерем! *(Бөрйәнгә.)* Яуыз! Сабый сағында асфальтҡа ырғытып, ғәрипкә әйләндергәнең етмәгән, хәҙер бөтөнләй ҡотолмаҡсы булдыңмы? Атайымдан ҡалған йорттарыма хужа булыр өсөн мине психушкаға илтеп яптың! Ҡалалағы бөтә мөлкәтемде, банктағы аҡсаларымды үҙләштерҙең, яуыз! Һин кем? Нисек һине ер күтәрә?..

**Бөрйән.** Шәмсиә апай, оҙат! Полиция саҡыр!..

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, кәрәкмәй! Юҡ, кәрәкмәй!.. *(Харизаға.)* Апай, һеҙ уның ҡатынымы?

**Хариза.** Эйе, ҡасандыр ҡатыны инем, Хоҙай һаҡланы, ҡотолдом...

**Бөрйән.** Шәмсиә апай, ҡыуып сығар шуны!.. *(Китә.)*

**Шәмсиә.** Хариза, бәпкәм, әйҙә, үҙ бүлмәңә!..

**Хариза.** Ҡалдырығыҙ мине!

**Ансаф.** Әсәй, мин үләм...

**Хариза.** Үлмәçһең, улым, үлмәçһең! Бына мин ҡайттым бит, хәҙер гел бергә булырбыҙ, Алла бирһә! Мин һаусәләмәт, һине был йыртҡыстар ҡулына бирмәм! Һин бит тормошто яратаһың! Мин һине ғазап сигер өсөн тыуҙырманым. Ә был яуыздарҙы ғәҙел хөкөм көтә. Аллаһы Тәғәләнең ҡәһәре төштө инде уларға...

**Шәмсиә.** Аҡылыңа кил! Ни һөйләйһең һин, бәпкәм?

**Зөһрә.** Ярабби! Ярабби! Нимә эшләнем мин?

***Сәхнәлә Бөрйән менән Шәмсиә.***

**Бөрйән.** Нисек сығарғандар уны?

**Шәмсиә.** Адвокаты тырышҡан. Мин һау-сәләмәт, ти. Ҡулында ҡағыҙҙары бар. Бөрйән улым, унан нисек тә ҡотолорға кәрәк.

**Бөрйән.** Ярай, юлын табырмын.

**Шәмсиә.** Ансафы ла ҡотора бит әле...

**Бөрйән.** Үҙ башына!..

**Шәмсиә.** Икеһен бергә яңы йортҡа күсереп торһаҡ?

**Бөрйән.** Яңы йортҡа? Шәмсиә апай, аҡылың бармы һинең? Әйттем бит, юлын табырмын, тип... Уларҙың был донъяла бер кемгә лә кәрәге юҡ. Улар – артыҡ кешеләр...

**Шәмсиә.** Былай булғас, Зөһрә ҡалмаҫ инде... Мин бүләктәрҙе кире алам...

**Бөрйән.** Юҡ, улай ярамай!..

**Шәмсиә.** Харизаныҡы бит улар!..

**Бөрйән.** Нимә ул муйынсаҡ? Ул бер тингә лә тормай! Зөһрә китһә, мин Башҡортостанды юғалтам! Уралды юғалтам! Миллиардтарҙы юғалтам! Нисә йылдар хыялланып, эҙенә төштөм тигәндә генә... Хәҙер бөтә донъя Уралға ынтыла! Ә Рәсәйҙең үҙенең хәле етмәй. Бай илдәрҙән капитал эҙләй ул. Инвестиция тип атала был, Шәмсиә апай!.. Аңланыңмы?

**Шәмсиә.** Аңланым да һуң... Эштәрең кирегә китеп бара бит әле...

**Бөрйән.** Уралға иң яҡын, иң тура юл – Зөһрә! Шәмсиә апай! Бына нимә, башҡаса Зөһрә менән Харизаның осрашыуына юл ҡуйырға ярамай! Күҙ-ҡолаҡ бул! Ҡалғанын мин үҙем... *(Сыға.)*

**Шәмсиә.** Бөрйән! Ҡара уны! Һин отолорға тейеш түгел! Һин еңеп сығырға тейеш!.. *(Артынан әйәреп сыға.)*

***Фатма менән Зөһрә.***

**Фатма.** Зөһрә ҡанатым, сәңә бер серем бар ине...

**Зөһрә.** Нимә?

**Фатма.** Бәнең тыуаса балам Бөрйән ағайҙан бит...

**Зөһрә.** Алдайһың! Ялған!..

**Фатма.** Баш өҫтө! Баш өҫтө!

**Зөһрә.** Ә Ансаф?

**Фатма.** Ул үҙенеке тип уйлай. Әйҙә, уйлаһын, эйеме?

**Зөһрә.** Ә бала тыуғас, атаһы кем була?

**Фатма.** Ансаф инде...

**Зөһрә.** Һеҙҙең Швейцарияла бик яйлы икән...

**Фатма.** Барыһына ла улар хужа бит, ә бән нимә ҡушалар, шуны эшләйем инде. Әйтәйемме икән?

**Зөһрә.** Нимә тағы?

**Фатма.** Зөһрә ҡанатым, бынауы ҡиммәтле биҙәүестәрҙе кире бирәһеңдер инде, улар бит Хариза апайҙыҡылар...

**Шәмсиә** *(инеп)*. Зөһрә! Ни булды, бәпкәм!

**Зөһрә.** Мин был бүләктәрҙе ала алмайым!..

***Бөрйән инә.***

**Шәмсиә.** Бына, бүләктәреңде кире бирҙе...

**Бөрйән.** Зөһрә! Ни булды?

**Зөһрә.** Кем өсөн алынған – шул таҡһын! Хариза апайға бирегеҙ!.. Кеше бәхетһеҙлеге иҫәбенә бәхетле булғым килмәй... Бөрйән ағай! Самолетҡа билет алып, мине тыуған илемә оҙатығыҙ! Бөгөн үк! Хәҙер үк!

**Бөрйән.** Зөһрә! Мин бит барыбер унең менән йәшәмәйәсәкмен!..

**Зөһрә.** Ни өсөн, Бөрйән ағай? Ни өсөн?

**Бөрйән.** Ул ауырыу...

**Зөһрә.** Шәмсиә апай, мөмкин булһа, беҙ Бөрйән ағай менән икәү генә ҡалайыҡ әле...

***Шәмсиә сыға.***

**Зөһрә.** Һеҙ әйткәнсә, мин дә был илдә ун йәшкә олоғайҙым... Хариза апай һау-сәләмәт! Эйе, эйе, ул... һүҙҙәре мәғәнәле, күҙ ҡараштары аҡыллы. Улын... Ансафты шундай итеп һөйҙө, ауырыу әсәлә ундай ҙур тойғолар булыуы мөмкин түгел...

**Бөрйән.** Улар һүҙгә оҫта...

**Зөһрә.** Ул үҙенең бөтә бәхетһеҙлеген һеҙҙән күрә...

**Бөрйән.** Зөһрә! Ул юҡты һөйләй... Ауырыу баштың ауырыу уйҙары был...

**Зөһрә.** Ансафты ла һеҙ ташҡа атып ғәрипләмәнегеҙме?

**Бөрйән.** Юҡ, ул шулай булып тыуған...

**Зөһрә.** Ә Хариза апай менән яратышып ҡауышҡайнығыҙмы?

**Бөрйән.** Минең хәҙер ул турала иҫкә алғым да килмәй!..

**Зөһрә.** Ул һылыу! Һау-сәләмәт, бына йәшәгеҙ инде әҙәмсә...

**Бөрйән.** Зөһрә! Үткәндәргә ҡайтыу юҡ!.. Мин һине бөтә йөрәгем менән

яраттым... Зөһрә, беҙгә яңы йорт әҙер! Бына, асҡыстарын ҡабул итеп ал. Бөгөн мин дә был йорттан сығып китәм! Һинең янына! Һөйгәнем янына! Мәңгегә!..

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, мине донъяла юҡ тип иҫәпләгеҙ!.. Хоҙайға рәхмәт, мине яңылыш юлдан тартып алды...

**Бөрйән.** Ә университет? Мин бит ысын күңелдән...

**Зөһрә.** Әгәр ҙә яҙмышымды һеҙҙең менән бәйләгән булһам, Сейәлетауҙа, Уралда бизнес ойошторһаҡ, минең дә Хариза апай көнөндә ҡалыуым мөмкин ине бит. Хоҙай һаҡланы.

**Бөрйән.** Зөһрә, ниңә һин шундай уҫал?

**Зөһрә.** Һеҙҙән өйрәндем!

**Бөрйән.** Һин Швейцарияны бик аҙ беләһең шул, һылыуым. Уны аңлау өсөн, кәм тигәндә, бында тыуырға кәрәк. Йә, килештекме? Башҡа сығабыҙмы? Һин үҙебеҙҙең ожмах һарайынан баш тартаһыңмы?

**Зөһрә.** Ғәфү итегеҙ, мин хәҙер был илдә йәшәй алмайым!

**Бөрйән.** Ә мин һине бер ҡайҙа ла ебәрмәйем! Ана, Хоҙай Тәғәлә шаһит: яратам, тинең. Вәғәҙәләр бирештек, һүҙ ҡуйыштыҡ! Был турала инде бөтәһе лә белә!.. Һин мине абруйлы, дәрәжәле дуҫтарым алдында мәсхәрә итергә уйланыңмы? Мин хәҙер әсәйеңә шылтыратам. Ул мине аңлар. Әгәр ҙә беҙ килешә алмаһаҡ, һин әсәйеңде үлтерәһең!..

**Зөһрә.** Ул ожмах һарайығыҙҙы балаларығыҙға бирегеҙ, Бөрйән ағай!

**Бөрйән.** Балалар? Ниндәй балалар ул?

**Зөһрә.** Ансафҡа!

**Бөрйән.** Юҡ, булмай... Ансаф та, әсәһе лә минең донъяма дәғүә итә алмай! Хаҡтары юҡ!.. Хоҙай Тәғәлә шулай яратҡан икән, уларҙы тәбиғәт тә, кешелек йәмғиәте лә ҡабул итмәй. Улар – артыҡ кешеләр...

**Зөһрә.** Ҡот осҡос!

**Бөрйән.** Тәбиғәт матурлыҡты, камиллыҡты ярата. Ә кешелек йәмғиәте аҡылға, көскә таяна. Ҡалғандарын – үҫешкә, алға китеүгә ҡамасаулай торғандарын – улар кире ҡаға, юҡҡа сығара.

**Зөһрә.** Һеҙгә университеттарығыҙ шундай һабаҡ бирҙеме ни, Бөрйән ағай? Ә беҙҙе мәктәптә, яҡыныңды ярат, хөрмәт ит, яҙмыш тарафынан рәнйетелгәндәргә ярҙам ит, миһырбанлы бул, тип өйрәттеләр...

**Бөрйән**. Эйе, һеҙҙә шулайҙыр... Әгәр ҙә һин матур, аҡыллы һәм йәш булмаһаң, Швейцарияның бер капиталисы һиңә ғашиҡ булыр инеме? Һине бит бәхет дауыл кеүек күтәреп алды үҙ ҡосағына! Бына ошо инде тәбиғәттең мин әйткән изге ҡануны! Ә Сейәлетауҙа һине нимә көтә? Һин унда эш тә таба алмаясаҡһың, йүнле кейәүгә лә сыға алмаясаҡһың!

**Зөһрә.** Бөрйән ағай, Фатма бит һеҙҙән бала көтә...

**Бөрйән.** Нимә?

**Зөһрә.** Фатма ауырлы, атай булырға әҙерләнегеҙ, Бөрйән ағай!

**Бөрйән.** Был ниндәй туҙға яҙмаған...

**Зөһрә.** Ә ниңә кире ҡаҡмайһығыҙ? Дөрөҫмө был, Бөрйән ағай?

**Бөрйән.** Тимәк... Тимәк... Ялған был! Ялған!

**Зөһрә.** Ҡыҙ баланы мәсхәрә ит тә аҙаҡ, ул ауырға ҡалғас, уны тормоштан бәхет, мөхәббәт көткән ун һигеҙ йәшлек ғәрип егеткә һыйла, мин гонаһһыҙ, тип йәшәй бир! Хәҙер һеҙгә нисек ышанырға мөмкин? Бөрйән ағай, миндә лә ҡатынығыҙ биргән һорау тыуҙы: һеҙ кем? Был гонаһтарығыҙ тәбиғәт ҡанундарына һыямы? Кешелек йәмғиәте һеҙҙе ғәфү итерме?

**Бөрйән.** Зөһрә һылыуым! Мин ун йыл яңғыҙ йәшәнем! Бөтә гонаһтарым да – яңғыҙлыҡ бәләһе! Хоҙай мине ярлыҡар, һин дә ғәфү ит!.. Зөһрә! Йәнем! Мин һиңә бәхеткә юл астым! Бир ҡулыңды, икәү бергә атлайыҡ!... Мин бөгөн

булмаһа, иртәгә, тиҙ арала Башҡортостан менән бәйләнешкә инәм. Сейәлетауға капитал һалырға уйлайым. Был – бик ҙур аҡса: миллиондар!.. Әсәйеңә ике-өс ҡатлы матур вилла, халыҡҡа – мәсет, дауахана, ашхана һалып ҡуйһаҡ, урамдарға асфальт түшәһәк, ағастар ултыртһаҡ, Сейәлетау ожмах баҡсаһына әйләнәсәк!.. Быларҙы мин түгел, ә һин эшләйһең! Һинең аша мин эшләйем!.. Зөһрә! Йәнем! Әйт инде берәй йылы һүҙ!..

**Зөһрә.** Юҡ, Бөрйән ағай, кәрәкмәй! Сейәлетауға теймәгеҙ! Уның Хоҙай Тәғәлә биргән матурлыҡтары ла, байлыҡтары ла үҙенә етерлек! Бөрйән ағай, оҙатығыҙ мине илемә!

***Хариза, Ансаф, Шәмсиә, Фридрих инә.***

**Хариза.** Бына ул!

**Бөрйән.** Был ниндәй халыҡ? Һеҙгә нимә кәрәк?

**Фридрих.** Мин ҡала прокуратураһынан Хариза Ишемйәрова ханымдың адвокаты Фридрих Шмитц булам. Һеҙ Бөрйән Зиннәтулла улы Ишемйәровмы?

**Бөрйән.** Шунан?

**Фридрих.** Һеҙгә рәсми рәүештә хәбәр итергә тейешмен: бөгөнгө көндөң ун ике сәғәтенән алып банктарҙағы бөтә счеттарығыҙға арест һалынды. Һеҙгә Цюрихтан һәм илдән сығып китеү ҡәтғи тыйыла! Бына рәсми ҡағыҙҙар, ҡул ҡуйыуығыҙҙы һорайым!..

**Шәмсиә.** О, майн Готт! Хоҙайым, ярҙам итегеҙ, йөрәк!

**Бөрйән.** Ҡыланма инде, Шәмсиә апай, урыны был түгел!

**Шәмсиә.** Харап булдыҡ! Бөттөк! Бөтә нәмә селпәрәмә килде... *(Сыға.)*

**Ансаф.** Әсәй! Ниңә һин ошо яуызға кейәүгә сыҡтың?

**Хариза.** Мин атайымды бик ярата инем, уның һүҙен йығырға баҙнат итмәнем. Улым, тыныслан! Хоҙай ҡотҡарҙы беҙҙе ул яуыздан! Беҙ еңдек, балам...

**Ансаф.** Еңдек?

**Хариза.** Эйе, эйе, еңдек, балам, еңдек...

***Бөрйәндең кесә телефоны шылтырай.***

**Бөрйән.** Эйе, Бөрйән Ишемйәров тыңлай... Ҡайҙан? Рәсәй илселегенән? Мөмкин булһа – һуңыраҡ... Аяз Фазылов килгән? Ниндәй Фазылов тағы? Шайтаныма олаҡһын! Ҡалдырығыҙ!

**Зөһрә** *(уның ҡулынан кесә телефонын тартып ала)*. Ярабби! Аяз, ҡәҙерлем, был һинме?

**Тауыш**. Юҡ, был Швейцариялағы Рәсәй илселегенән, Соколов Дмитрий Сергеевич булам. Кем менән һөйләшәм?

**Зөһрә.** Зөһрә мин. Зөһрә Алтынбаева, Башҡортостандан...

**Тауыш.** Бында яҡташығыҙ Аяз Фазылов. Ул илсегә мөрәжәғәт иткән, һеҙгә шуны әйтергә бурыслымын. Әгәр ҙә тыуған илегеҙгә, Рәсәйгә, ҡайтырға теләһәгеҙ, беҙ ярҙам итергә әҙер.

**Зөһрә.** Эйе, эйе! Ҡайтам! Ҡайтам!

**Ансаф.** Зөһрә! Ә мин? Мин бит һине яратҡайным Зөһрә!

**Зөһрә.** Ансаф, һауыҡҡас, сәләмәтләнгәс, ҡунаҡҡа килерһең Башҡортостанға. Беҙҙә Швейцариянан һис тә кәм түгел!

**Хариза.** Тыныслан, улым, тыныслан. Фатма!

**Фатма.** Бән бында!

**Хариза.** Ярҙам ит! Һыу!

**Фатма.** Остом, Хариза ханым!.. Мең тапҡыр ғәфү итегеҙ, хужабикә ҡанатым!

**Хариза.** Бар инде, тиҙ бул!

***Бөрйән, ҡул ҡуйып, ҡағыҙҙарҙы Фридрихҡа тоттора.***

**Фридрих.** Һау булығыҙ!

***Башҡортостан, Сейәлетау, ауыл өйө ишек алды. Йәшел сиҙәмдә ялан аяҡ Зөһрә ултыра. Гөлнара болдорҙа ҡунаҡлаған.***

***Аяз күренә.***

**Аяз** *(йырлай).*
*Кейек ҡаҙҙар оса ҡаңғылдашып,*
*Түштәренә елдәр урала.*
*Һағыныуҙары, ҡаурый-ҡаурый*
*Булып,*
*Ятып ҡалды беҙҙең урамға.*
*Аҫта йәшел сиҙәм оҙата бара,*
*Яулыҡ болғай күктән аҡ болот.*
*Йыраҡтарға илап киткән ҡаҙҙар*
*Йырлап ҡайтыр илгә яҙ булып.*
*„Һағынырбыҙ“ тигән йырҙарыбыҙ*
*Ҡалды зәңгәр күктә яҙылып.*
*Минең дә бит яҙҙар көткән мәлем,*
*Ҡайтырһыңмы йәнгә наҙ булып?..*

**Зөһрә.** Рәхмәт һиңә, Аяз, минең тоғро кешем. Шуны һорайым, тим, ҡайҙан аҡса таптың?

**Гөлнара.** Ул ни, һинең кейәүгә сығырға йыйыныуыңды ишеткәс тә, йортон, һыйырын һатты ла – әйҙә һинең янға, Швейцарияға!

**Зөһрә.** Рәхмәтем сикһеҙ һиңә, Аяз! Һинең алдағы бурысымды мин мотлаҡ ҡайтарасаҡмын.

**Гөлнара.** Ҡыҙым, балам, яныма ултыр әле. Ҡыҙым, мин дә олоғайып барам бит инде. Һин минең берҙән-бер терәгем. Төкөр ҡалаһына, төкөр Швейцарияһына! Ана, Аязыңа кейәүгә сыҡ та, ике мүкләкте һауып, йәшә рәхәтләнеп ҡаймаҡ ашап ҡына! Аязың аҡыллы, юғалып ҡалмаҫ, әллә кем булыр әле ул!..

**Зөһрә.** Булыр, шигем юҡ, тик беҙгә икебеҙгә лә уҡырға инергә, ныҡлы белем алырға кәрәк. Шунһыҙ алға барам тимә. Мин һуңғы ошо бер ай эсендә мөһим бер нәмә аңланым: маҡсатыңа ирешәм тиһәң, выжданыңа хыянат итмә, хаҡлыҡ юлынан ғына атла! Әхлаҡ сиген аша атламай, үҙ-үҙеңде алдамай, алға ынтылһаң, аҡ-ҡараны, ыңғай-кирене, изге-ямանды айыра белерһең, кеше булырһың...

**Гөлнара.** Тағы яңғыҙымды ҡалдыраһыңмы ни, ҡыҙым?

**Зөһрә.** Юҡ, әсәй. Мин инде һинән, Аязымдан, Сейәлетауымдан бер ҡасан да айырылмам!

**Йыр**

*Сейәлетау — тыуған ауылҡайым,*
*Күккә ашҡан ап-аҡ ҡаялар.*
*Ҡарурмандар аша, тулған айҙай,*
*Балҡып тора әллә ҡайҙарҙан.*

*Сейәлетау — тыуған ауылҡайым,*
*Алтындарым минең, көмөшөм.*
*Ер бүлгәндә Хоҙай бүләк иткән*
*Үҙенә тигән иң бай өлөшөн.*

*Сейәлетау — тыуған ауылҡайым,*
*Йылҡыларың йөрөй яланда.*
*Үҙәктәрҙе өҙә һандуғастар,*
*Бер һайраһа йәйге таңдарҙа.*

*Сейәлетау — тыуған ауылҡайым,*
*Һалҡын шишмәләрең шәрбәтле.*
*Йүкә балдарыңдан ауыҙ иткән*
*Һәр кем һиңә мең-мең рәхмәтле.*

*Сейәлетау — тыуған ауылҡайым,*
*Йырҙар иле, моңдар төбәге.*
*Һиндә үҫкән ир-егеттәр, ҡыҙҙар*
*Ғәзиз илкәйемдең терәге.*

*Сейәлетау — тыуған ауылҡайым,*
*Ап-аҡ күлдәр тирә-яғыңда.*
*Ят ҡулдарға һине һис бирмәбеҙ*
*Илем, халҡым иҫән сағында.*

**Шаршау.**

**Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ**

## «ӘКРЕН ГЕНӘ ЙЫЛҒА КӨЙЛӘЙ КӨЙӨН...»

* * *

*Беҙ йөрөгән һуҡмаҡтарҙың*
*Елдәр туҙҙыра саңын.*
*Һағышымдан шул юлдарға*
*Ятып иларҙай сағым.*

*Туҙанлы күҙҙә сағыла*
*Күңелем бошоноуы.*
*Эй, күңелем! Ҡоштар кеүек*
*Ҡайҙарға осоноуың?*

*Бер яңғыҙым һуҡмаҡтарҙа*
*Япраҡтар кисәм инде.*
*Йөрәгемдә бетеү итеп*
*Йөрөтәм исемеңде.*

* * *

*Әҫәрләнеп елдәр иҫә,*
*Ай-һай — һай, ҡоторошоп.*
*Ярһыу шағир күңеләләй*
*Миҙгелдең был торошо.*

*Туҡта. Тыңла. Шул елдәрҙән*
*Сыҡмаймы шиғри өндәр?*
*Үҙе шиғыр түгелме ни*
*Болоҡһоу торған көндәр?*

*Йонсоу мәлдәрҙең кәйефе*
*Сырайыңда, һөйгәнем.*
*Йөҙөң сирғас, хистәремде*
*Шул елдәргә һөйләнем.*

---

*Ринат Сөләймәнов — Архангел районы Аҙау ауылы егете. БДУ-ны тамамлай. Өфөлә уҡыта. Бер шиғри китап авторы.*

*Елдәр сер һаҡлаймы ни һуң?*
*(Онотолғанмын, диуана.)*
*Ни шыбырлай улар һиңә*
*Бик ҡыуана-ҡыуана?*

*Аңлаһаң тәбиғәт телен,*
*Йөҙөң нурланыр ине.*
*Күңелеңдәге асыуың*
*Шул саҡ хурланыр ине.*

*Әҫәрләнеп елдәр иҫә,*
*Ай-һай — һай, ҡоторошоп.*
*Ярһыу шағир яҙмышылай*
*Көндәрҙең был торошо.*

## Был төн

*Ай-шәм яҡтыһында икәүләшеп*
*Серләшеп үткәрҙек был төндө.*
*Ярышып, яратышып күҙәттек*
*Йондоҙҙарҙы — серле төркөмдө.*

*Һиңә арнап мин йыр сығарғанда,*
*Һандуғастар талда һайраны.*
*Беҙҙең мөхәббәттән илһамланды,*
*Гүйә, был төн — һөйөү байрамы.*

* * *

*Йондоҙҙарҙан, гүйә, нурҙар түгел,*
*Һыҙылып та ғына моң тама.*
*Һәр бер есем — айырым бер нота —*
*Киң йыһанда итә тантана.*

*Ә мин, ерҙә, күктә симфония*
*Барлығына бер аҙ ышанып,*
*Тәмләп кенә һөйөү йырын һуҙҙым —*
*Һандуғас моңона ҡушылып.*

*Хайран ҡалып беҙҙең был дуэтҡа,*
*Моңланырһың әле, һөйгәнем.*
*Йөрәгеңә һуҡмаҡ ярыр өсөн*
*Исемеңде һалдым көйгә мин.*

*Төбәлгәндә асыҡ һауалағы*
*Йондоҙ-гәүһәрҙәргә хислерәк,*
*Тойомларһың үҙеңде лә күктең*
*Серле бер есеме төҫлөрәк.*

*Йән түремдә балҡып янған йондоҙ*
*Икәнлегеңде лә аңларһың.*
*Мөхәббәттән тыуған йырым аша*
*Һөйөүемде бер көн һанларһың.*

* * *

*Мөхәббәткә ғашиҡ кеше бит мин,*
*Үҙ хисемә үҙем сәсәйем.*
*Ай-йондоҙло төндөң моңо булып,*
*Һандуғастай һайрап йәшәйем.*

*Ишетһәңсе йөрәк тауышымды?*
*Ауаздаш ул шишмә моңона.*
*Саф хистәрҙең белһәк ҡәҙерҙәрен,*
*Үкенерлек булмаҫ һуңынан.*

*Нисек ярһыуымды аңлар өсөн*
*Инйәр шаршыһына ҡара ла*
*Тойомла һин: ниндәй көслө ялҡын*
*Ҡабыныуын беҙҙең арала.*

*Мөхәббәткә ғашиҡ кеше бит беҙ,*
*Шатлыҡтар ҙа шунан, ғазап та...*
*Саф хистәрҙең белһәк ҡәҙерҙәрен,*
*Үкенмәҫлек булыр аҙаҡтан.*

* * *

*Әкрен генә йылға көйләй көйөн,*
*Таң йылмая яҙғы офоҡтан.*
*Йәнгә һыймаҫ ҡайнар хистәр булып*
*Яҙғы нур сағыла ысыҡтан.*

*Яңы ҡайтҡан ҡоштар — тере нота:*
*Күккә менеп, ергә төшәләр.*
*Йәнгә оялаған йырҙы һеҙгә*
*Ишеттергем килә, кешеләр!*

*О, ниндәй бәхет — илаһи мәлдә*
*Бөрөләр күҙҙәрен асҡанда,—*
*Хайран ҡалып яҙғы гүзәллеккә,*
*Аҙашып йөрөүе аҡланда.*

* * *

*Аҡ талан — туй күлдәге*
*Кейеп алған туғайым,*
*Һәр юлсыны үҙенә*
*Ғашиҡ итә, моғайын.*

*Шул туғайлыҡта икәү*
*Йондоҙҙар һанап яттыҡ.*
*Сәскәләр уянғансы*
*Хыял иленә баттыҡ.*

*Сабый төҫлө иренеп,*
*Таң атҡанда алланып,*
*Күҙҙәрең китте янып,*
*Ирендәрең — балланып.*

*Ҡулға-ҡул тотоношоп,*
*Һөйөү биргән көс менән*
*Киләсәккә юл ярҙыҡ*
*Һалҡын ысыҡ өҫтөнән.*

*Сәтләүек тауҙан ҡояш*
*Бәпкәләй төрттө морон.*
*Яңы көндө ҡаршылап*
*Сыйырсыҡ һуҙҙы йырын.*

*Аҡ томан — йомшаҡ шәлен*
*Һалып алып иңенә,*
*Нурлы һуҡмаҡ буйлап таң*
*Күсте офоҡ сигенә.*

*Өр-яңы көнгә баҡтыҡ,*
*Оҙатып алһыу таңды.*
*Күҙҙәреңдән, нур булып,*
*Һөйөү хистәре тамды.*

**Рәзилә ҠОТЛОГИЛДИНА**

## *Рәхмәтлемен һеҙгә...*

*Тыуған яҡтар, тәпәй баҫҡан тупраҡ —*
*Киткән саҡта һүҙ ҙә тапманым.*
*Уйламаным әсе елдәр урап,*
*Шаҡып йөрөр өмөт ҡапҡаһын.*

*Һирәк осрашырға насиптыр шул,*
*Ауылғынам, тыуған урамым.*
*Нисәмә ҡат хистәр буранында*
*Уйҙарымда ҡайтып ураным.*

*Рәзилә Ҡотлогилдина — Мәләүез ҡалаһындағы М. Буранғолов исемендәге китапханала эйҙәүсе белгес. Район күләмендә әҙәби-мәҙәни кисәләр ойоштора, «Ағиҙел»де пропагандалаусы иң ихлас дуҫтарыбыҙҙың береһе.*

*Йылдар арғымағын йүгәнләргә*
*Етмәгәндер, ахры, ғәйрәтем.*
*Илкәйемә әйтер һүҙгенәм бар,*
*Йәнсеп тора йөрәк иңрәтеп.*

*Гелән генә иркәләтеп мине,*
*Буйлатманың. Әммә ҡаҡманың.*
*Башым эйәм әсәм алдарында:*
*Хәүеф-хәтәрҙәрҙән һаҡланы.*

*Юлдарымда гелән йәшел келәм*
*Түшәлмәҫен тойҙом. Бешендем.*
*Ҡоҙғондар ҙа осҡан зәңгәр күктең*
*Аяҙ булмаҫлығын төшөндөм.*

*Рәхмәтлемен һеҙгә, бурыслымын,*
*Мәрхәмәтле тыуған яҡтарым.*
*Онотorға һеҙҙе һис хаҡым юҡ, —*
*Ҡайтарһамсы бурыс хаҡтарын!*

## Шиғри йөрәк

*Шиғри йөрәк, ос һин йыраҡтарға!*
*Талпын, саҡыр зәңгәр офоҡҡа.*
*Илһам ҡошоң һине ташламаһа,*
*Бирешмәҫһең күңел бушлыҡҡа.*
*Рухландырһын шиғри илаһиәң,*
*Ғүмерлеккә юлдаш булһын тиһәң,*
*Саф нурыңдан ижад ҡойҙо ниһәң,*
*Хистәр урғылғанын тойҙо ниһәң,*
*Хыял ҡанаттарын күккә сөйөр,*
*Үҙең ғашиҡ шиғриәтең һөйөр,*
*Шул булыр ҙа, бәлки, илһам тигән,*
*Күңел ҡошоң, рухи дуҫың, ижад ҡылың.*

## Тамаша

*Урман — сәхнә.*
*Сәхнәләрҙә кемдәр?*
*Бөтә ағас ҡорған тамаша.*
*Башым сайҡап,*
*хайран ғына ҡалам,*
*Тамашаға күҙҙәр ҡамаша.*
*Эй, Хоҙайым, тимен ирекһеҙҙән,*
*Һәр ҡайһыһын ҡосам тәбрикләп.*
*Зауыҡлы ла, ай-һай, кейемегеҙ,*
*Сәпәкәйҙәр итәм тирәләп.*
*Ҡайын, саған, миләштәргә ҡарап*

*Тындарымды алмай торамсы.*
*Матурлыҡтар һеҙҙә хаттин ашҡан!*
*Кешеләрҙәй һеҙҙе ҡосамсы.*
*Ирендәрем генә шыбырлайҙар:*
*«Гелән шулай булып ҡалығыҙ!»*
*Һеҙҙең, тимен, нурҙар сәсеп торған*
*«Беҙ шундайбыҙ!» тиер сағығыҙ.*
*Һығылмалы билле ҡоҙасалай*
*Ҡайынһылыу башын сайҡаны.*
*Кеше ғүмереләй ялҡын дәүер,*
*Ел-яҙмышҡай һеҙҙе айманы.*
*Сәхнә-түрҙе япраҡ ҡапланы...*

## *Һөйөүҙән яралған*

*/Йыр/*

*Юғалдым тормошта, һыйындым яҙмышҡа,*
*Хистәрем йомолдо йөрәккә.*
*Бирегеҙ кәңәштәр,тапмағыҙ сәбәптәр,*
*Өндәшәм дауалар кәрәккә.*
*Бәреләм болотҡа, һыйынам ҡояшҡа,*
*Нур-ҡояш һыйыныр ышыҡмы?*
*Йөрәктә йәрәхәт телгеләй, өҙгөләй,*
*Күңелем офоғо бушлыҡмы?!*
*Туҡтауһыҙ һынауҙар, боҙлауыҡ, ҡырауҙар*
*Сатнатып өшөтә рухымды.*
*Ҡаршымда ел-дауыл, бирешеү — упҡын ул,*
*Елдәргә сәсмәйем тойғомдо.*
*Тойғолар бураны күңелемде ураны,*
*Йәшәүем һөйөүҙән яралған.*
*Гөлсәрҙән — өмөтөм, үрҙәрем-тәхетем,*
*Үткәндәр томанда таралған.*

**Фәнис БИКТАШЕВ**

## *Әбетем — изге төйәгем*

*Атай-бабай белмәй һалмағандыр*
*Ошо ерҙә ауыл нигеҙен.*
*Әбет — минең тыуған ауылҡайым,*
*Матур уның һәр бер миҙгеле.*

*Ярҙарына баҫып ҡарап торам,*
*Гөрләп аға йылғам — Нөгөшөм.*

---

*Фәнис Бикташев Мәләүез районы Әбет ауылынан. Мәләүез ҡалаһында йәшәй һәм эшләй. „Ағиҙел“ журналының яҡын дуҫы.*

*Шундай рәхәт бында, юҡтыр башҡа*
*Тәбиғәттең ундай мөйөшө.*

*Иҫке Нөгөш тигән ҡултығы бар,*
*Мәстүлеге булды балыҡлы.*
*Шүкә, ҡомой, алабуғалары*
*Туйҙырғандыр эшсән халыҡты.*

*Аръяғында — мәғрур Ҡыҙыл ташы,*
*Бирьяғында — матур Аралы.*
*Уңда ҡая, ә һулаҡай яҡта*
*Йәйрәп ята туғай, яланы.*

*Туғай, Туғай — тик хәтерҙә генә*
*Унда үҫкән муйыл, баландар.*
*Оҙон күлдең батҡағына батып*
*Табан балыҡ тотто малайҙар.*

*Бесән саптыҡ Бүләк буйҙарында,*
*Ашҡа төшә инек Шишмәгә.*
*Тәмле ине мәтрүшкәле сәйҙәр —*
*Һағындырып иҫкә төшәләр.*

*Ә кистәрен, бесән эше бөткәс,*
*Ярышып ҡайтыр инек кемуҙар.*
*Сөйрөлмәк һәм Морон көттө беҙҙе,*
*Ниндәй рәхәт ине шул һыуҙа.*

*Мансур баҡсалары ниндәй күркәм,*
*Өскил, Дүрткил, Оҙон Бүләге.*
*Ҡайҙа ғына китеп йөрөһәм дә,*
*Һағындыра тыуған төйәгем.*

*Тәбиғәте матур, халҡы батыр,*
*Ә һыуҙары эсеп туйғыһыҙ.*
*Бына шундай изге төйәгем бар —*
*Алтындарға биреп ҡуйғыһыҙ.*

## БАШҠОРТ ТЕЛ ҒИЛЕМЕН НИГЕҘЛӘҮСЕ ПЕДАГОГ

*(Закир Шакировтың тыуыуына 130 йыл )*



Башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, энциклопедик белемле филолог ғалим, күренекле мәғрифәтсе-педагог Закир Шакир улы Шакировтың (1881 — 1968) тыуыуына 130 йыл тулды. Ул тел, әҙәбиәт ғилемен, фольклористиканы, тыуған яҡты, тарихты һәм этнографияны өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән кеше.

Хеҙмәт юлын Беренсе рус революцияһы йылдарында башлаған З.Ш. Шакиров ярты быуаттан күберәк ғүмерен белем биреү һәм ғилем өлкәһенә бағышланы. Тыуған яҡты өйрәнеү, филология фәненең күп кенә өлкәләрендә юл ярыусы булды ул. Киң ҡарашлы һәм эрудициялы кеше булараҡ, ул коллегаларының ихтирамын һәм абруйын ҡаҙанды. Ғилми фекерләүенең тәрәнлеге, фундаменталлеге, байтаҡ көнсығыш телдәрен һыу кеүек эскәнлеге өсөн уны фәнни һәм вуз коллективтары ғына түгел, күп һанлы уҡыусылары ла юғары баһалай ине.

З.Ш. Шакиров Өфө губернаһы (хәҙерге Кушнаренко районы) Бөрө өйәҙе Мәскәү волосына ҡараған Ҡарасай-Йылға ауылы уҡытыусыһы һәм муллаһы ғаиләһендә донъяға килә. Башланғыс белемде тыуған ауылында ала, артабан уҡыуын яңы алым буйынса эшләгән Рәсмәкәй ауылы мәктәбендә дауам итә. Атаһының кәңәше буйынса, белемде үҙ аллы үҙләштереү алымын ҡулланып, арифметика, география, тарих фәндәре буйынса һиҙелерлек уңыштарға өлгәшә. Рус теленең әһәмиәтен һәм ролен йәштән аңлай, был инаныуға ғүмере буйына һәм педагогик эшмәкәрлеге дауамында тоғро ҡала. Ҡөрьән һәм хәҙистәрҙе үҙләштереү менән бер рәттән, шул йылдарҙа уҡ ғәрәп теленең фонетикаһы, төрки грамматикаһының нигеҙҙәре менән таныша.

Оҙаҡ уйланыуҙарҙан һуң Закир уҡытыусы һөнәренә эйә булырға ҡарар итә һәм XX быуат башында Рәсәй империяһының иң эре мәҙәни үҙәктәренең береһе булған Ҡазанға барырға була. 1895 йылдың көҙөндә 1882 йылда Ғәлимйән Баруди нигеҙ һалған „Мөхәммәҙиә“ мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Ислам һәм әхлаҡ тураһында дөйөм күҙаллауҙарҙы һаҡлап, Баруди мосолмандарҙың дини тормошон, бигерәк тә белем биреү һәм уҡытыу өлкәһендә, ойоштороу тәртибе йәһәтенән шәхсән тәнҡитсел ҡарашта була. „Мөхәммәҙиә“нең уҡыу программаһына, традицион дини предметтарҙан тыш, гуманитар, тәбиғи һәм теүәл фәндәр, шул иҫәптән логика, иҡтисад, философия тарихы кеүек фәндәр индерелә.“Мөхәммәҙиә“

билдәле бер профилле белгес әҙерләүҙе маҡсат итеп ҡуймай, унда белем алыусы шәкерттәр дөйөм урта белем ала.

Закир Шакиров „игдади“ класына ултыртыла (юғары класс алдынан килеүсе баҫҡыс) һәм, күп тә үтмәй, „ғали“ класына (юғары класс) күсерелә. Башҡорт һәм татар телдәре менән бер рәттән, ғәрәп, фарсы, төрөк телдәрен ифрат яҡшы белеүе уға артабан әзербайжан, үзбәк, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ телдәрен еңел үҙләштерергә ярҙам итә. Шәкерт йылдарында уҡ дини схоластикаға, милли сикләнгәнлеккә ҡаршы әүҙем көрәшкән күренекле татар мәғрифәтсеһе Ҡәйүм Насыри менән таныша. 75 йәшлек ғалим менән йәш шәкерт араһында, йәш айырмаһына ҡарамай, дуҫлыҡептәре урынлаша. Ғалимға йәш дуҫы тарих, география, көнсығыш әҙәбиәте кеүек өлкәләрҙә тәрән белемле булыуы менән оҡшай. Ҡәйүм Насыри уны үҙенең яҡын дуҫы, Ҡазан университеты профессоры Н.Ф. Катанов менән таныштыра. Был танышлыҡ тиҙ арала оло дуҫлыҡҡа әүерелеп, Закир Шакировтың ғилми һәм педагогик эҙмышында ҙур роль уйнай.

Көнсығыш телдәрен, әҙәбиәтен, тарихын яҡшы белеүе, эшһөйәрлеге, тирә-йүндәгеләргә һәр ваҡыт ыңғай мөғәләмәлә булыуы менән Закир Шакиров уҡытыусылар һәм шәкерттәр араһында лайыҡлы абруй ҡаҙана. Шул сәбәпле „Мөхәммәҙиә“ мәҙрәсәһенең юғары класында уҡып йөрөгән килеш, мәҙрәсәнең түбән кластарында уҡытҡан уҡытыусының ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә, аҙаҡ урта кластарҙа туған тел һәм әҙәбиәттән дәрестәрҙе үҙ аллы уҡытыуға күсә.

Сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт арауығында Закир Шакиров татар интеллигенцияһы вәкилдәре менән таныша. „Әл-Ислах“ (реформа) гәзитенең редакторы Фәтих Әмирхан уны татар шағиры, яңы татар әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе Ғабдулла Туҡай менән таныштыра. Туҡай йәш уҡытыусының география дәресенә инеп ултыра һәм уның уҡытыу методикаһын юғары баһалай. Яңы танышында буласаҡ бөйөк педагог идеалын шәйләгән шағир һәм талантлы шәкерт айырылмаҫ дуҫтарға әйләнә. Туҡай яңы дуҫының ҡайһы бер мәҙрәсәләрҙәге тәртиптәр, уның уҡытыусылары һәм шәкерттәре тураһында һөйләгәнен ғәжәпһенеп тыңлай. Ошо әңгәмәләр Туҡайҙың сатирик мәҡәләләр теҙмәһе барлыҡҡа килеүенә, атап әйткәндә „Мәҙрәсәнән сыҡҡан шәкерттәр ни һөйләй?“ (1907) эссеһы яҙылыуына булышлыҡ итеүе ихтимал. „Әл-Ислах“тың әҙәби бүлек мөдире вазифаһын биләгән Ғабдулла Туҡай гәзит биттәрендә иҫке алым менән эшләүсе мәҙрәсәләрҙәге феодаль-патриархаль тәртиптәрҙе ҡаты тәнҡит утына тота. Туҡай кәңәше буйынса Шакир Закиров ошо баҫмала „Мөхәммәҙиә“ләге уҡытыу процесы торошон яҡтыртҡан ҙур булмаған мәҡәләһен баҫтыра. Һуңынан, йылдар үткәс, Шакир тәүге ғилми мәҡәләһе тип уны түгел, ә 1908 йылда иҡтисади һәм йәмәғәти-сәйәси рухтағы „Бәйәнелхаҡ“ (Хәҡиҡәтте аңлатыу) гәзитендә донъя күргән „Өфө губернаһы типтәрҙәре кемдәр улар?“ исемле мәҡәләһен атай. Ошо уҡ йылда Ҡазанда мәҙрәсәнең башланғыс кластар уҡыусылары өсөн тәғәйенләнгән „География буйынса иллюстрациялы ҡыҫҡа китап“ методик ҡулланмаһы донъя күрә. Закир Шакиров „Иттифаҡ әл-мөслимин“ (Мосолмандар союзы) Рәсәй мосолмандарының либераль-демократик партияһы лидерҙарының береһе Йософ Аҡсура, педагог Мөхитдин Ҡорбанғәлиев, яҙыусы-тәржемәсе Фәтих Хәлиди кеүек зыялылар даирәһенә инеп китә.

1908 йылда, уҡытыу хоҡуғына имтихандарҙы уңышлы тапшырып, Закир Шакиров дөйөм белем биреү дисциплиналары уҡытыусыһы булып эшләй башлай. Киләһе йылға уҡ, ысын уҡытыусы булыу хыялы тормошҡа ашһын өсөн, тәғәйен предметтарҙан алынған белем генә аҙ булыуын, шәкерттәргә профессиональ белем биреү, уҡытыу методикаһын үҙләштермәйенсә мөмкин түгел икәнлеген аңлаған егет Ҡазандағы Уҡытыусылар институтына инергә ынтылып ҡарай, тик уның өсөн Халыҡ мәғарифы министрлығынан рөхсәт ала алмай. Шунлыҡтан ул, Н.Ф. Катанов тәҡдиме менән, күптән түгел асылған А.Л. Шанявский исемендәге Мәскәү халыҡ университетына уҡырға инә. Матди ауырлыҡтар уны, уҡыуын өҙөп, 4-се курстан китергә мәжбүр итһә лә, был университетта уҡыу йылдары Закир Шакировтың профессиональ педагог булараҡ нығыныуында ҙур роль уйнай.

Закир Шакиров Башҡортостанға ҡайта һәм 1915 йылдың 1 ғинуарынан Өфө губернаһы земствоһының халыҡ мәғарифы бүлеге инородецтар бүлексәһе мөдире ярҙамсыһы һәм инструкторы булып эшләй башлай. 1915 йылдың июнендә Рәсәйҙең инородецтар мәктәптәрендә ҡулланылған китаптарҙы тикшереү һәм тәҡдимдәр яһау буйынса уҡытыусылар, мөғәллимдәр кәңәшмәһендә ул инородецтар мәғарифы бүлексәһе мөдире урынбаҫары булараҡ сығыш яһай. Кәңәшмәлә Мәскәүҙән, Ҡазандан һәм Ҡазан губернаһынан, Өфөнән, Ырымбурҙан, Силәбенән, Троицкиҙан, шулай уҡ Өфө, Бөрө, Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәренән йәмғеһе 25 кеше ҡатнаша. Сит халыҡтар башланғыс мәктәбендә ҡулланыуға тәҡдим ителгән 63 китап һәм ҡулланма араһында Закир Шакировтың 1908 йылда Ҡазанда нәшер ителгән һәм 1914 йылда, кәңәшмәнән саҡ ҡына алдараҡ, ҡайтанан баҫылған „География буйынса иллюстрациялы ҡыҫҡа китап“ та була. Географияға ҡыҙыҡһыныуын һаҡлап, Закир Шакиров эштән буш ваҡытында земство етәкселегендәге башланғыс кластар уҡытыусылары курстарында уҡыта, Өфө губернаһының тәбиғәт шарттарын һәм иҡтисадын өйрәнә. Һөҙөмтәлә 1917 йылда уның „Өфө губернаһы географияһы“ хеҙмәте донъя күрә, артабан баҫма 1919 йылда ҡайтанан сығарыла.

Закир Шакировтың профессиональ педагог булараҡ үҫешеп етеүендә 1912 йылдың көҙөнән алып Өфө губернаһы земствоһы тарафынан асылған 3 йыллыҡ педагогик курстарҙа эшләүе ғәйәт ҙур йоғонто яһай. Ысынында иһә был курстар Рәсәйҙәге туған телгә, дингә, өлөшләтә милли мәҙәниәткә граждандыҡ хоҡуғын рәсми рәүештә таныған урыҫ-татар һәм урыҫ-башҡорт мәктәптәре өсөн уҡытыусылар әҙерләгән тәүге мосолман уҡыу йорто (семинария тибындағы) була.

1917 йылдың йәйендә Өфөлә Закир Шакиров инициативаһы буйынса көҙөн асыласаҡ махсус милли гимназияла кластар комплектациялау өсөн башҡорт һәм татар балаларына ике айлыҡ әҙерлек курстары ойоштоорола. Рәсәйҙә быға саҡлы булмаған был уҡыу йортон ойоштороуҙа, земствонан тыш, урындағы мосолман руханиҙары әүҙем ҡатнаша. Закир Шакиров тәүҙә мөдир урынбаҫары, һуңынан мөдир вазифаһын башҡарған милли гимназия Граждандар һуғышы йылдарында ла, Өфө йә ҡыҙылдарға, йә аҡтарға күскән мәлдә лә, эшенән туҡтамай. 1919 йылдың июнендә ҡаланы колчаковсыларҙан тулыһынса азат иткәс, милли гимназия нигеҙендә I һәм II баҫҡыслы ике татар-башҡорт мәктәбе, артабан Өфө ҡалаһының 2-се һанлы

Берҙәм хеҙмәт совет мәктәбе ойоштоpола. 1929 йылғаса мәктәптең мөдире булып Закир Шакиров эшләй. Мөдир булараҡ, ул үҙе етәкселек иткән коллективтың профессиональ һәм мәҙәни үҫешенә ҙур иғтибар бирә. „Белем һәм һәләт, яҡшы холоҡ кешенең тыумыштан бирелгән сифаттары түгел, улар ныҡыш хеҙмәт, систематик рәүештә белем алыу һәм тәрбиә нигеҙендә генә формалаша", — ти Закир Шакиров. Ул етәкселек иткән мәктәптә, балаларға тәрбиә биреүҙең мөһим сараһы булараҡ, туған телде уҡытыуға айырым иғтибар бүленә.

Граждандар һуғышы йылдарынан һуң килгән емереклек шарттарында мәктәп менән етәкселек итеү, уҡытыусылар коллективының яҡшы эшмәкәрлеген йәйға һалыу өсөн күп көс, ныҡышмалылыҡ, ваҡыт талап ителә. Ләкин ошондай шарттарҙа ла З.Ш. Шакиров йәмәғәт эше менән әүҙем шөғөлләнеүен дауам итә. 1919 йылдың йәйендә, Өфө ҡалаһын аҡтарҙан азат иткәс, ул йәмәғәт нигеҙҙәрендә ГубОНО эргәһендә ойоштоpолған ҡаланың башҡорт һәм татар халҡы араһында белем таратыу бүлеге менән етәкселек итә.

З.Ш. Шакиров Граждандар һуғышы йылдарында байтаҡ экспонаттарын юғалтҡан, шул сәбәпле 1919 йылдың көҙөндә ябылған Өфө губернаһы музейын тергеҙеү эшен башлап ебәрә. Этнография, археология бүлектәренең мөғжизә менән генә һаҡланып ҡалған экспонаттары нигеҙендә ул тәүҙә „Көнсығыш халыҡтарының тарихи-социаль музейы" исеме менән йөрөгән, 1921 йылдан алып тыуған яҡты өйрәнгән „Көньяҡ Урал буйы музейы" тип атала башлаған музей ойоштора. Ошо йылдар дауамында З. Ш. Шакиров уның төп етәксеһе һәм һаҡлаусыһы булып ҡала.

1920 йылда уҡ музей Төркөстанға тәүге этнографик экспедицияһын ойоштора. 20-се йылдар уртаһынан быңдай экспедициялар даими рәүештә үткәрелә башлай. 1922 йылдың уртаһында, Өфө баш ҡалаһы булған Оло Башҡортостан ойошторолғас, музейҙа „Башҡортостанды өйрәнеү буйынса ғилми ойошма" урынлаштырыла. Эшмәкәрлеген бер йыл элек Стәрлетамаҡта башлаған был ойошма тәүҙә „Башҡортостандың тарихын, мәҙәниәтен, йәшәйешен өйрәнеүсе йәмғиәт" тип атала һәм унда ни бары 10 ағза ғына иҫәпләнә. Ойошма бик тиҙ үҫә: 1924 йылда унда 24 кеше иҫәпләнһә, 1926 йылда Башҡортостандың 18 кантонында үҙ аллы бүлексәләре була һәм ул 83 кешегә тиклем арта. 1926 йылдан ойошма „Башҡорт аймағы" исемле альманахын баҫтыра башлай. З. Шакиров уның менән әүҙем хеҙмәттәшлек итә. 1926 — 1929 йылдарҙа ул ошо альманахта бер нисә материал, шул иҫәптән „Тюркологияның бөгөнгө торошо һәм киләсәктә уның үҫеш юлдары", „Башҡорттар һәм татарҙар традицияларына ярашлы үҙҙәре ни эшләне", „Төньяҡ Монголия" мәҡәләләрен баҫтыра. „Башҡорт аймағы" альманахы З. Ш. Шакировтың ғилми һәм хеҙмәт эшмәкәрлегенә 25 йыл тулыуға ҡарата үҙ биттәрендә уға бағышланған бер нисә мәҡәлә баҫтыра.

XX быуаттың 20-се йылдарында башҡорт алфавитын һәм орфографияһын эшләү мохтажлығы тыуғас, З. Ш. Шакиров реформалаштырылған ғәрәп графикаһы нигеҙендә башҡорт яҙмаһын булдырыуға, шулай уҡ төрки теле иҫке яҙма традициялары, йәнле һөйләү теле һәм фольклор нигеҙендә барлыҡҡа килгән башҡорт әҙәби телен даими ҡулланылышҡа индереүгә күп көс һала. Был ваҡытҡа ул шул осор тюркологияһының торошона үҙ аллы баһа бирергә ҡыйып ҡына ҡалмай, уның артабанғы үҫешенә йоғонто

һарлыҡ конкрет тәҡдимдәр индергән абруйлы тюркологҡа әйләнгән була. 1926 йылдың февралендә З. Ш. Шакиров СССР-ҙың төрки телле халыҡтарының яҙмаһын латин графикаһына күсереү мәсьәләһе хәл ителгән Бакуҙағы I Бөтә Рәсәй тюркологтары съезында ҡатнаша. 1928 йылдың ғинуарында Башҡортостанды өйрәнеү буйынса йәмғиәттең тел һәм әҙәбиәт секцияһында „Көнсығыштың XI быуаттағы күренекле ғалимы Мәхмүт Ҡашғариҙың тормошо һәм эшмәкәрлеге“ (бихисап әҙәби өҙөктәрҙе үҙ эсенә туплаусы төрки телдәренә ҡараған боронғо яҙма ҡомартҡыларҙың береһе — мәшһүр „Төрки телдәре һүҙлеге“ (1072 — 1074) авторы) тип аталған доклад менән сығыш яһай.

З. Ш. Шакиров башҡорт телен өйрәнеүҙә тәүге уҡыу ҡулланмаларын, дәреслектәрҙе, программаларҙы төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша. 1924 йылда „Башкнига“ нәшриәтендә Ш. Чураев менән берлектә ул II баҫҡыс мәктәптәр өсөн „Урыҫтар өсөн башҡорт теле дәрестәре“ дәреслеген баҫтырып сығара. Китаптың „Өндәр һәм уларҙың әйтелеше тураһында“ инеш һүҙе, асылда, башҡорт һәм урыҫ телдәренең өндәр системаһын, башҡорт теленең лексикографик һәм грамматик категорияларын сағыштырыуға бағышланған тәүге етди ғилми тикшеренеү була. Шунлыҡтан китаптың инеш һүҙе булған был яҙманы З. Ш. Шакировтың үҙ фәнни хеҙмәттәре исемлегенә үҙ аллы ғилми мәҡәлә итеп индереүенә аптырайһы түгел. Шул уҡ авторҙар „Урыҫтар өсөн башҡорт теле“ дәреслеге артынса I баҫҡыслы мәктәптәр, техникумдар, рабфактар өсөн „Башҡорт теленән практик дәреслек“ (1929) әҙерләй. Был дәреслектәргә З. Ш. Шакиров өс бүлектән торған „Урыҫ мәктәптәренә уҡытылған башҡорт теле өсөн эш дәреслектәре“ һәм „Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеү буйынса методик ҡулланма“ (1932 йылда Башҡорт китап нәшриәтендә баҫылып сыға) яҙа. Шул уҡ йылда К. Әхмәров менән берлектә яҙылған „Башҡорт теле дәреслеге“нең 1-се өлөшө (башланғыс курс) баҫылып сыға; 1934 йылда З.Үтәшев менән авторлыҡта алда телгә алып үтелгән уҡыу әсбабының икенсе өлөшө „Урыҫтар өсөн башҡорт теленән дәреслек“ исеме аҫтында донъя күрә. 1932 — 1934 йылдарҙа З. Ш. Шакиров II баҫҡыс мәктәптәрҙең 2-се, 5-се, 6-сы һәм 7-се кластары өсөн башҡорт теленән дәреслектәр, эш дәфтәрҙәре әҙерләй һәм баҫтырып сығара. Уның З. Ҡолбәков менән берлектә яҙылған ике дәреслеге өлкәндәргә тәғәйенләнгән була: „Өлкәндәр өсөн башҡорт теле“ (1934) һәм „Партия етәкселәре һәм совет хеҙмәткәрҙәре өсөн башҡорт теленән дәреслек“ (Өфө, 1941).

З. Ш. Шакировтың тел төҙөлөшө буйынса эшмәкәрлеге, шул иҫәптән башҡорт теленән дәреслектәр яҙыу, 1922 — 1929 йылдарҙа Башнаркомпростың академик үҙәге, артабан Башҡорт комплекслы ғилми-тикшеренеү институты менән (1932 йылда унан бүленеп сыҡҡан үҙ аллы Милли мәҙәниәт буйынса башҡорт ғилми-тикшеренеү институты) хеҙмәттәшлек итеү сиктәрендә башҡарыла. Был учреждениеларҙа ул йә ғилми хеҙмәткәр, йә башҡорт теленең лингвистикаһы, этнографияһы һәм фольклоры буйынса консультант була.

З. Ш. Шакировтың бигерәк тә Милли мәҙәниәт буйынса башҡорт ғилми-тикшеренеү институтындағы тәүге уҡыу терминологик һүҙлектәре серияһын булдырыуҙағы хеҙмәттәре үтә һөҙөмтәле. Был эшмәкәрлек 1922 йылдан Республика мәғариф халыҡ комиссариаты янында эшләп килгән һәм

башҡорт телендәге сәнғәт, сәнәғәт һәм фән өлкәләрендәге терминдарҙың рәсми системаһын булдырыуға йүнәлтелгән Махсус терминология комиссияһы тарафынан ойошторола. 1932 йылда З.Ш. Шакиров С. Баранов менән берлектә ботаниканан „Башҡорт, урыҫ, латин телдәрендәге үҫемлек исемдәре" терминологик һүҙлеген баҫтыра. Шул уҡ йылдарҙа Х. Әбдрәшитов, Ғ. Йосопов, Р. Фәхретдинов менән авторлыҡта „Химиянан урыҫ-башҡорт һәм башҡорт-урыҫ терминдары", В. Сөләймәнов һәм М. Срумов менән авторлыҡта „Математиканан урыҫ-башҡорт терминдары"н нәшер итә. З. Ш. Шакиров 1934 йылда ҡайтанан эшкәртелеп һәм өҫтәлеп баҫтырылған „Математиканан урыҫ-башҡорт терминдары" һүҙлеге авторҙарының береһе була. Артабанғы йылдарҙа төрлө профилле терминологияны булдырыу һәм уны ваҡытлы матбуғат аша әйләнешкә индереү бурысын күренекле башҡорт телселәренән торған Хөкүмәт терминологик комиссияһы үҙ өҫтөнә ала. Был эштә З. Ш. Шакиров та әүҙем ҡатнаша.

З. Шакировтың ғилми эшмәкәрлегендә Башҡортостандың мәҙәни мираҫын өйрәнеү буйынса төрлө экспедициялар ҙур урын биләй. 1929 йылдың майында Башҡортостандың айырым диалекттарын һәм урындағы һөйләштәрҙе, Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ райондарында йәшәүсе башҡорттарҙың фольклорын өйрәнгән йәмғиәттең экспедицияһын етәкләй. 1928—1929 йылдарҙа З. Ш. Шакиров СССР Фәндәр академияһының билдәле тюрколог һәм көнсығыш белгесе Н.К. Дмитриев етәкләгән Башҡорт комплекслы экспедицияһы лингво-фольклор подотряды эшендә әүҙем ҡатнаша. СССР Фәндәр академияһы ойошторған комплекслы экспедицияла ҡатнашҡан көндәрен иҫләп, З. Ш. Шакиров былай тип яҙҙы: „Экспедиция эше барышында тюркологтарҙың башҡа йүнәлеш буйынса белгестәрҙән һиҙелерлек артта ҡалыуын иҫәпкә алып, Н.К. Дмитриев экспедиция эшендә өр-яңы методика ҡулланырға тәҡдим итте. Уның нигеҙендә Көнбайыш-Европа һәм рус диалектологтарының көндәлек практикаһына ингән ҡаҙаныштарын төрки (тимәк, башҡорттоҡона ла) материалына ҡулланыу принцибы ята". Н.К. Дмитриев менән танышлыҡ артабан оло дуҫлыҡҡа әүерелә. Хәҙерге Баймаҡ, Әбйәлил райондары территорияһында үткән экспедиция барышында урындағы халыҡтан бихисап йырҙар, әкиәттәр, риүәйәттәр, әйтемдәр йыйыла, фонографҡа ҡурайсыларҙың байтаҡ көйҙәре яҙып алына. Учалы һәм Белорет райондарына Н.К. Дмитриев етәкселегендәге экспедиция бигерәк тә уңышлы була. Ошо экспедиция сиктәрендә З. Ш. Шакиров бер төркөм тикшеренеүселәр төркөмөн Арғаяш, Ҡоншаҡ, Ялан-Ҡатай яҡтарына алып бара. Экспедицияла тупланған ифрат бай диалектик һәм фольклор материалдары З. Ш. Шакиров тарафынан „Белем", „Мәҙәни революция" журналдарында, „Крайҙы өйрәнеү йыйынтығы"нда ҡыҫҡа отчеттар (хисапламалар) рәүешендә даими рәүештә баҫтырыла килде. Башҡорттарҙың халыҡ ижады һәм йәнле телмәр материалдарынан тыш, экспедицияла ҡатнашыусылар башҡорт мәғрифәте тарихының билдәһеҙ биттәрен яҡтыртыусы факттар таба. Атап әйткәндә, З. Ш. Шакиров бөгөнгө көндә Аҡмулла исеме аҫтында билдәле шағир-мәғрифәтсе, башҡорт шиғриәте классигы Мифтахетдин Камалетдиновтың билдәһеҙ шиғырҙарын таба. Шаһиттар (үҙ күҙҙәре менән күреүселәр) менән әңгәмәләшеү барышында ул Аҡмулланың башҡорттар араһынан йәнә бер күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев менән осрашыуҙары тураһында мөһим мәғлүмәттәр ала.

З. Ш. Шакиров әүҙем ҡатнашҡан Н.К. Дмитриев етәкселегендәге был экспедицияларҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Экспедицияла ҡатнашыусылар танышҡан башҡорт халҡының диалекты, фольклоры, йәнле һөйләш материалдары Н.К. Дмитриев тарафынан әле быға тиклем тиңе булмаған „Башҡорт теле грамматикаһы“ хеҙмәтендә ҡулланыла (М.-Л., 1948; Өфө, 1950, башҡорт телендә). Ул башҡорт, ғәрәп, иран, инглиз фонетикаһы факттарын оҫта дөйөмләштереүе, башҡорт теле өндәренең тарихи тамырҙары тураһында яңы төшөнсә биреүсе тел-ара сағыштырыуҙар менән ҡыҙыҡлы.

Башҡортостандың халыҡ мәғарифы үҫешендә әүҙем ҡатнашып, З. Ш. Шакиров ярты быуатҡа яҡын республиканың төрлө юғары уҡыу йорттарында: 1920 йылдан алып тәүҙә Өфө халыҡ мәғарифы институтында, артабан, 1929 йылда, уҡыу йорто реорганизация кисереп, К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты тип йөрөтөлә башлағас, шунда эшләй. Пединститутта ул ун йылға яҡын башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире йөгөн тарта, 1931 йылда доцент булараҡ раҫлана. Бер үк ваҡытта 1932—1933 йылдарҙа З. Шакиров яңы асылған Башҡорт медицина институтының башҡорт теле кафедраһының уҡытыусыһы һәм мөдире вазифаһын башҡарһа, 1933 — 1934 йылдарҙа Уҡытыусыларҙың квалификацияһын күтәреү институтында башҡорт теленән уҡыта. Шулай уҡ 1934 —1935 йылдарҙа ВКП (б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты аппараты һәм етәксе хеҙмәткәрҙәренең өлкә курстарында ла уҡытыусы-лектор булып эшләй.

Танылған уҡытыусы һәм ғалим З. Ш. Шакиров вуз студенттарын үҙенең китаптары, методик ҡулланмалары менән тәьмин итеп кенә ҡалмай, уларҙы тәрән филологик белемле һәм юғары методик мәҙәниәтле педагог итеп әҙерләп сығарыуҙа өсөн дә күп көс һала. Әле 1927 йылда, педагогик һәм ғилми хеҙмәтенә 25 йыл тулыу уңайынан, ул Хеҙмәт Геройы булып китә, 1941 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Республикала тәүгеләрҙән булып уға „Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән эшмәкәре“ исеме бирелә. 1954 йылда З. Ш. Шакировтың халыҡ мәғарифы һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән ғилми-педагогик эшмәкәрлеге юғары баһаланып, уға илдең иң юғары наградаһы — Ленин ордены тапшырыла.

1956 йылда З. Ш. Шакиров пенсияға сыға, ләкин педагогик һәм ғилми эшен ташламай. Байтаҡ йылдар ул Башҡорт дәүләт университеты студенттарын иҫке төрки теленән уҡыта, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тел һәм әҙәбиәт институты менән хеҙмәттәшлек итә.

„Уның 1968 йылдың 5 декабрендәге вафаты республикабыҙҙың халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәре өсөн һис нимә менән алмаштыра алмаҫлыҡ ҙур юғалтыу була“ („Советская Башкирия“ гәзите).

**Юрий ЕРГИН,**
**Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге**
**республика премияһы лауреаты.**

# ЙӘН ЙЫЛЫҺЫН ӨЛӘШЕП...

*(Ғәбиҙулла Зариповтың тыуыуына 50 йыл )*



Был быуын хаҡында башҡорт әҙәбиәтендә әсенеү менән иҫкә алалар: Рәмил Ҡол-Дәүләт, Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла, Марсель Искәндәр... Һәр ҡайһыһы аҫылташтай балҡыны, һәр ҡайһыһының үҙ асылы, үҙ яҙмышы. Әммә уларҙы тәнҡитселәр бер епкәрәк тағып йөрөтөүсән. Ғәбиҙулла Зариповты ҡаты ауырыу аяҡтан йыҡты, йәшәргә тырышып-тырмашып ятты, ауырыған килеш тә әҫәрҙәр ижад итеүҙән туҡтаманы, ҡәләмдәштәренә хаттар яҙып, әҙәбиәткә, ижадҡа булған ҡараштарын, мөнәсәбәтен белгертте. Йәл, 40 йәшен дә тултыра алмай, яҡты донъя менән хушлашты шағир. Үҙенсәлекле ижады, матбуғатта ҡыйыу сығыштары менән замандаштары хәтерендә ул мәңгелеккә уйылып ҡалды. Ә инде уны танып белмәгәндәр, уның менән аралашмағандар шағирҙы китаптарынан танып, яңы дәүерҙә уның ижадына бөтөнләй икенсе баһа бирелер...

Ғәбиҙулла Зарипов 1961 йылдың 6 ноябрендә Салауат районы Тирмән ауылында тыуған. «Атайым аймағы – Йәнырыҫ. Әсәйемдеке – Бараҡтар. Ырыу – Түбәләҫ. Ҡәбилә – Әйле һәм Ҡара Табын», – ти Ғәбиҙулла, үҙенең тамырҙарын юллап. Атаһы Ғиндулла ла шиғыр яҙған. «Үтеп сыҡҡан үткер телле, һәләтле ине атайым», – тигән һүҙҙәре буласаҡ шағирҙың холҡон, тәбиғи һәләттән башҡа ҡанат нығытҡан мөхитен дә билдәләгән. Миңә яҙған бер хатында: «Бәләкәй саҡта иң яҡын дуҫым атайым була торғайны. Ғаиләлә дүрт бала үҫтек. Ул төрлө әкиәттәр һөйләй, үҙе яҙған шиғырҙарын уҡый ине. Әҙәбиәт ене шунан ҡағылғандыр. Армиянан ҡайтҡандан һуң, университетҡа уҡырға барыу теләгемде белгәс, ҡаршы килмәне. Тик миңә: «Һиндә ундай һәләт юҡ, – тине икеләнеп. – Ҡустыңда бар». Башҡаса бер һүҙ ҙә әйтмәне. Университеттың беренсе курсында уҡығанда көсһөҙ генә шиғырҙар яҙҙым. Икенсе курста уҡығанда хикәйә яҙыу оҫталығы буйынса өс егет: мин, Марсель Искәндәров, Рәмил Дәүләтколов ярыш үткәрҙек. Ярышта мин еңдем. Үкенескә ҡаршы, Марсель Искәндәровтыҡын ғына газетала баҫып сығарҙылар. Өсөнсө курста уҡығанда миңә Рәйес Түләков: «Һинең беренсе курста яҙған шиғырҙарыңды өсөнсө курста яҙғандарың менән сағыштырып булмай», – тине. Был ваҡытта атайым ҡаты ауырый ине».

Шулай итеп, һалдат хеҙмәтен тултырып ҡайтҡан егет БДУ-ның филология факультетына уҡырға инә, уны 1987 йылда тамамлағас, «Йәншишмә» балалар һәм үҫмерҙәр гәзитенә эшкә алына. Ябай хәбәрсе, аҙаҡ бүлек мөдире, яуаплы сәркәтип вазифаларын башҡара.

...1988 йылдарҙа «Йәншишмә» гәзитенә яҙыша башлағайным. Йыш ала инем мин тышына галстуклы ҡыҙ менән малай, ракета төшкән сағыу һүрәтле конверттарҙы, Әлфинур Вахитова, Йомабикә Ильясова, Зөһрә Ҡотлогилдиналарҙың исеме ҡуйылған хаттарҙы алып, алтын тапҡандай ҡыуана инем. «Пионер» – хәҙерге «Аманат»тан Венер ағай Йәнбәков менән хатлаша инек. Ғәбиҙулла Зариповтың ырып-һырып яҙған шикелле хәрефтәр менән «семәрле» ҡалын хаттары килә башланы. «Әҙәбиәт теорияһы»нан ябай ауыл балаһына ҡиммәтле, мауыҡтырғыс дәрестәр тип баһалайым мин уларҙы, хәҙер ҡабаттан уҡығас. «Образ – һөлдә генә. Уның тирәһендә, ағас япрағы һымаҡ, поэтик деталдәр уҡмашырға тейеш. Образлы шиғыр бер, ә бер нисә поэтик деталдән торһа, тағы ла шәберәк». Был – хаттан юлдар. Ә инде, шағирҙың үҙе әйтмешләй, «һөлдә»һен һыҙып та аңлатҡан шиғырҙы. «Тағы ла шуны онотма: шиғыр тәбиғи килеп сығырға тейеш. Бабич әйтмешләй, тетрәнмәй, һыҡранмай йыр тыумай». Өфөләге ижади мөхит, уға үҙенең мөнәсәбәте хаҡында ла аңғарта барған хаттарында: «Өфөлә шиғри бәйге булды. Тамашасыларға күберәк көлкөлө шиғырҙар оҡшаны. Тағы ла милләт, халыҡ тип һайрағандарын яратты кешеләр. Миңә, киреһенсә, был шиғырҙар оҡшаманы. Беренсенән, былай яҙыуы күпкә еңелерәк. Икенсенән, хәҙер һәр бер шағир халыҡ, рух, киләсәк, тел тип арзан әйберҙәр ижад итә башланы. Ваҡыт үтеү менән улар үләсәк. Сөнки улар шул тиклем күп, шул тиклем бер-береһен ҡабатлай; улар ут тирәләй әйләнгән себен-күбәләктәр һымаҡ, Рәми Ғарипов ижады эргәһендә янып үләсәктәр. Көлкөһөнә килгәндә, юмористик шиғырҙар кәрәкмәй, тимәйем, ләкин йүнәлеше, һәләте бөтөнләй башҡа төрлө булған шағир ниңә уның менән шөғөлләнергә тейеш әле? Һин әйткәнсә, прозанан баш тартырға ярамай. Поэзияла бата башлаһаң, сыға торған берҙән-бер юл бит ул». Ошо өҙөктә уның бар күңел ярһыуы, әҙәбиәт тип яныуы, башҡаларҙы ла яндырырға маташыуы сағыла, минеңсә. Алғараҡ китеп әйтәйем, 1996 йылда Ғәбиҙулла Зариповтың Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә «Аҡбатыр» шиғырҙар һәм ҡобайырҙар йыйынтығы баҫылды. Шағирҙар араһында сәхнәләргә сығып майҙан тотоп ҡобайыр буйынса ярышыу йолаһы тергеҙелә үткән быуаттың 90-сы йылдар башында. Ғәбиҙулла берәүгә лә ал бирмәй. Ҡәләмдәштәре уға «сәсән» ҡушаматы таға. Был китапта шағирҙың шул дәүерҙә тыуған ижад емештәре урын алған.

Уның 1990 йылдарҙа «Йәшлек» гәзитендә баҫылған «Ҡый баҫып бөткән баҡса», «Ҡанаттарҙы һындырмағыҙ» мәҡәләләре лә ҡыйыу, хатта бер аҙ дорфараҡ та яңғыраны үҙ заманында. «Йәмһеҙ, ҡотһоҙ, йөкмәткеһеҙ, йөрәкһеҙ, хисһеҙ, тойғоһоҙ, зауыҡһыҙ, әхлаҡһыҙ... Был һүҙҙәрҙе ҡурҡмайынса хәҙерге әҙәбиәттең йөҙөнә бәреп әйтергә була». Бының сәбәбен ул әҙәбиәттә тәнҡитсенең, баһалаусының булмауында күрә. «Кешеләрҙең бәхетһеҙлеген бәхет тип күрһәткән, аҙып барған донъяны тәүфиҡлы итеп

һүрәтләгән әҫәр иң оятһыҙы, иң әхлаҡһыҙы, иң ҡотһоҙо!» Был юлдарҙы 30 йәшенә саҡ  аяҡ баҫҡан Ғәбиҙулла яҙған.

«Ҡанаттарҙы һындырмағыҙ» тип ул әҙәбиәткә килеүсе йәштәр өсөн борсола. Ҡәләмдәштәренә өндәшеп, һәр береһенең үҙ донъяһына ғына бикләнеп йәшәүен өнәмәй, киләсәкте ҡайғыртмауына әсенә.

Ғәбиҙулла йәштәрҙән бер минең менән генә түгел, бик күптәр менән хат аша аралашты. Мин белгәндәрҙән Айһылыу Ғарифуллина, Гөлнара Хәлфетдинова…

«Поэзия – оло донъя. Китапҡа теркәлмәгән, әҙәбиәт теорияһына инмәгән яҡтары шул тиклем күп. Шиғыр яҙған һайын, ниндәйҙер бер үр артылған һайын, шунса асыштар асыла бара. Мәҫәлән, хәҙерге ваҡытта рифмаһыҙ, бер ниндәй ҡалыпҡа ла буйһонмаған, хатта ритмһыҙ шиғырҙарҙың донъяға яралыуы бар. Әлбиттә, былдай шиғыр яҙып ҡараусылар юҡ түгел. Тик уларҙың йә һәләте етмәй, йә бүтән сәбәптәр арҡаһында, традицион шиғырҙарҙан артыҡ бер ни ҡыра алмай. Дөрөҫөрәге, сер асам: рифмаһыҙ, ритмһыҙ яҙған осраҡта ла, уның образы шул тиклем көслө, дөйөмләштереүе шул тиклем ҡеүәтле, философик фекере иҫ киткес тәрән, гениаль булырға тейеш, сөнки ҡоршап торған кәртәләр, ритмдар, рифмалар юҡ хәҙер. Ләкин был да әле уны поэзия кимәленә күтәрә алмай. Беләһеңме нимә күтәрә уны поэзия кимәленә? Интонация күтәрә. Был – асҡыс. Тик шуға тиклем барлыҡ поэзияны ла уҡырға кәрәк. С. Айытматов әйткән: «Ниндәйҙер бер гениаль кеше киләсәк, ул бөтә моңдарҙы берләштерәсәк».

1992 йыл. Хәтеремдә, алтын  көҙ. Поезға билет алырға тип Матбуғат йорто эргәһендәге трансагентствоға килгәйнем. Ғәбиҙулла ағай менән шунда күрештек. Ауылға ҡайтып китергә йыйыныуын шунда әйткәйне миңә. 1993 йылда уның Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә сыҡҡан йәштәрҙең «Шарлама» дөйөм йыйынтығында  «Төнгө йәшен»  китабы донъя күрҙе.

Китаптың исеменә ҡушылған «Төнгө йәшен» шиғырында – поэтик деталдәрҙән туҡып, тулы, сағыу картина хасил иткән. Күңелдең иң нескә ҡылдарын тирбәтергә һәләтле ул ҡыҫҡа ғына шиғыр. Оҫта һелтәнеп күк йөҙөнә сыра тоҡандырып ырғытҡан, күк йөҙөнән нимәнелер эҙләүсе. Эҙләгәнен тапҡандың шатлығынан гөрһөлдәп көлөп ебәреүе, аҙаҡ, шул шатлыҡ нуры баҫылғас, бала кеүек күҙ йәштәре менән илауы – йәшнәп яуған ямғырҙың кеше күңелендә көслө хистәр уятыуын ниндәй оҫта итеп асып биргән ул! Йәшенле ямғырҙы ул кеше күңеленә образ итеп алған.

*Ул сыраһын тәүҙә сытырҙатып*
*Ҡараңғыға атты бер һелтәп.*
*Эҙләгәнен тапҡас төн йөҙөндә,*
*Шатлығынан көлдө гөрһөлдәп.*
*Тик, ниңәлер, уты һүнеү менән,*
*Түкте генә, түкте күҙ йәшен.*
*Ниндәй көслө, ниндәй хисле икән*
*Ямғыр алып килгән был йәшен.*

(«Төнгө йәшен»)

Ижад унын өсөн иң тәүҙә – кисереш, тимәк, ул күңел емеше, күңел хеҙмәте. «Иң тәүге кисерешем шиғырымда – тауға менеү, киңлек тойоу ҡыуанысын әйткәнмен», – ти ул, һәм һәр шиғыры үҙе артылған түбәгә әйләнә бара. Шиғырҙан шиғырға ул үҫә, әйтер фекере үткерләнә, тәрәнәйә, образдары баҙыҡлана. «Ҡаны ла, йәше лә кешенең ергә тама. Ҡаны ла, йәше лә шағирҙың йырға тама», – тиеп осраҡлы ғына әйтеп ҡуйғанында ла унын ижад һәм йәшәү кредоһы сағылыш таба.

Ниндәй булырға тейеш ул киләсәк әҙәбиәт? Кешелек китап уҡымай, әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһынмай башлаған дәүерҙә хәҙерге заман яҙыусыһы ниндәй әҫәрҙәр ижад итергә тейеш? Ошо һорауҙар борсоно ауылға ҡайтып, ауырыуы менән көрәшкән Ғәбиҙулланы. «Хәҙерге әҙәбиәт тураһында бөртөк кенә лә фекер ҙә юҡ. Ҡурҡаҡлыҡ, фекерһеҙлек – өйөр – яуыз коллектив, ғилми дәрәжәләге башһыҙлыҡ – совет дәүеренең мираҫы. Әҙәбиәт тураһында фекерҙе Талха Ғиниәтуллиндан яңыраҡ уҡыным. Толстой яҙған кеүек романды хәҙер бер кем дә уҡып ултырмай. Сөнки яҙыусы ҡыҙыҡлы итеп яҙыуҙы маҡсат итеп ҡуймаған (минең фекер). Талха, кино кеүек әҫәр кәрәк, ти. Килешәм. Әҙәбиәт текст яғынан ғына түгел, хәҙер техник яҡтан да үҫергә тейеш. Ҡыҫҡаһы, шундай итеп яҙырға кәрәк – хатта үтек тә космосҡа осорға тейеш».

1997 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә «Йән йылыһы» йыйынтығы донъя күрҙе. Быныһы – дүрт егеттең бер ҡыйыҡта, «Егет һүҙе» тигән исем менән.

Шағир тыуған ауылы Тирмәнгә ҡайтып йәшәй башлағас та, ҡаты ауырыу аяҡтан йыҡҡас та, ижад итеүҙән туҡтамай. «Зөһрә Ҡотлогилдинаның тырышлығы арҡаһында мин машинкалы булдым. Аҡсаны генерал-лейтенант, һалым департаменты полицияһы директоры Энгельс Вәрис улы Ҡолмөхәмәтов бирҙе. Зөһрә анкеталар ебәрҙе, тултырғас, Яҙыусылар союзына алдылар», – былары ла ижад өсөн мөһим нәмәләр. Ошо дәүерҙә ул «Азамат» исемле повесын тамамлай. Һүҙ һайын асыш, көтөлмәгән алым менән яҙылған әҫәрҙе, үҙе шәп икәнлеген белһә лә, Өфөлә баҫырға ашыҡмайҙар. Беҙҙә бит һәр ваҡыт яңылыҡҡа аяҡ терәп ҡаршы торалар, ундай әйберҙе ҡабул итеү өсөн дә аҡыл һәм йөрәк кәрәк шул. Һәр юлда кинәйә, образдар ярылып ята. Үҙ заманының әрнеткес проблемаларын тос дөйөмләштереүҙәр, тапҡыр һүрәтләүҙәр менән асып бирә алған повесында Ғәбиҙулла Зарипов. «Кеше йырлай. Ниңә йырлай? Үҙен йыуата. Кеше һөйләй. Ниңә һөйләй? Башын уйлата. Халҡыңдың бөтә тел байлығына эйә булыу – донъялағы иң ҙур ҡаҙанышҡа эйә булыу. Башҡа телдәрҙе лә өйрәнеп ҙур аҡыл йөрөтөргә мөмкин, тик ҡеүәт, ҡөҙрәт, мөхәббәт көстәре тулыһынса инмәй туған теленән мәхрүм кешегә». Үҙ заманы хаҡында көслө, ҡыйыу әйтер өсөн йәтеш алым уйлап тапҡан – бында ысынбарлыҡ мистика, халыҡ ижадынан тамырланған мифология менән үрелеп, мауыҡтырғыс сюжет хасил итеlә. Айнытҡысҡа төп герой Илсурҙы ҡотҡарырға килгән кешеләрсә һөйләшкән әтәстән М. Булгаковтың «Мастер и Маргарита» әҫәре менән ауаздашлыҡты таныйһың. Әммә был Булгаковҡа һуҡырҙарса эйәреү түгел, ҡыланыу түгел. Машинаға әйләнгән тараҡан, кешелектең хыялы – ҡыҙыл планета Марсҡа өс секунд эсендә

осоп барыусы башҡортса яҙылған кнопкалар менән идара ителеүсе «тәрилкә» – тылсымлы әкиәтте хәтерләтә. Ысынбарлыҡтан айырылды, бөттө, тигәндә, кинәт фекер дилбегәһе кәрәкле яҡҡа ҡайырыла ла тейәрен – төйөрөн уйын ҡаҡ маңлайға бәреп әйтә лә шаңҡыта ла ҡуя автор. Бына шундалыр ул ижадсының көсө, ҡөҙрәте.

Ошо дәүерҙә яҙыусы балалар өсөн «Бәрҙе балаһы» повесын яҙа. Ул «Йәншишмә» гәзитендә донъя күрә. Аҙаҡ, үҙе үлгәс, 2001 йылда, «Китап» нәшриәтендә баҫылды. Әхмәр Үтәбай уның был повесына яҙған баш һүҙендә: «Ғәбиҙулла балыҡ булып ҡарағанда ла үҙе булып ҡалған. Ғәжәп ҡыҙыҡһыныусан һәм сәйерерәк, бер ҡатлы һәм киң күңелле, мөләйем һәм ҡырыҫыраҡ, ярты һүҙҙән һине аңларға тороусы һәм «максималист» – тигәне уны яҡын дуҫ, кеше булараҡ та ҡылыҡһырлай. Үҙ һүҙле Бәрҙе балаһы юлыҡҡан ваҡиғалар һәм мажаралар аша күңел донъяһын асҡан яҙыусының был повесы балаларға изгелек, гүзәллек төшөнсәләрен һеңдерә.

«Туғандар сәйәхәте», «Мәргән мажаралары» повестары ла «Аманат» журналында һәм «Йәншишмә» гәзитендә баҫылды. «Империя» исемле китап яҙа башланым, тәүге романдың исеме лә әҙер – «Аждаһа»! Башымда яҙылып бөткән инде, ул хәҙерге заман тураһында буласаҡ, яҙылып бөтөү менән ҡулъяҙмаһын һиңә ебәрермен», – тигәйне бер хатында. Әммә, үкенескә ҡаршы, уны ҡулға алырға насип булманы.

Үҙе тере саҡта уҡ әҙерләй башлаған, үҙенең баш һүҙе менән асылған «Шиғырҙарым – күңел шәжәрәһе» китабы 2007 йылда Башҡортостан „Китап" нәшриәтендә донъя күрҙе. Зөһрә Ҡотлогилдина был китапҡа яҙған һүҙ ахырында Ғәбиҙулла Зариповтың ҡояшы күләүектә түгел, күктә ине, тигәйне. Ысынлап та, ул үҙенең талантлы һәм әйткән һүҙенең кәрәкле икәнен белде. Заманын йөрәге аша үткәреп, уны тәрән кисереп, күңел йылыһын һалып ижад итте, тотош ғүмерен әҙәбиәткә бағышланы. Беҙгә, иҫәндәргә, уның яҡты рухы алдында ул үҙе тере саҡта туплап өлгөрмәгән сәсмә әҫәрҙәрен йыйып йыйынтыҡ итеп сығарыу, хаттарын, мәҡәләләрен, уның хаҡында иҫтәлектәрҙе нәшер итеү бурысы ла тора.

«Шиғриәт – сәнғәт. Тормошто, мөнәсәбәттәрҙе сәнғәт кимәленә күтәреп буламы? Тормоштан шиғриәт тыуғаны билдәле. Йола менән йәшәгән халыҡты хоҡуҡ нормалары менән йәшәгән халыҡ менән сағыштырып булмай. Һорауға яуап та табылды – тормошто шиғриәт кимәленә күтәреп була».

Фекерен сарлаған, төйнәгән, идеялар менән янып йәшәгән, үҙе лә янған, башҡаларҙы ла яндырырға ынтылған. Уның йән йылыһы – шиғырҙарында. Ә шиғырҙары – халҡына баһалап бөткөһөҙ мираҫ булып ҡалған.

**Гөлназ ҠОТОЕВА.**

## *Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына – 100 йыл*

# Ж.Ғ. КЕЙЕКБАЕВТЫҢ ҒИЛМИ-ИЖАДИ МИРАҪЫ

Күренекле телсе, башҡорт, төрки һәм Урал-Алтай телдәрен тикшереүгә арналған хеҙмәттәре менән донъяға танылған ғалим, талантлы яҙыусы, публицист, педагог, дәүләт эшмәкәре Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев үҙенең сирек быуатҡа ла тулмаған ижады осоронда тел белемендә һәм башҡорт халҡы аңында юйылмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы.

Ж.Ғ.Кейекбаев 1911 йылдың 25 октябрендә Ғафури районының Ҡаранйылға ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Башланғыс белемде Сәйетбаба ауылында ала, унан һуң Маҡар ауылының колхоз йәштәре мәктәбендә уҡый. 1932 йылда Өфө башҡорт педагогия техникумының тел һәм әҙәбиәт бүлеген тамамлай. Шул уҡ йылда Мәскәүҙәге сит телдәр педагогия институтына уҡырға инә һәм 1937 йылда уның герман филологияһы бүлеген уңышлы тамамлай. Бер йыл Мәскәү өлкәһендәге Рошаль урта мәктәбендә немец теле уҡытыусыһы булып эшләгәндән һуң, Башҡортостанға ҡайта һәм Өфөлә сит телдәр институтында эшләй. 1941-1942 йылдарҙа Башҡорт педагогия институтында немец телен уҡыта. 1942 йылда ул тыуған районына ҡайта һәм Сәйетбаба урта мәктәбенең директоры һәм сит телдәр уҡытыусыһы булып эшләй. 1943-1944 йылдарҙа Ж.Ғ. Кейекбаев Башҡортостан китап нәшриәтендә баш редактор вазифаһын башҡара. 1945-1946 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Мәскәүҙәге Тел белеме институтында аспирантурала уҡый. 1946 – 1948 йылдарҙа Өфө авиация институтында немец теле уҡытыусыһы булып эшләй. 1948 йылда Мәскәү дәүләт университетының Ғилми советында “Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше” темаһына филология фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһенә кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай (һуңынан был хеҙмәтен автор, күп кенә өҫтәмәләр индереп, айырым китап итеп баҫтырып сығара). 1949 йылдан башлап уның хеҙмәт юлы тәүҙә Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты, ә 1957 йылдан Башҡорт дәүләт университеты менән бәйле булды. Ул тәүҙә сит телдәр факультетының деканы, һуңынан башҡорт тел белеме кафедраһының мөдире булып эшләне. 1959 йылда Мәскәүҙә СССР Фәндәр академияһының Тел белеме институтында “Башҡорт теленең фонетикаһы” темаһына докторлыҡ диссертацияһы яҡланы. 1957 – 1961 йылдарҙа ул, башҡорт тел белеме кафедраһының мөдире булыу менән бергә, университеттың уҡытыу эше буйынса проректор вазифаһын да башҡарҙы. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Ж.Ғ. Кейекбаев ғилми, әҙәби, ижтимағи эшмәкәрлегенең иң юғары кимәлендә 1968 йылдың 19 мартында 57-се йәшендә ваҡытһыҙ вафат булды.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың сит телдәрҙе, бигерәк тә Көнбайыш Европа телдәрен өйрәнеүҙән башҡорт, төрки, алтай, Урал-Алтай телдәре проблемаларын тикшереүгә күсеүендә атаҡлы тюрколог, СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты,

башҡорт телен фәнни өйрәнеүгә нигеҙ һалыусы, башҡорт теленең тәүге академик грамматикаһын булдырыусы Николай Константинович Дмитриевтың йоғонтоһо бик көслө булды. 1948 йылда Ж.Ғ. Кейекбаевтың “Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше” (“Орфоэпия башкирского литературного языка”) темаһына яҙылған кандидатлыҡ диссертацияһына етәксе булараҡ бирелгән баһалаmаһында ул авторҙың уңыштарын билдәләп, маҡтау һүҙҙәрен йәлләмәй: “Башҡорт телселәре араһында Ж.Ғ.Кейекбаевҡа тиклем башҡорт теленең орфоэпияһын тикшереүсе кеше булманы, һәм был өлкәлә авторҙы ысын-ысындан новатор тип иҫәпләргә кәрәк... Башҡорт теленең факттарын нигеҙ итеп алып, автор уларҙы рус, татар һәм башҡа төрки телдәре менән сағыштырған... Ахыр сиктә, башҡорт диалекттарының фонетик характеристикаһы, тураһын әйткәндә, айырым оригиналь бер тикшереү була алыр ине... Үҙенең сифаты яғынан был хеҙмәттең ҡиммәте шикһеҙ; был хеҙмәт яҡшы лингвистик мәктәп үткән һәм үҙ әсә телен тәрән белеүсе кеше тарафынан яҙылған”.

Ж.Ғ.Кейекбаевтың башҡорт һәм төрки телдәрен тикшереүгә арналған барлыҡ хеҙмәттәре Н.К.Дмитриевтың уға булған ышанысын тулыһынса аҡлай. Ғалимдың беҙгә ҡалдырған мираҫы тематик яҡтан төрлө булыуы, үҙ заманындағы тел белемендәге ҡаҙаныштарҙы тулы файҙаланыуы, актуаллеге, тәрән йөкмәткеле булыуы менән билдәләнә.

Башҡорт әҙәби теленең иң актуаль мәсьәләләренең береһенә – дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләренә арналған тәүге ғилми хеҙмәтендә (Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964) Ж.Ғ.Кейекбаев дөйөм төрки телдәре һәм башҡорт теле өсөн генә хас булған күренештәрҙе ентекләп тикшерҙе. Һөйләү телмәре өсөн иң кәрәкле күренештәрҙең: сингармонизм, тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең һүҙҙәге урындарына һәм бер-береһенә йоғонтолары нигеҙендә үҙгәрештәре (редукция, протеза, эпентеза, метатеза, элизия, ассимиляция, диссимиляция һ.б.) башҡорт теле үҙенсәлектәренән сығып бик ентекле тикшерелде. Бер әһәмиәтле миҫал: Ж.Ғ. Кейекбаев үҙенең хеҙмәтен яҙған һәм эшкәрткән ваҡытта башҡорт теленең дөрөҫ яҙылышында (орфографияһында) һүҙҙең ялғауҙарындағы һуҙынҡыларҙы уның һуңғы ижегендәге һуҙынҡыға ҡарап яҙыу ҡабул ителгән ине. Әгәр һүҙ нигеҙенең һуңғы ижегендә ҡалын һуҙынҡы килһә, ялғауҙарҙа ла ҡалын һуҙынҡы, нәҙек һуҙынҡы килһә, ялғауҙарҙа ла нәҙек һуҙынҡы яҙылырға тейеш ине. Ғалим был рәүешле яҙыуҙың дөрөҫ әйтелешкә тап килмәүен әйтеп китә: *шағирҙәр, тарихсе, пионерҙәр, номерҙең* тип яҙылһа ла, *шағирҙар, тарихсы, пионерҙар, номерҙың* тип әйтелергә тейеш. Билдәле булыуынса, әйтелеш буйынса дөрөҫ яҙыу тик 1982 йылда Башҡортостан Юғары Советында раҫланған һуңғы башҡорт орфографияһында ғына сағылыш тапты. Ошоноң һымаҡ, ғалимдың теоретик күҙәтеүҙәре йыш ҡына практикала сағылыш ала барҙы.

Башҡорт әҙәби теленең формалашыуын, уның һөйләү нормаларының нигеҙҙәрен асыҡлауҙа башҡорт диалекттарын һәм һөйләштәрен өйрәнеү һәм белеү бик әһәмиәтле. Быны яҡшы аңлаған ғалим 50-се йылдарҙың башында Башҡорт дәүләт педагогия институтының диалектологик экспедицияларын ойоштора, һәм үҙе, етәксе буларак, студенттар менән Силәбе, Курган өлкәләренең башҡорт районддарында һәм Башҡортостандың күп кенә төбәктәрендә була. Үҙенең йыйған материалдары нигеҙендә ул башҡорт диалекттарының һәм һөйләштәренең өряңы төркөмләнеүен нигеҙләй. Әгәр башҡорт һөйләштәре Ғ.Дәүләтшиндың төркөмләүе буйынса ырыу атамалары буйынса, ә Т.Байышевтың *һ, ç, ҙ, п, т*

өндәренең ҡулланылышы буйынса билдәләнһә, Ж.F.Кейекбаевтың төркөмләүе йылға атамалары буйынса бирелгән. Бының сәбәбен ғалим бик нигеҙле аңлата: әгәр элек башҡорттар ырыу-ҡәбилә рәүешендә күсмә һәм ярым күсмә тормошта йәшәгәндә һөйләштәр ырыу һәм ҡәбилә телдәрендә булһа, улар ултыраҡ тормошҡа күскәс, ырыу-ҡәбиләләр бутала, һәм һөйләштәр территориаль үҙенсәлектәр ала. Ә башҡорттар ултыраҡ йәшәү урыны итеп һәр ваҡыт йылға буйҙарын һайлаған. Башҡорт һөйләштәрен төркөмләү бөгөнгө көндә лә бер аҙ үҙгәрештәр менән ғалимдың төркөмләүе нигеҙендә ҡабул ителгән. Ж.F. Кейекбаевтың башҡорт диалекттары тураһындағы төп фекерҙәре түбәндәге күләмле хеҙмәттәрендә сағылыш алды: Башҡорт диалекттары тураһында (Башҡортостан уҡытыусыһы, 1957, № 7,8), Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш (Fилми яҙмалар, 3-сө сығарылыш. Башҡорт дәүләт университеты. – Өфө, 1960), Башҡорт теленең диалекттары тураһында (Башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙамға. – Өфө, 1960).

1958 йылда Ж.F. Кейекбаев үҙенең докторлыҡ диссертацияһы нигеҙендә “Башҡорт теленең фонетикаһы (тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе)” исемле монографияһын сығара (Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте). Был хеҙмәтендә ул башҡорт әҙәби теленең өндәр системаһын, уларҙы төркөмләү, телмәрҙәге үҙгәрештәрен, һүҙ баҫымы үҙенсәлектәрен бик ентекле тикшерә. Күп кенә фонетик күренештәрҙең асылын билдәләгәндә, ул башҡорт диалекттарында башҡа төрки телдәрҙә сағылыш алған материалдар менән сағыштырыуҙар үткәрә. Башҡорт фонетикаһын тикшергәндә дөйөм тел белемендә әһәмиәтле урын алған сағыштырма-тарихи методты ҡулланыу ғалимға әһәмиәтле һығымталар яһарға мөмкинлек бирә. Мәсәлән, ул башҡорт телендәге үҙенсәлекле өндәрҙең барлыҡҡа килеүен ниндәйҙер башҡа телдәрҙең йоғонтоһонан түгел, бәлки өндәрҙең тәбиғи үҙгәреше һөҙөмтәһендә булыуын асыҡ дәлилдәр менән иҫбат итә.

1966 йылда Ж.F. Кейекбаевтың башҡорт теленең һүҙлек составына һәм мәғәнәләре яғынан һүҙҙәргә тиң булған тотороҡло һүҙбәйләнештәр – фразеологизмдарҙы тикшереүгә арналған “Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы” хеҙмәте донъя күрҙе (Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте). Был хеҙмәттә башҡорт теленең лексикаһын өйрәнеүҙә күп кенә яңы ҡараштар сағылыш тапты. Ул башҡорт теленең һүҙлек составында ике ҙур ҡатламды билдәләй: төп башҡорт һүҙҙәре һәм башҡа ҡәрҙәш булмаған телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр. Төп башҡорт һүҙҙәре тип башҡорт телендәге генетик яҡтан ҡәрҙәш булған алтай (төрки, монгол, тунгус-манжур) телдәре өсөн уртаҡ булған лексик берәмектәрҙе билдәләй. Башҡорт телендәге үҙләштерелгән һүҙҙәр ҡатламына ҡәрҙәш булмаған ғәрәп, фарсы, рус телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе индерә. Ж.F. Кейекбаевҡа тиклем башҡорт телендәге ғәрәп һәм фарсы (иран) телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе айырып ҡарамайынса, ғәрәп-фарсы теленән алынмалар тип бер төркөмгә индерәләр ине. Fалим уларҙы айырып ҡараны, сөнки ғәрәп һәм фарсы телдәре икеһе ике телдәр ғаиләһенә ҡарай, етмәһә ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре башҡорт теленә төрлө юлдар менән килеп инә: әгәр ғәрәп һүҙҙәре башҡорттар ислам динен ҡабул итеүгә бәйле X быуаттан башлап башлыса дини китаптар аша үҙләштерелһә, фарсы һүҙҙәре башҡорттарҙың борондан иран телле халыҡтар менән йәнле аралашыуы, бигерәк тә сауҙа мөнәсәбәттәре һөҙөмтәһендә үҙләштерелә. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе ул өс төркөмгә бүлә: 1) рус теленән боронғо осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәр, 2) һуңғы

осорҙа, бигерәк тә Октябрь революцияһынан һуң үҙләштерелгән һүҙҙәр һәм 3) рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр. Китаптың аҙағында ул башҡорт теленең лексикографияһы (һүҙлектәр төҙөү) буйынса киң генә мәғлүмәт бирә.

60-сы йылдар башында Ж.Ғ. Кейекбаев Урал-Алтай телдәренең генетик ҡәрҙәшлек мәсьәләһе менән ҡыҙыҡһына башланы һәм был темаға тиҫтәләгән мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. Ләкин үҙе тере саҡта был проблемаға ҡағылышлы дөйөмләштерелгән монографияһын әҙерләй алманы. Был хеҙмәттәр тик уның ҡулъяҙмалары нигеҙендә эшләнеп, һуңынан ғына донъя күрҙе: Введение в урало-алтайское языкознание (Уфа: Башкнигоиздат, 1972); Основы исторической грамматики урало-алтайских языков (Уфа: “Китап”, 1996). Был хеҙмәтендә ул, үҙе уйлап тапҡан һәм бөтә урал-алтай телдәренең грамматикаһында яҡшы сағылыш тапҡан билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһына таянып, фин-уғыр, самодий-урал телдәре төркөмдәре һәм төрки, монгол, тунгус-манжур-алтай телдәре төркөмдәренең ҡәрҙәш телдәр булыуын асыҡлай.

Ж.Ғ. Кейекбаев – Башҡортостандың мәғариф эшенә лә ҙур өлөш индергән ғалим. Ул юғары уҡыу йорттары, педагогия училищелары, мәктәптәр өсөн дәреслектәр, уҡыу ҡулланмалары, программалар яҙыуҙа актив ҡатнашты. Ул шулай уҡ тюркология, урало-алтаистика, башҡорт-татар тел белеме буйынса кадрҙар әҙерләүҙә лә ҙур эшмәкәрлек күрһәтте. Күренекле татар телсеһе, Татарстан Фәндәр академияһы академигы, Тел, әҙәбиәт һәм тарих институты директоры, профессор М.-Ф. Зәкиев, Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, талантлы телсе, профессор М.В. Зәйнуллин, Башҡортостан Фәндәр академияһы мөхбир-ағзаһы, профессор Ғ.Ғ. Сәйетбатталов, Ҡарасай-Балҡар телсеһе, профессор Х.И. Суюнчев, ҡаҙаҡ телсеһе, профессор В.А. Иҫәнгилдина, татар телселәре, профессорҙар – Ғ.Х. Әхтәмов, Ғ.С.Әмиров, Ф.Сафиуллина һәм башҡа күп ғалимдарҙың ғилми ижадына Ж.Ғ. Кейекбаевтың ярҙамы һәм йоғонтоһо көслө булды.

Ж.Ғ. Кейекбаев башҡорт әҙәбиәте өлкәһендә лә үҙенең исемен ҡалдырҙы. 30-сы йылдарҙан башлап ул Башҡортостанда сығарылған гәзит-журналдарҙа үҙенең әҫәрҙәрен баҫтыра башланы. 1944 йылда ул СССР Яҙыусылар союзына ағза итеп алына. Уның балалар өсөн яҙған “Урман әкиәттәре” (1954), немец һәм венгр телдәренән тәржемә ителгән “Немец халыҡ әкиәттәре” (1940), “Венгр халыҡ әкиәттәре” (1963), оригиналь ҡобайырҙары, Советтар Союзы Геройҙары Зөбәй Үтәғолов, Александр Матросов тураһындағы әҫәрҙәре киң ҡатлам уҡыусыларына билдәле. 1975 йылда уның “Туғандар һәм таныштар” исемле ҙур күләмле романы донъя күрҙе.

Ж.Ғ. Кейекбаев – БАССР Верховный Советының 7-се саҡырылыш депутаты. Ленин һәм “Почет Билдәһе” ордендары кавалеры. Ул бөгөн дә башҡорт халҡының хәтерендә тере кеүек йәшәй.

**Эрнст ИШБИРҘИН,**
**филология фәндәре докторы, профессор,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре.**

Әхмәт
СӨЛӘЙМӘНОВ

# ФОЛЬКЛОР МЕНӘН РУХЛАНЫП

*Һүҙ сәнғәтенең башы – фольклорҙа.*
**Максим ГОРЬКИЙ.**

*Ж. Кейекбаевтың... романының художестволы структураһында халыҡтың көнкүреше социаль планда ғына түгел, этнографик ерлектә лә күрһәтелә. Автор, әҫәрҙә һүрәтләгән осорҙоң тарихы йөҙөн мөмкин тиклем асығыраҡ күҙ алдына баҫтырыу өсөн, төрлө йөкмәткеле ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы индерә, фольклор әҫәрҙәрен файҙалана.*
**Әнүр ВАХИТОВ.**

## Шартына килтереп

Халыҡ ижадын төптән белеүе, уға мөхәббәте Жәлил Кейекбаевтың әҙәби ижадында ла яҡшы сағылыуы бөгөн күптәргә мәғлүм. Дөрөҫөн әйткәндә, ул әҙәбиәткә фольклор аша килгән, халыҡтың шул шиңмәҫ күңел шишмәһенән һут алған әҙип. «Бөйөк закон хаҡында ҡобайырҙар», «Дуҫлыҡ хаҡында ҡобайырҙар», «Ҡыш килә» ише шиғри әҫәрҙәре менән ул, асылда, сәсәнлек традицияһын яңы шарттарҙа дауам итеүсе, үҫтереүсе булып сығыш яһаны.

Жәлил Кейекбаев халыҡ әкиәттәре рухында балалар өсөн әкиәттәр ижад итеү, башҡа халыҡтарҙың әкиәттәрен туған телебеҙгә күсереү оҫтаһы булып та танылды. Уның «Айыу ни өсөн ҡыш буйы өңөнән сыҡмай?», «Айыуҙың ниңә ҡойроғо юҡ?», «Төлкө менән терпе», «Оморҙаҡ бабай» ише әкиәттәрен кескәйҙәр ҡулында йыш күрергә мөмкин. Йәнлектәргә бәйле ғибрәтле мажараларҙы тасуирлап, яҙыусы йәш быуында намыҫлылыҡ, тоғролоҡ, изгелек кеүек һәйбәт әхлаҡи сифаттар тәрбиәләшә, тыуған төйәкте яратырға өйрәтә. Улар тәбиғәтте танып белеүгә лә, кеше һәм тәбиғәт араһында камил мөнәсәбәт урынлаштырыуға ла булыша, һәм, әлбиттә, эстетик әһәмиәте лә ҙур был әҫәрҙәрҙең.

Жәлил Ғиниәт улы сей башҡорт: «Үҙебеҙҙеке», – тип әйтерлек итеп немец, венгр әкиәттәрен тәржемә итә. Быға өлгәшеүенә туған телебеҙ менән бер рәттән, сит телдәрҙе белеүенең камиллығы ғына түгел, милли фольклорыбыҙҙың тәбиғәтенә тәрән төшөнөүе лә булышлыҡ итте.

Халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадының ниндәй өлгөләрен ҡайһы саҡта, ниндәй

шарттарҙа, кем нисек, ҡайһылайыраҡ башҡара? Ошондайыраҡ һорау тыуа ҡалһа, берәүҙәр фольклор йыйыу методикаһы хаҡындағы белешмәләр менән танышырға тәҡдим итер, икенселәр: «Әлбиттә, иң яҡшыһы – экспедицияға сығып, урында күҙәтеү яһау», – тип өҫтәп тә ҡуйыр. Әгәр һораусының былдай форсаты булмаһа, ул саҡта ни ҡылып ҡарарға? Ул саҡтамы, өсөнсө юл рәүешендә мин: «Мотлаҡ Жәлил Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романын уҡы», – тип кәңәш бирер инем. «Ни өсөн?» – тиһегеҙме? Ни өсөн икәненә үҙегеҙ ҙә төшөнөрһөгөҙ. Әйҙәгеҙ, романға ошо яҡлап бер байҡау яһайыҡ.

Бына бер миҫал.

***а) Вәлиулла сәсәндең сәфәр сыҡҡаны һәм... романдағы ваҡиғаларға ҡатнашҡаны***

Романдың төп геройҙарының береһе Сөнәфәткә еҙнә тейеш Сәмиғулла йыр ярата. Әммә «уның ниндәй көйгә йырлағанын һис төшөнөрлөк түгел» (97-се бит). Шулай ҙа йырлай. Сөнки йола шулай ҡуша. Берҙән-бер ҡәйнеше, еҙнәм дә еҙнәм тип, күстәнәстәр күтәреп ҡайтһын да, шуны ауыҙ ит тә, йырламай ултыр, имеш. Башҡорт йыр башлаһа, тәүҙә көйгә төшөп алыу өсөн дә, иғтибарҙы тартыу маҡсатында ла үҙ-үҙен ҡеүәтләп алыр булыр. Йыр тәңгәлендә һәләте самалы булһа ла: «Э-эй... Айһайҙуҡ тигән булам мин...», – тип, был йоланы еренә еткерә Сәмиғулла:

*Э-эй... Айһайҙуҡ тигән булам мин...*
*Өйөр ҙә генә йылҡым төйәк тибә-ү*
*Йәлмәрҙекәй тауҙың үңерендә-ү-ү..,*
*Егет кенә кешене хурламағыҙ,*
*Ниҙәр күрмәй ул үҙенең ғүмерендә-ү-ү... (97-се бит).*

Был йырҙың яңғырауына сәбәп булған йоланы атҡарыуҙың да шартын хәтерҙән сығармаған яҙыусы. Бишенсе бүлектең икенсе абзацы шундай иҫкәрмә менән башлана: «Бөгөн Сөнәфәт менән Сәмиғулла еҙнәле-ҡәйнешле икәүҙән-икәү ултырып, кеше ятып бөткәс кенә, йыуаса эстеләр» (94-се бит). Был юлдарҙы уҡығас, бөгөнгө кеше: «Башҡаларҙан ҡыҙғанып, йәшерен эскәндәр икән», – тип уйлаһа, бер ҙә ғәжәп түгел. Әммә яҙыусы бында үҙенең персонаждарының, киреһенсә, башҡаларҙы уйлауына, уларҙы борсорға тырышмауына ла, гонаһ эше, тип араҡы эсеүҙе тыйған йола һәм шәриғәт хөкөмөнөң әле үҙ көсөндә булыуына ла ишара итә. Романда сағылыш тапҡан осорҙа шул хөкөмдөң әле ғәмәлдә ҡалыуын раҫлаған тағы бер эпизодҡа күҙ һалайыҡ. Рус-япон һуғышында ҡатнашып, әсирлектә йөрөп, өс-дүрт йыл үткәс кенә иленә ҡайтҡан Әхмәҙиҙе Исмәғил ҡорҙашы ашҡа саҡыра. Ололар һиҙмәгәндә генә, ике ҡорҙаш, келәткә инеп, иген араһына йәшерелгән бер «сирек бутылка хәмер» һемерә һалып сыға. Уны булһа ла хужаға, ул үҙе әйтмешләй, «Ғөмәр ауылы Мөхәмәтйән купис йәшереп кенә» (34-се бит) биргән булған.

Хәмер эсеүҙе тыйған йола, шәриғәт хөкөмөн урап үтеү мөмкинлеге лә, төшөрөп алғас, йырлашып алыуҙы аҡлау сараһы ла бар халыҡта. Романда был сара ла дөрөҫлөгөндә асыла. Боронғолар уйлауынса, өс көнлөк юлға сыҡҡан кеше – мосафир була. Мосафир иһә – гонаһһыҙ зат. Ул хатта сәхәр эсеүҙән дә ҡотҡарыла. Бала тыуымға килгәндә, йәйләүгә сыҡҡанда, мосафирҙы йортҡа бороп индереп, һыйлап сығарыу йолаһы булған башҡортта. Жәлил Кейекбаев уларҙың береһен дә телгә алып, тәфсирләп тормай, уҡыусының белергә тейешлеген генә иҫтә тота. Сөнки роман яҙылған ваҡытта боронғо йолалар һәр төбәктә лә тоторо̆кло ғына күҙәтелер булған әле. Һәр хәлдә, хәмер эсеү эпизодтары әҫәрҙә

гел сәфәр менән бәйле. Япон әсирлегенән ҡайтып төшкән Әхмәҙиҙе ашҡа саҡырған Исмәғил ҡорҙашы, ололарҙан йәшереп кенә, араҡы менән һыйлағанда: «Сәфәр йөрөп ҡайтҡан һалдат кешеһенә хәләл ул», – тип бушҡа ғына әйтмәйҙер. Иғтибар итегеҙ, «ярай ул» йә «бата», тимәй, «хәләл ул», ти. Был иһә сәфәр кешеһе өсөн араҡы хәрәм түгел, тимәк, гонаһ эше түгел тигән һүҙе Әхмәҙиҙең.

Сәмиғулла менән Сөнәғәттең, Ғибаттарға йыйылған егеттәрҙең, бер аҙ төшөрөп алғас, йырлашыуҙары ла «сәфәр», «мосафир» төшөнсәләре менән бәйле. Сөнәғәт юл йөрөп килгән, ә Ғибаттарға йыйылған егеттәр оҙон юлға сығырға, «ярман һуғышына» китергә йөрөй. Шуға ла уларҙың урам буйлап гармун тартып, йырлап үтеүенә хатта мулла ла әһәмиәт бирмәй: «Һуғышҡа китәсәк бер төркөм йәштәр үрге урамда гармун тартып йырлашып йөрөйҙәр ине. Быға тиклем урам буйында гармун уйнауҙы һәм йырлап йөрөүҙе ҡәтғи тыйыусы уҫал Сафа мулла, егеттәр унық өйө тапҡырынан үтеп китһәләр ҙә, өндәшмәне, хатта тәҙрәнән дә ҡараманы», – тип әйтелә был хаҡта романда (282-се бит).

***б) Йола тәртиптәренең тәбиғи булмышында һүрәтләнгәне һәм шуның идея-художестволы маҡсатҡа ярашлы булғаны***

Боронғо бабаларыбыҙҙың мәжлес ҡороу йолаһы хәҙер күп урында күҙәтелмәй. Романда иһә ул да еренә еткереп тасуирлана. Сөнәғәттең үгәй атаһы Ғиләж йыйған табынға күҙ һалайыҡ. Икешәр сынаяҡ ҡына сәй эскәндән һуң, хужа самауырҙы алдыра ла сыуал артынан көрәгә сығарып, уны табынға ултыртҡанда, йола буйынса, ҡунаҡтар бәрәкәт теләй. Баймаҡ, Бөрйән, Әбйәлил яҡтарында: «Көрәгәгә бәрәкәт!» – тиһәләр, романда, ваҡиғалар барған төбәктәгесә: «Суҡҡа бәрәкәт!» – тиешәләр. Бындай саҡта хужа баҫалҡылыҡ күрһәтер булыр. Ғиләжгә лә таныш был ғәҙәт. «Ошо нәмә өсөн генә һеҙҙе мәшәҡәтләп саҡырған һын, артыҡ хөрмәт булмаһа ла, Сөнәғәтулла ла ҡайтҡан бына», – тигән була (130-сы бит).

Мәжлес асыу, үҙенә бирелгән аяҡты, йырлап-көйләп, икенсе кешегә тәҡдим итеү, йыр башлау, көй күтәреү йолалары ла тәбиғи теркәлгән әҫәрҙә. «Йә! Иҫән булып торорғоҙ!» – тигән булып, Ғиләж туҫтаҡты башлап үҙе күтәрә. Шунан, аяҡсы булып, башҡаларға тоттора башлай. Ғиләждең ағаһы үҙенә тейгән аяҡты ҡустыһына кире ҡайтара. Әммә, йола буйынса, туҫтаҡ төбөнә тәүҙә көмөш тәңкә төшөрә, өҫтәүенә оҙон көйгә йырлап та ебәрә. Йыр хужаға бағышлана:

*Мағаш ҡына тауҙың баштарында*
*Теҙелеп кенә үҫкән балтырған.*
*Ашъяулыҡҡайҙарын алдына йәйеп,*
*Дуҫ-иш, туғандарын алдырған...*

Ҡунаҡтар йырланған йырҙы ла үҙ төбәктәрендәгесә күтәреп ебәрә: «Үәш-кәә-әй! Әйт шуны... Афарин!» (129–130-сы биттәр). Һуғышҡа китеүселәрҙе ҡунаҡҡа йыйған Ғибат йортонда ла мәжлес ошо тәртиптә бара.

Башҡорттар ҡорған мәжлестә ҡара-ҡаршы йырлашыу тәртибе лә була. Яҙыусы уныһын да күҙ уңынан ысҡындырмай.

Әлбиттә, яҙыусы мәжлес тәртибе менән таныштырыуҙы төп маҡсат итеп ҡуймаған. Этнографик яҡтан уны бөтә теүәллегендә тасуирлауы, берҙән, романда һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың ҡайһы төбәктә барыуын уҡыусыға төшөндөрөүгә хеҙмәт итһә, икенсе яҡтан, роман хаҡында уның «исеменә – есеме» тигән фекергә килеүенә булыша. Ысынлап та, романда мәжлес тик мәжлес өсөн генә түгел, ә туғандарҙы, таныштарҙы үҙ-ара тағы ла яҡынайтыусы фактор буларак тасуирланған.

Романда хәҙер инде онотолоп бөтөп барған ат һынау, им-том итеү (ҡот ҡойоу, биртек һорау, албаҫты ҡыуыу һ.б.), ҡыҙ ҡушыу, сеңләү, юрау кеүек боронғо йола

күренештәре лә тәбиғи булмышында теркәлгән. Алғыш («Һөйөнсө, күрше! Улың бар!», «Сыҡҡа бәрәкәт! Бирһен Хоҙай! Һөйөнсөһөнә бер яулыҡ!», «Иҫән-һау дәүә-йеп, изгелеген күрмәгә яҙһын!»), әр һүҙе, ҡарғыш («Ай, маңҡорт!»; «Ҡабырғаңды ғына әсеңә индерәм инде мин һинең! Йылмаяҡ!»; «Ҡәһәр һуҡҡыр! Ләғнәт, йылмаяҡ, мөстән, ер йотҡор! Сәсенән һөйрәтеп киҫергә, кешеһенә тура кил-мәгән. Эт һимерһә, эйәһен тешләр, ти. Баймабашланып йөрөмәһә, ҡыҫыр ҡа-лыр ине ул!» — 54-се, 119-сы, 325-се биттәр), лаҡап («Ҡатай Ғариф», «Алан Рах-манғол», «Бем-Бем», «Тәпе Әхмәди», «Ҡалҡас Әхмәди», «Ғариф старостаның гу-бернаторы» – 24-се, 110-сы, 113–157-се, 157–176-сы биттәр). Бындай миҫалдар ҙа персонаждарҙың характерҙарын, үҙ-ара мөнәсәбәтен, тотош алғанда улар көн иткән шарттарҙы, ижтимағи тормошто йәнле булмышында күҙалларға форсат биреүе менән әһәмиәтле.

Кесе жанр өлгөләре лә романда иркен «көн итә», һәр конкрет шартҡа яраҡла-ша алыусан, шул уҡ ваҡытта традицион, ҡалыплашҡан билдәләрен дә һаҡлауға һәләтле булыуы менән үҙенсәлекле был күренештәр әлегәсә башҡорт фольклор-сыларының иғтибарынан ситтә ҡалып килде. Жәлил Кейекбаев уларҙың ты-уыуын, ҡулланылыуын ентекле күрһәтеп, фольклор ғилеменә баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән, тип әйтергә була.

**в) Фольклор әҫәре нисек тыуа?**

«Туғандар һәм таныштар» романында Жәлил Кейекбаев үҙенең уҡыусылары-на: «Фольклор әҫәре нисек тыуа? Белмәһәгеҙ, белегеҙ!» – тигән кеүек була ҡай-һы саҡта һәм ошо процесты яҡындан күҙәтергә мөмкинлек бирә. Был йәһәттән имеш-мимештәрҙе бик оҫта файҙалана. Улар ғәҙәттә «эйәһеҙ» («паспортһыҙ») бирелә романда. Бына ике миҫал:

– Әхмәди айыу алған икән...

– Ҡайһы Әхмәди?

– Бүҙрәтчик Әхмәди.

– Кит анан! Ысынмы? Нимә менән алған икән?

– Атып алдым, тип әйтә, ти, йәҙрә менән.

– Атаҡ, әле тәпе менән алған имешме, тип һөйләйҙәр ине.

– Нимә менән булһа ла алған инде, барыбер түгелме ни... (112–113-сө биттәр).

Ҡайны, ҡәйнәләре – Нух ҡарт менән Гөльямал әбейҙән һәр ваҡыт әрләнеп торған Фатиманың кинәт юғалыуы Туйралы ауылы халҡы араһында төрлө имеш-мимештәр таралыуға сәбәп була.

– Килен тигәс тә, шулай итеп, әйләнгән һайын кәгеп, һаҡаратлап (әрләп. – **Ә.С.**) тормаҫ инде кеше...

– Ҡуй инде. Әҙәмдән оят. Йә, берҙән-бер улының кәләше бит әле.

– Бер быҙау туңып үлгән, тиген дә киленде әрлә, имеш. Шул эшме һуң инде. Уның шайы ҡаза булмай тора бутта...

– Гөльямал әбей, килен кейемде күп туҙҙыра, килгәне бирле ике-өс итек туҙҙы инте бына, нисәмә күлдәк алып бирҙек, тип өй беренсе һайрап йөрөнө лә баһа.

– Кейем туҙмай тора тиме икән, бынағайыш! (306–307-се биттәр).

Килтерелгән имеш-мимештәрҙең тәүгеһе «Бүҙрәтчик» тигән лаҡап исеме бул-ған Әхмәдигә уҡыусының «күҙ алдында» «Тәпе» тигән лаҡап өҫтәлеүенә, шуға аңлатма биреүсе – көләмәскә, икенсеһе «Фатима бәйете» тыуыуға сәбәпсе була.

Ғөмүмән, «Туғандар һәм таныштар»ҙа халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадына хас жанрҙарҙың бөтәһенән дә тиерлек өлгөләр бар. Уларҙың барыһы ла йәнле репер-туарҙа йәшәгәндәренсә, бөтә шартына килтереп теркәлгән.

Әлбиттә, һүҙ оҫтаһы булған әҙип башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадының күп төрлөлөгөн күрһәтеүҙе һәм уның айырым өлгөләрен теркәүҙе, фольклор әҫәренең ижад ителеүе, йәшәү хәлен, башҡарылыу рәүеше, шарты хаҡында мәғлүмәт биреүҙе (был яҡтарын да иғтибарҙан сығармаған сүрәттә лә) үҙмаҡсат итеп ҡуймаған. Фольклорға мөрәжәғәт итеүенең асылы был алимдың романда һүрәтләнгән осор, мөхит, персонаждарҙың ҡылығы менән ярашлы булыуында, шуларҙы асырға хеҙмәт итеүендә. Тимәк, фольклор өлгөләре романға теркәлеп, ниндәйҙер ямауҙы күҙ алдына килтереүҙән ситен. Уларҙың һәр береһе саф әҙәби контекста тәбиғи рәүештә үҙ урынында килә һәм әҫәрҙең идея йүнәлешенә бәйле һәм уны тәрәнәйтеүгә булышыр кимәлдә художестволы сара хеҙмәтен үтәй. Шулай тинем дә уйға ҡалдым: «Әгәр ҙә был романды баҫтырыуға БДУ-ла беренсе курста беҙҙә «Башҡорт халыҡ ижады» курсын алып барған, аҙаҡ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойоштороған фольклор экспедицияларҙа әүҙем ҡатнашҡан Әнүр Вахитов түгел, икенсе кеше әҙерләһә, улар ошо хәлендә һаҡланыр инеме икән?» Юҡтыр. Сөнки фольклорға күңеле һиҙгер булмаған кеше шуларҙы киҫеп ырғытыу иҫәбенә китапты ыҡсымлаштырыуы бик ихтимал ине. Шуға күрә «халыҡ китабы» тип атарлыҡ кимәлендә «Туғандар һәм таныштар» романының башҡорт халыҡ ижады рухы менән һуғарылған хәлдә беҙгә килеп етеүендә Әнүр Вахитовтың роле баһалап бөткөһөҙ ҙур, тимәксемен.

## Романдағы риүәйәт һәм... Әхмәди

Легенда, риүәйәттәрҙе лә тота килеп һөйләмәйҙәр. Жәлил Кейекбаев та был ҡағиҙәне иҫәпкә ала. Роман ваҡиғалар бараһы урынды, Ташбаҫҡан ауылын, тасуирлауҙан башлана. Ауыл менән таныш булмаған кешегә, ғәҙәттә, уның тирәйүне, ултырған урыны, килеп сығышы, исеменең тарихы, кешеләренең нәҫелнәсәбе хаҡында мәғлүмәт биреүсендәр. Шуны беҙ, топонимик риүәйәттең бер төрө – ауыл тарихы, тибеҙ. Жәлил Кейекбаев та, Ташбаҫҡан хаҡында һүҙ алып барғанда, риүәйәт рәүешендәге ауыл тарихы алымдарын файҙалана. Беҙ унан был ауылдың үркәсле-үркәсле тауҙар ҡуйынында, Үҙәште ярында ятыуын, уның тирә-яғында әҙәм аяғы баҫмаған урмандар булыуын беләбеҙ. Шулай төпкөлдә урынлашһа ла, уның донъя менән бәйләнештә тороуын да аңғарабыҙ. Сөнки яҙыусы ошо ауыл аша Шамов, Камайылға (Инйәр), Әүжән заводтарына, Иҙелбашына (Белорецка) таш юл тартылыуын иҫкәртә. Артабан урындағы башҡорттарҙың утарҙа йәшәгән урыҫтар менән «ызнакумлашып» һин дә мин татыу йәшәүҙәрен, ситтән килеп ереккән сауҙагәр, өҫ мәхәлләле күрше Ғөмәр ауылы кешеләренең ҡалмыҡ затлы булыуы, улар менән мөнәсәбәт тураһында һүҙ бара. Топонимик риүәйәт рәүешенә килтерелһәләр ҙә, был мәғлүмәттәр уҡыусыға автор исеменән еткерелә.

Ә инде башҡорттоң данлыҡлы Аласабыр тигән аты менән Әберәй тигән батыры хаҡындағы риүәйәттәр йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған Әҙһәм ҡарт ауыҙынан һөйләтелә (67–73-сө биттәр). Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, күмәк кеше ниндәйҙер бер мәсьәләне тикшерә, берәй ваҡиға айҡанлы фекерҙәре менән уртаҡлаша. Шул саҡ, боронғонан айырыуса яҡшы хәбәрҙар булғаны, башҡалар салаһалпы ғына белгән йә бөтөнләй ишетмәгән риүәйәттең үҙен һөйләп тормаҫтан, ара-тирә уның айырым мотивтарына, образына һылтанғылап, һүҙ ҡеүәтләргә тырыша. Йәнле телмәргә хас ошо алимды ла Ж. Кейекбаев бик оҫта файҙалана. Телгә алынған риүәйәттәр бәйән ителгәнгә тиклем байтаҡ алда беренсе бүлектең 2-се өлөшөндә тәүге, икенсе бүлектең 1-се өлөшөндә – йәнә Аласабыр телгә алына. Аласабыр тураһында һүҙ Ғөмәр ауылы старостаһы Ғарифтың «нәҙек билле, киң яурынлы, ялбыр яллы, аҡ бәкәл, яра-ҡашҡа ерән һәүрег»ен (25-се бит)

маҡтағанда сыға. Ерәнсәйҙең килеш-килбәтен маҡтаусыларҙың берене: «Аласабыр нәҫеленәнтер был. Йәйгә сыҡҡас, һабан туйынта, йүгертеп ҡарау кәрәк был хайуанты», – ти (54-се бит). Әле риүәйәт бәйән ителмәгән, уның геройы Аласабыр тасуирланмаған, әммә был һүҙҙәрҙән һуң уҡыусының ҡолағы ҡарп итеп ҡалырға тейеш. Ә инде билдәһеҙ ғәжәп ат икенсе тапҡыр телгә алынғанда, уның, ысынлап та, тиңһеҙ йүгерек булыуына шик ҡалмай. Сөнки Ташбатҡан ауылы йәштәре ойошторған йыйында бүҙрәтчик Әхмәдиҙең ҡола тайының бәйгелә ҡатнашҡан бөтә аттарҙы, шул иҫәптән, нәҫел-нәсәбенә ҡарап, алда килә, тип, һынсылар юраған Баһау байҙың туры айғырын да артта ҡалдырып, беренселеккә сығыуы уңайы менән йәнә телгә алына Аласабыр. Тамаша ҡылыусыларҙан берәү: «Бер нәмә сығыр был хайуандан», – тигәс, Әҙһәм ҡарт: «Аласабыр нәҫеленәндер был, Аласабыр», – тип ҡуя. Әҙһәм ҡарттың тоҫмаллауын уның ағаһы Әхтәри ҡарт (йәғни донъяла тағы ла күберәкте белгән кеше): «Шулай булыр. Йүгереүе бер ҙә был тирә хайуанына оҡшамай», – тип ҡеүәтләй. «Һуң, Аласабыр балаһы булырға, был ни ҡола ла баһа», – тип шик белдергәндең дә ауыҙын «Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа, тигәндәр боронғолар» тигән һүҙе менән тиҙ яба.

Аласабырҙың икенсе тапҡыр телгә алыныуы уҡыусының ҡыҙыҡһыныуын тағы көсәйтә. Шуға ирешкәс кенә, автор Аласабыр хаҡындағы риүәйәткә урын бирә. Унда ла, тыңлаусыларҙың иғтибары менән сабырлығын һынар өсөн, юрый һүҙҙе уратып-суратып ҡына төп темаға төшөргә ятҡан тәжрибәле риүәйәтселәр һымаҡ, уны ҡапылғара бәйән итергә тотонмай. Тәүҙә романдың төп геройы булырҙай Сөнәғәттең быяла заводынан ҡайтып килешләй, беренсе тапҡыр Фатиманы осратыуы, шул ҡыҙ арҡаһында Талханың Мәғәфүр менән бәрелешен тасуирлап, икенсе бүлекте ослай. Шунан өсөнсө бүлектең беренсе өлөшөндә риүәйәт һөйләнәсәк шарттарҙы һүрәтләй, Әхмәдиҙең ҡола байталы юғалыуын, йәүкәләп эҙләһәләр ҙә, уның табылмауын хәбәр итә. Ауыл данын күтәрергә тейеш булған йүгеректең юғалыуына ташбатҡандар битараф ҡала алмай, «Уның, һыуға төшкәндәй, ғәйеп булыуын төрлө кеше төрлөсә юрай. Кисен Әхмәдиҙең урмандағы бүрәнә өйөмө өҫтөнә ултырып әңгәмәләшеүселәрҙең телендә лә шул була. Ҡарттар янына сығып ултырған Әхмәдиҙән:

– Ҡола байталың һаман табылманымы шул? – тип һораны Усман ҡарт.

– Юҡ, һыуға батҡан һымаҡ юғалды ла ҡуйҙы, – тине Әхмәди, көрһөнөп.

– Йүгерек булмаҡсы ине хайуан, – тине Ваһап ҡарт.

– Берәйһе муйынына бысаҡ ҡына һалғандыр, моғайын, – тине кемдер.

– Йүгерек булырға бөтә ере килгәйне инде. Шундай хайуан бик һирәк килеп сыға, – тине Әҙһәм ҡарт һәм йүгерек ат хаҡында оҙон бер хәбәргә төшөп китте: «Әлгәре Тәлгәшле ауылында Бөрөк исемле ярлы ғына бер ҡарт йәшәгән. Шул Бөрөк ҡарттың бик шәп бер йүгерек аты булған. Ул ат бәйгеләрҙә бер генә йүгеректе лә алдына сығармаған. Йүгеректең төҫө ала булғанға, Бөрөк ҡарт уға Аласабыр тип исем биргән» (67-се бит). Бына шулай уҡыусының диҡҡәтен туплап бөткәс кенә, юғалмаһа, ҡола байталдың ниндәй шәп йүгерек булырын күҙаллатыу мохтажлығы тыуғас ҡына, Аласабыр тураһындағы риүәйәт килтерелә романда. Уға нигеҙ итеп Жәлил Кейекбаев 1945 йылда Ғафури районындағы Тайыш ауылында Мирсаяф Сәйфуллиндан үҙ ҡулдары менән яҙып алынған «Аласабыр» тигән легенданы файҙаланған. Тимәк, «Туғандар һәм таныштар» романын уҡығанда, беҙ был легенданың үҙгәртелеп, риүәйәт хәленә килтерелгән варианты менән осрашабыҙ. Яҙыусы уны романда күтәрелгән социаль проблемаларҙың, шуға бәйле әхлаҡи мәсьәләләрҙең сиселешен көнәлек билдәләүгә яраҡлаштырған.

Һүҙ риүәйәткә күскәнгә тиклем Ташбаткан ауылында шундай ваҡиға булып ала: йәш-елкенсәк үткәргән бәйгелә көтмәгәндә-нитмәгәндә Рус-япон һуғышы ветераны Әхмәдиҙең ҡола байталы беренселекте ала. Күрше-күлән уны тәрбиәләп, оло йыйындарҙа сабыштырыу кәрәклеген әйтә. Күрше-күлән ауыҙы менән бында халыҡ фекере, халыҡ теләге белдерелә. Ул һүҙҙәрҙә ауыл даны, ауыл ғорурлығы хаҡында ҡайғыртыу сағыла. Әхмәди быға ҡаршы: «Кешенең аты уҙғансы, үҙеңдең тайың уҙһын, тигәндәр боронғо бабайҙар», – ти. Был һүҙҙәрҙе уҡығас та, ул да шулай оло тойғолар йөрөтөр кеше икән, тип уйлап ҡуяһың. Сөнки Әхмәдиҙең, халыҡ әйткәнсә, бүҙрәтшик булыры ла, байығыу өсөн йәнен фиҙа ҡылыр, намыҫын һатыр кимәлгә төшөр кеше булыры ла һиңә әлегә билдәһеҙ. Әҫәр менән тотошлай танышҡас ҡына, Әхмәдиҙең мутлыҡтары, енәйәттәре асылғас ҡына, уның әлеге һүҙен яңынан баһаларға мөмкинлек тыуа. Баҡтиһәң, мәҡәлдәге «үҙеңдең» һүҙенә «ауыл даны», «ауыл намыҫы» тигән мәғәнәне һалмаған икән ул. Мәҡәлде тура мәғәнәһендә ҡулланған да шуның менән шәхси маҡсатын ғына белдергән, имеш. Шуға күрә боронғо бабайҙарға һылтаныуы шул тар маҡсатты башҡалар алдында аҡларға маташыу кеүек кенә аңлашыла.

Маҡтаулы байтал һыуға төшкән кеүек юҡ була. Был юғалтыуҙы Әхмәди генә түгел, бөтә ташбатҡандар ауыр кисерә. Сөнки уның йөҙөндә, әле генә әйтелгәненсә, Әхмәди үҙ шәхесенең данын күккә күтәрәсәк мөмкинлектән, ә халыҡ башҡалар алдында ғорурланыр заттан буш ҡала. Тап бына шундай мәлдә һөйләнелә лә әлеге риүәйәт. Унда Тәлгәшле ауылындағы Бөрөк тигән ҡарттың Аласабыр тигән йүгерегенең губерна кимәлендә үткәрелгән бәйгелә беренселеккә сығыуы тасуирлана.

Аласабыр тураһындағы риүәйәт романда мөһим ике маҡсатҡа яраҡлаштырылған. Ул, беренсенән, Әхмәдиҙең үкенеүен көсәйтеп биреүгә булыша, юғалған байталын ихласыраҡ эҙләйәсәгенә ишара итә.

Мирсаяф Сәйфуллиндан ишеткән легенданың фантастик өлөшөн төшөрөп ҡалдырып, уны риүәйәт ҡиәфәтенә килтереп файҙаланыу һөҙөмтәһендә Жәлил Кейекбаев унда һөйләнелгәндең ышандырыу ҡеүәһен арттырырға, шул юл менән Әхмәдиҙең үкенеүен көсәйтеүгә ирешә. Икенсенән, риүәйәттең әле ҡаралған өлөшө Аласабырҙың башҡорт йылҡыһының ҡото, тотош халыҡтың ғорурлығы тип баһаланыуын белдерә. Шулай булғас, ҡола байтал шул ҡотоң, ғорурлыҡтың бик борон замандарҙан һуң башҡорт еренә яңынан ҡайтыуын символлаштырырға тейеш була. Тейеш була ла бит, әммә Әхмәди уның бәҫен ныҡлап белмәй. Тимәк, ул халыҡтың ышанысын аҡламаусы, уның өмөтөн һүндереүсе булып сыға.

Аласабыр хаҡында һөйләп бөткәндән һуң, Әҙһәм ҡарт: «Ана шул Аласабырҙың нәҫеленән булған йүгерек әллә нисә йылда бер килеп сыға. Беҙҙең тирәнән йәнә бер данлыҡлы йүгерек ат сығырға тейеш әле. Уны ҡәҙерләп тота белергә кәрәк. Ул – йылҡының ҡото. Ләкин беҙҙә шуның кеүек аҫыл йылҡы малын ҡәҙерләй белмәйҙәр...» – тип өҫтәп ҡуя.

Әҙһәм ҡарт берәүҙе лә исемләмәй. Ләкин беҙ уның «ҡыйыш атып, тура тейҙереүен», иң элек Әхмәдиҙе шелтәләүен бик һәйбәт аңлайбыҙ. Шулай итеп, был шелтә һүҙе лә Аласабыр тураһындағы риүәйәттең романдағы әле әйткән идеяны үткәреү өсөн индерелеүенә дәлил.

Жәлил Кейекбаев Мирсаяф ҡарттан яҙып алған легендала Әбрәй батыр бөтөнләй телгә алынмай. Ә романда Аласабыр ҡатнашҡан бәйгегә бәйле рәүештә Әбрәй тураһында ла риүәйәт теркәлә. Әҙһәм ҡарт исеменән һөйләнелгән

был әҫәрҙең идея-эстетик әһәмиәтениҙә һуң? Романда килтерелгән был риүәйәттән аңлашылыуынса, Әбрәй батыр – физик яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан да үҫешкән, зиһене камил кеше. Ул үҙенең бөтә булмышы менән ил намыҫын, халыҡтың ғәҙеллек һөйөүен, уның ҡеүәтен, рухын, әхлаҡи сафлығын кәүҙәләндерә.

Хәҙер Әҙһәм ҡарт ауыҙынан һөйләтелгән риүәйәттең ошо өлөшөнә тыңлаусылар нindәй мөнәсәбәт белдереүенә туҡталайыҡ. Ул да баяғы һорауға яуап биреүҙе еңелләштерер. Бер еңелгәндән һуң, ҡалмыҡ батырымын тип әрһеҙләшеп, йәнә майҙанға сыҡҡан төрөктө муйыны сыҡҡансы Әбрәйҙең ергә ороуына яҙыусы тыңлаусыларҙа ике төрлө реакция булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

„– Майҙанды уратып ултырған халыҡҡа күрһәтеү өсөн, юрамал билләшеп йөрөгән икән Әбрәй батыр, – ти Сәмиғулла.

– Иллә йәтеш иткән тегене, – тине кемдер“ (72-се бит).

Автор хуплау һүҙҙәрен кем ауыҙынан сығыуын асыҡлап тормай. Шуға ла ул беҙҙең аңыбыҙҙа күмәктең фекере булып урын ала. Шул күмәктең фекере бушҡа ғына яңғыҙ Әхмәдиҙең вайымһыҙ ҡалыуы тураһындағы хәбәр менән йәнәшә бирелмәй. Был алым, бер яҡтан, Әбрәй батырҙың ҡылығы, йәғни намыҫлылығы, тыңлаусыларҙың Әхмәдиҙән башҡаларында хуплау табыуын, тимәк, уларҙың үҙҙәренең дә намыҫлы булыуын иҫкәртеүгә хеҙмәт итә. Икенсе яҡтан, Әхмәдиҙең намыҫлы иргә вайымһыҙ ҡарауы уның намыҫ яғы самалы булыуына ишара яһай. Риүәйәткә ике төрлө мөнәсәбәт Әхмәди менән халыҡ араһында тәрән соҡор барлыҡҡа киләсәген көнәлек кинәйәләй. Был кинәйәле ишара, аңғартыуҙар аҙаҡ раҫҡа сыға.

Әхмәди тәүҙә һалдат Әхмәди, әсир Әхмәди генә булһа, шул арҡала башта башҡаларҙа, шул иҫәптән романды уҡыусыларҙа ла, үҙенә ҡарата ыңғай ҡараш яулауға ирешһә, тора-бара Бүҙрәтчик Әхмәдигә, унан Тәпе Әхмәдигә, байыуҙы ғына маҡсат итеүсегә, ошо маҡсатҡа ирешеү өсөн кеше һуйыусыға әүерелә, һөҙөмтәлә әле күҙ уңында тотолған симпатия үҙ урынын антипатияға тапшырырға мәжбүр була.

Шулай итеп, романда әле телгә алынған риүәйәттәр цитата рәүешендә, хәҙергесә әйткәндә, интертекст формаһында ҡулланыла. Романдың төп сюжетына уларҙың бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ. Әммә халыҡтың антипатияһы символына әүерелгән Бүҙрәтчик тигән лаҡап исемгә Әхмәдиҙең нисек һәм ни өсөн лайыҡ буласағын көнәлгәре иҫкәртеүе ул риүәйәттәрҙе әҫәрҙең төп сюжетына ситләтеп этәреш яһауға ҡулай ярҙамсы сюжеттар тип баһаларға мөмкинлек бирә. Сөнки шул риүәйәттәр бәйән ителгәндә төҫмөрләнгән уның кире һыҙаттары төп сюжетҡа тапҡыр мөнәсәбәтле.

**Намыҫ тойғоло ир-ат һәм ил намыҫын һаҡлаған ир менән ат йәки романда дастан башланғысының ҡулланылышы**

1945 йылда Ғафури районы Тайыш ауылында Мирсаяф Сәйфуллин тигән риүәйәтсенән Жәлил Кейекбаев теркәгән «Аласабыр» легендаһы менән «Әбрәй батыр» риүәйәтенең төп нөсхәләре Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге ҡарамағындағы ғилми архивта һаҡлана (ф. 3, оп. 10. ед.хр. 40). Быға тиклем уның тәүгеһенә ҡағылышлы һүҙ алып барылды. Мәғлүм булыуынса, яҙыусы ҡарһүҙ төрөнөң ике жанрына ҡараған шул ике әҫәрҙән йыйылма текст төҙөгән дә, шуны дастан формаһына килтереп, «Туғандар һәм таныштар» (Өфө: БКН, 1975. 67–73) романында файҙаланған. Бының өсөн уға Мирсаяф Сәйфуллин һөйләгәндәргә бер аҙ үҙгәрештәр индерергә тура килгән, әлбиттә. Ана

шуның өлөшөн роман персонаждарының береһе Әҙһәм тигән ҡарт, Бүҙрәтчик Әхмәдизәң зымзыя юҡ булған Ҡола байталын телгә алыуға бәйләп, риүәйәт итеп һөйләп ултыра ла инде.

Фольклор әҫәрҙәренә әҙип тарафынан бер аҙ үҙгәрештәр индереү мәсьәләһенә килгәндә, ул яҙыусының үҙ алдына ҡуйған ижади уй-ниәте (замыселы) һәм өҫмаҡсаты (сверхзадачаһы) менән аңлатыла һәм шуның менән аҡлана ла. Мирсаяф ҡарт һөйләгән легенда менән риүәйәтте романдағы дастан менән сағыштырып ҡарағанда, иң әүәл шул иғтибарға ташланыр. Өс әҫәрҙә лә һүҙ йыйындағы ярыштар хаҡында бара. Әммә уларҙың үткәрелеү ваҡыты, урыны, һөҙөмтәһе тәңгәлендә һиҙелерлек айырмалыҡтар күҙәтелә.

Тәүҙә ваҡиға барған ваҡыт төшөнсәһенең бирелеше мәсьәләһенә туҡталайыҡ. «Аласабыр» легендаһында ул билдәһеҙлек төшөнсәһенә генә эйә булған «бер ваҡыт» тигән һүҙбәйләнеш менән генә бирелгән. «Әбрәй батыр»ҙа һүрәтләнгән ваҡиғаның ваҡыты ла шундай уҡ мәғәнәлә теркәлгән. Тик ул төшөнсәнең бирелеше тәүгеһенән лексик яҡтан ғына айырыла: «бер йылды» тигән һүҙбәйләнеш ярҙамында ғына хәбәр ителә.

Ә урын мәсьәләһенә килгәндә, шуны әйтергә ҡала: тәүгеһендә ваҡиға «Ырымбурҙа бик ҙур йыйын»да бара, икенсеһендә – Ҡазан тарафтарында. Тимәк, легенда менән риүәйәттә бәйән ителгән ваҡиғаларҙың ваҡыт хаҡында төшөнсә – билдәһеҙлек категорияһы ярҙамында ғына бирелә, урыны иһә аныҡ күрһәтелә.

Романдағы дастанға килһәк, ни күрәбеҙ? Унда ваҡыт та, урын да аныҡ. Аласабыр – бәйгелә, Әбрәй батыр бил һынашта ҡатнашҡан йыйын короноуанъя ваҡытында була. Тик был бәйге һәм ярыш Рәсәй батшаларының ҡайһыныһы тәхеткә менгән мәлгә тура килтерелеүен генә асыҡларға ҡала.

Дастан буйынса, Аласабыр ҙа, Әбрәй ҙә бер үк йыйында ҡатнаша. Тимәк, «Аласабыр» легендаһы менән «Әбрәй батыр» риүәйәте күҙлегенән ҡарағанда, ваҡиға барған урын дастанда «берләштерелә»: аңлашылалыр ки, Ҡазан йыйыны был осраҡта телгә алынмай.

Телгә алынған легенда һәм риүәйәт менән яҡшы таныш уҡыусы йәнә шуға иғтибар итмәй ҡалмай: «Аласабыр»ҙа Бөрөк ҡарт үҙенең йүгереген оло йыйынға үҙ белдеге менән үҙе ебәрә. Дастан буйынса иһә быны өсөн ҡартты, сапҡын саптырып тороп, кантон тиклем кантон башлығының әжүәләүе талап ителә.

Бәйге башланғас иһә, легенда буйынса, Аласабырға Бөрөктөң үҙ улы ултыра, сюжеттың дастан вариантында иһә – исемһеҙ бер малай.

Йәнә килеп шул: Аласабырҙың затының тамыры хаҡында белешмә биреү маҡсатында, легендаға мифик Ҡаф тау артындағы күл тирәһен төйәк иткән толпарҙарҙы ҡулға эйәләштереү тарихын эсенә һыйҙырған тотош бер ярҙамсы (ҡушма) сюжет ялғап бирелгән. Романдағы дастанда иһә ул сюжеттың эҙе лә юҡ.

Риүәйәттә Әбрәй менән бил һынашҡан ят бауыр батырҙың кем икәне билдәһеҙ ҡалған. Шул билдәһеҙ батыр уны еңә. Сәбәбе шул: Әбрәйҙе дәртләндереп, һай-һаулап торор урынға, теге ят бауыр батырҙың үтенесе буйынса, тамаша ҡылыусылар өнһөҙ ҡала. Ә дастанда Әбрәй хәл иткес бил һынашта бер түгел, ике тапҡыр төрөк батырын күтәреп һуға һәм еңеүсе тип табыла. Тамашасының ҡеүәтләү-ҡеүәтләмәүе хаҡында – ләм-мим.

Ҡарамаҡҡа «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» сюжетына һалынған йөкмәтке ябай ғына. Унда Тәлгәшле ауылы Бөрөк тигән ҡарттың «Яйыҡ буйы ҡаҙаҡтары ла белгән» (тимәк, шунда тиклем йәйелгән башҡорт иле хаҡында әйтеп тораһы ла түгел, йәнәһе), «бәйгеләрҙә бер генә йүгеректе лә алдына

сығармаған» Аласабыр тигән атының «короноуанъя ваҡытында» үткәрелгән (тимәк, иң оло) бәйгелә лә беренселекте алыуы, шул байрамда майҙан тотҡан Әбрәй атлы башҡорт егетенең беренселеккә сығыуы бәйән ителә.

Шул йөкмәткене асыуҙа әҙәби дастанға нигеҙ легенданан һүҙмә-һүҙ күсерелгән этнографик яҡтан аныҡ деталь һәм йолаларҙың да әһәмиәте бар. Мәҫәлән, «ат сабыштырыу башланмаҫ борон, һынсылдар йүгерәсәк аттарҙы йөрөп ҡарап сыҡҡандар» тигән мәғлүмәт бар унда. Был актты атҡарыу борон фарыз йола хисабында булған булырға тейеш.

Йүгerектәрҙе ҡарап сыҡҡас, һынсылдар: «Иҙел буйынан килгән бер ат бар был юлы, тиҙәр, Бөрөк ҡарттың Аласабырын күҙ уңында тотоп. – Уның алдына бер йүгерек тә сығалмаҫ», – тип уның еңеүсе булырын көн элек юрайҙар. Сюжет кимәленән ҡарағанда, ошо мәғлүмәткә мөһим эстетик бурыс йөкмәтелгән. Борон һынсыл тигән исем күтәргән кешенең һәр һүҙе фәрештәләрҙең «Амин!» тигән сағына тура килеүенә һәр кемдең иманы камил булған.

Фольклорҙың башҡа жанрҙарынан айырмалы рәүештә, легенданың шундай үҙенсәлеге бар. Ул үҙенсәлектең әрәсәһе – уның әллә ниндәй тылсым, мөғжизәләрҙе, фантастиканы ла «реаль» итеп танытыуында, тыңлаусыларға уларҙы шулай күндерергә тырышыуында һәм, әлбиттә, инаныстарҙы ла үҙ итеүсе, шул иҫәптән һынсыл тиклем һынсылдар юрағандың мотлаҡ юш килеренә күндереүсе жанр булыуында. Риүәйәтсе Мирсаяф ҡарт ауыҙынан яҙып алынған «Аласабыр» легендаһының эҙенән генә барған кеүек итеп бирелгән «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» дастанында ла, бигерәк тә уның бәйгегә бәйле өлөшөндә, һынсылдар юрауына шик белдермәй. Сөнки романда ошо сюжет күләмле цитата (интертекст) рәүешендә бирелгән урын, хронологик яҡтан ҡарағанда, халыҡтың аңы әле мифологик һәм мифологияға нигеҙләнгән фольклорса фекерләүҙән азат булмаған дәүергә тап килә. Шулай булғас, сюжеттың ни йүнәлештә үҫеше ике осраҡта ла көн элгәре билдәләнеп (прогнозланып) ҡуйыла, тип әйтә алабыҙ.

Легендалағы һымаҡ уҡ, дастанда ла һынсылдың берәү түгел, бер нисәү булыуы иһә – әле әйтелгәндең дә раҫ булырына тулы гарантия бар. Тимәк, артабан сабыр ғына «Түлле Мәмбәт» дастанында һүрәтләнгән бәйге һөҙөмтәһенең бында ла ғәмәлгә ашырын сабыр ғына көтөргә ҡала кеүек. Эйе. Әммә «һынсылдарҙың юрауы» мотивына был юлы ҡатмарлыраҡ вазифа йөкмәтелгән булып сыҡҡан. Ә быға әллә кем йә әллә нәмә түгел, юрауҙың юш килеренә «тулы гарантия биреүсе» билдә – уны бер түгел, күмәк һынсылдар әйтеүе – сәбәпсе.

«Һынсылдар юрауы» мотивында  дастанда һәм уға нигеҙ булған легендала ҡатмарлыраҡ вазифа йөкмәтелеүе, быға юрауҙың юш килеренә тулы гарантия биреүсе билдәнең сәбәсе булыуы нимәлә күренә һуң? Шуға иғтибар итәйек: һынсылдарҙың һүҙен ишеткәс тә, йүгерек аттарын килтергән байҙар: «Ат сабыштырыу бөгөн булмай», – тип, Зөлҡәрнәйҙең, тынысланып, Аласабырҙы һуғарып тороп, һоло менән һыйлауына сәбәпсе була. Ә ат тотоу тәжрибәһе булған кеше яҡшы белә: бындай ат менән сабышҡа сығыу мөмкин түгел. Бына шулай үҙенән-үҙе аңлашылып торһа ла, был сюжеттың легенда рәүешендәге вариантында ла, романға дастандың бер өлөшө рәүешендә ингәнендә лә, Аласабырға ни өсөн бәйгелә ҡатнашырға ярамағанына аңлатма биреү артыҡ һаналмаған. Байҙарҙың «бөгөн ат сабыштырыу булмай» тигән хәбәре хәйлә булып сығыуы асыҡланғас, Бөрөк ҡарттың улы, Зөлҡәрнәйҙе табып, Аласабырҙы йүгертергә әйтһәләр, ул: «Юҡ, булмаҫ, һыу эсереп, һоло бирҙем, йүгерә алмаҫ», – тип яуап бирә. Сюжеттың легенда вариантында иһә ошо уҡ яуапты һүҙмә-һүҙ

ҡабатлаған Зөлҡәрнәй, атының бәйгелә ҡатнаша алмауының сәбәбен тағы ла асыҡлай төшөп: «Сәсәр», – тип өҫтәй.

Һәр башҡортҡа һәм, ғөмүмән, йыйын ҡағиҙәләре менән таныш кешегә шул да яҡшы мәғлүм: ярыштарҙа еңеүселәр мотлаҡ бүләкләнергә тейеш. «Ике икең – дүрт», – тигән кеүек аңлашылып торған ошо деталде легенда ла, дастан да шулай уҡ аныҡлап китеүҙе кәрәк тапҡан. Бәйгелә ал бирмәгән Аласабыр өсөн – Зөлҡәрнәй, көрәштә бил бирмәгәне өсөн Әбрәй батырҙың ҡиммәтле бүләктәргә лайыҡ булыуы дастанда ла легендалағыса тәфсирләп тороп бирелгән.

Шуныһы ҡыҙыҡ: телгә алынғас та, этнографик яҡтан бөтә тулылығында күҙ алдына баҫмалы, йәғни һүрәтләүгә мохтажлыҡ кисермәгән күренештәр хаҡында һүҙ йөрөткәндә, легенда ла, Жәлил Кейекбаевтың дастаны ла уларҙы деталләп, тасуирлап күрһәтеп уҡ бирә, ә бына бөгөн инде этнографик яҡтан һирәк осрай торған күренеш иҫәпләнгәнен атап китеү менән генә хушһына. «Ырымбурға барғас, йүгертеү алдынан Аласабырҙы ратҡандар». Романдағы дастанда, уға нигеҙ булған легенданан айырмалы, бына шундай һөйләм бар. Бәйгегә ат әҙерләү йолаһы менән хәбәрҙар булмаған замана кешеһе был һөйләмдә әйтелгәнде, «аттың янбашынан йә һыртынан ҡағыу (ратыу)» тип кенә аңлаһа, һис тә ғәжәп итәһе түгел. Ә бына белеме буйынса зоотехник, күңеле менән йыраусы һәм һәүәҫкәр фольклорсы Спартак Ильясов (Учалы районы) аңлатыуынса, «ат ратыу» Барын башҡорттары диалектына атты ярышҡа «әҙерләү», «күнектереү» тигәнде аңлата.[1] «Романда «Ат ратыу» йолаһына яҙыусы ни өсөн аңлатма бирмәгән?» тигәндә, уны былай тип аңлатырға була. Роман яҙыла башлаған дәүерҙә йылдың- йылы һабантуйы ла, йыйындары ла үткәрелеп торған. Хатта никах туйы ваҡытында ла ат бәйгеһе үткәрелгән саҡтар булған. Шуға күрә «ат ратыу» йолаһы таныш булмаған башҡорт осрамағандыр, моғайын. Һәм автор, шул танышлыҡҡа иҫәп тотоп, уға асыҡлыҡ индереүҙә ихтыяж юҡ, тип белдергәндер.

«Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» дастаны этнографик яҡтан нигеҙле йөкмәткеһе өсөн генә романға индерелмәгән, әлбиттә. Ошо дастандың тел төбө мөһим проблеманы, намыҫ, намыҫланыу һәм намыҫһыҙлыҡ, ғорурлыҡ һәм түбәнселек кеүек һәр заман өсөн дә көнүҙәк булып ҡалған этик проблеманы кинәйәләй.

Кинәйәләүҙе төпкәрәк йәшереү өсөн, Жәлил Кейекбаев дастан сюжетының тышына сыҡҡас та, композицион яҡтан уға тағылма рәүешендә Аласабыр менән Әбрәй батыр хаҡында һүҙ алып барыуын дауам итә. Сюжеттан тыш композицион ҡушымтаның тәғәйенләнеше, ҡарамаҡҡа, дастанда бәйән ителгәнгә тыңлаусыларҙың реакцияһын асыҡлауға ҡайтып ҡала. Ысынлап та, дастансы роленә ингән риүәйәтсе Әҙһәм ҡарт «атты тәрбиәләп тотһаң ғына, уның ат булыуы» хаҡындағы фекерен һурпа эсмәй йөрөгәндә быуын бөтөүе менән сағыштыра. Роман контексынан айырмай ҡарағанда, ҡарттың был һүҙҙәре юғалған ат хужаһы бүҙрәтчик Әхмәдиҙе мал ҡәҙерен белмәүҙә ғәйепләү акты булып аңлашыла. Ә йәштәр өсөн Әҙһәм ҡарттың сағыштырыуы рәүешендәге репликаһы ғына ҡыҙыҡ. Тимәк, улар Әҙһәм ҡарттың репликаһы ниҙе кинәйәләй, шуның асылына төшөнөрлөк кимәлдә түгелдәр әле. Үҙегеҙ хөкөм йөрөтөп ҡарағыҙ, ҡарттың сағыштырыуына Әпхалиҡ тигән егет «Һурпа эсеңкерәп тотонһаң, арыу булып ҡала ул» тигән реплика һелтәй. Әҙһәм ҡарттың тел төбөнә төшөнмәһәләр ҙә, йәштәр үҙҙәренең тиңдәшенең был репликаһында ни кинәйәләнгәнен тиҙ аңлап ала. Әммә, улар уны ниндәй мәғәнәлә ҡабул иткән, был

[1]БХИ. 1-се том, Йола фольклоры. 234-се бит.

хаҡта яҙыусы өндәшеп тә тормай, бары: «Йәштәр көлөштөләр», – тип әйтеү менән генә сикләнә лә тотош бүлеккә нөктә ҡуя. Әпхалиҡ әйткән һүҙгә бирелергә тейеш аңлатманы уға йәштәрҙең реакцияһы менән алмаштырыу уның репликаһының кинәйәһенә кинәйә генә. Асылда, егеттәр бында Аласабыр – ат тәрбиәләү – һурпа бәйләнешен ҡуялар. Яҙыусы тарафынан былай ҙа төпкә йәшерелгән әхлаҡи-этик проблема бына шулай кинәйәле юмор аҫтына күмелеп ҡалғандай була.

Әхмәди атлы ҡурайсы ғына Аласабырҙың һатылыуына үкенес белдерә. Сәмиғулла тигәне менән йәнә берәү иһә Әбрәйҙең төрөк батырын, икенсе еңеүендә, имгәткәнсе алып атыуын хуплай. Яҙыусы бына шулай дастандың ни маҡсат менән һөйләнеүенә күпселектең әһәмиәт бирмәүенә иғтибар иттерә. Ни өсөн шулай икәненә автор аңлатма биреп тормаһа ла, төпсөр уҡыусы быға яҡшы төшөнә аласағына ышанған ул. Ни тимә, кеше ҡайғыһы төштән кире: Аласабыр затынан булған аты юғалыуға ҡайғырған Әхмәди ҡайғырһын, йәнәһе. Ул, әлбиттә, ҡайғыра. Уйы менән юғалған Ҡола байталының шәжәрәһен барлай башлауы, уның, ысынлап та, Аласабыр затынан булыу ихтималы хаҡында уйланырға тотоноуының билдәһе булып ҡабул ителә. Ә инде «Бәлки, уның нәҫеле шул Тәлгәшле ауылынан сыҡҡандыр, теге Аласабыр сыҡҡан ауылдандыр, кем белә...» тигән фекергә килеүе Әхмәдиҙе шәхси юғалтыу ҡайғыһы ғына иҙмәүен, ошо юғалтыуҙың олораҡ проблемаға олғашыуын тойомлауы асыла, һәр хәлдә, уның фекеренең осо, Аласабыр, Бөрөк ҡарттың хосуси мөлкәте иҫәпләнһә лә, бөтә халыҡ өсөн – ил күрке, милли ғорурлыҡ хисабында булырына, шулай булғас, уны ҡәҙерләп һаҡлау кәрәк булған икән тигән һығымтаға һәм шуның аша үҙенең байталы юғалыуын да дөйөм халыҡ мәнфәғәте күҙлегенән баһалауға барып тоташырына шик ҡалмай. Тимәк, йәштәрҙең Әҙһәм ҡарттың һүҙҙәрен уйынға бороу, кемдәрҙеңдер Әбрәй батырҙың төрөк батырын имгәтеүен хуплау менән генә хушһыныуы – уларҙың интеллектуаль яҡтан сикләнгәнлегенә, күмәгенең бер Әхмәди кимәлендә лә фекерләрлек түгел икәнлектәренә ишара. «Бүҙрәтчик» булып байырға тырышып ятҡаны өсөн, Әхмәдигә ҡарата халыҡ оппозицияла торһа ла, уны күрә алмаған сүрәттә лә, уның уйланыуҙары хаҡында әйтелгәндәрҙән, аңлашылыуынса, бында синфи мәнфәғәттән патриотизм тойғоһо, милли ғорурлыҡ хисе әһәмиәтлерәк икәне асыла.

Дастандың үҙендә ошо проблема нисегерәк ҡуйыла һуң? Бер һүҙ менән әйткәндә – әле генә билдәләгәнсә. Әгәр инде был һығымтаға аныҡлыҡ индерергә теләһәк, дастанда уны йөпләрлек дәлилдәр табырға була. Короноуанъя тантанаһында ил, халыҡ намыҫын яҡлау мәсьәләһе сыҡҡас, хатта кантон башлығы тиклем кантон башлығы булған Лоҡман, ошо хаҡта ҡайғыртып, йүгермәләп йөрөй. Тотҡонда ултырған Әбрәйҙе ошо оло маҡсат хаҡына иреккә сығара. Аласабырҙы бәйгелә ҡатнаштырыуға Бөрөк ҡартты күндерә. Һәр нәмәгә социологик күҙлектән баһа биреү традицияһына ярашлы рәүештә дастанда: Уның кантонынан барған батыр, көрәшеп, булған батырҙарҙы ла йыҡһа, Лоҡман кантондың үҙенә лә дан бит инде», – тип әйтелһә лә, йөрөүе: «Әбрәй батырҙы йыйынға ебәрергә кәрәк!» – тип даулашҡан ҡарттарҙың һүҙен тыңлауы барыбер уның ил хәстәре менән йәшәүенә, ярыштарҙа ҡатнашыу – намыҫ эше, еңеп сығыу – ил данын, халыҡ данын күтәреү икәненә төшөнөрлөк хаким икәненә дәлил ул.

Тимәк, Әбрәй батыр менән Аласабырға ил намыҫын яҡлау бурысы йөкмәтелә. Нисегерәк атҡара һуң улар был изге бурысты? Ярышҡа барасағын килеп әйтеү менән – Әбрәй, үҙе тотҡонда ултырған келәттең аҫҡысын килтереүҙәрен көтөп

тә тормаҫтан, мөйөштө күтәрә һалып, килеп тә сыға. Ошо урында: «Бәй, улай булғас, ниңә шуға тиклем бикле килеш ултырған һуң ул?» – тип һорарға урын ҡала кеүек.

Иң элек бик тә урынлы ҡуйылыуы ихтимал булған «Ниңә асҡысты килтергәнде лә көтөп тормаған?» тигән һорауға яуап биреп ҡарайыҡ. Ҡарттарҙың Әбрәйҙе ярышҡа ебәрергә ходатай булып кантонға барыуынан уҡ йыйындарҙа майҙан тотоу – был көрәш батыры өсөн ғәҙәти хәл икәненә төшөнөүе ҡыйын түгел. Тимәк, ул көрәш майҙанына сығып бил һынашыу – ил намыҫын яҡлау, унда еңеп сығыу – ил намыҫын аҡлау икәнен яҡшы аңлай. Шуға ла, йыйынға барырға тәғәйенләнеүе хаҡында ишеткәс тә, ишекте асыуҙарын да көтөп тормаҫтан, мөйөш күтәреп килеп сығыуына уның ил тойғоһо, намыҫ тойғоһо сәбәпсе. Ошо әйтелгәндәрҙә әле ҡуйылған тәүге һорауға яуап та бар: ул һәр эште, шул иҫәптән, хатта тотҡонлоғон да сабыр кисереүҙе намыҫ үлсәме менән баһалай белә.

Эпос йә әкиәт батырына берәй бурыс йөкмәтелдеме, уның шарты әйтелеүсән. Ошо ҡағиҙә был дастанда ла күҙәтелә, әммә мөһим бер төҙәтмә менән. Әбрәйгә көрәшкә барыу бурысы йөкмәтелеүен ил ҡарттары исеменән әшкәр итеп: «Барып еткәнсе торнанан – тояҡ, барғас, ҡырмыҫҡанан көс! – тип алғыш әйткәндән һуң, Лоҡман кантон, йыйындағы батырҙарҙың булғанын да йыҡһаң, хибестән (төрмәнән. – **Ә.С.** ) ҡотҡарам, өҫтәүенә бер йылҡы орлоғо нәҙер (шартлы вәғәҙә. – **Ә.С.** ) итәм», – ти.

Әкиәт һәм эпостарҙа бурыс, шарт үтәлмәгән хәлдә, герой язаға тарттырыла. Был хаҡта алдан иҫкәртеү ҙә яһала. Ә һүҙ барған дастанда ул хаҡта – ләм-мим. Әммә ул хаҡта һүҙ әйтелмәүе «бурыс, шарт үтәлмәгән хәлдә, герой язаға тарттырыла» ҡануны төбө-тамыры менән боҙола тигәнде аңлатмай. Сөнки иҫкәртмәнең һүҙмә-һүҙ әйтелеүе үҙе үк шарт түгел. Беҙҙең миҫалда кантон башлығының ауыҙынан сыҡҡан һуңғы һүҙҙәрҙең шарт һөйләм рәүешендә әйтелешенән ул ҡанундың бында ла үҙ көсөндә ҡалыуы, йәғни әгәр ҙә мәгәр еңелеп ҡайтһа, егеттең йәнә хибескә юлығасағы кинәйәләнә.

Ә ул шартҡа «мөһим төҙәтмә» тигәнебеҙ ниҙән ғибәрәт? Был һорауға шул яуап: кантондың шартына ҡаршы Әбрәй үҙ шартын әйтә. «Шартҡа – шарт» алымы ни әкиәт эстетикаһы ҡанунына, ни эпостыҡына ярашып етмәй.

Әкиәт, эпос ҡанундарын белгән өсөн дә шулай иткән яҙыусы. Ә әкиәт, эпос эстетикаһы ҡануны буйынса, герой алдына ниндәйҙер шарт ҡуйыла икән, мотлаҡ уның нигеҙе булырға тейеш. Кантон ғали йәнәптәре генә түгел, Әбрәй ҙә үҙ шартын нигеҙләй алған. Ана ул ни ти? «Мин бары беренселекте алыуын алырмын да бит, уның менән генә түгел. Бәйгелә лә беренселекте алыу кәрәк. Анауы Тәлгәшле Бөрөк ҡарт та Аласабырын йүгертергә апарһын ине. Шулай булмағанда, мин көрәшергә бармайым», – ти. «Ти» генә түгел, тотош белдереү (заявление) яһай батыр. Аңлашылалыр ки: берҙән, бил һынашта кем менән осрашасағы хаҡында осмот та мәғлүмәте юҡ көйөнсә лә Әбрәй үҙенең мотлаҡ еңеп сығырына инаныуын белдерҙе. Икенсенән, үҙ ҡәүеменең намыҫын ышаныс менән яҡлаусыларҙың яңғыҙ ғына түгел икәнен, оло йыйынға йыйылған бөтә ғәм, шул иҫәптән губерна башлыҡтары, алдында иҫбат итеү хаҡында ҡайғырта. Бына нимә менән аҡлана «шарт ҡуйыу» принцибына төҙәтмә индереп, уны «шартҡа – шарт» принцибын әүерелдереүҙең асылы.

Намыҫ менән намыҫланыу – Әбрәй өсөн айырылғыһыҙ төшөнсә. Кантон башлығы һәм ил ҡарттары алдында «мин барып беренселекте алыуын алырмын» тигән һүҙендә тора: «Йыйынға килгән батырҙарҙы, көрәшселәрҙе яурыны аша ташлап ҡына торған... Яҡын-тирәнән килгән батырҙарҙың барыһын да йыҡып бөткән».

Үҙе хәрәмләшмәй көрәшкән кеше булараҡ, хәрәмләшкәндәрҙе аямай Әбрәй. Миҫал: унан бер тапҡыр еңелгән төрөк батыры, йөҙөн дегет менән буяп, ҡалмыҡ батырымын, тип яңынан майҙанға сыҡҡас, Әбрәй уны муйыны сығырлыҡ итеп алып ата. Халыҡтың: «Үлтерҙе лә үлтерҙе!» – тип зыулашыуына ҡаршы уның алдашыуы хаҡында әйтеп: «Бында һәр бер батыр көс һынашырға килгән, алдашырға килмәгән!» – тип яуап бирә.

Төрөк батырын аяуһыҙ һелтәүе менән Әбрәй батыр, берҙән, үҙенең ғәҙеллекте яратыусы намыҫсан батыр икәнен күрһәтһә, икенсенән, мәкерҙәрҙе, алдаҡсыларҙы – намыҫһыҙҙарҙы күрә алмауын иҫбатлай. Намыҫ һәм намыҫсанлыҡ проблемаһы дастанда айырыуса Аласабырға бәйле ике эпизодта үтә лә фәһемле хәл ителә. Бәйге алдынан ғына һыу ҙа эскән, һоло ла ашап алған Аласабырға егерме саҡрымлыҡ дистанцияны үтеү бик тә ауырға төшәсәге баштан уҡ көн кеүек асыҡ була. Бәйгенең кисектерелеүе хаҡында ялған хәбәр таратыуҙары менән үҙҙәрен эпос һәм әкиәттәрҙә геройҙың юлын ҡыйырға тырышҡан мәкер заттар рәтенә ҡуйған байҙар тап ана шуға иҫәп тоталар ҙа инде. Етмәһә, Аласабырҙы ғүмерҙә лә күрмәһә лә, уның һыртына ултыртылған малай аҡтығы юл оҙоно ауыҙлыҡ менән уның ауыҙын бысып килә. Әммә Йүгерек ят һыбайлыға баш бирмәй, бәйгегә сыҡҡан аттарҙың барыһын да уҙырға үҙендә көс таба. Тап ошонда Аласабырҙың тәжрибәле бәйге аттарына ғына хас намыҫсанлыҡҡа эйә булыуы асыла. Уның, Йүгеректең, был сифаты уны бәйге башланыу ваҡыты хаҡында ялған хәбәр таратыусы байҙарҙың һәм, атты яй барырға мәжбүр итеү өсөн, улар яллаған малай аҡтығының, тимәк, һатлыҡ йәндең, намыҫһыҙлығына ҡапма-ҡаршы ҡуйыла.

Аласабырҙың намыҫсан йүгерек булыуын асҡан икенсе эпизод шунан ғибәрәт: әлеге шул сабыш алдынан һыу эсеп, һоло ашауының касафатынан ярты юлда сәсәп йығылып, һыртындағы малайын тәкмәс аттыра. Шунан «әҙерәк ятҡас, тороп, бер һелкенгән. Шунан һуң, туҙан туҙҙырып, сәсрәтеп сабып киткән... – юлда йүгеректәрҙең барыһын да уҙып бөтөрөп, ике-өс ер буйы ташлап, малайһыҙ-ниһеҙ майҙанға килеп кергән хайуан. Майҙан халҡы хайран ҡалған». Хайран ҡалырлығы булған да шул. Юлдан ситкә тайпылмай, тиҙлеген кәметмәй, үҙе белеп «финишҡа» етһен әле! Аласабырҙың был ҡылығы, берҙән, бындай бәйгеләрҙә уның күп тапҡырҙар ҡатнашыуы, тимәк, ярыш тәжрибәһенең ҙур булыуы тураһында һөйләһә, икенсе яҡтан, уның, ысын ир-егеттәрсә, намыҫсан булыуы тураһында фекер уята. Аттың аты шулай булғас, Әбрәй ише егеттәргә ни һан! Дастан уҡыусыларҙың ошондай фекергә килеренә иҫәп тота ла инде.

Тотош алғанда, «ир намыҫы – ил намыҫы» тигән изге төшөнсәнең тере кәүҙәләнешен һынландырған Әбрәй дастанда Зөлҡәрнәйгә ҡаршы ҡуйыла. Бөрөк ҡарттың ошо улы мал-моната алданып, ил данын, ҡәүем данын, ил-йорт намыҫының бәсен күтәргән Аласабырҙы... һатып ебәрә. Уның шул ҡылығы уның үҙен ил намыҫы, халыҡ намыҫы, уларҙың даны менән иҫәпләшә белмәүсе кеше итеп таныта.

Шулай итеп, «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» дастаны асылда – намыҫ һәм намыҫсанлыҡ һәм шуларҙың антиподы тураһындағы әҫәр. Роман контексында был сюжет Әхмәдиҙең намыҫ тураһында уйланырына иҫәп тотоп бәйән ителгән. Мал ҡәҙерен белмәү тураһында Әҙһәм ҡарт әйткән һүҙҙәр һәм ил өсөн дан һәм намыҫ символы булған Аласабырҙы һатҡан Зөлҡәрнәй образы уны, ысынлап та, уйға һала.

Ғөмүмән, был дастан ил намыҫын яҡлаған ат хаҡында һөйләп, ундай мал бер кешенең хосусиәтенә ҡараһа ла, асылда илдеке булыуын раҫлай. Ә был үҙ

нәүбәтендә, дастан сиктәрен үтеп, донъяға быуатҡа бер генә яралыусан талант эйәһенең ҡәҙерен белеү, ундай һәләт айырым кешегә бирелһә лә, уға ул ғына хужа түгел, ил, халыҡ хужа тигән хәҡиҡәт хаҡында ла уйландыра. Әбрәй батыр образы ла ошо юҫыҡта ҡабул ителә.

Халыҡ араһында мәғлүм легенда һәм риүәйәт нигеҙендә Жәлил Кейекбаев тарафынан төҙөлгән йыйылма һәм тәнҡиди дастан «Аҡбуҙат», «Ҡара юрға», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара ат» һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу» тигән мәҡәләһендә Мәжит Ғафури телгә алған, әммә беҙҙең көндәргә килеп етмәгән «Һоро юрға» ише мал-тыуар эпостары контексына һәйбәт яраҡлаша. «Яраҡлаша» тигәндең эргәһенә «исеме менән генә түгел, есеме менән дә» тип өҫтәргә лә була. Ни өсөн тигәндә, Аҡбуҙат та, Ҡара юрға ла, Аҡһаҡ ҡола ла, Ҡара ат та «менге малы», «хәрәкәт итеү сараһы» төшөнсәләрен генә түгел, әҙәм балаһы көнләшмәле намыҫсан һәм тоғролоҡ тигән сифаттарҙы кәүҙәләндерә. Тик шуныһы: Әгәр «Аҡбуҙат», «Ҡара юрға», «Аҡһаҡ ҡола» кеүек эпостарыбыҙҙа ул төшөнсәләр һәм сифаттар мифологик йә мифологик ерлектә кәүҙәләндерелһә, «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» дастаны уларҙы, «Ҡара ат» эпосындағы һымаҡ уҡ, реалистик ерлеккә күсерә. Хәтерегеҙҙәме, эпостар раҫлауынса, быуын-быуын батырҙарға, унан килеп, 1739 – 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы башында торған, үҙен хан итеп иғлан иттергән Ҡараһаҡал-Миндеғол Юлаевҡа тоғро хеҙмәт иткән Ҡара ат бер генерал аманатҡа алған 120 башҡорт батырын тотҡонлоҡтан ҡотҡара. Быға ул бәйге атына хас намыҫсан булыуы арҡаһында ирешә. Бәйге шарты буйынса, әгәр ул әлеге генералдың батша ойошторған бәйгеләрҙә беренселекте алған аттарын уҙһа ғына, 120 башҡорт батыры ҡотҡарылырға мөмкин, тиелә. Халыҡтың дәррәү ҡеүәтләүе, сәсәндәр менән йырауҙарҙың дәртләндергес йырҙары башта генерал аттарынан артта ҡалған Ҡара атҡа дәрт өҫтәй, һәм ул, беренселекте алып, тотҡон батырҙарҙың азатлыҡ алыуына ирешә. Мифик аттарҙан айырмалы рәүештә, Ҡара ат тигән ҡәрҙәше кеүек үк, Аласабыр ҙа бер ниндәй тылсымға эйә түгел, реалистик шарттарҙа тәбиғи булмышында сығыш яһай һәм халыҡтың өмөтөн һәм ышанысын аҡларлыҡ кимәлдәге намыҫсан ат идеалы булып хәтерҙә ҡала.

## Әкиәттәге хәҡиҡәт һәм тормоштағы ялған

Халыҡ-ара киң таралған әкиәт сюжеттарының береһендә ике етеҙ бурҙың мажаралары бәйән ителә. Шуларҙың береһе күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» тупланмаһына ингән әкиәттәр йыйынтығының бишенсе китабында «Мәскәү ҡарағы менән Питербур ҡарағы» тигән исем аҫтында бирелгән. Уның ҡыҫҡаса фабулаһы шунан ғибәрәт. Береһе Мәскәүҙә, икенсеһе Питербурҙа дан тотҡан мәшһүр ике бур осраша ла бер-береһен һынап ҡарамаҡ булалар. Питер буры ипләп кенә ағас башына менеп, оя баҫып ултырған Сәмреғоштоң аҫтындағы йомортҡаларҙың береһен һиҙҙермәй генә алып төшә лә кире мендереп урынына һала. Ул ағасҡа үрмәләгән арала Мәскәү буры тегенең итегенең үксәһен айырып ала, тегеһе һиҙмәй ҙә ҡала (әкиәттең бәғзе бер варианттарында хатта белендермәй генә ыштанын систерә). Әкиәттең ошо урынына тиклемге өлөшө XX быуат баштарында Антти Аарне тигән фин фольклорсыһы төҙөгән, аҙаҡ Стифа Томпсон атлы Америка ғалимы тулыландырған халыҡ-ара әкиәт сюжеттары күрһәткесендә (уны ҡыҫҡаса АТ тип кенә йөрөтәләр) «1525H» һаны менән тамғалана.

«Мәскәү ҡарағы менән Питербур ҡарағы» әкиәтенең геройҙары артабан бер байҙың кибетенә төшә башлайҙар. Бурҙарҙы тота алмағас, бай улар инә торған

ергә бер мискә ыҫмала ултырта. Питербур буры аңғармай ҡала, шул мискәгә сума. Эҙҙе юғалтыу өсөн, иптәше уның башын киҫеп ала һ. б. Әкиәттең был өлөшөнөң сюжетын АТ 950 менән билдәләп, «Рампсинит хазинаһы» тип йөрөтәләр. Сөнки Геродот ҡалдырған «Тарих» тигән йыйынтыҡтың икенсе китабының 121-се бүлегендә был сюжет тәүләп телгә алына һәм унда Рампсинит тигән мысыр фирғәүененең ҡаҙнаһын урлау хаҡында һүҙ бара.

Әкиәттә был сюжетҡа байтаҡ вағыраҡ сюжеттар тағыла. Унда Мәскәү бурын бай төрлө хәйләләр менән тоторға маташа – маҡсатына өлгәшә алмай.

«Башҡорт халыҡ ижады»на ингән әкиәткә оҙағыраҡ туҡталыуым (бурлыҡ сәскә атҡан бөгөнгө ысынбарлығыбыҙға төрттөрөргә тырышыуымдан тыш) шунан: Жәлил Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романында ошо әкиәттең бер варианты телгә алына. Ул әҫәрҙә Аласабыр менән Әбрәй батыр хаҡындағы дастанға йөкмәтелгән вазифаны үтәгәндәй була.

Ваһап ҡарттың тәпеһенә төшкән айыуға Әхмәдиҙең «айыу майы һөртөүе» тураһында киске уйын ваҡытында һүҙ сыҡҡас, Айытбай: «Оторһоң Әхмәдиҙе, Һамар буры кеүек бит ул», – тип ҡуя һәм, шул һүҙҙәрен раҫлау өсөн, инде беҙгә таныш ике бур тураһындағы әкиәтте һөйләй (әйткәндәй, «әкиәт өсөн урындың да, персонаждың да нисек аталыуы, һуңғыһының социаль хәленең әһәмиәте юҡ» ул принцибы буйынса ғына эш итә). Әммә Жәлил Кейекбаев донъя фольклорында киң билдәле булған сюжетҡа ҡоролған әкиәтте үҙенең персонажынан тулыһынса һөйләттереп тормай, Ырымбур бурының оя баҫып ултырған ҡош аҫтынан уға һиҙҙермәй генә йомортҡа алыуы, Һамар бурының урам буйлап китеп барыусы берәүҙең итегенең үксәһен, бер ниндәй шипкерт белдермәй, һыҙырып алыуын (йәғни АТ 1525Н тибындағы сюжетҡа нигеҙләнгән өлөшөн) һөйләтеү менән генә сикләнә. Әкиәттең тулы вариантында был сюжет экспозиция хеҙмәтен генә үтәй һәм «йәш бурҙы һынау» мотивы вазифаһын ғына атҡара. Айытбайҙың әкиәте шул һынау эпизодын бәйән итеү менән сикләнеүендә тәрән кинәйә бар. Бүҙрәтчик Әхмәди ҙә бит айыу ваҡиғаһында һәптәнлеккә тәүге имтихан тота. Әммә, Әхмәди менән әкиәт бурын йәнәш күрһәтеп, яҙыусы улар араһына тигеҙлек билдәһе ҡуйырға ашыҡмай. Ул бары тышҡы оҡшашлыҡты ғына сағыштыра. Эске яҡтан, ҡылыҡ-ҡыланыштарының мәғәнәһе йәһәтенән, улар араһында айырма ер менән күк араһындағы кеүек.

Айытбай әкиәттең ҡалған яғын һөйләмәһә лә, уның теүәл варианттары таныш кеше (ул уҡыусымы, тыңлаусымы – барыбер) Әхмәдиҙең артабанғы ҡылыҡтарында ла, дөйөм һыҙаттарҙа булһа ла, етеҙ бур менән оҡшашлыҡтар булыуын аңғара, әлбиттә.

Әкиәттең романда һөйләнелмәгән өлөшөндә бурҙың мутлыҡтары шыма ғына бармай. Шуның кеүек, Әхмәдигә лә мутлыҡ юлында уңыштар гел генә юлдаш була һалып бармай. Айыуҙы кеше тәпеһенән алыуы раҫҡа сығып, Ваһап менән судлашырға тура килә. Кеше яллап, Ваһапты үлтереүе лә, аҙаҡ һалдаттан ҡайтҡан Хөсәйенгә ҡул һалыуы ла сер булып оҙаҡ ҡала алмай. Әхмәдиҙән ҡырҡа айырмалы рәүештә, әкиәт бурына ҡан көҫәүсәнлек сифаты ят. Ә урлашырға уны яҙмыш, донъя етешһеҙлеге мәжбүр итә. Икенсе яҡтан, әкиәт буры өсөн байҙы, дин әһелен, батшанан һәм, ғөмүмән, үҙенең кәсептәшен төп башына ултыртыу уйын төҫөн ала, шаянлыҡ алымына әүерелә. Һәр хәлдә, ул уголовник түгел. Юмористик әкиәт буры йөҙөндә, асылда, хәйләкәр персонаждарҙың бер тибы һынланыш ала. Был тәңгәлдә халыҡ тарфынан хупламалы уның әкиәт буры намыҫсан юл менән мал тапҡандарҙың байлығын

ғына, унда ла, ғәҙәттә, мал-монаят эйәһе менән бәхәсләшеү арҡаһында (ә ундай бәхәстең инициаторы мал-монаят эйәһе). Уголовник бурҙан, шул иҫәптән романдағы Әхмәдиҙән айырмалы, ғәҙеллек һәм намыҫ тигән төшөнсәләр уға ят түгел. Әхмәди иһә – нәфсе ҡоло. Ул, яуыз ҡараҡтарса кеше айырмай, бөтәһен дә талай. Иң элек үҙенең кисәге синыфташтарының барлы-юҡлы малына ҡул һала, уларҙың хәләл көсөнән файҙа күрә. Шуға ла уның ҡыланышы ерәнеү тойғоһо уята.

Шулай итеп, романда цитаталанған, йәғни интертекст рәүешендә килтерелгән әкиәт сюжетының эстетик вазифаһы «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Алаҫабыр» дастанынығын хәтерләтһә лә, хатта әкиәт геройы менән роман персонажы араһындағы оҡшашлыҡҡа иғтибар ителһә лә, яҙыусы был юлы бөтөнләй икенсе үлсәмдәр менән эш итә. Ҡарамаҡҡа Әхмәдиҙе әкиәт бурына сағыштыра, әммә асылда уларҙың бер түгеллегенә баҫым яһай. Бында төп үлсәм – намыҫ: етеҙ бур шуға эйә, Әхмәдиҙә иһә уның осмото ла ҡалмай. Уның образында, шәхсән бер персонаждың ғына түгел, үҙенең генә түгел, тотош тормош ялғанлығы кәүҙәләндерелгән. Кем быға шик белдерә, зәңгәр күҙлеген сисһен дә бөгөнгө ысынбарлығыбыҙға күҙ һалһын... Шул саҡта, тел сапылдатып, яҙыусы Жәлил Кейекбаевтың, әүлиәләрсә, бик тә алға ҡарап эш итеүенә төшөнөүе ҡыйын булмаҫ...

## Фатиманың сеңләгәне һәм бәйет геройына әүерелгәне

Сеңләү, бәйет, хатта, ҡарамаҡҡа кескәй жанр иҫәпләнгән лаҡап «Туғандар һәм таныштар» романында сюжет барлыҡҡа килтереүсе фактор вазифаһын атҡара.

Сеңләүҙең туй йолаһындағы үҙенсәлекле драматик-театраль күренеш булыуы күптәребеҙгә мәғлүм. Ошо традицион фольклор күренешен дә Жәлил Кейекбаев үҙенең романы туҡымаһына бик урынлы һәм йәтеш кенә ҡулайлаштыра. Әгәр әҫәрҙә сеңләү картинаһы бөтә тулылығында тасуирланмаһа, ул өлөшө логик һәм хронологик яҡтан да, художестволы дөрөҫлөк йәһәтенән дә бик ныҡ кимтелер ине.

Яҙыусы сеңләүгә тотош бер бүлексә (14-се бүлектең 3-сө бүлексәһен) бирә. Романға ул әҙер сюжет рәүешендә килеп инә. Шул уҡ ваҡытта төп сюжеттың айырылғыһыҙ өлөшөнә әүерелә. Хикмәт бында традицион сеңләү тексының (сценарийының) конкрет географик – урынға яраҡлаштырылыуында ла, героиняның уларға төрлө мөнәсәбәттә булыуын билдәләүҙә лә (йәғни тыуған яҡ күрке «Мағаш ҡына тауҙың» тип иркәләп, ә килен булып төшәр ерҙе «Ҡатай иле — һыуыҡ ер, ҡая таш» тип үҙһенмәй телгә алыныуында ла), сеңләү эпизодында Фатиманың атаһы, әсәһе, ҡәйнәһе ни рәүештә ҡатнашыуының күрһәтелешендә лә түгел, ә героиняның ата-әсә менән мөнәсәбәтен асыҡлауға хеҙмәт итеүендә.

Фольклор экспедициялары ваҡытында күп ишетергә насип булды. Сеңләү йолаһын атҡарғанда, китәһе ҡыҙ йәш еңгәләре, әхирәттәре менән шаршау бөркәнер булған. Уның атаһына, әсәһенә, ағаһына, еңгәһенә, ҡәйнәһенә, кейәүенә төбәлгән сеңләү һүҙҙәрен янындағылар әйтә. Яҙыусы иһә был традицияны роман рухына, Фатиманың ағаһына мөнәсәбәтен асыҡлауға ҡулайлаштыра.

Туй – йолаларҙың иң-иң демократик өлөшө ул. Уның мөһим шарттарының береһе – ҡатнашыусыларҙың һүҙ күтәрә белеүе, шуға имтихан тота алыуы. Йыуанысыңды хурлаһалар ҙа – түҙ, холҡоңдо оҡшатмай төртмә таҡмаҡ әйтһәләр ҙә – сабыр ит, бүләк һалғанда, һаранлана ҡалһаң, үҙеңә үпкәлә – һин йәнә көлкө сығанағы, көләү объекты. Ә сеңләү мәлендә, ҡыҙ исеменән ни әйтһәләр ҙә – ихтыяр. Яҙыусы шул хоҡуҡты туранан-тура Фатимаға бирә. Шуға ла уның үҙ атаһына:

*...Мине биреп Ҡатайға,*
*Алдыңмы үсеңде, атаҡайым?*

*Мине аҡыҡ кеүек һатып бирҙең,*
*Артыҡ ҡына инемме, атаҡай?*

*Ҡырҡ тау аша, атай, биргәнсе,*
*Ташҡа баулап, һыуға һалһаңсы...–*

һ.б. шуның кеүек әсе-әсе һүҙҙәр менән сеңләп мөрәжәғәт итеүе, унан күргән йәберләүҙәр өсөн бөтөн ғәм алдында һорау алыу, хөкөм сығарыу уны рухи язалау кеүек аңлашыла. Бында шулай уҡ киләсәктә лә хәл иткес мәлдә Фатиманың бөгөлөп төшмәйәсәгенә ишара ла бар. Ана бит, сеңләү күренешен һүрәтләгәнсе яҙыусы ни ти: «Санаға ултырмаҫ борон, атаһы, әсәһенән башлап, бөтә туғандары, яҡындары, әхирәттәре менән хушлашып, күрешеп сығырға кәрәк. Ләкин, хушлашмаҫтан элек, ул ҡыйыу атлап иң тәүҙә урам уртаһында бөтә кәүҙәһе менән һырғауыл һымаҡ торған атаһы янына барҙы һәм уға етер-етмәҫтән туҡтаны, уға бер ҡарап алды ла әйтемләп сеңләргә тотондо» (251-се бит). Был юлдарҙы уҡығас: «Ҡара һин уны!» – тип ҡуяһың. Шулай тимәй һуң! Кем-кем, быға тиклем үҙ атаһынан үгәй атай күрһәтмәҫ яфа күргән, уның күҙенә әләгергә лә ҡурҡҡан ҡыҙ шулайтһын әле, уның был ҡыланышынан Әхмәди тиклем Әхмәди, уҫаллыҡта ал бирмәгән кеше, ҡаушап ҡала хатта: «Быны көтмәгән Әхмәди, күҙҙәрен аҡшайтып, аптырап ҡалды» (251-се бит).

Уҫал Әхмәди янына Фатиманың «ҡыйыу атлап» барып, уға әсе үпкә һүҙен ярып әйтеп һалыуының осраҡлы хәл булмауы аҙаҡ күп тапҡыр раҫлана: ҡайныһы менән ҡәйнәһе йәбер-золом ҡыла башлағас, бөтәһен дә күтәреп һуғып, хатта сабыйын да ҡалдырып, тыуған йортона ҡайта ла китә, билдәһеҙлектә интегеүгә күнмәй, ер аяғы-ер башында заводта эшләгән һөйгәне, Сөнәғәте, менән ҡауышыу өсөн, хәл иткес аҙымды ла үҙе яһай – ата йортонан ҡасып, уның янына бара. Ошо урында Ж. Кейекбаев ауыҙынан ишетергә күнеккән һүҙҙе йәнә әйтмәй түҙә алмайым: «Әт нисек була ул!» Ни тимә, ҡыйыулыҡ – ярты бәхет. Иң татлы бәхет – яулап алынған бәхет.

Ж. Кейекбаев халыҡ араһында ныҡ таралған «Фатима бәйете»ндә үҙенең төп сюжетына яраҡлаштыра. Тик, сеңләү жанрын файҙаланғандағы кеүек, бында ла шартлылыҡ принцибына таяна: бәйет героиняһы һыуға батып үлә, ә роман Фатимаһы һыуға ағыуҙы имитациялай ғына. Шулай ҙа романда «Фатима бәйете», дөрөҫөрәге, уйын сценарийы үҙенә йөкмәтелгән вазифаны намыҫлы үтәп сыға. Ул Нух килене Фатимаға халыҡтың ыңғай мөнәсәбәтен асыу, килендең дә кеше булыуын таныу, йәбер-золомға дусар ителергә тейеш түгеллеген белдереү сараһын үтәй.

## Кесе атҡа – оло йөк

Романда мәҡәл, ярым мәҡәлдәр (тапҡыр һүҙҙәр – идиомалар) йыш ҡулланыла. Улар, тормоштағыса, йә әйткән һүҙҙе, теләкте ҡеүәтләп, раҫлау (атын бәйгеләргә йөрөтөү кәрәклеге тураһында һүҙ барғанда, Әхмәди: «Насип булһа, йүгертергә ине инде. Кешенең аты уҙғансы, үҙеңдең тайың уҙһын, тигәндәр боронғо бабайҙар», – тип ҡуя (55-се бит), йә инҡар итеү (Әхмәдиҙең ҡола тайының Аласабыр нәҫеленән булыу ихтималын юраған Әҙһәм ҡарт Сәмиғулланың: «Һуң, Аласабыр балаһы булырға, был ни ҡола ла баһа», – тип шик белдереүенә ҡаршы: «Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа, тигәндәр боронғолар», – тип кенә яуап

бирә), йә персонаждарҙың эш-хәрәкәт, ҡылыҡтарына аңлатма биреү (Әхмәди әсирлектән ҡайтып төшкәс, башҡаларҙан ҡалмай, оло йәштәге Хажғәли ҡарт та уны күрергә килә: «Ауырып, ыҙғарлап торһам да, һин ҡайтҡанды ишеткәс, килдем әле. Уф, хәлем бөттө. Күрмәгә килдем. Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрә килһен, тигән боронғолар», – ти, үҙенең был эшенә аңлатма биреп (32-33-сө биттәр).

Мәҡәлдәр шулай уҡ үсәү, әрләү кеүек мөнәсәбәт белдереү сараһын үтәгән осраҡтар ҙа бар романда. Талхаһына Фатиманы әйттереп-әйттереп тә, Усман бай Әхмәдиҙең ризалығына ирешә алмай. Шуға ла Фатиманың Сөнәғәт янына ҡасып барған сағында тотолоуын ишеткәс, бүҙрәтчикте үсәп, былай ти: «Уңай булған уға! Аш уға! Бик ҡотора ине бына. Әй, Тәп һайланған – һаҙға, осраған таҙға, тигәндәр, һаҙға батыу шул була инде» (235-се бит). Әхмәдиҙең янып киткән йорт ҡаралтыһын һүндергәндә, уның башҡаларҙан йәшереп йыйған байлығын күреүселәр уны: «Ҡыҙғанғандыҡын ҡыҙыл эт ашаған, ти», – тип үсәй. Ә инде Нух ҡарт бер танаһынан етлекмәгән быҙау тыуыуын килене Фатиманан күреп, уны шулай тип ҡәһәрләй: «Ат күрмәгән ат күрһә, һуға-һуға үлтерә; тун күрмәгән тун күрһә, ҡаға-ҡаға бөтөрә, тигәндәр боронғолар, шул дөп-дөрөҫ» (297-се бит).

Халыҡ афоризмдарын ҡулланғанда, авторҙың тағы шундай принципҡа таяныуы айырым-асыҡ күҙгә ташлана. Берҙән, мәҡәлдәр тик персонаждар ауыҙынан әйттерелә, тапҡыр һүҙҙәр иһә күберәген автор телмәрендә, ремаркаларҙа осрай. Икенсенән, әле генә килтерелгән миҫалдарҙағыса, мәҡәлде әйтеүсе мотлаҡ боронғоларға, ололарға, башҡаларға һылтанып ҡуя («тигәндәр боронғо бабайҙар», «тигән боронғолар», «ти»). Шуның менән персонаж үҙенең әйткәндәренең бәхәсһеҙ икәнлеген белдермәксе, йәнәһе лә, был һығымтаны ул үҙе яһамай, йәнәһе лә, йылдар, быуаттар һынауын үткән тәжрибәгә таяна.

Тапҡыр һүҙҙәрҙе ҡулланып, яҙыусы оҙон-оҙаҡ тәфсирләп һөйләүҙән ҡотола. Ауылда беренсе булып «һөт машинаһы» алған Әхмәдигә инеп- сығып йөрөүселәрҙең күплеген әйтеү өсөн, автор һүҙҙе оҙонға һуҙмай, бисә-сәсә, ҡыҙ-ҡыр-ҡын, бала-сағаның «ишек яғы талдырмай, әбәк-һәбәк йөрөп» тороуҙарын әйтеү менән генә сикләнә (30-сы бит). Әхмәди, атаһы үлгәс, ағаһына күскән саптар бейәнән тыуған йондоҙ ҡашҡа ҡола тайҙы алырға теләй. Ағаһы иһә уны бирмәй ҡырталаша. Әхмәдиҙең Исмәғил ҡорҙашы иһә шул тайҙы үлтереп маҡтай. Шуны хәбәр иткәндән һуң автор: «Хайуанды маҡтап, ҡорҙашының эсенә боҙ киҫәге һалып ҡуйҙы», – тип ҡуя. Һүҙ сурытып тормай, автор шуның менән ата мираҫын бүлгәндә өлөшһөҙ ҡалған Әхмәдиҙең көнләшеү, үпкәләү, асыу, үс тойғолары кисерергә ерлеге барлығын әйтә лә бирә.

Элек-электән әҙәм балаһы бер-береһенә ҡушамат-исем, лаҡап-исем тағырға әүәҫ. Ғәҙәттә, уны тота килеп «ижад итмәйҙәр». Лаҡап-исемдең тыуыуына уның эйәһе (геройы) булыр кешенең холҡо, фиғеле, буйы, һыны, урынһыҙ һәм уңайһыҙ әйткән һүҙе сәбәпсе булыусан. Ташбатҡан ауылы халҡы Ғариф старостаны «Ҡатай Ғариф» йә «Ғариф Ҡатай» тип, Ғөмәрҙән Рәхмәтулла атлыны «Алап» тип кенә йөрөтә. Быяла заводы эшселәре иһә Австро-Венгриянан килгән Кацел тигән мастерға «Бем-бем» тигән лаҡап-исем ҡушалар, һалабаш менән кәсеп итеүсе подрядчик Әхмәдигә тәүҙә «Бүҙрәтчик Әхмәди» тигән, торараҡ «Тәпе Әхмәди» тигән ҡушамат йәбешә. Бынан тыш ауылда «Ҡалҡас Әхмәди» тигән кеше булыуын да беләбеҙ. Ул лаҡап-исемдәргә лә эйәләре үҙҙәре сәбәпсе була. Романда был «ҡағиҙә» лә еренә еткерелә: Ғарифтың ҡушаматына уның ике-өс йыл Ҡатай йортонда уҡыуынан, Рәхмәтуллаһына, белеме етмәү сәбәпле,

фамилияһын Аллабирҙин тип яҙыр урынға, яртылаш ҡына яҙыуынан килә.

Лаҡаптар, ғәҙәттә, халыҡтың юмористик фекерләүен, ҡыҫҡа, әммә йыйнаҡ итеп һығымта сығара белеүен сағылдыра. Кемгә тағылһа, улайһа шул кешегә күмәктең мөнәсәбәте лә тос һәм йыйнаҡ итеп әйтеп бирелгән була. Әле телгә алынған лаҡап-исемдәрҙә уларҙың эйәләренә халыҡтың ирония менән ҡарауын тойоу ҡыйын түгел. Тәпе Әхмәди тигәнендә ирония сатирик «төҫ» ала.

Лаҡаптын аңлатмаһы, ғәҙәттә, ике, уҙа барһа, өс-дүрт һөйләм менән бирелә, һәм, ғәҙәттә, көләмәс төҫөн ала. Ж. Кейекбаевтың романында ла был ҡағиҙә күҙәтелә. Шуның менән бергә, ошо кескәй форманың оло сюжет хасил итеү мөмкинлегенә эйә булыуы ла иҫәпкә алына. Бүҙрәт Әхмәдиҙең Тәпе Әхмәдигә әйләнеү тарихы өс бүлекте үҙ эсенә алһа, роман эсендә үҙ аллы бер сюжет туҡымаһы барлыҡҡа килтерә: алтынсы бүлектә Әхмәдиҙең айыу алыуы, етенсеһендә – уның Ваһап ҡарт тәпеһенә эләккән айыуға айыу майы һөртөүе, һигеҙенселә Ваһап менән судлашыуы тасуирлана. Судлашыу «Тәпе» лаҡабының тағылыуы менән тап килә. Шулай итеп, лаҡап-исем аңлатмаһы ыҡсым күләмле көләмәс булыуҙан уҙып, үҙенсәлекле бер ҡушымта сюжет хасил итә. Унда эпик әҫәргә талғынлыҡ та, көләмәстә була торған сатира ла, сатирик әкиәттәгесә мажаралылыҡ та бар. Ыҡсым күләмле жанрҙың ошондай мөмкинлектәрен асыу яҙыусыға үҙенең персонаждарының үҙ-ара мөнәсәбәтен асыҡларға булыша, һәр хәлдә, әле генә үҙ синыфынан айырыла башлаған Бүҙрәтчик Әхмәдиҙе намыҫһыҙлығы, кеше өлөшөнә инеү юлы менән байлыҡ ишәйтергә тырышыуы арҡаһында ауыл халҡының ек күреүе бер Тәпе лаҡабына төйнәп әйтелгән. Телгә алған һайын уның намыҫһыҙлығын хәтергә төшөрөп тороу мөмкинлеге һалынған был лаҡапҡа. Бына шулай Тәпе Әхмәди халыҡтың гел тәпеһенә юлыға.

Тәпе ҡушаматының тарихы менән йәнәш ҡуйып ҡараһаҡ, губернатор ҡаршыларға йыйыныу эпизодының да, асылда, «лаҡапты йәйелдереү» алымына ҡоролоуына төшөнөргә була. Сөнки ул эпизодтың һөҙөмтәһе булып «Ғариф старостаның гөбөрнаторы» тигән лаҡап-исем ҡала. Ул исем сиған таборының башлығына тағыла. Уның нисек килеп сығыуын аңлатҡан новеллистик сюжет үҙҙәрен ауыл кимәлендә донъя хужаһы, ил тотҡаһы тип иҫәпләүсе байғураларҙың эске булмышын, оло түрә алдында ярамһаҡланырға яратыусанлыҡтарын, уны ҡунаҡ итеүҙе дан-шөһрәт ҡаҙаныуға тиңләп, шуға ирешеү өсөн, бер-береһенең юлын ҡыйырға әҙер тороуҙарын фашлауға ҡулай.

Ғафури төбәгенең, киңерәк әйтһәк, Кәлсер табындарҙың фольклоры әлегә рәтләп йыйылмаған, махсус өйрәнелмәгән. Ошо эште тиҙерәк башҡарып, Ж. Кейекбаевтың романы менән сағыштырып сыҡҡанда, бик тә ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр, һығымталар яһарға булыр ине. Шуны раҫлау өсөн, иғтибарығыҙҙы бер миҫалға ылыҡтырмаҡсымын. Вәлиулла сәсән Ҡоломбәтовтың йөҙ йыллығын үткәргән саҡта Яҡтыгүлдә шундай бер көләмәс ишеткәйнем. Йәнәһе лә, һунарҙанмы, ҡайҙандыр ҡайтып килешләйме, әллә бер-бер яҡҡа китеп барышлаймы, Вәлиулла сәсән магазинға инә. Инә лә, ул ваҡыттағы тәртип буйынса, йөҙ грамм һалдырып ала. Эсәйем генә тигәндә, Ибраһим ауылы муллаһы килеп инә була. Күрә лә быны:

– Аһ, аһ, мулла кем! Был ни тигән эш?! Үҙең Алла бәндәһе! Ҡырҡ көнһөҙ иман кермәҫ шарап эскән ауыҙға, ти бит китап! – ти икән.

Вәлиулла сәсән һалынған шарапты төп күтәргән дә әйткән, ти:

– Үҙең белмәгән ни эш бар, мулла кем? Сәфәрҙәге кешегә бата ул!

– Һин рәзве сәфәрҙә? Ҡайҙа китеп барыш?

– Социализмдан – коммунизмға! – тигән, ти, сәсән.

Мин ошо көләмәс менән «Туғандар һәм таныштар» романында әсирҙән ҡайтҡан Әхмәдиҙе Исмәғил ҡорҙашының, башҡа ҡунаҡтарҙан айырып, келәткә индереп, хәмер менән һыйлағанда әйткән «Сәфәр йөрөп ҡайтҡан һалдат кешегә хәләл ул» тигән һүҙе араһында бәйләнеш тоям. Һәр хәлдә, был һүҙҙәрҙе уҡығас, әлеге көләмәс хәтергә килеүе бушҡа түгелдер. Йырҙа әйтелгәнсәрәк һуҡтырһаҡ, «шәриғәттең юлын үҙе белгән» шаян сәсәнгә шәриғәт алдында аҡланыуҙың кәрәге юҡ. Ул шулай аҡланғандай итә генә, әммә, юлайҡан, «яҡты киләсәк» – коммунизм менән ымһындырыусыларға төрттөрә. Уның өсөн иң мөһиме шул. Ә романда тарихи шарттар икенсе, һәм Исмәғилдең маҡсаты ла бүтән: ул үҙенең йәшереп атҡарған эшен, хәмер әсеүҙе, шәриғәт алдында аҡларға тырыша. Әгәр яҙыусы үҙенең әҫәренә, ысынлап та, өлкән дуҫы хаҡындағы көләмәсте яйлаштырһа (ә был көләмәсте уның да ишетеүенә шик юҡ), был миҫал уның фольклорҙы, айырым әйткәндә, уның кесе жанрҙарын, төрлөсә һәм мотлаҡ ижади файҙаланыу оҫталығына тағы бер дәлил. Кесе жанрҙың шулай тәү булмышында ла, киңәйтелгән хәлдә лә ҡулланылыуы ирекһеҙҙән романда яҙыусы үҙе ҡулланған бер мәҡәлде хәтергә төшөрҙө: «Ябағаны хурламағыҙ, яҙға сыҡһа, тай була».

Ғөмүмән, Жәлил Кейекбаев кесе күләмле фольклор жанрҙарын, «йәйелдермәйенсә» лә романында тәрән мәғәнәле итеп ҡулланыуға өлгәшә. Әйтерһең дә, яйын табыр ипле хужа кесе атты ла оло йөккә самалап ҡарай.

## Йырҙарында – зарҙары

Ж. Кейекбаев йырҙарҙы ла, үҙе йыш ҡуллана торған һүҙ менән әйткәндә, бушалағайымға ғына цитаталамай. Сәмиғулланың Сөнәғәткә йырлаған йыры ла, Сөнәғәттең яуап йыры ла (97-се бит) егеттең йәшләй генә тыуған еренән, туғантыумаса, дуҫ-иштән айырылып ситтә йөрөүенә ишаралай. Шуның менән бергә еҙнәй кеше үҙенең йыры менән тормош һынауын кисереү – ир-егет өсөн яҙмыш ҡына түгел, борондан килгән йола булыуын, шуның менән бөтәһе лә күнергә, сабыр итергә кәрәк тигәнде («Егет кешене хурламағыҙ. Ниҙәр күрмәй ул үҙенең ғүмерендә»), Сөнәғәттең яуап йырында, был хәҡиҡәт менән килешеүгә ҡарағанда, атанан етем ҡалған ир баланың ауыр яҙмышына зарланыу нығыраҡ һиҙелә («Аталарҙан бала йәтим ҡала, Күкрәк көсө менән мал таба»). Артабанғы бүлектәр уның был зарланыуында яҙмышы менән килешергә йыйынмауы ла әйтелгән булыуын аңлата: эшсе синыфҡа килеп ҡушылғас, ул үҙенең урынын иҙеүселәргә ҡаршы актив көрәшкә күтәрелеүселәр сафында таба.

«Ярман» һуғышына китәсәк егеттәрҙең, гармунға ҡушылып, урам буйлап йырлап үткән йырҙарында иһә тыуған ер менән айырылышыу хәсрәте лә («һанауһыҙ көндәр бар ине, Инде ҡалды һанарғау»), һөйгәндәрҙең тороп ҡалыуына аһ ороу ҙа («Алма биттәр ҡала бит!»), яуға ирекһеҙҙән китеүҙәренә зарланыу ҙа («Беҙ китмәҫ инек иртәгә, Герман тейә теңкәгә», «Алма биттәр ҡалмаҫ ине. Беҙҙе бадишаһ ала бит», 283-сө бит) бар. Һуңғы ике миҫалда һуғыштың социаль сәбәбе хаҡында уйланыу ҙа сағыла. Дөрөҫ, ул әлегә дөйөмөрәк кенә асыла. Ауыл егеттәре үҙҙәренең утҡа инеүенә Германия сәбәпсе тип кенә белә. Ә батша бары уларҙы һөйгәндәренән айырыусы рәүешендә генә телгә алына.

Армияға оҙатыу элек-электән ике осло булған. Шуға ла ир-егет менән ата-инәһе бәхилләшеп ҡалыр булған. Ташбатҡан егеттәре лә үҙҙәренең кире ҡайтыуҙарына икеләнә. Шул икеләнеү ҙә йыр аша әйтелә:

*Уфа-ай тау-ҙа-ры бик бей-йек,*
*Беҙ мен- нал-мабыҙ ин-де.*
*Бәл- ки, рә-хәт көн-дәр бу-лыр,*
*Беҙ күр-рал-ма-быҙ ин-де-е-е.*

«Туғандар һәм таныштар» романында бер үк йыр төрлө урында яңынан ҡабатланыусан. Был да тиктәҫкә түгел. Әле генә килтерелгән йырҙы һуғышҡа китеп барған Сөнәғәт тәүләп хәтеренә төшөрә. Был уның, ситтә йөрөүенә, һыңлаңҡырап китеүенә ҡарамаҫтан, ауылдаш һалдаттар менән бер уйҙаш, яҙмышташ булыуына ишаралай. «Алма биттәр» ҡалыуы тураһындағы йырҙың аҙаҡ Хөсәйен ауыҙынан яңғырауына ла шулайыраҡ мәғәнә һалынған, тип әйтергә була. Әммә йырҙың эстетик вазифаһы был урында уның менән генә сикләнмәй. Яңы башҡарылышта ул конкрет йөкмәтке ала. Бының үҙенә күрә хикмәте бар. Ағаһы Сөнәғәт кенә түгел, Хөсәйен дә Фатимаға ғашиҡ. Сөнәғәт янына ҡасып китеп тотолоп, Әхмәдиҙән туҡмалһа ла, яңғыҙ балаһын ҡалдырып, ҡайны йортонан ҡасып ҡайтып шәриғәт ҡанунын боҙоп, бер кем ҡылмаҫ ҡылыҡты ҡылһа ла, ауыл араһында яҡтан-яҡҡа һалып сәйнәлһә лә, ярата уны Хөсәйен. Тимәк, «ғашиҡ» һүҙе генә егет кисергән тойғоларҙы иңләп бөтә алмай. Тик армияға киткәнсе шул сикһеҙ тойғоһон йәш ҡатынға белдерә генә алмай Хөсәйен. Шуға ла, «аңлағанға – ишара» тигәнде иҫендә тотҡандай, вайым менән үҙенең тойғоһон аңлатырға тырыша. Авторҙан: «Тәпе Әхмәдиҙең тәҙрәһе төбөнән бер нисә тапҡыр йырлап үтте», – тип әйтеүендә шул асыла ла, Хөсәйен өсөн Фатиманан берәй төрлө яуап алыу әлегә мөһим түгел. Ул бары «ошо йыр аша үҙенең Фатимаға ғишыҡ тотоуын әйтергә, уға ишеттереп китергә тырышты» тип ҡуя автор ҙа.

Йырҙы интертекст рәүешендә файҙаланыу ярҙамында шул йырҙы башҡарыусыны ҡылыҡһырлау мөмкинлеге айырыуса Ғариф байҙың төшө рәүешендә һүрәтләнгән эпизодта һәйбәт асыла. Туғыҙынсы бүлектә, губернатор ҡаршыларға әҙерләнгән мәлдә, Ғарифҡа оло түрәне ҡунаҡ итеү мәсьәләһе буйынса байҙар менән сәкәләшергә тура килә. Башҡалар кеүек, ул да губернаторҙы үҙе ҡунаҡ итмәксе. Тауыҡ төшөнә тары инә, тигәндәй, губернаторҙы ул төшөндә күрә, һин дә мин һөйләшә, һыйлай. Уға бағышлап йыр йырлай:

> *Ә-ә-ә-әййй, тиәм булам мин...*
> *Ҡайһы илдәрҙән килгән был түрә-ә-әй?*
> *Был түрәлек һиңә бирелгәнтер, тиәм булам мин,*
> *Аҡылдарың камилъай күрә-ә-ә-әйййй (168-се бит).*

Оло түрәгә төшөндә йырлаған «Түрәкәй» йыры кесе түрәнең ярамһаҡланыусан, ялағайланыусан зат булыуын аса ла бирә.

Йырҙың төштә йырланыуының этнографик мәғәнәһе лә асыла романда. Башҡорттарҙың боронғо ышаныуы буйынса, төштә йырлау, ҡурай тартыу өндә килешмәй: уны ҡайғыға юрайҙар. Ғариф та өндә ҡайғыға тарый. Оло өмөттәр бағлап көткән губернатор Ташбатҡанға һуғылмай, икенсе юлдан уҙған була. Уныһы – бер ҡайғы. Губернатор тип дүрт күҙ менән көткәне – сиған таборы булып сыға. Быныһы – тағы ҡайғы. Хыял-өмөттәренең юҡҡа сығыуы – иң ҙур ҡайғы.

Бына шулай персонаждар башҡарышындағы йыр, әҫәрҙә ҡасан, кем башҡарыуына ҡарап, төрлө мәғәнә ала, авторға персонаждарҙан башҡаларҙан йәшерергә теләгән уй-хистәрен асып һалырға ла булыша.

### Әкиәт менән сюжет структураһы кимәлендәге йәшерен ауаздашлыҡ

Жәлил Кейекбаевтың романындағы туғандар һәм таныштарҙың бөтәһенән дә баҙығыраҡ һынландырылғаны, минең ҡарамаҡҡа, Фатима образы. Үҙәк сюжет күп йәһәттән уның яҙмышына бәйле. Ә уның реалистик һүрәтләнеше беҙҙең беребеҙҙә лә бәхәс уятмай. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, халыҡ әкиәттәренең

поэтикаһы менән таныш кешенең иғтибарын тартмай ҡалмай торған бер үҙенсәлек тә күҙәтелә бында. Классик әкиәт геройына, ғәҙәттә, йорттан ситкә китеү тыйыла (А). Тыйылған эште ҡылһа, ул бермә-бер язаға тарттырыла (Б). Әммә герой уның һайын үҙенекен итергә тырыша. Был ынтылыш, ғәҙәттә, өс мәртәбә ҡабатлана (В). Ҡаршылыҡ һәм һәр төрлө янау-язаларға ҡарамай, үҙ маҡсатына ирешергә тырышҡанда, ул тылсым ҡөҙрәтен эшкә егеүсән. Аҙаҡ шул мәғлүм була: геройҙың ҡаршылыҡтар менән иҫәпләшеп тормай маҡсатына ынтылыуы, баҡтиһәң, уны һынап ҡарау ғына булған, имеш. Шуға ла шул һынауҙы еңеп сығыусы герой финалда бәхеткә ирешә. Бәхетте әкиәт, ғәҙәттә, геройҙың яратҡаны менән ҡауышыуы, ғаилә хасил булыуы тип кенә таный (Г). Әкиәт сюжетының үтә ябайлаштырылған ошо структураһын Фатима яҙмышына нигеҙләнгән сюжет менән сағыштырһаҡ, уларҙың төкмә-төк тура килеүен күрербеҙ.

Фатимаға ата йортонан ситкә сығыу тыйылған. Ул һәр саҡ күҙәтеү аҫтында. Йә әсәһе, йә атаһы, йә һеңлеһе уны күҙҙән ысҡындырмаҫҡа тырыша. Еткән ҡыҙҙы шулай һаҡларға йола ҡуша. Әммә сюжет структураһы күҙлегенән ҡараһаҡ, ул әкиәт сюжетының әле генә шартлы рәүештә «А» менән билдәләнгән моментына тап килә. Фатима Сөнәғәт янына ҡаса: тыйылған эште ҡыла, шуға күрә тотола; атаһынан бәҫһеҙ булғансы туҡмала: тыйыуһыҙлыҡ үҙ язаһын ала (Б). Уны Ҡатай иленә кейәүгә бирәләр, йәғни геройҙы маҡсатынан алыҫлаштыралар, йәнәһе.

Бында ул тағы ла көслөрәк һаҡсылар ҡарамағына юлыға: ҡайныһы, ҡәйнәһе, ире ҡарауыллай уны. Былары иһә бәхет юлында героиня кисергән өҫтәлмә ҡаршылыҡтар иҫәбенә инә ($А_{1,2}$). Әммә Фатима йәнә ҡаса ($В_{1,}$). Өсөнсө ҡасыуы – Сөнәғәт эшләгән заводҡа барыуы ($В_2$). Әкиәттә тылсымға йөкмәтелер бурыс бында Фатиманың Сөнәғәткә булған мөхәббәте өлөшөнә төшә. Ауыр өс һынауҙы үтергә лә шул көс булыша. Шул көс традицияны боҙоуға ла (йәғни үҙе теләгәне, һөйгәне, менән ҡауышыуҙы яҡынайтыуҙа инициативаны ҡатын кешенең үҙ ҡулына алыуы ла) булыша. Шул һынауҙар ул хистең үҙен дә һынай, көсәйтә генә. Фатима мөхәббәте менән көслө. Ул үҙе яратып ҡына ҡалмай, үҙен яраттыра белә. Фатима – ирҙән ҡалған ҡатын, кеше үлтереүҙә лә ғәйепләнә, баштан-аяҡ бысраҡ ғәйбәттәр менән ҡойондорола. Әммә Сөнәғәттең күңеле тик унда ғына. Фатиманың яраттырыу һәләте бына шулай асыла әҫәрҙә.

Тылсымлы әкиәттә герой ауыр һынауҙы тылсым ярҙамы менән генә еңә. Ә үҙе инициатива күрһәтеп бармай. Батырҙар әкиәтенең геройына ҡарағанда, пассив сығыш яһай. Ошо йәһәттән күҙ һалһаҡ, Сөнәғәт тылсымлы әкиәт геройын хәтерләтә. Фатимаһын байтаҡ мажараларҙан ҡурсып алырға тейеш кеүек тә, әммә булдыра алмай. Килеп алырға тейеш мәлендә – төрмәгә юлыға. Фатима кейәүгә китә, ә ул ил ҡыҙыра: полициянан ҡасып йөрөй, унан һуғышҡа олаға. Осрашҡанда ла Фатимаға күңелендәген асып бирә алмай. Ни тимә, ул йола, шарттар ҡоло булып ҡала. Хатта Фатимаһы уның менән ҡауышырға килһә, ул – йәнә «ыристан». Әммә Фатимаға булған мөхәббәте уға рухи яҡтан бирешергә бирмәй. Әҫәрҙең аҙағында уларҙың ҡауышыуы һүрәтләнмәй. Шулай ҙа киләсәктә бергә булырҙарына шик ҡалмай. Ана бит, Фатима эргәһенән үткәндә, тотҡон Сөнәғәт ни ти: «Оҙа-а-ҡ-ла-ма-айй ҡай-тыр-быҙ!» Тимәк, өмөттә булһа ла, шартлы рәүештә «Г» менән билдәләнгән момент та ғәмәлгә аша.

Шулай итеп, Фатима яҙмышын нигеҙ итеп алған сюжет структураһы тылсымлы әкиәт структураһын ҡабатлай. Тимәк, бында беҙ фәндә «йәшерен фольклорлылыҡ» тип йөрөтөлгән принциптың ғәмәлләшеүенә шаһитбыҙ.

Структур яҡтан әкиәткә оҡшашлыҡты Фатиманың Сөнәғәтен эҙләп сәфәр сығыуы, уны тотҡон хәлдә табыуы, ғәҙәттә, «Үгеҙ», «Алмашәкәр» йә «Ҡара эт» тип йөрөтөлгән әкиәтте (АТ 425А) хәтерләтеүе лә нигеҙләй. Унда тылсымлы кейеменән ҡолаҡ ҡағыуы арҡаһында ғәйеп булған ирен эҙләргә сыҡҡан йәш ҡатын, донъя гиҙеп йөрөй торғас, уны тотҡон хәлдә табып ала.

Арауыҡ менән ваҡыт төшөнсәһен биргәндә, Жәлил Ғиниәтович халыҡсан стилистик формулаға мөрәжәғәт итә. «Волость үҙәгенән Ташбатҡан ауылына тиклем, Ғариф үлсәме менән әйткәндә, «егерме биш ҡамсы һелтәм ер» (158); «таяҡ ташламы ғына ерҙә таҡта түшәлгән оҙон күпер» (215); «юл ни берәү инде, ҡыл тартҡан кеүек. Маңлайың туры китһен дә китһен» (245); «Табын йортона һәм Ташбатҡан ауылына Өфөнән губернатор килә» тигән хәбәр ауыл халҡына «бер сәй эскәнсе, таралып өлгөрҙө» (159); «Бала төш етеп килә ине» (280); «Кәнт бесән ваҡытында тыуған бала» (295). Арауыҡ менән ваҡытты аныҡ үлсәмдәр менән әйтмәй, бына шулай ниндәйҙер ориентирҙар аша биреү ҙә туранан-тура булмаһа ла, әкиәттәргә хас алым. «Китеп бара, китеп бара, ти, артына әйләнеп ҡараһа, таяҡ (һөңгө, тышау, сабата, энә) буйы ер киткән, ти»; «ай китте, ти, йыл китте, ти, бер ҡалаға барып етте, ти» һ. б. кеүек ваҡыт һәм арауыҡ төшөнсәһен биреүсе стеретип стилистик формулаларҙы хәтерләтә. Бындай ассоциация ла романдың төп сюжетының әкиәт сюжеты менән ауаздашлығын күсәйтә. Йәнә килеп, ул ауаздашлыҡҡа романдың әкиәттәргә хас үҙенсәлеккә эйә булыуы – мажаралыҡҡа ҡоролоуы ла, персонаждарҙың ҡырҡа ҡапма-ҡаршы ике төркөмгә бүленеүе лә булыша.

Романдың структура йәһәтенән әкиәт сюжетының структураһына тура килеүе, йәшерен фольклорлылыҡ хасил итеүе Жәлил Кейекбаев әкиәт сюжетының ҡоролошон ентекләп өйрәнеүҙән килә, тип кенә аңлатыу бик үк хәҡиҡәткә тура килеп бөтмәҫ. Бындай тап килеш авторҙың иркенән тыш булғанға оҡшай, йәғни уны архетипик күренеш тип аңлатыу дөрөҫ булыр.

* * *

Романдың һуңғы битен ябып өлгөрмәйһең, уны ҡайтанан ҡарап сыҡҡы, тош-тош урындан ҡайта-ҡайта уҡығы килә. Ә уҡып сыҡҡас, Сөнәғәт менән Фатиманың һәм уларҙың ата-әсәһе, туғандары, дуҫ-иштәре менән дошмандарының яҙмыштарын өр-яңынан хәтер күҙгөһөнән кисерәһең дә, төпкөл башҡорт ауылдарына ла капиталистик мөнәсәбәттәр килеп инә башлау менән, ундағы халыҡтың социаль һәм синфи йәһәттән яңынан барланыуын, ошо ерлектә кисәге туғандарҙың бөгөн таныштарға әүерелеүен, таныш түгелдәренән дә, таныштар араһынан да туғандар үҫеп сығыуына шаһит, шул замандың шау-шыуын ишеткән, һауаһын һулаған, рухынан рухланған кешеләй тояһың үҙеңде. Бының бер сере – Ташбатҡан ауылы халҡы, яр буйында үҫкән ялбыр тирәктәр, ҡуйы әрәмәләр Үҙәште йылғаһын һыулаған кеүек, романдың туған халҡыбыҙ ижадынан һут алыуындалыр. «Туғандар һәм таныштар» романын ҡайта-ҡайта уҡып сыҡҡас, халыҡ тормошон киң ҡоласлы итеп һүрәтләгән әҙәби эпос менән бер рәттән, башҡорт фольклоры гәүһәренең тупламаһы менән танышҡандай булаһың да, шуларҙы авторҙың тәбиғи бер бөтөн итеүгә өлгәшеүенә һоҡланыуыңдан, ул үҙе әйтмешләй: «Әт нисек була ул!» – тип әйтеүҙән тыйыла алмайһың.

Эйе, Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев һәр йәһәттән дә маһир ине. Сөнки зиһене камил, күңеле уяу, рухы затлы ине шул уның.

# Ебәрелгән һәм алынған хаттар

**12 апрель, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм Нәфисә!*

*4 апрель яҙған хатыңды алдым. 10 апрель бер оҙон хат яҙып һалғайным, алғанһыңдыр. Ул хатта любовь хаҡында бутаным, буғай, сөнки ул мәсьәләгә һәр кемдең үҙ ҡарашы бар бит, һәр кем үҙенсә бутай, мин дә үҙемсә бутаным.*

*Һиңә ошо хат менән пединститутҡа алыу шарттары һәм РСФСР-ҙағы барлыҡ юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү программаларын ебәрәм (бөтә фәндәрҙән). Шул программалар буйынса әҙерләнегеҙ. Даже уҡытыусыларығыҙ ярҙам итә ала. Һеҙ күмәкләп һорағыҙ, алар консультация биреүҙән бер ваҡытта ла баш тартырға тейеш түгел... Һинең дә, минең дә шатлыҡ. Ниндәй совпадение... Һинең дә йән дуҫың килгән. Минең дә дуҫ ҡайтҡан. Ул Фридрих Вольф. Мин анан кисә генә хат алдым, экстренно яҙған. Ул бынан бер нисә көн элек Францианан ҡайтып төшкән икән. Ул анда концентрацион лагерҙа тотҡонда ине. Ике йылдан артығыраҡ ултырҙы. Беҙ аның менән с 1939 года хат алыша инек. Ул ваҡытта ул Францияла ирекТә ине әле. Аны ҡулға алып, төрмәгә, унан концлагерға оҙаттылар, шунан беҙҙең хат алышыу өҙөлдө. Ул Леон Фейхтвангер менән бергә ине. Вот ул ҡотолоп ҡайтҡан һәм миңә яҙа – Мәскәүгә килһәң, алдан уҡ хәбәр ит, ти, осрашырбыҙ, ти, хәҙер ҡайтыу менән эшкә тотондом, ти. Бик шат настроение менән яҙған. Беҙ аның менән «на ты», между прочим.*

*Мин ҡыш Мәскәүгә барғанда ҡатыны янына инеп сыҡҡайным. Бик оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул ирен, ҡайтырға тейеш, тип көтә ине. Уның ике улы бар, уҡыйҙар. Оло улы йәй пароход менән Өфөгә килгәйне. Мине эҙләгән, таба алманы. Мин ауылда булғанмын.*

*Вольф менән беҙ бик дуҫ, ул мине бик ярата, нимәмде яратырлыҡ инде... Әле ул мин студент саҡта, Мәскәүҙә минең менән возиться итә торғайны – театрға апара, төрлө литературный дискуссияларға сыҡыра торғайны. Мәскәүҙә ул ваҡытта, мин уҡығанда, театрларҙа уның байтаҡ пьесалары ҡуйыла ине – «Профессор Мамлок», «Троянский конь», «Матросы из Каттаро», «Флоридсдорф» һ.б. Ул ундай кеше, нисек әйтергә инде – бик простой, душа настоящая. «Троянский конь» тигән пьесаһын яҙып бөткәс: «Уҡып сыҡ, килешмәгән ерен әйтерһең», – тип миңә бирҙе. Шул пьеса һаман миндә ята әле, машинкала баҫылған көйө. Уҡып сыҡҡас, мин фекеремде әйткән булдым инде, нимә әйткәнмендер, белмәйем. 1936 йылдың йәйендә аны ҡотортоп Өфөгә алып килдем, беҙ санаторийҙа бер ай ял итеп яттыҡ. Шунда ул бер хикәйә яҙҙы, мин шул хикәйәне немец теленән башҡортсаға әйләндерҙем һәм «Башҡортостан» гәзитендә баҫтырып*

---

*Дауамы. Башы 9 — 10-сы һандарҙа.*



Жәлил Кейекбаев һәм Фридрих Вольф «Йоматау» санаторийында. 1936 йыл.

*сығарҙым. Ҡыҙыҡ ҡына бер хикәйә ине ул. Мәскәүҙә беҙ гел бергә йөрөй торғайныҡ, ул миңә үҙенең тормошонан ҡыҙыҡ эпизодтар һөйләй, мин тыңлайым. Ул, между прочим, врач-гинеколог, доктор медицинских наук. Ҡыҫҡаһы, бик образованный, белемле кеше. Мин аңа кисә хат яҙып һалдым, оҙаҡламай яуап килəсәк, ул бик аккуратный үҙе.*

*Мәскәүгә барһаҡ, мин обязательно таныштырам һеҙҙе, ул бик веселый кеше, шаярырға ярата…*

*Мин төшөнөп етмәйем, һин Рәйсәне Нәфисә янына ҡалдырып китмәксе булаһыңмы, киткәндә? Әгәр шулай булһа, алар августа ҡайтҡан саҡтарында Рәйсәне үҙҙәре менән алып ҡайтһалар ярай ҙа бит. Ул һине һағыныр, илар юҡһа. Үҙең белән алып ҡайтырһың лучше. Бында уҡырға инеп ҡалыр ине августа. Аңа хәҙер мәктәпкә йөрөргә лә ваҡыт, кажется.*

*Ул Нәфисә тигән әхирәтең Үтәш ауылынанмы? Һеҙ бик күңелле йәшәйһегеҙ икән хәҙер, мин бик шатмын. Сөнки һинең бер үҙеңә бик ҡыйын ине бит, не правда ли, Нәфисә? Хәҙер ул тиклем күңелһеҙ түгелдер, минеңсә. Это хорошо!*

*Мои товарищи, друзья, коллеги по работе надоедают, когда ты, в конце концов… Мин «Көнө бөгөн түгел бит» тим дә ҡуям. Ауылға ҡайтһам да шул уҡ хәл. Йөҙәтеп бөтәләр шул һорауҙы биреп. А я все один, да один как Робинзон Крузо.*

*Йә, мин бер общественный эшен эшләп ташланым әле: перевел сказки Братьев Гримм с немецкого на башкирский язык непосредственно. Сказки поступили уже в продажу. Издано хорошо, на хорошей бумаге с иллюстрациями, новым шрифтом. Эти сказки впервые вышли на башкирском языке. Люди говорят, что очень удачный перевод – хорошее издание.*

*Өфөлә хәҙер яҙ, йә ямғыр, йә ҡар яуа, аяҡ аҫты бик бысраҡ, урамдан йылғалар аға. Парктарҙа яҙғы һандуғастар һайраша. Сыйырсыҡ килгән. Иҙелдең боҙо төшмәгән әле. Быйыл һыу бик шәп ташасаҡ, тип көтәләр – Иҙел 11-12 метрға күтәреләсәк, тип фараз итәләр. Шулай булғас, Үтәш ауылына ла һыу барып етәсәк.*

*Өфөлә «Салават Юлаев» фильмы барҙы. Ҡараныҡ, миңә бик оҡшаны, кешегә нисектер, гәзиттәргә яҙып сыҡтылар.*

*Үҙемдең хәлдәргә килгәндә, әкренләп йөрөп ятҡан көн. Һау-сәләмәтмен. Кәйефтәр ҙә һәйбәт. Бик һағынам һине, Нәфисә. Хатты йыш яҙ. Атайыңдың хәлдәре нисек? Һин, зинһар, аның белән скандал сығарма инде.*

*Рәсемеңде ебәр, үҙең төшкәнде лә, подругаң белән төшөп тә ебәр. Йә, ул һеҙгә ҡайҙан килде, Үтәштәнме?*

*Мин ошоноң белән тамамлайым хатымды. Хуш, Нәфисә, хуш, һөйөклөм.*

*Барлыҡ эшеңдә лә уңыштар теләйем. Барығыҙға ла сәләм. Хат көтөп ҡалам.*

*Һағынып Жәлил.*

*Крепко-крепко целую.*

(Фридрих Вольф үпкә сире менән ыҙаланған һәм 1936 йылдың йәйендә ул ял алыр, дауаланыр өсөн Ҡырымға барырға йыйынған. Атайым ҡымыҙҙың шифаһы, Өфөгә яҡын санаторий хаҡында һөйләп, уны Йоматауға барырға күндерә. Өфөлә атайым яҙыусы

Булат Ишемғоловҡа Вольфты фатирға төшөрөүен үтенә. Сөнки ул осор К. Маркс урамында бер нисә генә әҙип уңайлыҡтары булған фатирҙа йәшәгән. Атайым немец дуҫын бүтән башҡорт яҙыусылары менән дә таныштырған.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуң Фридрих Вольф Германия Демократик Республикаһына күсеп китә. Атайым уның менән 1953 йылға — вафатына ҡәҙәр хатлаша. Һуңынан ул Вольфтан үҙенә төбәп ебәрелгән бөтә хаттарҙы Германияға ебәргән. Ф. Вольфтың Жәлил Кейекбаевҡа яҙған хаттары Ф. Вольфтың һайланма әҫәрҙәрендә баҫылып сыға. Вафатынан алда Вольф ҡатынына үҙенең бөтә әҙәби әҫәрҙәренең бер данаһын мотлаҡ СССР-ға, йәғни Жәлил Кейекбаев йәшәгән Өфө ҡалаһына, ебәреп торорға ҡуша. Шулай итеп, атайым күп йылдар буйы Ф. Вольфтың яңы китаптарын фрау Эльза Вольф ҡуша һалған открытка менән бергә алған.

Фридрих Вольфтың өлкән улы Конрад Вольф — атайым уны Коля тип йөрөттө — һуңынан күренекле кинорежиссер булып таныла. Кинйә улы Маркус Вольф һуғыш осоронда Башҡортостандың Кушнарендағы разведка мәктәбендә уҡый. Аҙаҡ ул ГДР-ҙа ШТАЗИ-ға (совет дәүләт иминлеге комитетына оҡшаған ойошма) етәкселек итә. Әлбиттә, Берлин стенаһын ауҙарғандан һәм ике Германия берләшкәндән һуң Маркус Вольф тәнҡиткә дусар ителә).

**20 апрель, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклө Жәлил!*

*Хаттыңды от 12/ IV алдым. Рәхмәт, мең тапҡыр рәхмәт. Ул хатты көтөп алыу миңә бик оҙаҡ, бик ҡыйын тойолдо. Был восемь көн миңә һигеҙ айҙан та оҙағыраҡ күренде. Һинең хатыңды алып шатландым, әлбиттә. Рәхмәт хатты оҙон итеп яҙғаның өсөн…*

*Һин хатыңда мине маҡтап ташланың, якобы, хатты оҫта итеп яҙамын. Благодарю за комплимент. Такой похвалы я не заслуживаю... Оят булһа ла, русса яҙырға тура килә, сөнки башҡортса күп кенә һүҙҙәрҙе белмәйем әле… Обычно, уйлап йөрөгәнемне, башыма килгәннәрҙе тотам да яҙам мин. Мына шулай инде.*

*А о Твоих письмах я не могу и судить. Всякая оценка кажется недостойной Твоих писем, я о них очень высокого мнения. Скажу только одно – они неоценимы! И ничего добавить не могу…*

*Вопросов о любви я больше затрагивать не буду. У меня не было намерения дать теорию любви или дать объяснение любви. Это вышло как-то так, теперь мне очень стыдно за это перед Тобой. Ты обо мне черт знает что можешь подумать. Не так ли? Я прошу Тебя об одном – не думай, что я хочу умничать и философствовать. Я не хочу быть похожа на скучных людей, которые есть на свете, которые без конца и краю готовы разводить философию, лишь бы слушатели нашлись. Они бывают очень назойливы. Вот и я, наверное, часто бываю похожа на таких людей. Если это так, то извини меня! Я просто очень рада, что Ты не сомневаешься в моей любви. Уверять и доказывать я не умею. Очень хорошо, что и так веришь. В любви лишних слов и объяснений не требуется. Я так думаю.*

*Пединститутҡа ҡабул итеү правиланы ебәреүең өсөн бик ҙур рәхмәт һиңә. Требования, оказывается, не очень большие, осилить их вполне возможно.*

*Я рада за Тебя, за Твои успехи, мой дорогой. Поздравляю Тебя с переводом сказок братьев Гримм. Ты до сих пор молчал, ничего о них не писал мне. Я очень рада, что перевод вышел удачный. Я тоже хотел бы прочитать эти сказки на нашем языке. По приезду обязательно прочитаю.*

*Я рада также за Вольфа и его семью.*

*Рәйсә тураһында. Ул безоговорочно Нәфисә менән ҡала, ләкин быйыл август айында ғына Нәфисәләр ҡайта алмайҙар. Алар киләһе йәй ҡайталар. Рәйсә әҙерәк илар, һағыныр, ләкин… ничего не поделаешь. Ведь с ней ничего не случится. За нее можно быть спокойной, она будет в надежных руках. Подумай, Жәлил, не могу же я ее с собой увезти. Ул әле быйыл ғына уҡырға кермәй. Аңа саҡ 7 йәш тулты. Йәше етелә булһа ла, ул үҙе бик бәләкәй, миңә оҡшамаған (я очень высокого роста). Шулай, ул киләһе йылһыҙ уҡымаҫ әле.*

*Ә Нәфисә Үтәш ауылылыҡы, әле лә шунан килте. Аның иптәше Мәнтем ауылылыҡы. Мин уны бик йәлләйем, мынта аңа бик күңелһеҙерәктер. Өстәүенә, еҙнәй тейешле кешебеҙҙән хат килмәгән була. Нәфисә бик ҡайғыра, күңелһеҙләнә. Мин аны үҙемсә успокоивать иткән булам. Ул миңә: «Мин бала түгел, ҡуй әле», – тигән була.*

*Ваҡыт так себе, ничего үтә, бик күңелле тип әйтеп булмай шулай ҙа. Бер үҙем саҡтағы кеүек ҡыйын түгел, әлбиттә. Һин миңә даже еще лучшего желаешь (т.е. веселья). За пожелание благодарю, но видишь ли, у меня нет оснований быть веселой, но грустить все время тоже нельзя. Помни одно, что вполне веселой и спокойной я буду только с Тобой.*

*Дөрөҫ, Жәлил, Азия һәм аның тәбиғәте үзбәктәр өсөн генә яҡшы һәм матур күренә. «Ҡайһы бер кеше маҡтай ул яҡты»,– тиһең. Белмәйем, ниндәй кеше икән ул. Я со своей стороны нисколько не хвалю Азию. Она и ее природа и т.д. и т.п. в несколько раз хуже и страшнее, чем Ты читал в книгах и смотрел в кино. Более половины моей жизни прошло здесь. Кто-нибудь за это время мог бы привыкнуть, ләкин мин мынтағы условияларына өйрәнә алманым. Бохара бөтөн тарихи һәйкәлләре белән не стоит нашего Красноусольска. В Красноусольске я была в 1928 году. Правда, это уже очень давно, но я все же немного помню. Үҙенсә Бохара, как и Казань, университет ҡалаһы булған бит элек, бөтөн духовный мәктәптәр, мәдрәсәләр шунта булған. Мин бер ҙә яратмайым Бохараны. Вообще Урта Азияның бер шәһәрен дә яратмайым. Күп кенә ерҙә булдыҡ – Тажикстанда, Төркмәнстанда, Үзбәкстанда, ләкин бер һәйбәт шәһәрен күрмәнем, әйбәт шәһәре юҡ та. Минеңсә, Өфөгә бер шәһәр ҙә етмәй донъяла. Ул бик матур бит. Другой такой реки, как Белая, тоже нигде нет.*

*Өфөлә, наконец, яҙ еткән икән. В данное время бик күңелле инте Һеҙҙә. Боҙ киткәс, һыу Үтәшкә барып етәсәк, тиһең. Да, интересно было бы посмотреть. 11 йыл була минең боҙ киткәнен күрмәгәнгә. Немного помню, что половодье интересное зрелище. 1942 йылды, Алла бирһә, (как говорят старые люди) боҙ киткәнен ҡарарға икәүләп барырбыҙ, йәме?*

*Әйткәндәй, был хатты Һин тап 1 Майҙа алырһың әле. Я поздравляю тебя с праздником. Обязательно напиши, как встретил и провел майские дни. Я тоже обязательно напишу.*

*Ты пишешь, что Твои друзья и коллеги надоедают Тебе с вопросом, когда Ты… У Тебя поставлено многоточие. Я поняла так: когда Ты женишься. Знаешь что, на месте Твоих друзей я бы тоже задала этот же вопрос. Вероятно, Твои друзья уже подыскали Тебе и подходящую невесту. Ты не обижайся на меня за предположение. Между прочим, извини за любопытство, а Твои друзья – семейные люди?*

*«Салават Юлаев» беҙгә лә бөгөн генә килде. Мин барманым бөгөн. Бик барғы килә, ләкин ваҡыт юҡ. Мин әле генә мәктәптән ҡайттым та Һиңә хат яҙырға ултырҙым, анан әҙерәк дәрестәрҙе ҡараштыраһы бар. Иртәгә барам тип торам инте, нисек булыр. Халыҡ күп ине бөгөн клуб янынта (беҙҙең мәктәп клуб янынта ғына). Ты пишешь, что понравилась картина. Я напишу Тебе свое мнение.*

*Это письмо пишу Тебе вечером. Сейчас еще нет 10 часов. Со школы пришла*

*недавно. Наши еще не спят. Шумят. Заводят патефон. Я стараюсь не слушать, продолжаю писать. Я, наверное, напутала многое. Ты извини. Пока на этом заканчиваю. Скоро должно быть от Тебя письмо.*

*Барыһына ла яуап яҙҙым шикелле. Ҡалған һүҙҙәрҙе киләһе хатта яҙырмын.*

*Хуш, Жәлил, һау бул. Сәләм белән, Һағынып, Нәфисә.*

*Целую, тебя, мой любимый Жәлил.*

**18 апрель, 1941 йыл, Өфө**



*Жәлил Кейекбаев. 1938 йыл.*

*Ҡәҙерлем һәм һөйөклөм Нәфисә!*

*8/ IV һалған хатыңды алдым, рәхмәт, Нәфисә…*

*Лотфый уҡып бөткәс үк эшкә керә һалмаҫ әле, минеңсә, сөнки һинең яҙған буйынса, учительский институтты бөтөрә, «великий учитель» булырға йыйына, тиһең бит. Ә уҡытыу эше, ғәҙәттә, 1 сентябрҙә башлана. Ә һинең ҡайтыу мәсьәләһен бөтөн деталдәре менән уйларға кәрәк хәҙер, Нәфисә. Һин үҙеңдең фекереңде яҙырһың. Урта мәктәптәрҙә уҡыуҙар, выпускной экзамендар 20 июндә бөтә, ғәҙәттә. Һин шул июнь аҙаҡтарында ҡуҙғалырһың, тип уйлайым. Ни тиклем иртәрәк ҡайтып етһәң, шул тиклем яҡшыраҡ булыр. Беҙ Мәскәүгә барырға ла, бер аҙ ял итергә лә өлгөрөр инек…*

*Үҙемдең эштәр бер көйө, һаман эшләп йөрөгән көн, уҡытам да шунда, ләкин уҡытыу сәғәттәре күп түгел, май баштарында бөтә. Унан балаларҙан экзамен алам да тынысланам. Унан һуң ағымдағы эштәр генә ҡала, һәм быйыл тәүгенән госэкзамен үткәрәбеҙ. Июнь аҙаҡтарында бөтөн эште тамамлайбыҙ.*

*Өфөлә ҡар бик ҡыҙыу ирей башланы хәҙер, урамдағы канауҙарҙан шарлап шытыр-бытыр аға, бала-сағаларға етә ҡалды, улар йылға йырып уйнай. Иртәле-кисле туңдыра, көндөҙ тағы иретә. Иҙел боҙоноң өҫтөнән һыу киткән, тип һөйләйҙәр, мин үҙем барып күргәнем юҡ былай, ләкин боҙ төшмәгән әле.*

*Кинотеатрҙарҙа яңы фильмдар бара. Барып ҡарағаным да юҡ, исмаһам, ошо арала. Барһаң, ваҡыт та бар ул барын. Был осор театрға ла барған юҡ. Үткән аҙна бер көн уҡытыусылар менән йыйылышып барғайныҡ. «Бай һәм хеҙмәтсе» тигән бер нәмәне ҡараныҡ үзбәк тормошонан. Хәмзә Хәким Зада әҫәре, оҡшаны, матур әйбер. Үзбәксәнән башҡортсаға тәржемә иткәндәр, артистар ҙа ничего уйнайҙар.*

*Гәзит ҡараштырғанда һин йәшәгән Карши тураһында уҡырға тура килде. Карши – иҫке ҡала икән үҙе. Беренсенән, ул элек Карши тип аталмаған булырға тейеш, уның төп, тарихи дөрөҫ исеме – Нәсәф йә иһә Насаф. Ул ҡалала Бохара династияһы ваҡытында Мир Сәйед, дөрөҫө – Мир Абид Саидо Насафи исемле атаҡлы шағир булған, придворный поэт какого-то бухарского эмира. Возможно, современные обитатели города Карши его не знают. Если не знают, то очень плохо. Был упрек һиңә теймәй, ләкин, Нәфисә, сөнки һин Карши ҡалаһының үҙенән түгел бит, ситтән килгән кеше.*

*Нәфисә, мин һинең өсөн бик шатмын. Сөнки, Нәфисә, әхирәтең килгәс, һиңә күңелле. Ул һинең бәләкәй саҡта бергә уҡыған иптәшең булғас, бигерәк тә һәйбәт. Бәләкәй саҡтағы дуҫлыҡ онотолмай ул. Минең дә бәләкәй саҡтағы иптәштәр Өфөгә килһә, миңә килмәй китмәйҙәр. Беҙ бәләкәй саҡтағы ҡыҙыҡтарҙы*

*һөйләп, көлөшөп ултырабыҙ. Улар Өфөгә төрлө йомош менән килгеләйҙәр, яҡын бит. Әгәр мин ауылға ҡайтһам, улар инде һис тындырмайҙар, төнөн ҡайтып төшһәм, шул төндө үк әллә ҡайҙан ишетеп, килеп етәләр, иртәгеһенә ҡунаҡҡа саҡырып алып китәләр. Мин былтыр ауылға ял итәм тип ҡайтҡайным, ҡунаҡҡа йөрөүҙән бушап булманы…*

*Һеҙ Нәфисә менән татыу ғына йәшәгеҙ. Татыу йәшәү тураһында үткән бер хатымда бер йыр яҙып ебәргәйнем, буғай. Шуны йырла Нәфисәгә.*

*Иң мөһиме: дуҫлығығыҙҙы юғалтмағыҙ, һаҡлағыҙ. Инглиз халҡында һәйбәт мәҡәл бар был турала, алар: «Деньги потерять – ничего не потерять, дружбу потерять – все потерять»,– тиҙәр. Был һүҙҙе инглиз халҡындағы боронғолар әйткәндәр инде, күрәһең.*

*Минең кәйефтәр һәйбәт. Ләкин һине генә һағынам, Нәфисә. Бик һағынам. Осрашасаҡ көндө һағынып-һағынып көтәм. Сөнки ул көн беҙҙең иң шатлыҡлы көн буласаҡ. Мин ул көндөң шатлығын уйлап-уйлап уйым етмәй…*

*Был хатты алған ваҡытта инде ике ай ваҡыт ҡалған булыр. Һин был хатты апрель аҙаҡтарында алырһың, Май байрамы алдынан. 1 Май байрамы айҡанлы һине алдан уҡ ҡотлайым, Нәфисә, һәм һинең уҡыуыңда уңыштар теләйем, шатлыҡ һәм сәләмәтлек теләп ҡалам. Рәйсәне лә 1 Май байрамы менән тәбрикләйем, аңа минән күп сәләм.*

*Нәфисә! Рәсемеңде обязательно ебәр. Мин бик көтәм. Рәсемдәреңә һәр ваҡыт ҡарайым, һағынам, Нәфисә, һөйөклөм.*

*Бер һорау – Лотфый ҡайһы ҡалала уҡый: Ташкенттамы, Сәмәрҡәндтәме? Үҙе әйткәйне, онотҡанмын.*

*Нәфисә, һин беҙҙең Үтәштән Камилды беләһеңме, фамилияһы Ғәлимов. Аның әйтеүенә ҡарағанда, ул һеҙҙең туған-ырыу булырға тейеш. Ул хәҙер ҡайҙалыр бер районда уҡыта, оҙаҡламай Өфөгә килә, кажется, йырларға. Шулай тип ишетеп ҡалғайным, бик оҫта йырлай. Ул бында Өфөлә Башпединституттың физмат факультетын тамамланы. Минең менән педтехникумда бер аҙ уҡығайны.*

*Хәҙер Өфөгә йырсылар, ҡурайсылар, бейеүселәр йыйылалар. Декадаға әҙерлек бара. Бик күп райондарҙан кешеләр килгән, ҡурайсылар, йырсылар бар, тулып йөрөйҙәр. Бик оҫта йырсылар һәм оҫта ҡурайсылар бар, тип һөйләйҙәр, мин тыңлағаным юҡ әле.*

*Хуш, Нәфисәм, хуш, һөйөклөм. Хатымды ошоноң менән тамамлайым һәм һинән хат көтөп ҡалам. Барыһын да яҙ. Мин бик шатланып уҡыйым. Һинең хаттарың миңә дәрт бирә. Һиңә һағынышлы сәләмдәремде ебәрәм… Хуш! Һағынып, Жәлил.*

*Крепко-крепко целую.*

**21 апрель, 1941 йыл, Өфө**

*Ҡәҙерлем һәм һөйөклөм Нәфисә!*

*Һине 1 Май байрамы айҡанлы ысын күңелемдән, ысын йөрәгемдән ҡотлайым, Нәфисә! Һиңә шатлыҡ, бәхет, уҡыуыңда уңыштар теләп ҡалам. Барығыҙға ла ысын күңелдән сәләм!*

*Һиңә 18 апрель бер хат һалғайным, алғанһыңдыр, анда кинәнгән хәбәр юҡ ине, буғай. Шунан бирле минең тормошта әллә ниндәй үҙгәреш булғаны юҡ, һаман шул бер көйө. Һинән хат көтәм, ләкин был хатты яҙырға башламаҫ борон һинең хатыңды (һуңғыһын) тағы бер тапҡыр уҡып сыҡтым. Яҙған хәбәрҙәреңдең барыһына ла яуап биргәйнем һымаҡ үткән хатымда. Ләкин, яҙаһы хәбәре бөтөнләй бөткән, ахырыһы, бының, тип уйлама һин тағы. Яҙаһы һүҙ, һөйләһе хәбәр*

*– даръя, ә һиңә яҙъандары – шул даръянан бер тамсы ъына. Кемдең быъа тиклем мөхәббәтте ҡаъыҙъа яҙып бөтөргәне бар – ул һис мөмкин булмаъан эш.*

*Мин һиңә булъан мөхәббәтемде ҡаъыҙъа яҙып ҡына түгел, һөйләп тә бөтөрә алмам һымаҡ. Мин фәҡәт һине, тик бер һине генә уйлап йәшәгән булам. Ҡайҙа ъына барһам да, иҫемдәһең, Нәфисә. Һин дә мине хәтереңә алаһыңдыр, тип уйлайым һәм шатланам. Һинең мөхәббәтеңдең дә көслө булыуына ышанам, ысын күңелемдән ышанам. Ләкин мөхәббәт тураһында шуны ъына әйткем килә: мөхәббәт ябай булыръа тейеш, она, т.е. любовь – должна быть простой. Шул ваҡытта ъына ул ысын мәъәнәһе менән мөхәббәт була алыр, тип уйлайым мин.*

*Мне не нравится театральная любовь, хотя я ее охотно смотрю на сцене, можно забавляться, посмеяться, особенно в подвыходной. Ҡайсаҡта театрҙа ла мөхәббәтте матур саъылдыралар-саъылдырыуын, бик реально, живо һәм просто. А наша любовь должна быть простой, как мы сами. Мин үҙемде ябай кешеләрҙән һанайым һәм һиңә лә шулай булыръа кәңәш бирәм. Мораль тыҡый таъы, тип хәтерең ҡалмаһын, Нәфисә. Мораль тыҡып ҡына нигеҙләүе бик ҡыйын, кешелә ул йылдар уҙъас тыуа…*

*Өфөлә тамам яҙ булды хәҙер, көндәр аяҙ, йылы, ҡар бик тиҙ ирей. Мин, ъәҙәтемсә, иртә торам, сәъәт 7-лә мин инде аяҡҡа баҫҡан булам. Иртән тороп тышҡа сыҡҡанда, баҡсалаъы аъаста сыйырсыҡтар, яҙъы һандуъастар һайрай. Ул ҡоштарҙың барыһы ла һеҙҙең яҡтан, йылы яҡтан, килгән. Шуларҙың һайраъанын ишетеп, тыңлап, мин һине уйлап торам.*

*Иҙел буйы, ъөмүмән, Уралдың яъы бик матур була, быны һис тәъҫир итерлек тә түгел. Әле был Өфөлә, ҡалала шулай, ә ауылда, Иҙем һәм Мәндем буйҙарында, Маъаш тауы итәгендә был бигерәк тә һоҡланъыстыр инде. Ниндәй генә һандуъастар, ҡоштар булмай унда!..*

*Ҡаран-Йылъала яҙ бигерәк йәмле. Берҙән, ул үҙе бик йәмле, матур ерҙә ултыра, икенсенән, ул беҙҙең тирәлә Урал тауҙарына иң яҡын ауыл. Ул Уралдың ҡуйынында, итәгендә ултыра. Ҡаран-Йылъанан ары киттеңме, осһоҙ-ҡырыйһыҙ тауҙар башлана – Верхнеуральскийъа еткәнсә тау, урман, шунан һуң инде ҡыйъыр Ҡаҙаҡ далаһы китә. Ике арала инде маһайып, күкрәгән киреп, күккә тейерҙәй булып, ҡаялары белән, шыума ташлы, ҡыҙырай сауҡалы, мәңге йәшел ҡараъай, шыршы, бешәле Урал ята. Ана шунда инде һин яратҡан һылыу ҡайын аъасы ла үҫә. Муйыл да сәскә ата. Әйткәндәй, ҡайын, ысынлап та, бик изге аъас. Атайым – специалист по пчеловодству. Ҡайын башына күтәргән умартаъа ҡорт ҡуныусан, тип һөйләй ул. Аның ҡайынъа күтәргән умарталары бик күп, һәм мин үҙем очевидец. Берәй ваҡыт һинең белән Ҡаран-Йылъаъа барыръа тура килһә, ҡайынды һәм ҡайынъа күтәргән умартаны үҙ күҙең белән күрерһең әле. Аның техникаһы бик интересно һәм простой. Ул һиңә бик оҡшаясаҡ. Атайым бәләкәй саъымда һәр ваҡыт умарта күтәрешә алып китә торъайны. Мин инде шунда ат ҡарап, ваҡ-төйәк эштәрҙе эшләп кенә торам, дөрөҫ, аттың күгәүенен ҡарап ҡына. Сөнки ул ваҡытта йәй – бик күгәүен шәп була урманда. (Мин әле әллә ҡайҙа төшөп киттем шикелле.)*

*Яҙ көнө бала саҡта күмәкләп урманъа ҡайын һыуы эсә бара торъайныҡ. Ҡайын һыуы бик тәмле һәм күп була. Беҙ шешәгә тултырып алып ҡайта торъайныҡ. Ләкин ҡайын һыуы саъан һыуынан әҙерәк ҡалыша, саъан һыуы тәмлерәк, шәкәрлерәк була, саҡ ҡына һаръылтыраҡ та була, эсеп туйып булмай. Аны аъасты сабып эсәһең.*

*Йә, бер яңылыҡ: быйыл Өфөлә тәү башлап оҙаҡламай ҡайын һәм саъан һыуынан яһалъан сироп һатыласаҡ, куптән түгел гәзиттә булды. Быъа тиклем, былтыр һәм элекке йылдарҙа, ул юҡ ине әле. Ҡайын һыуын врачтар төрлө*

*ауырыуҙарға дауа тип тә маҡтайҙар. Врач булмағас, мин ул хәтлеһен белмәйем. Былтыр Өфөлә һирәк-мирәк ҡурай еләгенән яһалған сироп һатҡыланылар.*

*Да, между прочим, Ҡаран-Йылғала ҡурай еләге (аны беҙҙә «ағас еләге» тип йөрөтәләр) үҫә, ауылдың эргәһендә тегеләй таш еләге (осло баш), ер еләге (тупар) бик күп була. Былтыр еләк өлгөрөүенә генә ҡайттым. Үҙем дә барып ашай торғайным, ул үҙе бер удовольствие, сүпләп йотоп ашайһың. Анан килеп минең ҡәрендәштәр бик егәрле, аларға әйт кенә: күҙ асып йомғанса бара һалып йыйып килтерәләр. Хатта шул хәтеремдә ҡалған: былтыр ауылда саҡта ямғырлы бер көндө мин һүҙ араһында, еләк ашайһы ине, тип әйтеп һалғайным, тегеләр шунда уҡ һауыт алып ямғырҙа урманға һыҙғандар. Күп тә үтмәне, теге ҡыҙыҡайҙар бил быуарынан һыуланып, һыуға төшкән көшөл шикелле булып, шөшәләнеп ҡайтып килделәр, күп итеп еләк килтергәндәр. Әсәйем өндәшмәй киткәндәре өсөн тегеләрҙе әрләй, мин дә һуҡырандым ямғыр көндө толланып йөрөгәндәре өсөн.*

*Анан башҡа беҙҙә муйыл бик шәп була. Ҡара бөрлөгән һәм ҡарағат һирәк, аның ояһы Үтәштә, һеҙҙә инде, Иҙел буйында. Аның урынына беҙҙә ҡыҙыл бөрлөгән була. Тауҙа монар көпшәһе, балтырған көпшәһе, ҡымыҙлыҡ бик шәп була. Ҡатындар, ҡыҙҙар емеш бешмәҫ элек зыҡ ҡубып көпшәгә, ҡымыҙлыҡҡа йөрөй. Таш йыуаһы үҫә, ә Үтәштә туғай йыуаһы, таш йыуаһы әскелтерәк була. Йыуа һәм көпшәне Өфөгә лә килтергеләйҙәр. Тағы «һарына» тигән бер үҫемлек бар, ул тауҙа, ташта ғына үҫә, аның тамырын (төбөн) ашайҙар (һуған һымаҡ), бик тәмле була. Мин инде аны күптән ашағаным юҡ. Ләкин емештәрҙең араһында иң тәмлеһе «көртмәле» тигән бер емеш, ҡарағат һымаҡ ҡара, ләкин эрерәк. Ул фәҡәт ташта ғына үҫә. Ул беҙҙең тирәлә лә бик һирәк, артабан Иҙел башына табан бик күп була, тип һөйләйҙәр.*

*Нәфисә, мин бик йыраҡ китеп, емештәр менән ҡыҙыҡһынып ташланым, буғай, һиңә скучнолыр әле, ғәфү ит. Барыһы ла шул һин яратҡан «ҡайындан» сыҡты. Емештәрҙе яҙырға төшкәнмен дә киткәнмен. Ләкин емештең ояһы – Урта Азия инде: алмаһы ла, хөрмәһе лә, винограды ла, йөҙөм еләге тигәндәй. Беҙҙә алар юҡ, конечно, Өфөлә алма бар барын, ләкин ваҡ була. Аның урынына беҙҙә ҡыяр күп була: соленые, малосоленые, чуть-чуть соленые, посоленые, полусоленые, пересоленые, совсем не соленые, свежие – каких только хотите. Ул, нисектер, йәйен дә, ҡышын да бөтмәй, между прочим. Анан инде кәбеҫтә күп. Өфө баҙарына грузовик машинаһы белән килтереп, баҙарҙың уртаһына ауҙарып, кәбән ҙурлыҡ итеп өйөп ҡуялар ҙа һаталар шунда. Йә, көнбағыш күп була, аны инде ҡайһы берҙәре баҙарҙа яралар, ике кеҫәгә лыҡа тултырып урамда ашап йөрөйҙәр. Аныһы инде килешмәй, конечно, неприлично.*

*Был хатты уҡый-уҡый ялҡа башларһың әле. Әллә нимәләр яҙып бөттөм. Һис кәрәкмәгән нәмәләр белән тултырҙым хатымды. Һәм хат шуға күрә бик оҙон булды. Бик матур (умный) ғына хат яҙайым тип ултырғайным. Килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Нисек сыҡҡан, шул көйө ебәрәм инде, ләкин хәтерең ҡалмаһын, Нәфисә. Оҙаҡламай һинән хат килергә тейеш, тағы ла яҙырмын. Хәҙергә хуш, Нәфисә.*

*Һиңә иң һағынышлы, иң ҡәҙерле сәләмемде әйтеп ҡалам. Уҡыуыңда уңыштар теләйем, иҫәнлек-һаулыҡ теләйем. Рәйсә һылыуға сәләм. Нәфисәгә сәләм әйткән тип бел. Ул мине белмәйме әле? Ярай, хуш, һөйөклөм, күрешкәнгә тиклем.*

*Һағынып, Жәлил.*

*Крепко целую Тебя, дорогая Нәфисә. До свидания.*

(Атайыбыҙ үҙенең йәнтөйәген - Ҡаранйылға ауылын, ғәзиз атаһын, ҡәҙерле туғандарын һәм яҡташтарын бик яратты. Ул йыл да отпускыһында шунда барып йөрөнө, хатта бындай сәфәрҙәре өсөн махсус автомобиль - „Победа“ һатып алды. Беҙҙең бер

ваҡытта ла дачабыҙ булманы, әммә ғүмеренең һуңғы йылдарында атайым, пенсияға сыҡҡас, ауылымда өй һатып алам да шунда оҙон-оҙаҡ йәшәйем һәм "Туғандар һәм таныштар" романының дауамын яҙасаҡмын, тип хыялланды).

**27 апрель, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм һәм ҡәҙерлем Нәфисә!*

*Һинең һуңғы хатыңды алғас (18/IV алғайным) бер нисә хат һалғайным, алғанһыңдыр. Был арала хатты бик йыш яҙа башланым. Һин уҡырға ла өлгөрә алмайһыңдыр әле. Йыш яҙғанға асыуланма, йәме. Шулайһы, һин үҙең бик һирәк яҙаһың – 10 көнгә бер генә. Әйткәндәй, һинең ваҡытың бик әҙҙер инде хәҙер, экзамендарға әҙерләнәһеңдер. Мин, етмәһә, хат яҙ тип быуартам, хат һайын рәсемеңде һорайым. Рәсемгә төшөү өсөн һинең бер көнөң китә, 7 километр алыҫлыҡтағы урынға барып төшөргә кәрәк. Мин уны иҫләмәй һинән хат һайын рәсем һорайым. Ғәфү ит, Нәфисә. Һинең ваҡытыңды алған өсөн.*

*Үҙең нисек йәшәйһең, кәйефтәрең нисек, башҡа хәлдәрең нисек – барыһын да яҙ, Нәфисә. Мин һинән һәр ваҡыт хат көтәм. Быйыл, нишләптер, һинән хат килмәй, хәҙер инде теүәл ун көн.*

*Минең хәлдәр арыу ғына, һаман шул көйө йөрөп ятҡан көн. Өфөлә хәҙер тулы мәғәнәһе менән яҙ килде. Ала ҡар ята, ҡар бик ҡыҙыу ирей. Ҡалала урам араһында бөтә ерҙә ҡоро. Көндәр бик йылы һәм матур, аяҙ.*

*Иҙел бик шәп ташҡан, боҙ китә. Иҙел аръяғы туғайҙарҙы һыу алған, күҙ күреме ерҙән даръя булып ята. До чего величественна река – Агидель! Ташҡан сағында бигерәк матур ул, һоҡландырғыс. Ә йәй инде анда үҙенә айырым башҡа бер тәьҫир итә алмаҫлыҡ матурлыҡ! Ул йыуаш ҡына булып ҙур тирәктәр, тал туғайҙары араһынан шым ғына ағып ята. Аның уртаһынан ярып аҡҡош һымаҡ бәләкәй генә пароходтар йөҙә. Кистәрендә инде ул һис тауышһыҙ сырылып ҡына ята.*

*Беҙ үткән ял көнө бер иптәш менән барып ҡараныҡ. Ул иптәш райондан килгән, минең элекке таныш, хәҙер Башҡорт Опера театрына йырсы булып ингән, уны саҡыртып алғандар. Ул минең адресты һорашып белеп, миңә килгән. Аның белән шул уҡ көндө райондарҙан килгән ҡурайсылар ятағына барҙыҡ. Улар Мәскәүҙә буласаҡ башҡорт сәнғәте декадаһына әҙерләнә. Ҡурайсылар ансамбле төҙөлгән, шунда эшләйҙәр. Ял көнө ҡурай уйнатып ултырҙыҡ, ятаҡханала. Улар простой, шул тиклем добрый халыҡ үҙҙәре, һис инәлтеп тормайҙар, уйна тиһәң, тота ла теләгән көйөңдө уйнайҙар. Ҡайһылары ябай колхозсы, ҡайһылары уҡытыусы, тағы әллә кем. Араларында бик һәйбәт уйнағандары бар. Бер ағай «Урал» көйөн уйнаны, минең мыңарса аның һымаҡ ҡурайсыны һис күргәнем юҡ ине әле. Бик оҫта уйнай, һис инәлтеп-нитеп тормай, үҙе бик простой. Ғөмүмән, простой кешене бик яратам мин үҙем, әллә үҙем шулай простой булғанға инде. Алар, әлбиттә, туп-тура «һин» тип һөйләшәләр.*

*Ситтә йөрөп ҡурайҙы, ҡурай уйнағанды күргәнең дә юҡтыр әле, ул исключительный бер инструмент. Мин уҡыған заманда бер таныш ҡурайсы бар ине, Мәскәүҙә һәр ваҡыт радионан уйнай торғайны. Шулайтып мин Мәскәүҙә уҡыған саҡта ла һәр ваҡыт ҡурай тыңлап ята торғайным. Между прочим, ҙур композиторҙар Мәскәүҙә ҡурайҙы бик ярата лар һәм интересоваться итәләр. Неуловимый ноталар бар бында, тип әйтәләр, ти. Ҡыҫҡаһы, ҡайтҡас тыңларһың әле, әгәр яратһаң.*

*Хәҙер Май байрамына әҙерләнеп ятҡан булабыҙ. 29 апрель беҙҙең институтта кисә була: иностранный телдәрҙә постановка, йырҙар, декломациялар,*

*таъы әллә нәмәләр әҙерләйҙәр. Мин дә шулар араһында буталып йөрөгән булам, шунда үҙемсә (по должности)…*

*Институтҡа студенттар алыу тураһында иълан иттек, беҙгә кереү өсөн экзамен: береһе сит ил теленән, икенсеһе урыҫ теле һәм әҙәбиәтенән, өсөнсөһө СССР тарихы һәм конституцияһынан – бөтәһе өс экзамен.*

*Башҡа хәбәрҙәремде киләһе хатта яҙырмын. Ошо ике-өс көн эсендә һинән хат килер, тип көтәм. Алъас уҡ яҙырмын.*

*Хәҙергә ошоноң белән тамамлайым…*

*Хуш, Нәфисә, һөйөклөм. Күрешкәнгә тиклем хуш. Рәйсә һылыуъа сәләм. Нәфисә мине белһә, аңа ла сәләм.*

*Түҙемһеҙлек белән хат көтәм, Нәфисә, һәм шул хатың белән рәсемеңде көтәм.*

*Крепко целую. Һаъынып, Жәлил.*

**28 апрель, 1941 йыл, Карши**

*Ҡәҙерлем һәм һөйөклөм Жәлил!*

*18/ IV яҙъан хатыңды алдым, рәхмәт, Жәлил.*

*…Мин тә ишеткәнем бар әҙерәк беҙ торъан Каршиҙың тарихын. Беҙ килгәндә (1933 йыл) ул Бехбуди тип атала ине. Бехбуди – бер шаъир или революционер булъан шунда, вот по его имени и назвали. А потом обратно зачем-то в 1937 году переименовали в Карши. Обитатели его не слишком любопытны, историей своего города не интересуются. Я сама лично тоже не нахожу нужным ломать об этом голову. Вообще Карши раньше славился не поэтами и т.д., а басмачами. Здесь было гнездо басмачества, Басмачи – разбойники, что ли, в переводе на русский язык. Это слово точно не переводимо, так как басмачей в других странах, кроме Таджикистана и Узбекистана, кажется не было. «Басмач» – узбекское слово. О них, наверное, Ты слышал, читал и видел в кино. Окончательно басмаческие банды были уничтожены только в 1934 году. В 1933 году хитростью был пойман главарь басмачей – Рузак. Очевидцы допроса этого Рузака рассказывали, что он был достаточно культурный человек. По национальности узбек, он знал русский язык не хуже любого русского. Знал также турецкий язык (в молодости учился в Турции), знал 2-3 иностранных языка. Точно не знаю, расстреляли его или нет. Но, если не ошибаюсь, то он бежал, кажется. Его друзья сделали набег на Карши. Вступили в драку с эскадроном красноармейцев и напали на тюрьму. Это случилось ночью. Мы жили тогда рядом с тюрьмой, поэтому я хорошо слышала перестрелку и шум. Басмачи преспокойно убежали, за ними посылали вдогонку отряд, но никого не нашли, басмачи переправились в Афганистан.*

*Теперь уже все спокойно. Население уже начинает забывать басмачей, но некоторые обитатели все еще помнят их и дрожат при одном их имени, потому что басмачи являлись бедствием для населения: грабили, убивали и т.д.*

*Карши – маленький городок. Беҙ тәүге килгәнебеҙҙә бик йәмһеҙ ине, хәҙер ҙә бик матур түгел, ләкин әкренләп благоустраиваться итеп килә.*

*До приезда в Карши мы жили недалеко от Ташкента в Чирчике. Беҙ торъанда ул бәләкәй генә район ине, ә хәҙер бик ҙурайъан, тип ишетәм. Анта хәҙер Чирчикстрой ҡоролошо бара (гәзиттә уҡып һәм кешенән ишетеп кенә беләм быларҙы).*

*Узбекистандың күрмәгән ерен ҡалдырманым, тиһәң дә ярай. Хива, Хорезм тигән еренә барҙыҡ. Ул мынан бик йыраҡ. Анта поезд бармай, машина, самолет, пароход (по Аму-Дарье) бара. Беҙ Хорезмдан Хива шәһәренә барҙыҡ. Баръанда пароход белән 10 км барҙыҡ, а ҡайтҡанда автомашина белән Ҡара-Ҡом сәхрәһенән туранан 2 көндә ҡайттыҡ. Путешествие было очень интересное. Переход через пустыню на машине – большой риск. Двое суток нужно ехать*

*без остановок и без воды, потому что воды в пустыне нет. На тысячи километров кругом тянутся пески. Живых существ, кроме змей, ящериц и фаланг, в пустыне я не встретила. Ящерицы очень больших размеров, не такие, как у нас, приблизительно с маленького крокодильчика. Змеи тоже очень больших размеров. Это путешествие было очень интересное и страшное к тому же… О нем я когда-нибудь расскажу Тебе. Видела Хиву. Красивый восточный городок. Много башен, мечетей и красивых дворцов. Хива красивее, чем Бухара.*

*Я опять удалилась от темы и ударилась в описание Средней Азии.*

*Лотфый ағай Ташкентта уҡый. Ул, июнь-июлдәрҙә уҡыуларҙы бөтөрәбеҙ, тип яҙа. Билгеле, ул сентябрҙеҙ «великий учитель» булып эшләй алмаҫ әле, ләкин ҡайҙа булһа ла эшләп торор инде, уҡыуҙар башланғансы. Аны Бохара областына ебәрәләр икән, ләкин Каршиға килер әле.*

*Беҙҙең уҡыулар июнь айының 20-ләрендә тамамлана. Ярар, мин июнь аҙаҡтарында ҡуҙғалырмын, если ничего до этого времени не случится. «Алдағыһы Алла ҡулында» тигән кеүек, әллә нәмәләр булып ҡалырға мөмкин ике ай эсендә.*

*Әгәр 27-28 июндәрендә юлға сыҡһам, Өфөгә июлдең 5-6-ларында барып етәм. Таким образом, беҙҙең осрашыуға, был хат барып еткәс, 2 айҙан та әҙерәк ваҡыт ҡала…*

*«Бай һәм хеҙмәтсе»не күргәнһең икән. Дело хорошее. Үзбәкләрҙең тормошо белән әҙерәк таныштың инде Һин хәҙер. «Оҡшаны» тигәнһең. Хәмзә Хәким Зада ничего, һәйбәт кенә яҙыусы ул. Үзбәк яҙыусыларынан иң арыуы шул инде.*

*Мин әллә ҡасандан бирле театрға барғаным юҡ. Быйыл, февраль айында булһа кәрәк, фәҡәт «Фәрхәд вә Ширин» тигән Алишер Навоиҙың әҫәрен күрҙем. Үзбәк телендә, әлбиттә. Миңә оҡшаны. Артистары арыу уйнайҙар, декорациялары ла етәрлек.*

*Между прочим, мин тә «Салават Юлаев» кинофильмын барып күрҙем. Бер үҙем кенә барҙым, мәктәптән ҡайтышлай ғына керҙем. Кеше бик күп ине. Картина мне понравилась. Я с удовольствием смотрела на прошлое своего народа. Ләкин, признаться, я ждала большего. Злобиндың «Салават Юлаев» романын уҡығайным. Бик әйбәт яҙған ул. До чего интересно читать. А в кино Салават тураһында, минеңсә, әҙерәк күрһәттеләр, бөтөнөһөн дә ныҡ урыҫлаштырғандар. Нет национальных песен, танцев, даже быт башкирского народа, хотя бы немного, не показали. Такое мое мнение. Может быть, я не права? Салауат роле яҡшы уйналды, тип иҫәпләйем (артистың фамияһын онотҡанмын). В общем, ничего.*

*Да, Нәфисәнең килеүе минең өсөн һәйбәт булты. Аның белән, бесусловно, веселее. Она веселая девушка.*

*Беҙ татыу ғына торабыҙ. Кисен йәш ваҡыттарҙы иҫкә төшөрөп алған булабыҙ. Ул миңә ауылдағы мин киткәс булған үҙгәрешләрҙе һөйләй, ә мин уңа үҙемтең күргәннәрҙе, уҡығаннарҙы һөйләйем. Ял көннәрҙе патефон тыңлап (күберәк «Урал» көйөн) ултырабыҙ ҙа тыуған илде һағынып иҫкә алған булабыҙ.*

*Нәфисәгә мин бер нәмәне лә һөйләгәнем юҡ әле, Жәлил. Мин Нәфисәгә Һин яҙған йырҙы йырлағаным юҡ. Сәбәбе: мин бит йырлай белмәйем, Жәлил. Кеше йырлағанын тыңларға яратам, яҡшы йырлаһалар...*

*Камил Өфөгә йырларға килгән икән. Аның йырлағанын мин ишеткәнем юҡ ине әле. Интересно послушать, он мне приходится троюродным братом, так же, как и Рауф Сабиров. Троюродных братьев и сестер у меня много, многих из них я совсем еще не видела и не знаю.*

*Нәфисәгә ауылдан хат килеп торған була. Икебеҙҙе лә йәй ҡайтырға ҡушалар, ләкин Нәфисә ҡайтмаҫ әле…*

*Ошоноң белән хатымды тамамлайым.*

*Хуш, Жәлилем, һау бул күрешкәнгә тиклем. Мине 1 Май белән тәбрикләүең өсөн рәхмәт. Мин дә Һине 1 Май белән тәбрик итәм.*

*Һине һағынам, Жәлил, бик һағынам. Гел Һине генә уйлап йөрөйөм, даже төшөмтә лә күрәм Һине.*

*Жәлил, мин ни өсөндөр ҡурҡам.., минем күңелем һине күрәсәгемә һис ышанмай... Жәлил, неужели случится что-нибудь, что помешает нам встретиться? Әгәр мин Һине быйыл июль айында күрә алмаһам, не знаю, что со мной будет. Цель моей жизни – видеть Тебя, дорогой. Я слишком люблю Тебя. Был һүҙҙәрҙе яҙғанда илағыларым килә. Һин көлмә только. Ике ай! Бер уйлаһаң, бик оҙаҡ бит ул. Һағынам Һине!!!*

*Хәҙер сәғәт төнгө 3. Барыһы ла йоҡлай. Я сижу около окна и пишу. Ветер тушит лампу. Ночь темная, вдали слышится вой шакалов. От этих звуков жутко становится. А Ты находишься так далеко. Почему мы не вместе? Я хочу видеть Тебя!*

*Заканчиваю свое письмо. Тебе не надоело читать? Я очень много написала.*

*Хуш, һөйөклөм, һау бул. Һине һағынып, Һинең Нәфисәң.*

*Йоҡо килмәй. Һине уйлап ултырам.*

**1 май, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм һәм ҡәҙерлем Нәфисә!*

*19/IV һалған хатыңды алдым. Был хатыңды бик һағынып көтөп алдым, Нәфисә. Минең өсөн дә бик-бик оҙаҡ тойолдо. Һин 8 көн тип яҙаһың, ә мин һинән 12 көн хат алмай торҙом… Апрель башынан алып мин һиңә 5 - 6 хат һалдым. Һин ул хаттарҙың барыһын да алғанһыңдыр инде, иң һуңғыһын 27/ IV яҙҙым. Ышанам, һин ул хаттарҙың барыһына ла ҡаршы яуап яҙғанһыңдыр.*

*Бөгөн 1 Май. Көн шул тиклем матур. Кисә көнө буйы, кис һәм төнө буйы ҡойоп ямғыр яуҙы. Кешеләр, 1 Май көнө лә шулай булмаһа ярар ине, тип ҡурҡыбыраҡ йөрөй ине – бөтәһе лә аяҙ көн теләй. Теләк ҡабул булды, ахырыһы. Көн матур булғас, халыҡ та, кәйеф тә матур, барыһы ла шат күңелле. Бала-саға ла урамда зыҡ ҡубып уйнаша, көлөшә.*

*Май демонстрацияһы бик шәп булды. Колонналарҙың миңә иң оҡшағаны: Башҡорт опера һәм академия театрҙарының колоннаһы булды. Демонстрацияға барлыҡ артистар ҙа милли кейемдә сыҡҡан. Ҡатындар тәңкә белән уратылған, уҡалы елән, ҡалфаҡ, һаҡал кейгәндәр. Ә ирҙәр ҡыҫҡа бишмәт кейеп, билдәрен йәшел билғау белән быуып ебәргәндәр. Бер нисә ҡурайсы алдан ҡурай тарта, башҡалары арттан бейеп бара. Ситтән ҡарап тороусылар, трибуналағылар ҡул саба. Башҡа колонналар, ғәҙәттәгесә, һәр кем үҙ һөнәрен күрһәтеп оформить иткән, матур биҙәгәндәр. Ә теге артистар бигерәк искусно эшләгәндәр.*

*Сәғәт көндөҙгө 1-ҙә демонстрация тамамланды. Мин бер үҙем генә тағы ла Ағиҙелде ҡарай киттем. Иҙел тағы ла ныҡ ташҡан. Цыганская поляналағы өйҙәр барыһы ла һыу аҫтында ҡалған, ҡайһы берҙәренең ҡыйыҡтары, ағастарҙың осо ғына күренеп ҡала. Иҙел күҙ күреме етмәҫ ергә йәйелгән. Тағы күтәрелер, тиҙәр халыҡтар, сөнки тауҙа, урманда ҡар ята әле. Боҙ һаман китеү өҫтөндә. Боҙ ваҡ йылғаларҙан ҡуҙғалған хәҙер. Еҙем, Инйәр, Ләмәҙ һ.б. йылғаларҙың боҙо ташҡан. Беҙҙең Мәндем дә бик шәп ташҡан, тип яҙа атайым, анан хат алғайным кисә. Бик һәйбәт йәшәйбеҙ, тип яҙа.*

*Иҙел ҡарап ҡайтҡас, һиңә хат яҙырға ултырҙым. Шул матур көндө, шатлыҡлы көндө тик һиңә, фәҡәт һиңә хат яҙыу өсөн арнаным.*

*Кемгә ҡәҙерле түгел май айы, кемдәр көтмәй уны 11 ай буйы һағынып. Май – Башҡортостанда иң йәмле ваҡыттарҙан һанала, май айы белән йәй башлана. Май айында бөтөн үҫемлектәр сәскә аталар. Бына шул сәскәләр белән урар инем мин һине, Нәфисә. Май айының сәскәләре белән биҙәр инем мин һине. Ярай, сабырлыҡ, сабырлыҡ кәрәк икебеҙгә лә. Хәҙер ней бары 2 ай ваҡыт ҡалды. Һәм беҙ осрашырбыҙ. И Ты будешь глубоко дышать воздухом своей земли. Дышать ее воздухом – это великое счастье.*

*Хатты оҫта яҙыу тураһында мин һиңә комплимент итеп түгел, ысынын, бар әйберҙе генә яҙҙым, Нәфисә, мин ҡайсаҡта уйлап ҡуям: һин бит бында башланғыс мәктәпте генә бөтөрөп киткәнһең, хәҙер 10 йыл ҡырҙа йәшәйһең. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, онотмағанһың һәм бик простой итеп яҙаһың, ә простой, аңлайышлы булыу – матур булыу тигән һүҙ. Ә инде хаттарға килгәндә, ул ҙур роль уйнамайҙыр (мин грамматик хата һәм опискаларҙы әйтмәйем).*

*Өфөнөң дә үҙенә күрә матурлығы бар, һәм ул, ысынлап та, Бохаранан матур булырға тейеш. Мин хәҙерге көндө Л.Соловьевтың «Хужа Насретдин Бохарала» тигән романын уҡып ятам. Бохараны һәйбәт тасуир иткән, тулы бер картина күҙ алдына килеп баҫа. Забавный бер роман, бәлки, уҡығанһыңдыр. Ул ваҡыттағы Бохара бигерәк тә ҡыҙыҡ булған икән. Ул инде Хужа Насретдин Бохараһы. Әлбиттә, хәҙер Бохара үҙгәргән булырға тейеш.*

*Ләкин шуны әйтеп ҡуям: Мәскәү Өфөнән дә яҡшыраҡ, быны барғас күрерһең әле (шаяртып әйтәм, әлбиттә, Мәскәү булғас матур булырға тейеш). Тик Өфөлә яҙлы-көҙлө әҙерәк бысраҡ була…*

*5 майҙа минең иң аҙаҡҡы дәрес, анан 2 - 3 консультация биреп, экзамен үткәрәм дә тыныслайым. Анан инде ағымдағы эштәр генә ҡала. Июндән экзамендар башлана, госэкзамендар. Ә июлдә бөтөн эште тамамларға тип торабыҙ. Һәм шунан һуң йәй йөрөмгә (отпускыға) китәм. Директор белән һөйләшкәйнем ул, былай ҡаршы килмәй.*

*«Мөхәббәт тураһында фәлсәфә йөрөтөргә оялам хәҙер» тиһең һин. Минеңсә, аның бер ниндәй ҙә ояты юҡ. Һин юҡҡа борсолма, аҙарынма, Нәфисә. Фәлсәфә һалырға мин дә яратмайым. Аңа способность юҡ минең. Үҙеңдә юҡ аҡылды кешегә өләшеп булмаҫ. Бар, бына, донъяла шундай кешеләр, бик дөрөҫ: алар үҙҙәренә етмәгән аҡылдарын кешегә өләшеп бөтәләр, әрәм итеп. Шунан үҙҙәрендә бер нәмә ҡалмай…*

*Хәҙер 2 ай ҡалды. Лотфыйҙың уҡып бөтөрөп ҡайтҡанын көтәһеңме, юҡмы? Ул уҡып бөтә тиһең бит быйыл. Уҡып бөткәс, ул 1июлһеҙ ҡайта алмаҫ. Әгәр аның килеүен көтһәң, оҙаҡ булмаҫмы? Ул һиңә хат яҙалыр, ҡасан ҡайтырға рассчитывать итә? Атайың мәсьәләһе һаман шул көйөмө әле?*

*Рәйсәне ҡалдырам, тигәнһең. Минеңсә, ҡалдырмаҫҡа кәрәк, һағынырһың, ул да һағыныр. Һин бындай мәсьәләрҙә яҙған өсөн асыуланма, минеңсә, ул беҙҙең осрашыуға практически бәйләнгән. Ул ваҡ мәсьәләләр, ләкин ваҡ эштәр ҙур эшкә бәйләнгән.*

*Мин хатымды ошоноң белән тамамлайым. Беҙҙең мөнәсәбәтте Нәфисә белһә, аңа минән күп итеп сәләм әйт. Мин бик шатмын, сөнки һиңә хәҙәр аның белән күңелле, көңгөр-каңғыр булырлыҡ кеше бар.*

*Ярай, хуш, Нәфисә, һөйөклөм һәм ҡәҙерлем. Тиҙҙән осрашырға яҙһын инде иҫән-һау ғына. Һинән оҙаҡламай хат килергә тейеш, бик һағынып көтәм.*

*Йөрәгемдең иң тәрән төпкөлөнән сыҡҡан һағынышлы сәләмдәремде ебәреп ҡалам һиңә.*

*Һағынып, Жәлил. Хуш, крепко целую Тебя.*

**1 май, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклөм!*

*Һуңғы (21 апрель көнө яҙған) хатыңды 29 уҡ алған булһам да, бөгөнгө көнгә тиклем яуап яҙа алманым. Сәбәбе: әҙерәк ауырып алдым. Мәктәпкә лә 2-3 көн барманым. Хатыңа тиҙ генә яуап яҙмағаным өсөн ғәфү ит инте, Жәлил. Мин Һинең хатыңды алғас та яуап яҙайым тип ултырһам да, һис яҙып булманы, температура юғары ине, әллә нәмәләр бутап бөтөрәм тағы, тип уйланым.*

*Шулайтып 1 Май байрамы ла килеп етте. Мин мәктәп кисәһенә лә барманым, иптәштәрем саҡырғайнылар, уларға ла барманым, Нәфисә белән өйҙә ултырҙыҡ. Күңелһеҙерәк булты, әлбиттә.*

*Бөгөн иртүк кенә торҙоҡ. Өйҙәрҙе йыйыштырғылап, сәй эсеп урамға сыҡтыҡ. Урам тулы халыҡ. Беҙ барғанта майҙанда демонстрация башланмаған ине әле, ләкин беҙ көтөп торманыҡ, киттек. Ҡайтышлай үҙем белән уҡыған ҡыҙҙы осраттыҡ. Өсәүләп әҙерәк урамда йөрөнөк, минең баш әйләнә башлағас, ҡайтып киттек. Тышта бик эҫе, ә өйҙә һалҡын ғына, так что беҙ с удовольствием отдохнули.*

*Ул арала парад башланты. Радио аша тәбрикләү сәләмдең һүҙен тапшыралар. Урам шау-шыу килеп торған була. Шул ваҡытта мин Өфөнө иҫкә төшөрҙөм. Анда нисек байрам иткәнегеҙҙе күрәһем килде. Кис белән тә һине уйлап яттым. Кисен һин институтта булғанһыңдыр инте.*

*Әле мына патефон уйнатып ултырҙыҡ. Тағы ике ҡыҙ килте, мине саҡырырға килгән булғандар, ләкин барғым килмәне, баш та ауырыңҡырап тора.*

*Нәфисәне ҡыҙҙар белән урамға сығарып ебәрҙем. Өйҙә мин бер үҙем кенә. Рәйсә детсадта, Әхмәт малайҙар белән һыу инергә киткәйне. Мин бер үҙем ултырҙым-ултырҙым та патефондан тағы бер тапҡыр «Урал»ты уйнаттым. Бик яҡшы йырлай. Мин аның хәтле шәп йырлаған кешене ишеткәнем юҡ. «Урал»ты тыңлап күңелһеҙләнеп алтым. Һуңғы хаттарыңды уҡып сыҡтым тағы бер мәртәбә, анан өйҙә кеше юҡ саҡта, аулаҡта Һиңә хат яҙып ҡалайым, тип ултырҙым.*

*Һуңғы хатың минең алда ята. Һин аны бик һәйбәт, бик интересно яҙғанһың, Жәлил, рәхмәт. Мин Һинең хатыңа ҡарап последовательно яҙмаҡсы бултым яуапты.*

*«Любовь должна быть проста» тигәнһең. Это верно. Я с Тобой совершенно согласна. Театральная любовь смешна, я ее тоже не люблю, но смотреть ее на сцене, безусловно, забавно. «Наша любовь должна быть проста, как мы сами» тиһең. Я еще раз согласна и очень рада, что Ты тоже так определяешь нашу любовь. Ты мне советуешь быть такой же простой как и Ты. Совет Твой я принимаю безоговорочно и благодарю Тебя. Но у меня возникает маленькое сомнение. Жәлил! Һин мине «был простой түгел, эреләнгән була» тип уйлайһыңмы әллә? Может быть, в письмах у меня проскальзывает что-нибудь похожее на это? Если так, то я извиняюсь и очень сожалею. На самом деле, Жәлил, мин үҙемте һис сложный кешеләрҙән һанамайым, шулай уҡ мине белгән кешеләр ҙә «эреләнә был» тип әйтмәйҙәр ине шикелле. Эреләнергә, простой булмаҫҡа я не имею никакого основания. Эреләнергә миңә нечем и не для чего. Я сама тоже ненавижу тех людей, которые кичатся, задаются, задирают к небу носы и т.д. и т.п. Ты прав, Жәлил, на свете очень много таких ничтожных людей и я их ненавижу. И я не хотела бы быть похожей на них.*

*«Мораль уҡығанға хәтерең ҡалмаһын» тиһең. Что һин! Я, наоборот, очень рада и благодарна Тебе. Ты прав, что привить мораль всякому трудно, что она у человека формируется только с годами.*

*И так, мы оба должны быть просты и любовь наша должна быть простой, как мы сами.*

*Хәҙер Өфөлә тамам яҙ булғантыр инте. Көннәр матурланғантыр. Бик күңелле инте Һеҙҙә. Мынта күңелһеҙ генә тип торорға ла нечего. Больше, чем күңелһеҙ. Берҙән, эҫе, саң, үҫемлектәр кибеп бөттө. Икенсенән, Һине һағынам. Второе на настроение действует больше, чем первое.*

*Мин был хаттан элек бер бик оҙон хат яҙып һалғайным, аны алғанһыңдыр. Ул хатты яҙғанта мин Һине уйлап ултырҙым, башҡа әллә ниндәй уйҙар килеп төштө. Шулайтып, нәмә уйлағаннарымны яҙҙым та ҡуйҙым. Кажется, я там много лишнего написала…*

*Дальше Ты написал про природу нашей Башкирии. Мне очень интересно было об этом читать. Беҙҙең илдә әле мин һис белмәгән, ишетмәгән емештәр үҫә икән. Нимәләр үҫкәнен мин онотоп бөткәнем икән. Минең иҫемтәгеләр: еләк (ер еләге һәм ҡурай еләге), ҡарағат, бөрлөгән, муйыл, балан… и все. Башҡаһын онотҡанмын.*

*Анан окресности Вашей деревни богаче природой чем наш Үтәш. Үтәш бик йәмһеҙләнгән хәҙер. Элек миңә донъяла Үтәштән матурыраҡ ауыл юҡ кеүек күренә ине. На самом деле Үтәш йәмһеҙ генә икән: на голом месте, урман аҙ, һыулары тоже юҡ тирлек (Ағиҙел йыраҡ).*

*Нәфисә һеҙҙең яҡты маҡтай. Аның төшкән ауылы – Мураз. «Бик матур ти, Мәнтем буйлары». «Ҡайтһам, Үтәштә торасаҡ түгелмен» тип ҡуя. Миңә лә Мәнтем ауылын алып барып күрһәтмәксе. «Ял итерһең беҙҙә» тигән була. «Шулайтырбыҙ» тип ҡуйған булам мин тә. Я была бы очень и очень рада, если бы мы с Тобой когда-нибудь побыли Ҡаран-Йылғала.*

*Ҡайынды һәм ҡайынға күтәргән умарталарҙы икәүләп ҡарар инек. Атайың беҙҙе урманға алып барһа, беҙ ваҡ-төйәк эштәрҙе эшләп торған булыр инек, например, аттың күгәүенен ҡыуып (шучу).*

*Мин бәләкәй саҡта беҙең тә умарталыҡ бар ине. Мине лә ҡартатайым алып бара торғайны, ләкин миңә аттың күгәүенен ҡыуып торорға тура килмәне, сөнки беҙҙең умарталыҡ бик яҡын ине, анта беҙ йәйәү бара инек. Между прочим, мынта күгәүен совсем юҡ, ләкин себен күп, йәйен тә, ҡышын та.*

*Беҙҙә бар әйберләрҙең күбеһе юҡ. Һин яҙған емештәрҙең береһе лә юҡ мынта, за исключением бөрлөгәннән. Бөрлөгән әҙерәк була. Үзбәктәр аны «мәймунҡан» тиҙәр, уны ашамаған булалар. Мин үҙем бик яратам бөрлөгәнне.*

*Билгеле, емештәрҙең ояһы Урта Азия, ләкин ничего особенного здесь нет. Мынтағы емештәр анта юҡ, антағы мынта юҡ. Алма, виноград, груша, вишни, слива, урюк и т.д. – күп мынта. Беҙ торған ер особенно фруктовый район булып һанала. Из овощей много дынь, арбузов. Они достигают очень больших размеров. Есть еще огурцы и помидоры, ләкин в отношении последних Средняя Азия отстает от Башкирии. Огурцов здесь мало, свежие огурцы бывают только до июня, потом их совсем не бывает, а соленых, малосоленых, пересоленных и т.д. здесь почти не бывает, так как огурцы мы поедаем в свежем виде. Помидоров тоже маловато. Я сама очень люблю виноград, дыни, огурцы и помидоры.*

*Да, мынта тағы кәбеҫтә белән бәрәнге (картошка) совсем юҡ. Очень редко бывает на базаре картофель, он привозной, поэтому цена его очень высокая. Көнбағыш тоже юҡ тиерлек. Употребляют их здесь в виде роскоши. Шул ике кеҫәләрен лыҡа тултырып урамда ашап йөрөйҙәр, әгәр һатылһа. Мин үҙем дә непрочь погрызть семечки, но только не на улице, а в комнате, в компании своих близких.*

*Остальные фрукты не переводятся и зимой, конечно, только в сушеном виде.*

*Анан здесь плоховато в отношении молока. Һыйырҙар әҙ,ябыҡ ҡына, һөйәктәре күренеп йөрөй, ашатырға бесән булмағас. Һөттәре насар, тәмһеҙ, бысраҡ. Масло здесь добывают самым первобытным способом, потому что нет*

*сепаратора. Население в большинстве случаев употребляет хлопковое масло.*

*Хәҙер игеннәр ҙә бешә башланы. Майҙың урталарында арпа урырға төшәләр. Иң һуң өлгөргәне мынта – мамыҡ. Ул октябрь айларында йыйыла, шул ваҡытта бөтөн кеше мамыҡ йыйыуға мобилизоваться итә. Мамыҡты йыйыу бик ҡыйын эш түгел, ләкин көнө буйы эҫелә яланда йөрөһәң, ҡап-ҡара (негр һымаҡ) булаһың да ҡайтаһың.*

*Врачи говорят, что загар – вещь хорошая, что это полезно. Россияне специально едут на юг загарать. А здесь загараешь, хочешь ты или не хочешь. На меня солнечные лучи действуют отрицательно. Кроме того, что я уже стала на себя непохожей, под влиянием солнца у меня развивается малярия. Бороться с ней трудно. Да я и сама очень не люблю лечиться. И сейчас вот меня начинает знобить. Письмо дописываю как попало.*

*Һеҙ быйыл ҡайын һыуы эсмәксе икәнһегеҙ. Бик әйбәт эш. Я бы тоже выпила, но в этом году не успею, вероятно.*

*Беҙ мынта йәйен тә, ҡышын та лимонад эсәбеҙ. Ул һис бөтмәй. Тоже бывает различных сортов: яблочный, вишневый, грушевый и т.д. Есть еще крем-сода. Я лично предпочитаю крем-соду и мороженое.*

*Мин әллә нәмәләр яҙып бөттөм булһа кәрәк. Һинең һүҙҙәреңә яуап яҙам тип шулай бик эскә кереп киттем. Килешмәгән ерҙәр булһа, ғәфү ит, Жәлил.*

*Хатымды шуның белән тамамлайым. Больше не могу писать. Сейчас приму хинин и лягу. Не знаю, до каких пор будет меня мучить эта малярия. Ею я вот уже два года как не болела, а в этом году она что-то опять вернулась ко мне.*

*Оҙаҡламай тағы яҙырмын әле. Был хат шулай булһа ла бик оҙон сыҡты. Хаталары күптер.*

*Хуш, Жәлилем, һөйөклөм. Скоро увидимся.*

*Сәләм белән Нәфисәң. Целую Тебя.*

*P.S. Был хат шулай яҙылған көйө ике көн ятты. Үҙем ауырыу булғас, хатты почтаға алып барыусы булманы (я никому не доверяю свои письма). Бөгөн миңә әҙерәк арыуыраҡ, хатты почтаға илтәм.*

*Хуш. Сәләм Һиңә тағы ла.*

*Перечитывать я не стала, за ошибки прости.*

**3 май, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм Нәфисә!*

*1 Май көндө бер хат һалғайным, алғанһыңдыр. Ул хатымды яҙғанда иптәштәр килеп инде лә, ҡабалан ғына тамамлап ҡуйҙым. Бөгөн тағы ла яҙырға булдым, ваҡыт та бар.*

*Бик-бик шатмын, Нәфисә, хатың өсөн. Был хатымда мин үҙемдең бынан алда яҙған бер-ике фекеремде яңыртырға уйлайым.*

*Нәфисәнең кейәүенән хат килмәгәс, бик күңелһеҙҙер аңа, бәлки, ул хеҙмәт иткән ғәскәри бүлекте икенсе урынға күсергәндәрҙер. Хәҙер, өҫтәүенә, армияның лагерь ваҡыты, улар лагерға күсәләр, эш күп. Шулай булғас, уның иптәше хат яҙмай тороуы тәбиғи. Белмәйем тағы, төрлө-төрлө хәлдәр булырға мөмкин бит донъяла. Ҡайһы бер кеше башҡалар һүҙенә ышанып төрлө фекергә бирелә. Ә халыҡ телендә әйтәләр: «Кеше һүҙе – кеше үлтерә»,– тиҙәр. Ул бик дөрөҫ.*

*Рәйсәне ҡалдырып китер булғас, һин Лотфыйҙың уҡып ҡайтҡанын көт инде. Аны нисек бер Нәфисәгә генә ташлап китәһең? Лотфый белән хат алышаһығыҙҙыр бит, ул ҡасан ҡайтырға уйлай һеҙҙең янға? Мин инде 10 айын көткәс, 5 - 6 көн көтөрмен, бер аҙна әллә ни түгел. Ләкин Лотфыйға Өфөгә киткәнеңде әйтмәҫһең. Бохараға йә иһә Сәмәркәндкә барам, тиң дә кит. Даже Нәфисәгә лә шулай тип әйтергә мөмкин. Үҙең үлсәп ҡарарһың инде ул тиклемен… Ә инде*

*бында килгәс, хат яҙыр ҙа ҡуярбыҙ, уҡырҙар һәм теләһәләр нисек ҡарарҙар. Конечно, мин үҙем яҙырмын уларҙың барыһына ла, һин оялһаң. Ул мәсьәләне әйтеү – ҡыҙҙар эше түгел…*

*Дуҫтар, таныштар тураһында: миңә ярты Өфө тигеләй таныш – уҡытыусылар, журналистар, артистар, йырсылар, ҡурайсылар, шағирҙар, яҙыусылар, төрлө учреждениеларҙа, наркоматтарҙа эшләүселәр. Өйҙән сығыу белән танышҡа осрайһың. Дуҫтар ҙа байтаҡ. Ҡайһылары йәмәғәтле, бала-сағалы, ҡайһылары үҙем һымаҡ буйҙаҡ – Робинзон Крузо һымаҡ. Дөрөҫөрәге, Дон Жуан һымаҡ йәшәйҙәр.*

*Коллеги по работе – большинство молодежь, работать весело. Дуҫ-иштәр саҡыралар, бармаһаң, үпкәләйҙәр, әллә ниҙә бер барып сыҡҡылайым. Уларҙың һорауҙары хаҡында яҙып тормайым инде ҡабатлап, улар шул әйләндерәләр ҙә бер һорауҙы туҡыйҙар, ялҡытып бөтәләр. Такой вопрос задается каждому молодому человеку. Аны шаяртып та, ысынлап та һорайҙар. Өйрәнеп бөткәнмен инде хәҙер. Мин: «Көнө бөгөн түгелдер инде, күрәһең», – тим дә ҡуям. Был – иң анһат яуап, шулай тиһәң, башҡа нәмә һорамайҙар.*

*Ләкин мин беҙҙең мөнәсәбәт тураһында бер кемгә лә әйтмәйем. Берҙән-бер көндө уларға күҙҙәре дүрт булырлыҡ сюрприз күрһәтербеҙ икәүләп, һинең белән.*

*1 Майҙы һаман үткәреп ятабыҙ әле, өс көн ял, эшләмәйбеҙ. Бер иптәшем кисә урамда осрап бик үпкәләп саҡырғайны, барып булманы, үҙе ҡыҙмасараҡ булып кәләше белән ҡунаҡтан ҡайтып килә ята ине. Аңа бөгөн дә барып булманы, асыуланыр инде. Ул журналист, улар бөгөн эшләйҙәр, ә 5 май – День печати,байрам итәләр тағы ла, шул көндө барырмын тип уйлайым, саҡырҙы.*

*Кисә бер иптәшем белән мин дә йырлашып ултырҙыҡ. Ул районда килгән, урта мәктәп директоры, йырсы, Өфөгә декадаға ҡатнашыу өсөн саҡырып алынған. Сәғәт 1-гә тиклем йырлап ултырҙыҡ, бик һәйбәт йырҙар, көйҙәр белә. Көй, йыр белеүҙән мин дә артта ҡалмайым икән. Ул миндә ҡунып ҡайтты. Кисҡорон ямғыр яуып ебәргәйне, бөгөн иртә белән торһаҡ, бер ҡарыш самаһы ҡар яуған, көндөҙ иретеп ебәрҙе. Аның белән Иҙел ҡарай барҙыҡ, Иҙел тағы ла күтәрелгән, боҙ китеп бөткән, ваҡ пароходтар йөрөп ятҡан була. Иҙел даръя һымаҡ әллә ҡайҙан йәйелеп ята, 12 метрға күтәрелгән, тиҙәр.*

*Бөгөн Башгосфилармонияла кисә. Ҡурайсылар ансамбле етәксеһе саҡырыу билеты бирҙе (минең таныш егет – Иҙелбаштыҡы, беҙҙең ауылдан арыраҡ). Бөгөн шунда барырға йыйынам. Уларҙа күңелле булырға тейеш: йыр, ҡурай, бейеү һ.б. була, тиҙәр.*

*Үҙебеҙҙә институтта вечер булды. Ғәҙәттәгесә үтте: тәүлә доклад, унан художественная часть: француз телендә постановка («Свадьба Фигаро»), инглиз телендә постановка, немец телендә декламация, йыр, бейеү, аҙаҡтан тансылар. Студент халҡы арып тәгәрәгәнсә танцевать итә инде ғәҙәттә. Беренсе май көнө бер ҡайҙа ла барманым, демонстрациянан һуң һиңә хат яҙҙым, шул булды, унан һуң ял иттем.*

*Был хатты алғас (һиңә был хат юлыҡҡас), ай ярым ваҡыт ҡала тигән һүҙ. Мин шул тиклем һағынып көтәм беҙҙең осрашасаҡ көндө, Нәфисә, хәҙер күп ҡалмай, был хатты айҙың 12-ләрендә алырһың.*

*Ауылдан атайымдан һәр ваҡыт хат килеп тора, иҫән-һау ғына йәшәйбеҙ, тип яҙалар. Атайым хәҙер ҡорт баҡсаһы менән булаша, тәрбиәләй, хәҙер инде ҡортто баҙҙан сығарырға ваҡыт, уны яҙ сығаралар. Ә йәй инде ҡорт айыра – атайымдың иң ҡыҙыу эш ваҡыты.*

*Нәфисә, ошо конверт эсенә һалып һиңә конверттар ебәрәм, асыуланма. Киләһе хат эсенә һалып тағы ебәрермен. Һеҙ йәшәгән ҡалала конверт юҡ икән, ундай хәл була, бөтөп китә ҡайсаҡта.*

*Хатымды ошоноң белән тамамларға булдым, оҙаҡламай һинән хат килергә тейеш, ашығып көтәм.*

*Хуш, Нәфисә, хуш, һөйөклөм. Рәсемеңде көтәм.*

*Һине һағынып, Жәлил. Крепко-крепко целую Тебя, Нәфисә!*

**5 май, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклөм һәм ҡәҙерлем Жәлил!*

*Жәлил, мин һинең 27 апрель яҙған хатыңды алдым һәм унан элек яҙған хаттарыңды ла ала килдем.*

*«Һирәк яҙаһың» тигәнһең. Дөрөҫ, Жәлил, мин бер ваҡыт ун көн яҙмай торҙом шикелле. Һинән хат көтөп яҙмай торғайным, ләкин аҙаҡҡы ваҡытта йыш ҡына яҙып торҙом. В этом Ты убедился, наверное, если мои письма где-нибудь не пропадают.*

*Хаттарыңда минең хәтерҙе ҡалдырырлыҡ һис ниндәй һүҙ юҡ. Киреһенсә, мин һинең хаттарыңды уҡып шатланам.*

*Дөрөҫ, Жәлил, ваҡыт әҙерәк хәҙер. Шулай булһа ла, был миңә хат яҙырға ваҡыт тапмай, тип уйлама. Как уже однажды писала, я Тебе писать могу всегда, везде, во всяких обстоятельствах.*

*Ауырыңҡырап алдым әҙерәк. Байрам ваҡытында ауырыуым ваҡытһыҙыраҡ булды. Һис бер ергә лә барып булманы. Байрамдарҙың үткәнен дә белмәй ҡалдым.*

*Байрамды нисек уҙғарыуыбыҙ тураһында яҙғайным мин һиңә. Ҡотлау телеграммаңды мин 4 май алтым. Рәхмәт за поздравление.*

*Да, арыуландым инте хәҙер. Малярия бик алама ауырыу, ҡыҙыҡ ҡына. Ике көн ауырыһаң, ике көн һау йөрөйһөң. Бик һирәк малярия 4 - 5 көн туҡтауһыҙ һуғыла. Миңа мыңарса андай сир һуғылғаны юҡ ине әле, зато 28 апрелдән 4 майға хәтлем аунап ятырға тура килде. Һиңә хатты ауырыу ташлап торған саҡта башлаһам, бөткәнте көтмәй, һуға ла ҡуя. Шул сәбәпле ул хаттар әллә нисек яҙылтылар. Һин ғәфү ит, килешмәгән ерҙәре күптер. Арыуланғанымды көтөп яҙмай торһам, ваҡыт күп үтеп китер, тип уйланым.*

*Хәҙер кәйефтәр ничего. Әкреннәп кенә уҡып ятҡан көн. Экзамен ваҡытында ауырып ҡалам тип ныҡ ҡурҡҡайным. Мин үҙем ауырырға, духтырға барырға яратмайым, кем ауырыуҙы ярата инте... Дәрестәр бик күп. Уҡып өлгөрөп тә булмай.*

*Я очень сожалею, что не писала Тебе десять дней. Һуңғы хаттарым бик оҙон инеләр. Уҡый-уҡый, бәлки, ялҡып бөткәнһеңдер. Был һүҙҙе үҙең яҙғанға ғына яҙам. Хат уҡыу ялҡытамы ни, Жәлил?!*

*Жәлил, һин мине ғәфү ит, был хатты ҡыҫҡараҡ яҙғаным өсөн. Оҙаҡламай тағы яҙырмын әле. Мәктәптән яңы ғына ҡайттым, уҡыйһы дәрестәрем бик күп. Тәүлә һиңә яуап яҙмаҡсы бултым. Жәлил, әгәр ваҡытың булһа, үҙең дә йышыраҡ яҙ.*

*Яҙ булты, тигәнһең. Бик матур, күңелле ваҡыт инде хәҙер һеҙҙә. Ә мынта бик эҫе, көндөҙ урамға сыҡҡаным юҡ. Мәктәпкә барам та ҡайтам.*

*Кистәрен баҡсала халыҡ күп була, имеш, тип ишетәм. Булһа-булыр инте. Яңы кинолар ҙа бара, ләкин барырға күңел төшмәй.*

*Һине бик һағынам, Жәлил. Ике ай ике йылтан та күп күренә, бер уйлаһаң. Ағиҙелте икәү барып ҡарар инек, әгәр мин анта булһам. Быйыл та мин ҡайтҡас барып ҡарарбыҙ әле.*

*Мин яратам ҡурайҙы. Ҡурай уйнағанды ишеткәнем бар. Әтейемдең бер дуҫы*

*бар ине мынта – Ырымбур башҡорто, аның әнеһе бар ине, ул та уйнай ине, ләкин аъаһы хәтле уйнай алмай ине.*

*Һеҙҙең институтҡа инеү программаһы бик ҙур түгел икән. В общем, йәй әҙ генә подготовиться итһәм, в любой институт сдать можно.*

*Хат яҙып тор үҙең. Әйтәһе, һорайһы һүҙҙәреңде барыһын да яҙ.*

*Башҡа ҡалъан хәбәрҙәрҙе киләһе хатҡа яҙырмын.*

*Сәләм һиңә, иң һаъынышлы сәләм!*

*Жәлил, был хат ниндәй бәхетле, сөнки ул һине барып күрә! А я не имею в данное время такой возможности.*

*Хуш-һау бул, Жәлил!!! Һине һаъынып, Нәфисә.*

*P.S. Таъы яҙмаҡсы инем әҙерәк, ләкин Нәфисә килеп: «Йә, туҡтап тор инте, төнө-көнө уҡый, яҙамы кеше, әҙерәк ял ит, тамаъыңа аша, мәктәптән ҡайтыу менән әллә нәмә яҙырьа ултыраһың»,– тип кенә туҡтатты.*

*Хуш!*

**7 май, 1941, Өфө**

*Ҡәҙерлем һәм һөйөклөм Нәфисә!*

*28 апрель яҙъан хатыңды алып бик шат булдым. Рәхмәт хатың өсөн, һөйөклөм, йөрәгем белән рәхмәт. Һиңә 3 май көнө бер хат яҙып һалъайным, үҙеңдән хат килгәс, таъы яҙырьа ашыҡтым. Мин йә бөгөн, йә иртәгә хат килер тип көтә инем, яңылышмаъанмын…*

*Мин бит фәҡәт шул һиңә хат яҙып һәм һинән хат алып ҡына йәшәйем, әгәр белһәң… Яңъыҙ бер һине генә уйлап йөрөйөм, Нәфисә. Һинең дә һәр ваҡыт мине уйлауыңа ысын күңелем белән ышанам. Беҙ икебеҙ ҙә шат булырьа тейешбеҙ. Ниндәй генә хәл-ваҡиъалар булмаһын, беҙ осрашырьа, дөрөсөрәге – ҡауышырьа тейешбеҙ! Һәм ул буласаҡ! Тик уны уйлап, ашыҡмай, ҡабаланмай ойоштороръа ъына кәрәк.*

*Нәфисә, мин ҡайсаҡта уйлайым: һиндә миңә ышанмау фекере булъылайҙыр, хатта ул күп булмаһа ла, күңелеңә ҡылт итеп килеп төшкөләйҙер һирәкләп, тип уйлайым мин. Мин яңлышмаъанмындыр. Дөрөҫ бит, Нәфисә?*

*Аҙаҡҡы хатың быны үҙе үк әйтеп тора һәм мин яңылышмаъанмын. Мин аны әле лә әйтәм: һинең күңелеңә, уйыңа миңә нисбәттән саҡ ҡына булһа ла ышанып етмәү фекере ҡылт итеп килеп төшкөләй. Шулай бит? Билгеле, ул бик бәләкәй, һирәк һиндә, мин уныһын да беләм. 5000 саҡрым ерҙән тороп ҡайҙан белә икән был, тип уйлайһыңдыр әле һин, моъайын. Эйе, хәҙер шундай заман бит: ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белергә кәрәк. Шуның өсөн: «Һине күрәсәгемә күңелем һис ышанмай», – тип яҙаһың. Билгеле, башҡа төрлө уйҙар килә, кеше машина-автомат түгел, уйлай, фекер йөртә. Әгәр ундай фекерең булһа, аны бөтөнләй башыңдан алып ташла, онот, Нәфисә! Я дал Тебе слово, дал клятву. И это слово будет железно. Мы встретимся, нам ничего не помешает. Будь уверена – это будет! Һәм беҙ осрашырбыҙ (Алла бирһә, үҙең әйтмешләй). Саң бөртөгөндәй ҙә ышанмау булмаһын. Һин ундай фекер белән үҙеңде-үҙең йонсотма, Нәфисә. Ул пессимизмъа алып бара. Вообще, ул пессимизм, неуверенность, слабость – Гетеның Вертерена һәм Гретхенъа ъына хас. Ә беҙ һинең белән ул заманда йәшәмәйбеҙ, һиңә билгеле.*

*Я вовсе не отрицаю сентиментализм. Я люблю мечтать тоже. Ты не думай, что я Тебя ругаю, упрекаю. Нет, тысячу раз нет, дорогая.*

*Хәҙер ай ярым ваҡыт ҡалды. Күбеһенә түҙҙек, әҙ генә ҡалъас, түҙергә кәрәк. Был яҡҡа ҡасан юлъа сыъыуың тураһында үҙеңдең яйыңа ҡарарһың. Лотфыйҙың Каршиъа ҡайтҡанын көтәрһеңме, юҡмы, аныһын үҙең ҡарарһың. Үткән хатта мин, көт, тип яҙъайным.*

*Короче: «Через каких-нибудь полтора месяца наш Робинзон Крузо должен быть не один». Һинең был шаярыуың бик оҡшаны миңә, Нәфисә. Был шул тиклем күңелгә яғымлы, йылы һәм йомшаҡ шаярыу – туғандарса һөйкөмлө шаярыу. Мин әнем менән шулай шаяра торғайным. Мин үҙем шаярырға бик яратам, атайым да шулай минең.*

*Атайым менән бөтә мәсьәләрҙе лә асыҡтан-асыҡ һөйләшәбеҙ. Ул миңә һәр ваҡыт теге һорауҙы биреп йөҙәтә. Ул ҡыш килгәндә мин аңа бик ныҡ вәғәҙә биреп ҡалдым. Әле мин ул ваҡытта һиңә  предложение яһамағайным, яһарға уйлап ҡына йөрөй инем. Һәм  предложениены һинең тарафтан ҡабул ителәсәгенә ышана инем. Шуға күрә мин атайыма  ныҡ обещать иттем. Ысын күңелдән әйтәм: фәҡәт һиңә таянып, һиңә ышанып ҡына  обещание бирҙем аңа, конечно, һинең турала һөйләмәнем.*

*Нәфисә, һин тағы ла: «Мин ни өсөндөр ҡурҡам», – тиһең. Юҡҡа ҡурҡаһың. Ҡурҡма, ныҡ ышан! Күңелһеҙләнмә, Нәфисә. Мин дә һине бик-бик һағынам, ифрат һағынам. Помни: «Терпение ломает железо!», «Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр» тигәндәр боронғолар.*

*Бик яратам бит мин һине, Нәфисә. Беләһеңме: мин һине иң беренсе  мәртәбә Ҡаран баҙарында күрҙем. 14 август ине. Мин шул көндө Өфөгә китеп бара инем. Икенсе мәртәбә 17 август көнө күрҙем. Мин шул ваҡытта уҡ үҙемдең мөхәббәтемде асып бирергә теләгәйнем, ләкин бик ҡабалан булды. Һин китергә билет алғайның инде. Киттең… бына оҙаҡламай ҡайтып килерһең! И мы будем вместе! Вместе будем навсегда!*

*Хәҙер мин һинең ҡайтыуыңды түҙемһеҙлек менән шатланып көтәм һәм шул шатлыҡлы көндөң буласағына ныҡ ышанам. Һин дә ышан, Нәфисә!*

*Шикләнмә, күңелеңдә шик булмаһын. Беҙ ул көндө нисәмә айҙар көттөк инде, ышанып көттөк. Ҡалған аҙ ваҡытын да түҙергә кәрәк.*

*Билгеле, беҙҙең араны 5000 километр ара айыра. Беҙҙең йөрәктәр шул тиклем яҡын, шул тиклем бер теләк менән тибәләр, беҙ икебеҙ ҙә бер генә нәмә хаҡында уйлайбыҙ хәҙер. Ул да булһа – осрашыу. Һәм ул буласаҡ.*

*«Тебе не надоело читать?» – тигәнһең. Что һин, Нәфисә. Һинең хаттарың менән генә йәшәйем мин. Һинең яҙған һәр бер һүҙең һинең үҙең  һымаҡ һөйкөмлө миңә! Ләкин эш башы хатты матур яҙыуҙа түгел, ә йөрәк менән, ысын күңелдән, искренне яҙыуҙа. Мин аңлайым, бәлки, һин  ысын күңелдән яҙаһың. Ана шул хат, шундай хат йөрәккә яғымлы, матур була, бөтөн матурлыҡ шунда.*

*Ысын йөрәк менән яҙылмаған хат, тыштан матур булһа ла, йөрәккә ятмай. Шунан сығып инде әйтеп була: ысын мөхәббәт тышҡы матурлыҡта ғына түгел, ысын мөхәббәт – йөрәктә. Вот шулай. Мин һине ғүмерлеккә яраттым, Нәфисә. Хистәремдән һис бер ваҡытта ла сигенмәйәсәкмен. Мин ул мәсьәлә менән шаярырға йыйынмайым. Тик бер һине генә яраттым, фәҡәт һине генә уйлайым. Мин үҙемдең мөхәббәтемде тик һинең өсөн генә һаҡлаясаҡмын һәм һаҡлайым. Мөхәббәтем, барлыҡ хис-тойғом, хыялым фәҡәт һиңә генә булһын әйҙә, әгәр ул һиңә тиң була алһа....*

*«Салауат Юлаев» хаҡында: общественный просмотр булған саҡта халыҡтар точно һин әйткән фекерҙе әйттеләр, между прочим. Мин үҙем дә шул фекерҙә. Ләкин шуға ҡарамаҫтан, ул фильмдың сығышы беҙҙең өсөн ҙур байрам булды. Ул теге «Арсен» фильмынан һис тә ҡалышмай, Өфөлә ул әле лә бара.*

*Урта Азия буйлап сәйәхәтең тураһында яҙыуың өсөн рәхмәт. Оказывается, Һин Урта Азияның бөтә ерҙәрендә булғанһың икән. Ул бик шәп эш. Күп йөрөү – файҙалы нәмә.*

*Тик теге шакалдарҙың тауышы миңә бер ҙә оҡшаманы. Шакал тигән нәмә бик*

*алама була, тип һөйләйҙәр күргән кешеләр. Алар өйөрө менән (стая белән) йөрөйҙәр, ти, үҙҙәре. Беҙҙәге бүреләр алай түгел бит. Шакалды беҙҙә «сүл бүреһе» тип һөйләйҙәр. 1921 йылдарҙа алар беҙҙең тирәгә (Стәрлетамаҡ тирәһенә) килеп сыҡҡандар.*

*Урта Азияны мин былай күҙ алдыма килтерәм инде хәҙер.*

*Өфөлә тамам яҙ булды хәҙер, ҡоштар килеп бөттө. Иртәнсәк төрлө һандуғастар һайраша, бик күңелле. Тик ошо арала ямғырҙар яуып тора.*

*Беҙҙең хәҙер экзамендар ваҡыты башланды, эш бик күп. Ләкин һиңә хат яҙыу өсөн мин һәр ваҡыт ваҡыт табам, Нәфисә. Атайымдарға ла яҙам һирәкләп. Алар үҙҙәре лә бик һирәк яҙалар.*

*Ярай, хуш, Нәфисә, хуш, һөйөклөм, минең берҙән-бер Нәфисәм!*

*Һиңә тағы ла һағынышлы сәләмем.*

*Һине һағынып, Жәлил. Крепко-крепко целую. До скорого свидания!*

*Хәҙер төнгө сәғәт 1. Йоҡларға ятам. Мин йоҡларға китмәҫ борон һәр ваҡыт һине уйлап ятам һәм шулай йоҡоға китәм.*

**10 май, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм Нәфисә!*

*Был хатымды яҙыу өсөн һинән хат килеүен көтмәҫкә булдым, бер-ике көндән килер, тағы ла яҙырмын.*

*Ултырып һиңә хат яҙыу – минең өсөн иң ҙур шатлыҡ, сөнки мин беләм, бына ошо һүҙҙәр бер аҙнанан һинең күҙ алдыңда буласаҡ. Һиңә булған мөхәббәтемде тасуирлау өсөн үткер ҡылыстарҙан да үткер, ялҡындарҙан да ялҡынлы, матур сәскәләрҙән дә матур һүҙҙәр булһа ине минең ихтыярымда, Нәфисә! Юҡ шул миндә ундай һүҙҙәр! Әйткәндәй, булған сүрәттә лә ул ғына һүҙҙәр һинең өсөн булған миндәге дарья һымаҡ мөхәббәттең тамсыһын да һөйләп бирә алмаҫтыр ине һиңә.*

*Бына хәҙер тәнгө сәғәт 1-ҙе һуҡты, төн етте. Мин һине күҙ алдыма килтереп, һиңә булған мөхәббәтемде тасуирлау өсөн шул һүҙҙәрҙе эҙләп мәшәҡәтләнәм.*

*Хатты яҙырға башланым ғына әле. Алдымда – рәсемең. Һин күҙ алдымда баҫып торған һымаҡһың. Мин тәрән хыялға сумып, һине күҙ алдыма килтерәм дә, сабый бала шатлығы белән шатланам. Осрашыу көндәре яҡынлаған һайын минең шатлығым арта, сөнки мин беҙҙең осрашыуға шул тиклем ныҡ ышанам, яңынан биш сәғәттән бейек Урал тауҙары артынан ҡояш килеп сығасағына нисек ышанһам, шул тиклем ышанам мин аңа, Нәфисә. Сөнки мин һине көслө, тәрән мөхәббәт белән яратам. Мөхәббәтте бер генә көс тә туҡтата алмаясаҡ.*

*Мин һинең дә шулай яратыуыңа ышанам, Нәфисә, һәм, мин яңылышмайым, тим. Шулай булғас, беҙ июлдә бергә буласаҡбыҙ. Был турала зәррә тиклем дә шик булмаҫҡа тейеш. Күңелеңдә һис бер төрлө лә шик булмаһын, Нәфисә, һөйөклөм.*

*Һуңғы хатыңды алғас, мин, дөрөҫөн әйткәндә, бер аҙ борсолоп та ҡуйҙым. Сөнки ул хатыңда һин: «…ней өсөндөр ҡурҡам…, минең күңелем һине күрәсәгемә һис ышанмай… неужели случится что-нибудь, которое помешает нам встретиться…» тигәнһең.*

*Һин андай фекерҙә булма, Нәфисә аҡыллым. Һәм беҙҙең осрашыуға ничего не помешает. Мин был турала бынан алда яҙған хатымда ла бер аҙ туҡталғайным. Ул хатымды бик ашығыс яҙырға тура килде, асып уҡығас та яҙырға ултырҙым, сөнки һин оҙаҡ көтмәһен тинем. Ҡабалан яҙылғанға күрә ул хатта*

*һинең хәтереңдә ҡалдырырлыҡ, һине борсорлоҡ һүҙҙәр ҙә булғандыр, бәлки, һин ғәфү ит мине, Нәфисә, әгәр була ҡалһа. Дөрөҫөн әйтәм: мин шул тиклем ҡабаландым, хатта уҡып та сыҡманым яҙып бөткәс, ебәрергә ашыҡтым…*

*Беҙҙең осрашыуҙа иштең иң башы үҙ-үҙеңә ышаныуҙа! Шул уҡ ваҡытта берберeңә ышаныуҙа, сөнки беҙ бында икәү, бер маҡсатта икәүләп ынтылабыҙ. Был эштең барып сығыуы икебеҙҙән дә тора. Ә инде берәү ышанып, берәү ышанмаһа, ул тағы бер ниндәй нәтижә лә бирмәй. Шулай булғас, инде ул ышанысһыҙлыҡ, ҡурҡыу тигән нәмәне оноторға кәрәк.*

*Һинең һуңғы хатыңды алмаҫ борон һинең шулай ышанмауың уйыма ла килмәй ине әле. Мин бик уңайһыҙландым һәм борсолдом. Дөрөҫ, мин барыһын да аңлайым, Нәфисә. Ләкин хәҙер күп тә ҡалманы бит инде. Һиңә, сит ерҙә булғас, бигерәк тә ҡыйын, анылһын да аңлайым. Ләкин нисек кенә итәйем һуң, Нәфисә, аҡыллым? Әгәр мин осар ҡош булһам, һинең янға барып, һине ҡанатыма ултыртып үҙебеҙҙең илдәргә – Уралға, Ағиҙелгә – алып ҡайтыр инем мин.*

*Ләкин ышан, Нәфисә – бына ул көн килер, күп ҡалманы. Хәҙер һинең алдыңда торған иң беренсе бурыс – уҡыуҙы тамамлау. Һин бер нәмәгә ҡарамай тырыш. Төрлө уйҙарҙан еңелмә. Мин инҡар итмәйем: уйламай тороп булмай. Кеше уйларға, хыялланырға тейеш. Һин үҙеңдең уйыңды, фекереңдәге бөтә нәмәне яҙаһың. Аныһы өсөн һиңә мең-мең тапҡыр рәхмәт, аҡыллым. Шуға күрә мин һине үҙемдең бер туғанымдан да артыҡ яратам.*

*Беҙҙең осрашыуға ҡамасаулыҡ итә алған нәмәләр тураһында аңлаштыҡ. Тағы ниндәй ҡамасаулыҡтар булыуы мөмкин? Мин уйлап-уйлап таба алмайым. Улар булмаҫҡа тейеш. Әгәр бәләкәй генә бер ҡамасаулыҡ булырҙай булһа ла, һин һис тартынмай миңә яҙ, Нәфисә. Мин үҙемдең яҡтан көсөмдән килгән тиклем уны ситләргә тырышырмын, һәм, була ҡалһа, икәүләп сығыу юлын табырбыҙ, тип уйлайым. Ләкин булмаҫҡа тейеш, минеңсә.*

*Нәфисә, минең башҡа ҡайсаҡта шундай уй ҙа килеп ҡуя: һин минән бер аҙ шикләнәһеңдер, тип уйлап ҡуям. Әйтмәҫ микән был, тип уйлайһыңдыр, тигән фекер ҙә башыма килеп ҡуя. Асыуланма, мин уйымдағы бар нәмәне яҙам, Нәфисә. Ысынлап та, андай уйҙың булыуы мөмкин бит.*

*Беҙ һинең менән 30 - 40 минут ваҡыт бергә булдыҡ, не больше. Шул минуттар эсендә бер-беребеҙҙе яраттыҡ. Күп ваҡыт бергә булһаҡ, тағы бер хәл. Әгәр һиндә миңә ышанмау тойғоһо була ҡалһа, һин уны онотторға тырыш, Нәфисә. Ундай тойғо булмаһа, бигерәк тә яҡшы.*

*Мин тоғролоғом хаҡында үткән хатымда ла, анан элекке хаттарымда ла яҙҙым. Ул турала яҙырға, тағы ла яҙырға мөмкин. Одни только слова. Словами нельзя, невозможно все передать, тем более мне, потому что я слишком беден словами. Бына осрашырбыҙ, мин барыһын да, барыһын да һөйләп күрһәтергә тырышырмын. Ләкин бер генә нәмәне ҡабатлайым: «Вәғәҙә – иман». Ә ул вәғәҙә көслө даръя тулҡындарынан да көслө, океандарҙан тәрән мөхәббәттең иң ҡәҙерле һүҙе, мөхәббәттең, ысын мөхәббәттең үҙе.*

*Әллә нәмәләр яҙам шикелле һиңә, Нәфисә. Быңдай һүҙҙәр менән ҡаңғыртып бөткәнмендер әле һине, моғайын. Әллә нәмәләр яҙырға әйткәйнем, барыһын да оноттом. Киләһе хатымда яҙырмын…*

*Мин хәҙергә ошоноң менән хатымды тамамлайым. Һиңә йөрәгемдән иң һағынышлы сәләмдәремде ебәрәм. Бик-бик һағынам һине, аҡыллым. Желаю Тебе всего-всего наилучшего, здоровья, успехов в учебе и мужества. Тик бер генә нәмәне хәтереңдән сығарма һин, һөйөклөм, Нәфисә: мин минут һайын, секунд һайын һинең менән. Ялғыҙланма, ҡәҙерлем.*

*Хуш, ҡәҙерле, һөйөклө Нәфисәм.*

*Һине һағынып, Жәлил.*

*P.S. Был хатты кисә яҙа башлағайным, бөгөн иртә белән яҙып бөтөрөп ебәрәм. Бөгөн ял көнө. Өфөлә тамам йәй булды, ағастар япраҡ ярырға әҙерләнә. Урам мөйөштәрендә төрлө сәскә бәйләмдәре һаталар – ҡарсәскәһе, умырзая һ.б. Көн йылы һәм аяҙ. Ағиҙел ҡайта башланы инде, пароходтар төштө. Баҡсаларҙа, парктарҙа һандуғастар һайрай.*

*Хуш, һөйөклөм! Хат көтөп ҡалам.*

**12 май, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклөм Жәлил!!!*

*Жәлил! Мин, һинән хаттарыма яуап килмәгәнгә аптырап йөрөп, кисә шул хаҡта телеграмма һуҡҡайным. Һин аны уҡып миңә әҙерәк асыуланғанһыңдыр әле.*

*Һинән хат килмәү мине бик беспокоить итте. Наверное, первомайские торжества задерживали почту. Правда, мин һинән 5 майҙа бер хат алғайным. Һин ул хатты 27 апрель, минән хат алмаҫ элек яҙғайның…*

*Шулай итеп, һинән хат булмау мине ҙур тыныслыҙлыҡҡа ташланы. Минең башҡа төрлө уйҙар килә: эше бик күп микән, эшең һәр ваҡыт күп, а все же эш күп тип хат яҙмай тормай инең. Тағы ла төрлө, төрлө кәрәкмәгән уйҙар килеп төшкән була. Главное, һин ауырымаһаң ярар ине, тип ҡурҡтым. Төшкә даже бик буталып керә инең (хотя снам я не очень верю).*

*Бына бөгөн почтаға барғым килмәгәйне, барғайным, һинән бер юлы ике хат килгән. Рәхмәт, бик ҙур рәхмәт. Ә мин әле һаман төшкәнем юҡ рәсемгә. Иртәгә обязательно төшәм, тип торам.*

*Мин үткән хаттарымда яҙғайным булһа кәрәк, әҙерәк ауырып алтым, тип. Хәҙер ничего, шулай ҙа эҫелә йөрөргә ярамай миңә. Әҙ генә йөрөһәм, тағы баш ауырта башлай, малярия тота. Ә йөрөмәй булмай. Особенно һуңғы көннәрҙә йөрөргә тура килә. Сәбәбе: 10 майҙа әтейемә суд булты.*

*Иртүк тороп ( таңғы 6-нан) дүртәүләп әтейемне күҙәтеп торҙоҡ. Суд иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем булты. Әтейемне 6 ай күргәнебеҙ юҡ ине, ябыҡҡан, конечно, үҙгәргән әҙерәк. Рәйсәләр аны күреп илап ебәргән бултылар, ә мин, илағым килһә лә, иламаҫҡа тырышҡан бултым. Килешмәй бит, взрослому человеку кешеләр (дуҫ-дошман) янында илап тороу. Әтейем дә бик күңелһеҙләнте.*

*Оправдать итмәнеләр. В общем, әтейемә утырырға тағы 4 ай ҡалты. Кассация яҙҙы. Может быть, бөтөнләй оправдать итерләр. Үҙе, һис шикһеҙ ҡотолам, тигән була.*

*Бик ҡыйын булты. Рәйсәне өйгә лә алып ҡайтып булмай: «Әтейем белән ҡайтам, ул та ҡайтһын!» ти ҙә илай. Аны алтап ҡына алып ҡайттыҡ. Урам яңғыртып илап ҡайтты.*

*Иртәгәһенә мәктәпкә барҙым. Дүртенсе сиреккә отметка ҡуйғандар икән. Посредственнолар бар, 11 май һуңғы көн уҡыныҡ, 20-һенә тиклем уҡымайбыҙ икән. Бөтөн уҡыусыларҙы колхозға эшкә ебәрәләр. Областан постановление килгән имеш: „...учащихся 1 – 10 классов послать в колхоз на борьбу с вредной черепашкой“.*

*Черепашка – маленькое насекомое (ташбаҡа түгел), немного больше мухи. Черепашка заражает посевы. Ее раньше не было, она пришла к нам из Афганистана. Ул черепашканы шешәгә тотоп йыялар икән.Үҙе бик күп, ти. Минеңсә, аны йыйып ҡына барыбер бөтөрөп булмаҫ.*

*Мин бармайыраҡ торам әле, нимә тиерләр. Әгәр әрләһәләр, 1- 2 көнгә барып*

*килермен, өнтәшмәһәләр, тағы яҡшы. Отдохну и подготовлюсь за это время к экзаменам.*

*Һинең хаттарың менән бергә Лотфый ағайҙан та хат алтым. Ул, хат яҙмайһың, һирәк яҙаһың, тип үсеккән була. Үҙе айына бер мәртәбә генә яҙа, «Ваҡыт юҡ» тигән була, ә мин көн һайын яҙып торайым, имеш. Аларҙың уҡыуҙары 15 июнь бөтә икән. Как раз беҙҙең уҡыуҙар бөтөүенә генә ҡайта.*

*Рәйсәне ҡалтырып китәм инте. Бик йәл, правда. Ну ладно. Что же делать то? Не могу же я ее с собой привезти. Это было бы очень неприлично.*

*Нәфисәнең кейәүенән хәҙер хат килә. Нәфисә үҙе адресты дөрөҫ яҙмай эште бутаған икән. Ул хатты йыш ҡына яҙып тора, көн һайын тиерлек хаты килеп тора. Нәфисә, наконец, тынысланты. Еҙнәбеҙ 3 - 4 айҙан ҡайта икән.*

*Ауыл тирәһенән тә хат килеп торған була. «Ҡайтығыҙ» тигән булалар. Между прочим, ҡайтыу хаҡында Нәфисә әтейемә әйтеп ҡарағайны: «Инәйемдәр Нәфисәне алып ҡайтырға ҡуша»,– тип. Атай ҡарт яҡын та килмәй: «Нәфисә нишләһен анта ҡайтып?» – ти. Уҡырға ла Ташкенттан башҡа ергә китмә, ти. Имеш, анта аның дуҫ-иштәре күп, бәлки, ағайың та анта уҡытырға ҡалыр, тигән була. Аның әйтеүе дөрөҫ, конечно. Нәфисә белән ҡайтып ауылта мин нишләй алам? О наших с тобой отношениях никто пока не знает. Әтейемә ғүмерҙә әйтәсәк түгелмен. Нәфисәгә лә әйтмәйем. Әйтәм тип ҡарайым, әйтә алмайым. Һаман откладывать итәм.*

*Бик эҫе. Был эҫе кешене ненормальный итә. Поэтому был хат мәғәнәһеҙ генә булты.*

*Да, беҙҙең осрашыуға бик әҙ генә ваҡыт ҡалды. День встречи я жду с радостью и некоторым страхом.*

*Иптәштәрем күп, тигәнһең. Хорошо, конечно. «Не имей сто рублей, а имей сто друзей» тиҙәр урыҫтар. У меня тоже знакомых много, но близких друзей мало. Мои друзья, конечно, все Робинзоны Крузо, только противоположного пола, есть и семейные (замужние), но с ними как-то трудно дружбу сохранять.*

*Һинең дуҫтарың араһында Дон Жуаннар ҙа бар икән. Не знаю как Ты, но я Дон Жуанов не люблю. Робинзоны ничего, не вредные люди, но Дон Жуаны – это отрицательные типы. Ты только не подумай, что я так говорю о Твоих друзьях. Я вообще о Дон Жуанах говорю. Я уверена, что Твои друзья – хорошие люди. Среди людей нашего пола тоже есть Дон Жуаны. Эти хуже Дон Жуанов мужчин. Я их ненавижу и презираю. Не знаю, какого мнения Ты о них.*

*Ладно, на свете бывают различные люди. Очень хорошо, что люди разные. Если бы они были одинаковые, то на свете было бы скучно жить.*

*Бик эҫе. Яҙышып ултырырға возможность юҡ. Оҙаҡламай тағы ла яҙырмын әле.*

*За конверты большое спасибо. Только больше не беспокойся. Теперь конверты есть.*

*Да, у меня нет нисколько свободного времени, чтобы готовиться по программе…*

*Жәлил, мин һине бик һағынам, әгәр мөмкинлек булһа, мин мынта бер көн тормай һиңә китер инем, һинең эргәңдә булыр инем.*

*Һиңә һөйләйһе һүҙҙәр күп. Мне кажется, что ул һүҙҙәрҙе мин һис һөйләп тә бөтөрә алмаҫ инем.*

*Күрешкәнсегә тиклем һау булып тор!*

*Һине һағынып, сәләм белән, Нәфисә.*

*Целую Тебя, мой дорогой и любимый.*

(Олатайыбыҙ Хәлил Халиҡов 1944 йылда ғына төрмәнән сыға. Ул оҙағыраҡ ултырырға ла тейеш булған, ләкин 1944 йылда төрмәләрҙән һәм лагерҙарҙан үлем хәленә яҡынлашҡан бик күп тотҡондарҙы азат итәләр. Әммә уларҙан репрессия статьяһын һәм „халыҡ дошманы" келәймәһен алмайҙар. Ни өсөн тигәндә, көнбайышҡа ынтылған совет ғәскәрҙәре фашистарға пленға эләккән беҙҙең фронтовиктарҙы ҡотҡара башлай, ә уларҙы Сталин хыянатсылар тип иғлан иткән була. Немец тотҡонлоғонан „ҡотолдороп", бөтәһен дә совет лагерҙарына тығалар, шунда күптәре, мәҫәлән, яҙыусы А. Солжиницын ишеләр, 1956 йылға тиклем яфалана. Хәлил олатайҙы шулай уҡ 1956 йылда ғына реабилитациялайҙар. Төрмәнән туберкулез менән сыға, оптимист булараҡ, сирен еңеүгә өлгәшә.)

**12 май, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм Нәфисә!*

*Бөгөн һинең 1- 3 майҙа яҙъан хатыңды алдым. Рәхмәт, Нәфисә. Шул тиклем шатмын, ләкин һинең сирләүең мине бик-бик борсой. Һиңә былай ҙа күңелһеҙ, өҫтәүенә ауырыйһың да. Нисек кенә итәйем һуң, һөйөклөм. Ҡанатым булһа, осоп барып алдыңа төшөрҙәй булам. Юҡ шул…*

*Кисә һинән хат бармау тураһында телеграммаңды алъас, бигерәк тә борсолдом, нишләргә белмәнем. Кисә үк телеграмма һуҡтым. Аптыраъандан инде: яҙъан хаттарым барып етмәй микән әллә, тип тә уйлайым. Анан килеп, почта тирәһендә эшләгән ҡыҙ-ҡырҡын бик любопытный була, ъәҙәттә, улар асып уҡырҙа мөмкин. Асһалар-асһындар әйҙә. Ләкин быъа тиклем беҙҙең хаттар бик регулярно йөрөйҙәр ине. Һин быңарса алмаһаң да, алырһың ул хаттарҙы, тип уйлайым. Мин хат бик йыш яҙам һымаҡ.*

*Мин бөгөн һинән яуап телеграмма килер тип эштән ашыъып ҡайтҡайным, юҡ икән. Шунан хат яҙыръа ултырҙым ъына тигәндә, һинән хат килеп төштө. Бик-бик шатландым, рәхмәт, һөйөклөм. Ләкин һинең биҙгәк ауырыуың йөрәгемде әрнетә. Биҙгәккә иң яҡшы дарыу – һарымһаҡ (чеснок). Һарымһаҡ кешене хатта холеранан, чуманан да һаҡлай. Анан һуң климат алмаштырырҙа кәрәк. Мин дә Мәскәүҙә бер аҙ биҙгәк белән ауырыъайным. Өфөгә ҡайтҡас бөттө. Өфө һауаһы бик һәйбәт, ҡоро, һаҙлыҡтар юҡ. Өфөгә ҡайтҡас һинең биҙгәгең һис шикһеҙ бөтәсәк. Өфөлә биҙгәк менән ауырыусылар бик һирәк.*

*Бер ай ваҡыт ҡалды хәҙер. Уйлап ҡара – бер генә ай. Анан беҙ (үҙең әйтмешләй, Алла бирһә) бергә булырбыҙ, һөйөклөм!*

*Һин яҙъан мәсьәләләр хаҡында бер нисә һүҙ: наоборот, Нәфисә үҙемдең мөхәббәтем тураһында туҡып һине мин ялҡытып бөтәмдер әле. Һин, әйләнә лә бер нәмә тураһында яҙа был, тип уйлайһыңдыр. Нисек әйтәйем, яратам шул, Нәфисә, бик яратам һәм һаъынам һине, һөйөклөм.*

*Мин һине эре кеше тип уйламайым һис бер ундай фекерҙә түгелмен, ләкин шуныһы бар: урыны белән эре булырҙа ла эреләнергә лә кәрәк ҡайсаҡта. Эреләнгән кешеләр алдында ваҡланырҙа ярамай, билгеле. Ҡыҫҡаһы: танауын күтәреп йөрөгән кешеләр белән мин, ъәҙәттә, һөйләшмәйем. Йөрөһөндәр әйҙә эреләнеп, донъя киң бит.*

*Әхлаҡ тураһында мин бер мәҡәл беләм, бәлки, аны һин дә беләһеңдер: «Ана һөтө белән кермәгәнде тана һөтө белән кермәҫ». Мин шуъа оҡшашыраҡ таъы бер нисә ҡыҙыҡ мәҡәл беләм, уларын килгәс әйтермен, онотмаһам.*

*Мәндем буйының тәбиъәте тураһында бер нисә һүҙ: мин был турала бик күп яҙҙым һиңә, шулай ҙа таъы яҙмаҡсы булдым. Мин бәләкәй саҡта уҡ, беҙҙең ауылдан матур ауыл юҡтыр, тип уйлай торъайным. Һәм мин әле лә шул*

*фекерҙә. Беҙҙең ауыл тәбиғәтенә һоҡланмаған кеше юҡ. Анан Ташаҫты тигән ауылдың ултырған ере бик матур, ул беҙҙән 7-8 саҡрымдағы Еҙем буйында. Беҙҙән ары матур ауылдар бар, ләкин анда ялан юҡ, гел тау ҙа, урман. Ә беҙҙең ауылдың бер яғы ялан, бер яғы тау. Беҙҙән ары китһәң, гел тау китә.*

*Нәфисәгә, әгәр Мәндем буйының тәбиғәте тураһында һүҙ ҡуҙғалһа, һәм ул һиңә «Ял итерһең беҙҙә» тиһә, һин: «Мин Мәндем буйлап өҫкәрәк барып ял итермен инде», – тиң. Нәфисә аңламаҫ быны, билгеле.*

*Ә Ҡаран-Йылғаға һинең белән һис шикһеҙ ҡайтасаҡбыҙ, Алла бирһә, үҙең әйтмешләй. Ләкин шуныһы: анда барғас һине бөтөн кеше килендән һәм еңгәнән ҡырҡасаҡтар, күҙеңде лә астырмаҫтар, бына мин әйтте тиерһең.*

*Атайым һәр ваҡыт хат яҙып тора. Ҡасан ҡайтырыңды аҙна-ун биш көн элек иҫкәртеп яҙ, ти. Мин бында бал ҡойоп, әҙерләнеп торормон, ти. Беҙҙең директорҙы ла саҡыра (ул беҙҙең директорҙы белә). Атайым ҡортсо бит. Шуға күрә «Башпчелосоюз»дың управляющийын да саҡырып яҙа.*

*Аңа бушап һаман барып әйткәнем юҡ әле. Конечно, атайым һинең турала белмәй. Һин, был атайына әйткән икән, тип уйлама тағы. Ваҡыты килеп еткәс, насип булһа, белер әле.*

*Һинең яҙған хаттарыңдың барыһын да алып торам, 8-9 көн эсендә килеп етә. Һинән хат килгәнен һис көтмәйем, тотам да яҙам, сөнки ултырып һиңә хат яҙыуҙы ҙур шатлыҡ тип иҫәпләйем.*

*Ҡайтыу тураһында күп яҙғайным, шуны ғына әйтәһем килә: билетты 7-се поезға (Ашхабад – Мәскәү поезы) алырһың, яңылышам, кажется, Сталинабад – Мәскәү. Ҡыҫҡаһы, Каршиҙан үтә торған поезд, үҙең яҙған ваҡыттан, йәғни 27-28 июндән ҡалырға тырышма, бер-ике көн иртәрәк булһа, бигерәк тә яҡшы.*

*Бик-бик күргем килә, һағынам һине, Нәфисә.*

*Нәфисәгә беҙҙең отношения тураһында һөйләү һәм һөйләмәү мәсьәләһенә килгәндә: әгәр ул һинең тоғро әхирәтең булып, һин аңа положиться итһәң, безусловно, әйтергә мөмкин, мин тыймайым һине, ҡушмаған тип уйлама. Ләкин әйткәндә ике шарт ҡуй. Беренсенән, ул билгеле бер ваҡыт килеп етмәйенсә бер кемгә лә һөйләмәһен. Икенсенән, ул һиңә уңыштан башҡа бер нәмә лә теләмәһен. Хатта Өфөгә китеүҙе хәҙергә әйтмәй торорға мөмкин аңа, киткәндә лә, ваҡытлыса ғына китәм, тиергә мөмкин. Ул һиңә төрлө кәңәштәр биреп, аҡыл өйрәтер. Уның кәңәштәрен тыңла ла үҙең уйлағанды эшлә. Кеше кәңәше белән бер ваҡытта ла йөрөргә тырышма. Үҙеңдә твердый, устойчивый фекер булһын, иң яҡшыһы шул. Кеше һүҙен тыңлап, үҙеңдең уйлағаныңды эшләмәһәң, йәғни кеше кәңәше буйынса эшләһәң, ә ул эш уңышһыҙ сыҡһа, бик ҙур үкенесе була уның аҙаҡтан.*

*Конечно, кешегә кәңәш иткән саҡ та, кешенән кәңәш һораған саҡ та булырға мөмкин. Һәр бер кешенең үҙ фекере булырға тейеш. Бигерәк тә беҙҙең алда торған мәсьәләлә самостоятельный булырға кәрәк (аҫтына һыҙам).*

*Минең турала подробно һөйләмә, конечно. Ул һорар, әлбиттә. Шундай бер кеше, тиң дә ҡуй. Һәм әйт: Нәфисәләр (ялғыҙмы, кейәүе беләнме) Өфөгә ҡайтҡан саҡтарында беҙгә ҡунаҡҡа рәхим итһендәр, обязательно.*

*Мин бөгөнгә хатымды ошоноң белән тамамлайым. Оҙаҡламай тағы ла яҙырмын… Ауырыуың өсөн бик борсолам, Нәфисә. Миңә ифрат ҡыйын. Һәр ваҡыт һине уйлайым.*

*Һиңә иң һағынышлы, иң ҡәҙерле сәләмдәремде ебәреп ҡалам. Ысын күңелдән сәләмәтлек теләйем, имтихан биреүҙә уңыштар теләп ҡалам.*

*Һағынып, һинең Жәлил. Крепко целую Тебя, һөйөклө Нәфисәм. До скорого свидания.*

**16 май, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм Нәфисә!*

*Һинең 3 май яҙған хатыңды уҡып, биҙгәк менән ауырығаныңды ишеткәс, бик-бик борсолғайным. Һуңғы хатыңда һинең сәләмәтләнгәнлегеңде уҡығас, бик шатландым, Нәфисә. Ул хатыңды 5 май яҙғанһың. Мин һинән 11 май телеграмма алдым. Һин унда хатҡа яуап яҙмауҙың сәбәбен һорағанһың. Мин ул телеграммаңды алғас, аптырап ҡалдым. Аптырарлыҡ, сөнки хатты бик йыш яҙам, хатта һинең хатыңды ла көтөп тормайым, ултырам да яҙам. Барыбер етмәй микән әллә яҙған хаттарым тип тә уйлайым. Аптырағас, мәктәбегеҙгә адреслап ябай хат һалғайным, алғанһыңдыр. Бик аптырағас, мин доплатной хат һалырға әйткәйнем әле, етмәһә. Ерунда, конечно. Хаттар барырға тейеш, не может быть бармайынса!*

*Һинең телеграммаңды алғас, үҙем яуап телеграммаһын һуҡҡайным, алғанһыңдыр. Кисә сәләмдәреңде һорап бер телеграмма һуҡҡайным, алғанһыңдыр.*

*Но самое главное то, что һин сәләмәтләнгәнһең һәм мәктәпкә йөрөй алаһың! Был хатты 25 май тирәһендә алырһың, моғайын. Беренсе имтихандар нисек үтте, яҙырһың. Имтихан биреүҙә һиңә ысын күңелем менән уңыштар теләйем, Нәфисә!*

*Ошо арала һиңә хатты бик йыш яҙҙым. Бөгөн дә һинең хатыңды алғас уҡ хат яҙырға ултырҙым. Эштән ҡайтыуыма һинән хат килеп торған. Бер иптәш, театрға барайыҡ, тип килгәйне, сәбәп табып, барманым. Ул бер үҙе китте. Мин хат яҙырға булдым, ләкин хатымды бөгөн ебәрә алмайым, иртәгә һалырға тура килә, хәҙер почта ябылды.*

*Ярар, хат тураһында бик күп яҙып ташланым.*

*«Хатымды уҡый-уҡый ялҡып бөткәнһеңдер әле» тип шаярып яҙам, Нәфисә. Һин аны үҙең дә аңлайһың. Һинән килгән хатты уҡып ялҡырға мөмкинме һуң?! Мин һинең хатыңды өҙлөкһөҙ уҡып торорға ла риза. Хатты йыш яҙыуың өсөн бик-бик рәхмәт, Нәфисә. Ниндәй күңелле һәм шатлыҡ минең өсөн һинең хатты асып уҡыуы. Мин уларҙы ҙур шатлыҡ менән уҡыйым. Сөнки беләм: ул хат һинән! Һәм ул хатта һин яҙған һүҙҙәр! Миңә йыраҡ илдәрҙән шатлыҡ килтереүсе, сәләм килтереүсе һүҙҙәр ул хат эсендә! Ул хаттарҙы уҡыу шатлыҡ, ләкин («ләкин» әйткәс тә аптырап ҡалма, һин тағы, Нәфисә), ләкин әле ул иң ҙур шатлыҡ түгел, нисә әйтһәң дә. Оҙаҡламай, бер айҙан, шул хаттар артынан һин үҙең киләһең...*

*Шул ваҡытта инде минең өсөн ғүмеремдә иң ҙур шатлыҡ булырлыҡ бер шатлыҡ тыуыр. Күҙ алдыңа килтер, Нәфисә: юлға сығыуға бер ай самаһы ғына ваҡыт ҡалды. Хәтереңдәме, күптән түгел генә: «дүрт ай ваҡыт бар әле» тип яҙа инең.*

*Һағынам, Нәфисә, һине. Ләкин ҙур шатлыҡ менән һағынам. Һәм мин һиңә ҡайғырмаҫҡа, борсолмаҫҡа кәңәш бирәм. Не беспокойся и не расстраивайся. Все будет по-нашему (Алла бирһә, һин әйтмешләй)…*

*«Әйҙә, һорар һүҙеңдең барыһын да яҙ» тиһең. Мин барыһын да яҙам һәм һорайым һымаҡ. Билгеле, хатҡа бер ваҡытта ла барыһын да яҙып бөтөрөп булмаясаҡ, үҙең әйтмешләй.*

*Һинең иптәш ҡыҙың, Нәфисә, бик строгая, ахыры. Һиңә ҡаты ғына әйтә лә ҡуя икән. Бик дөрөҫ, көнө-төнө уҡырға, яҙырға ғына тигәнме ни, ял да итергә кәрәк. Ул беҙҙең мөнәсәбәтте белмәйме әле? Белмәһә, һиҙәләр әле, моғайын, нисек һиҙмәһен.*

*Ҡайтҡан саҡта «Сталинабад – Мәскәү» поезына ултыр, 7-енсе поезд, шикелле, номеры шулай хәтерҙә ҡалған. Уйлайым: әгәр 27 - 28 июндәрҙә ултырһаң, 5 - 6 июль көндәре ҡайтып етерһең, тип уйлайым. Ташкентҡа килеп еткәс,*

*телеграмма һуғырһың: фәлән числола, фәлән сәғәттә Кинелдә булам, тип. Мин инде Кинелдән килгән поездарҙы караууллап торормон. Һин 16-һы көнө поезға ултырырға тырыш пересадка булғанда, ул «Мәскәү – Силәбе» поезы. Йә иһә «Куйбышев – Өфө» поезына ултыр. Уға билет компоссировать иттереүе еңелерәк булыр. Вот, шулай. Ҡыҫҡаһы, үҙең ҡарарһың, тик мин кәңәш кенә бирәм, мин ул яҡҡа йөрөмәгәс, ул яҡтың юлын белмәйем, конечно.*

*Атайыңдың хәле һаман шул көйөмө әле? Рәйсә шәпме? Әхмәт һиңә ҡайһы яҡтан туған, кажется, атай яғынан, эйеме?*

*Китәр сағыңда Лотфыйҙың Каршиға ҡайтыуын көтәрһеңме, юҡмы? Мин, көтөргә кәрәктер, тип уйлайым.*

*Беҙҙең дә хәҙер эш күп – экзамендар, крәҫтиән һүҙе белән әйтһәң: «время страды». Быйыл беренсе выпуск, госэкзамендар, хәҙер шуға әҙерлек. Институтта зыҡ ҡубабыҙ, йыйылыш, ултырыш та кәңәшмә, шунан тағы йыйылыш.*

*Кистәрендә күп ваҡыт буш булам, киноға кергеләйем.*

*Көндәр насарланып китте ошо арала, ямғыр яуа. Ҡарҙар ирип бөттө. Ауылда һабанға төшкәндәр хәҙер. Һандуғастарҙың барыһы ла килеп бөткән. Кәкүк саҡыра. Иҙел ҡайтҡан хәҙер.*

*Салауат баҡсаһына Иҙелде икәүләп күрә барырбыҙ, һин ҡайтҡас. Һин анда барғаның юҡтыр әле. Ул Иҙел яры башында ғына, бәләкәй генә, бик йәмле баҡса, шыршы, ҡарағай һәм ҡайын араһы. Ул баҡса һиңә бик оҡшаясаҡ. Ул ҡаланың үҙәгенән йыраҡыраҡ, шуңа күрә унда кеше лә бик күп булмай.*

*Нәфисә, мин хатымды тамамлайым. Оҙаҡламай тағы яҙырмын. Хуш, һөйөклөм! Рәйсә һылыуға сәләм әйт.*

(Беҙ, бала-саға, ата-әсәбеҙгә эйәреп, Салауат Юлаев исемендәге баҡсаға йыш бара торғайныҡ. Ни өсөн тигәндә, 1959 йылға тиклем ошо баҡсанан алыҫ булмаған йортта көн күрҙек. Туҡай урамындағы 50-се йортто 1936 йылда Башҡортостан Диниә назаратынан тартып алып, шунда фатирҙар әтмәләнгәйне. Хәҙер был бина ҡабат мосолмандар ҡарамағына ҡайтарып бирелде. Салауат баҡсаһында атракцион-фәләндәр юҡ, әммә һыра, газлы һыу һатыла торғайны. Йәштәрын һәм йәйҙәрен унда кеше күп булыр ине. Баҡсаға инеү юлында күләгәле йүкәләр үҫә, артабан был аллея Туҡай урамына һуҙыла ла Благоев урамына борола. Ошо баҡсаның текә ярынан беҙ яҙҙарын күмәкләп боҙ китеүен, Ағиҙелдә һыу ташыуын күҙәтергә яраттыҡ. Май айында сәскәгә тумалған сирень еҫенә ләззәтләндек. Илленсе йылдар башында ошо ярҙан йылға аша күпер һалыныуын ҡарай торғайныҡ. 1956 йылдың йәйендә Салауат баҡсаһында сағыбыҙҙа шартлау шаңдауҙарын ишеттек: баҡтиһәң, Ағиҙел ярындағы Троицк сиркәүен емерәләр икән. Хәҙер был собор урынында - Дуҫлыҡ монументы. Собор бик матур ине. Ағиҙелдең аръяғында - пляж. Унда йәй көндәре ҡараңғы төшкәнсе бик күптәр ял итте. Ә киске эңерҙә сиркәү көмбәҙҙәренән алтынһыу нурҙар алыҫтарға һирпелә, Ырымбур трактынан Өфөгә яҡынлашҡан һәр юлаусы әлеге сиркәүҙең һары көмбәҙен йыраҡтан уҡ күҙенә элә торғайны. Троицк сиркәүен атайым да бик оҡшата ине, уны емергәстәр, ул бик хәсрәтләнде.)

**19 май, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклөм Жәлил!!!*

*7 майҙа яҙған хатың 16-һы көнө килгән булһа ла, мин аны 18 май алтым. Һуңлап алыуымтың сәбәбе: мин һиңә, кажется, яҙғайным, что беҙҙе мобилизуют на борьбу с вредной черепашкой. Ну вот, мин тә ул черепашкаға сыҡтым. Иртәнге сәғәт 6-ынан киске 6-ыға хәтле эшләнек. Почтаға барып булманы, поэтому я*

*свое обещание писать чаще на этот раз не выполнила. Но в этом я не виновата.*

*Далала эшләп йөрөп ҡап-ҡара бултыҡ. Ҡайһы берәү эҫе тейеп ауырыу булғандар. Мына тағы мәктәпкә уҡырға килдек. Мәктәпкә бараһы ла килмәй.*

*Дөрөҫ, Жәлил, мин һәр ваҡыт бер һине генә уйлап йөрөйөм. «Беҙ осрашырға тейешбеҙ» тиһең. Это верно, Жәлил. Мин һиңә бик күп һүҙҙәр яҙаһым бар ине, ләкин яҙмай торам. Лучше осрашҡас һөйләрмен.*

*Если бы Ты знал! Ну ладно, скоро встретимся (Алла бирһә).*

*Жәлил, минтә һиңә ышанмау фекере һис юҡ тиһәм тә була. Тәүләрәк күңелгә әллә ниндәй уйҙар килеп төшкән була торғайны, ләкин хәҙер алар юҡ. Мин һиңә вполне ышанам. Мин вообще үҙем кешене алтай белмәгәс, кешенең һүҙенә тиҙ ышанам. Был хаҡта күп кенә һүҙҙәр яҙырға мөмкин ине, ләкин хәҙергә яҙып тормайым. Осрашҡас һөйләшербеҙ.*

*Жәлил, мин ағайым ҡайтҡанын көтөп тормайым. Уҡыуларҙы 20-ләрендә бөтөрәбеҙ, мин айҙың 25-ләрендә юлға сығам.*

*Нәфисәләр как-нибудь үҙҙәре без меня устраиваться итерләр. Скоро ағайым ҡайта, әтейем тә оҙаҡламай сыға шикелле. Беҙ аны кисә күрергә барҙык. Әгәр аны берәй ергә оҙатһалар, тиҙҙән күреп тә булмаҫ инте.*

*Значит, һинең миңә предложение яҙғаныңты атайың белә. Ты не отказывайся, я уверена, что он знает. Я ничего против не имею. Пусть знает…*

*«Һине иң беренсе тапҡыр Ҡаран баҙарынта күрҙем» тиһең. Мин нишләптер күрмәнем һине баҙарҙа.*

*Да, ваҡыт шул тиклем әҙ булты, что беҙ бер-беребеҙҙе оҙағыраҡ күрә алманыҡ. В этом виновата я. Мин билетты ҡабалан алтырҙым. За это я ругаю себя и сильно раскаиваюсь. Ну ничего, скоро встретимся и наглядимся досыта друг на друга. «Ысын мөхәббәт тышҡы матурлыҡта түгел, ысын мөхәббәт – йөрәктә» тиһең. Это очень хорошо сказано.*

*Хатты ошоноң белән тамамлайым хәҙергә, яҙаһы һүҙҙәр бар инте, ярар, ҡалып торһондар.*

*Бик эҫе. Был эҫе кешегә инертность придает. Ничего не хочется делать. Пошла бы куда-нибудь в лес, к реке…*

*Да, между прочим, рәсемгә төштөк. Карточки будут готовы только к 1 июня. Пришлю Тебе. Ул рәсемдәр үҙемдән бер 20 көндән элек барып торорлар.*

*Через два дня экзамены. Сдавать итеп буламы, юҡмы инде. Әгәр бирә алмаһам, не знаю что и делать. Тогда лучше не жить на свете. Это позор. Постараюсь, конечно, сдать.*

*Жәлил, һин мине ғәфү ит, күп яҙып тора алмайым. Оҙаҡламай тағы яҙырмын…*

*P.S. Мәктәпкә китәм. Бөгөн сәғәт 11-ҙә барырға кәрәк. Консультация була математиканан. За мной зашла подруга. Сейчас соберу книги и пойду в школу.*

**21 май, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклөм Жәлил!*

*11 майҙа яҙған хатыңды алтым. Рәхмәт хатты йыш яҙып тороуыңа. Мине ғәфу ит, мин бик йыш яҙа алмай башланым был арала.*

*Йыш яҙалмауымдың сәбәбе бар… В последнее время у меня такое настроение, что не знаю, что и сказать. Это плохое настроение связано с семейными обстоятельствами. Плохое настроение, расстройство нервов – все это влияет и на учебу.*

*Я очень сожалею, что еще тогда, когда Ты предлогал мне приехать к Тебе, я не поехала. Если бы я тогда поехала, пожалуй, было бы лучше.*

*Беҙҙең уҡыуҙар 1 июль бөтә икән. Экзамендар 25 майҙа башлана. Уға тиклем черепашкаға йөрөйбөҙ. Экзамендар ваҡытында ла йөрөйбөҙ икән. Черепашкаға сәғәт иртәнге 6-нан 9-ға тиклем барабыҙ. Ә иртәнге сәғәт 10-да мәктәпкә экзамен сдавать итергә киләбеҙ икән.*

*Вместо того, чтобы перед экзаменами дать нам отдохнуть, нас еще заставляют работать.*

*Шулайтып, беҙҙең осрашыу көнө һаман һуҙыла.*

*Жәлил, һин әҙерәк яңылышаһың в отношении того, что я Тебе «немного не верю». Әгәр мин һиңә ышанмаған булһам, беҙҙең отношениялар не дошли бы до такого предела. Некоторое недоверие, признаться, когда-то было. Но сейчас этого нет. Я Тебе верю во всем и очень ценю твое доверие ко мне, оно мне дороже всего на свете, я постараюсь его оправдать.*

*Я еще раз скажу Тебе: Жәлил, я люблю Тебя и жить без Тебя не могу. Эх, Жәлил, әгәр һин минең янымта булһаң икән, мин һиңә барыһын да, барыһын да һөйләп бирер инем. Ну ничего, скоро встретимся и я постараюсь все объяснить Тебе…*

*Хәҙер сәғәт төнгө 2. Беҙҙекеләр йоҡлай. Минем тә әҙерәк йоҡо килә. Бөгөн әҙерәк арытты. Күп йөрөргә тура килте. Мәктәптән тә бик һуң ҡайттым.*

*Тәҙрәләр, ишектәр асыҡ. Легкий ветерок тушит лампу. Всюду тихо. Город спит. Эта тишь навевает какую-то грусть и страх. Хочется уйти куда-нибудь подальше отсюда. Это чувство в письме объяснить невозможно. И вообще, хатҡа яҙып ҡына һүҙҙәрҙе бөтөрөп булмай барыбер…*

*Беҙҙә бөгөн «Богдан Хмельницкий» тигән картина бара. Ҡыҙҙар барайыҡ тип килгәйне, мин барманым. Барғым килмәй. Күңел тә төшмәй, өйҙә лә неспокойно.*

*Оҙаҡламай беҙҙең рәсемдәр әҙер була. Все пришлю Тебе.*

*Өфөлә йәй була башланы, тиһең. Бик күңелле ваҡыт инте һеҙҙә. Ә мынта эҫенән ҡасып ҡайҙа барырға белмәйһең. Үләннәр, үҫемлектәр кибеп бөттө. Урамнарҙа саң, туҙан.*

*Поспели первые фрукты. Уже едим свежие огурцы.*

*Ну, етеп торор хәҙергә. Завтра вечером еще напишу.*

**21 май, 1941 йыл, Өфө**

*12 май яҙған хатыңды алып икһеҙ-сикһеҙ шатландым, Нәфисә. Йөрәгемә лә һыймай ул шатлыҡ. Телеграммаңды алғас, бик борсолоп йөрөй инем, ауырыуың өсөн бигерәк тә ныҡ борсола инем. Һуңғы 10 көн эсендә бер нисә хат һалдым, алғанһыңдыр тип ышанам. Һинән дә хат йыш килеп тора. Ваҡыт табып яҙыуың өсөн бик ҙур рәхмәт үҙеңә.*

*Һиңә хат яҙыу өсөн ҡасан булһа ла, ниндәй генә шарттарҙа булһа ла мин әҙер. Хат яҙыу минең өсөн бер шатлыҡ, Нәфисә. Был турала элекке хаттарымда ла яҙғайным. Бына был хатымды ла мин шул тиклем ҙур бер шатлыҡ белән яҙып ултырам. Хат яҙыу ваҡыты ла әҙәйеп бара түгелме әле беҙҙең, был хатты алғас, бер айҙан да әҙ ваҡыт ҡала. Беҙҙең осрашыу көнө яҡынайғандан-яҡыная, мин шул тиклем шатмын, Нәфисә, әгәр белһәң һин!*

*Нәфисә, «төрлө-төрлө кәрәкмәгән уйҙар килеп төшкән була» тиһең. Андай уйҙарға бирешмә, һис бер ваҡытта ла. Мин ул уйҙарҙы алдан уҡ белеп торам, килгәс һөйләрмен үҙеңә.*

*Ә төшкә, төш юрауға ышанырға ярамай, сөнки күп уйлау арҡаһында төш бутала, уйҙар буталып төшкә инә. Бер юҡтан ҡарағанда, төрлө кәрәкмәгән уйҙар килеүгә һиндә нигеҙ ҙә бар. Үҙең уйлап ҡара: беҙ бит икәү бергә 40 минут булдыҡ, шул ваҡыт эсендә мин һине ысын йөрәгем белән яраттым. Ләкин ваҡыт әҙ булды (ярай әле, миндә смелость булған, юҡһа үкенестә ҡалыр ине). Аҙаҡтан*

*шул 40 минут эсендә һин дә яратҡанлығың асыҡланды (айырылған саҡта «төшөнмәйем» тип әйтһәң дә). Хәҙер бөтөнләй бүтән хәл – бик әҙ ваҡыт бергә булыуға ҡарамаҫтан, хәҙер беҙ бер-беребеҙҙе бер туғандар һымаҡ яҡын күрәбеҙ һәм яратабыҙ. Һәм, бер туғандар һымаҡ уҡ булырбыҙ, тип ышанам, сөнки башҡаса мөмкин түгел.*

*Нәфисә, беләһеңме, мин Рәйсә өсөн беспокоиться итәм. Һин аны ҡалдырып китергә итәһең, яҡшы түгел. Ул һинһеҙ анда нисек йәшәр һуң? Әгәр һин аны алып ҡайтһаң, ничего неприличного не будет. Напрасно андай фекерҙәһең. Ярай ҙа ҡалдырып киткән кеше ышаныслы кеше булһа. Бер Лотфый аның белән була алмай бит һәр ваҡыт. Әгәр һин аны алып ҡайтһаң, икебеҙ ҙә тыныс булыр инек, минеңсә.*

*«Уҡыуҙар 15 июндә бөтә» тигәнһең. Бик яҡшы. Ни тиклем тиҙ бөтһә, шул тиклем яҡшы. Улай булғас, 20 июндәрҙә һеҙҙә выпуск була һәм аттестат алырһығыҙ. Июлдәрҙә килеп етә алыуың ихтимал…*

*Мин бик шатмын. Хәҙер һинең ҡайтыуҙы һәйбәт кенә итеп ойошторорға кәрәк, юл уңышлы булһын.*

*Иң ҡурҡҡаным – һинең сәләмәтлегең. Юлда ауырып китмәһәң ярар ине, тип ҡотом-йәнем оса. Биҙгәк килһә, һуғыла торған ул уйламаған ерҙән.*

*Был хатты алғас, һиңә ҡасан юлға сығыуың билгеле буласаҡ. Экзамендар бөткәс, йыйыныу, арлы-бирле итеүҙе иҫәпкә алып, ҡасандары сыға алыуың хаҡында яҙырһың.*

*Иптәштәр, таныштар, дуҫтарға килгәндә, һиңә бер мәҡәл яҙһам, барыһын да комментарийһыҙ аңларһың: «Аттың алаһы ла, ҡолаһы ла була» тиҙәр ҡарттар. Быны бер үк дәрәжәлә «беҙҙең братҡа» ҡарата ла «һеҙҙең сестраға» ҡарата ла ҡулланырға мөмкин.*

*Донъяла яҡшы, бик дөрөҫ йөрөгән сәғәтте эҙләп табыуы нисек ҡыйын булһа, 100 процент яҡшы кешене лә табыу ҡыйындыр, тип уйлайым. Сәғәттең дә, кешенең дә эсенә инеп ҡарап булмай (был миҫал уңышһыҙыраҡ булды, ахыры).*

*Минең таныштар араһында ла Дон Жуандар ҙа, Робинзондар ҙа бар. Дуҫтар араһында ла төрлөһө бар. Үҙең әйтмешләй, бөтә кеше лә бер төрлө булһа, күңелһеҙ булыр ине, ҡыҙығы булмаҫ ине. Ҡайтҡас, беренсе сиратта дуҫтар белән таныштырам үҙеңде.*

*Өфөлә һаман һәйбәт көндәр булғаны юҡ әле. Бер-ике көн аяҙытып тора ла, ямғыр яуып ебәрә, көндәр бер йылына, бер һыуый. Ағастар япраҡ ярырға яңы әҙерләнә. Ямғыр яуып торғас, Иҙел бик әкерен ҡайта. Иҙел шул тиклем ташҡан, хатта пароходтар Иҙелдең элекке руслоһынан урап йөрөмәй, туранантура ағас араларынан һуҡтыра. Иҙел арғяғындағы телеграф бағаналарының стакандары ғына күренеп ултыра.*

*«Иҙел ташыу» тип кинохроника журналына төшөрөп алғандар, аны киноларҙа картина башланыр алдынан күрһәткән булып ҡый-ғәләмәт кимәләр, ҡыҙыҡ ҡына.*

*Өфөгә Мәскәүҙән төрлө артистар, скрипкасы лауреаттар гастролгә килгәндәр. СССР-ҙың Дәүләт хоры бында. Йәй етһә, алар бик күп була. Шуныһы һәйбәт, сөнки Өфөнөң тәбиғи шарттары үҙенә тарта: һыу, урман, тирә-яҡтары һәйбәт, санаторий, ҡымыҙҙары – барыһы ла бигерәк тә артист халҡын ҡыҙыҡтыра. Артистар, ғәҙәттә, экзотиканы эҙләйҙәр бит, йәй булһа, улар Ҡырымға, Кавказға, Уралға китәләр.*

*Нәфисә, мин күптән бирле нәмә уйлап йөрөй инем, шуны һаман яҙайым-яҙайым тип яҙа алмайым. Хәҙер яҙмаҡсы булдым, сөнки аны кәнте яҙыу ваҡыт тип уйлайым үҙемсә. Үтенәм: һин, беренсенән, не обижайся һәм не стесняйся. Һин мине тыңла как старшего товарища. В этом ничего особенного нет, это в*

*порядке вещей. Конкретно: мин һиңә юллыҡ аҡса ебәрәм – билет һәм башҡа ваҡтөйәк расходтар өсөн. Билет алырлыҡ хәле юҡтыр бының, тип уйлай икән был, тип хәтерең ҡалмаһын тағы. Мәсьәлә анда түгел. Мин һис бер ваҡытта ла андай фекерҙә түгелмен, башыма ла килтергәнем юҡ. Һин шуны онотма: һин в первую очередь алыҫ илдәрҙән миңә иң ҡәҙерле ҡунаҡ булып киләһең («Ҡунаҡ хужаның ишәге» ти, кажется, үзбәк).*

*Нәфисә, һин һис тартынма, оялма, иғтибар итмә. Сөнки ул шулай булырға тейеш. Был мәсьәлә дискуссии не подлежит. Сөнки хәҙер яуаплы ваҡыт – осрашыу – яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Ә шундай яуаплы, хәл иткес ваҡытта приличный кешеләр дискуссировать итмәйҙәр, ғәҙәттә. Вот и все.*

*Был хатты кисә кис яҙырға башлағайным, бер иптәшем килеп бүлендем, яҙып бөтә алманым. Ул, между прочим, һин йөрөгән яҡта, Чарджоу, Бохара тирәләрендә, ике йыл эшләгән. Ул тирәне яҡшы белә. Хәҙер Өфөлә бер балалар йорто директоры булып эшләй, иптәше беҙҙең институтта уҡый. Шуның белән кис буйы әкиәт һатып ултырҙыҡ.*

*Мин хатымды ошоноң белән тамамламаҡсы булдым. Рәсемеңде һаман көтәм әле. Мин шул рәсем белән һинең тәҡәтеңде алдым, ахыры. Күп мәшәҡәттәр яһаным, мине ғәфү итерһең.*

(31 мартта яҙған хатында атайым буласаҡ әсәйемдән аҡсаға мохтажлығы бармы, юҡмы икәнлеген белешә. Сөнки ул аңлай: бәләкәс һеңлеһен ҡараусы мәктәп уҡыусыһының йәшәүгә сығымдары булмаһа, бигерәк тә атаһы төрмәлә ултырған саҡта, тормошон ифрат ҡатмарландыра. Атайыбыҙ быны яҡшы аңлаған, сөнки бөтә уҡыу йылдарында уның үҙенә бер кем дә ярҙам итмәй. Атаһы Ғиниәт уны ҡустыһы менән үҙенә аҡса бирһендәр тип тәрбиәләй, ә бит олатай бер ҡасан да аҡсаға мохтажлыҡ кисермәгән. Ғүмере буйы үҙенең умартаһынан һәм солоҡтарынан бал йыйып сауҙа итә. Атайымдың әнеһе Ғәфүр үҙенең һәләк булырынан алда ғына хатта фронттан Ғиниәт олатайға 650 һум аҡса һала, был хаҡта уның һуңғы хатынан белергә мөмкин. Иҫке замандар ҡайтыр әле һәм иҫке аҡсалар берәй нисек кәрәгер тип, Ғиниәт олатай бөтә аҡса реформаларынан һуң күп аҡсаһын үҙенә ҡалдыра һәм йәшереп ҡуя. 1961 йылғы аҡса реформаһынан һуң байтаҡ ваҡыт уҙғас, атайыбыҙ Ғиниәт олатайҙы, ниндәй генә замандар тыумаһын, иҫке аҡсаларҙың бер кемгә лә хәжәте юҡ, тип көскә ышандыра. Шунан һуң ғына олатай атайыма бер тоҡ революцияға тиклемге ҡағыҙ аҡсалар — «керенка»лар, тағы әллә ниндәй ҡағыҙ аҡсалар, йәнә 1961 йылға тиклем әйләнештә булған, Ленин һүрәте төшөрөлгән 100 тәңкәлек купюралар төргәген бирә.

Мәскәүҙә уҡыған йылдарында атайым да атаһына үҙе П. И. Чайковский исемендәге дәүләт консерваторияһы эргәһендәге башҡорт студияһында башҡорт телен уҡытып һәм тәржемәләр менән шөғөлләнеп эшләп алған аҡсаларын ебәреп тора. Был осорҙа әлеге студияла буласаҡ композитор Х. Әхмәтов, йырсылар Ғ. Хәбибуллин, М. Хисмәтуллин һ.б. уҡып йөрөй. Башҡорт дәүләт опера театры музейында уҡытыусы Ж. Кейекбаев менән бергә төшкән студия уҡыусыларының фотографияһы бар.

Әсәйебеҙ иһә ул саҡта үҙенең уҡыу менән генә түгел, бәлки, ниндәйҙер учреждениела курьер булып эшләүе хаҡында әйтмәй.)

**Хаттарҙы һәм комментарийҙарҙы**
**Зөһрә Кейекбаева әҙерләне.**

# Дуҫлыҡ күперҙәре

*Танылған ҡаҙаҡ шағиры Ҡасим Аманжолов 1911 йылда Ҡаҙағстандың Ҡарағанда өлкәһе Ҡарҡаралы районы Ҡыҙылларай ауылында донъяға килә. Бала сағында етем ҡала һәм интернатта тәрбиәләнә. Ветеринария техникумын тамамлағандан һуң, 1932 йылда, "Ленинсыл жас" ("Йәш ленинсы") гәзите редакцияһында эшләй башлай.*

*Тәүге шиғырҙарын егерме йәшендә баҫтырған Ҡасим Аманжоловтың беренсе шиғри йыйынтығы 1938 йылда нәшер ителә. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Һуғыштан һуң "Әдебиет және өнер" ("Әҙәбиәт һәм сәнғәт") журналы редакцияһында бүлек мөдире булып эшләй. 1948 йылда "Дауыл" исемле икенсе китабы сыға.*

*Рус теленән Александр Пушкиндың "Полтава", Юрий Лермонтовтың "Маскарад", Александр Твардовскийҙың "Василий Теркин" кеүек әҫәрҙәрен ҡаҙаҡсаға бик уңышлы тәржемә итә.*

*Шағир төрлө жанр һәм темаларҙа шиғыр, поэма һәм пьесалар ижад иткән. Ҡайһы бер әҫәрҙәре сәсәнлек традицияларына эйәреп яҙылған. Уларҙа башҡорт шиғырына һәм халыҡ ижадына яҡынлыҡ күҙәтелә. Мәҫәлән, Ҡасим Аманжолов фронтҡа киткәндә Урал ҡалаһы аша үтә. Бында яҙылған "Урал" шиғырындағы һүҙҙәр башҡорт фольклорындағы Урал тауын маҡтап әйткәнгә оҡшаш:*

Уралым, сыҡтың алдымдан,
Уралым минең, Уралым,
Ҡул һуҙып ҡыҙыл вагондан,
Өҫтөңдән үтеп барамын...

*Туған халҡының әҙәби мираҫын яҡшы белеүе, оҫта ҡулланыуы арҡаһында ул аҡын, сәсән булараҡ та шөһрәт яулай. Сәсәндең ҡыҫҡа шиғырҙары, тапҡыр һүҙле дүрт юллыҡтары ла байтаҡ.*

Уларҙың береһендә:

"Үлем" тигән әрһеҙ һүҙ,
Ҡайҙан миңә осраның,
Үлем — яуым, ғүмер — дуҫ,
Ник үләйем буштан-буш,

*— тип әйткән һәм XX быуат ҡаҙаҡ әҙәбиәтенә тос өлөш индергән Ҡасим Аманжолов, оҙаҡ ҡына ауырығандан һуң, 1955 йылда вафат була.*

*Уның тыуыуына быйыл 100 йыл.*

## Ҡасим АМАНЖОЛОВ

### *Һайра, һайра, һандуғасым*

*(Йырсы ҡыҙға)*

*Һайра, һайра, һандуғасым,*
*Йыр түгелһен телеңдән,*
*Таң ҡоштары көй тыңлаһын*
*Һинең шатлыҡ өйөңдән.*

*Һайра, һайра, һандуғасым,*
*Бәхет таңы атҡанда,*
*Ултырған емеш ағасың*
*Нур мәрйенен таҡҡанда.*

*Һайра, һайра, һандуғасым,*
*Бәхет ҡошо йырлаһын,*
*Күлдә аҡҡош, күктә ыласын*
*Шатлыҡ йырын тыңлаһын.*

*Һайра, һайра, һандуғасым,*
*Яңғыраһын бейек тау,*
*Ҡалын урман еҫен бөркһөн,*
*Бирһен гөлдәр баҡса-бау.*

*Һайра, һайра, һандуғасым,*
*Сулпы таҡһын көмөш һыу,*
*Һылап-һыйпап ҡалын сәсен,*
*Ебәк япһын киң баҫыу.*

*Һайра, һайра, һандуғасым,*
*Иҙрәп китһен алтын көн,*
*Ай менән йондоҙ йылтырап,*
*Тетрәп китһен һалҡын төн.*

*Һайра, һайра, һандуғасым,*
*Һайрауыңды ил тыңлаһын,*
*Сит йорттағы бауырҙашың*
*Ҡулъяулығын болғаһын.*

*Һайра, һайра, һандуғасым,*
*Сихри моңоң тыңлайым,*
*Һандуғасым — йәш серҙәшем,*
*Һин һайра, мин — йырлайым.*

*Һин һайрайһың һуҙҙырып,*
*Моңланаһың өҙҙөрөп,*
*Мин йырлайым яңғыратып,*
*Һүҙ мәрйендәрен теҙеп.*

*Йән һыуһыны — йылы һүҙ,*
*Йән аҙығы — моңло йыр,*
*Шатланһын халҡым, тибеҙ,*
*Онотолһон иҫке һүҙ.*

**1936 йыл.**

## Әзербайжан ҡыҙына

*Атың Сәнә, күҙең ҡара, гүзәл ҡыҙ,*
*Йыр яҙҙырҙың йөрәгемдән әмәлһеҙ.*
*Мин китермен, альбом асып ҡарарһың,*
*Сәсән ҡаҙаҡ ағайыңды иҫләрһеҙ.*
*Тәбриз-Баҡы асманында күп Сәнә,*
*Көмөш Каспий яр буйында гөл Сәнә.*
*Йөрәгемде йөрәгеңдәй бер һана.*
*Әйтер һүҙ күп, әйтә (а)лманым — бел, Сәнә.*

**1947 йыл.**

***

*Думбырамда бер көй бар сиртелмәгән,*
*Күңелемдә бер сер бар әйтелмәгән;*
*Көйөмдө лә, серемде лә һыйлар инем,*
*Йәнем һөйгән йәр булһаң янып торған.*
*Илһам тапмай йәш шоңҡар саңҡылдармы,*
*Шул шәкелдә минең дә күңелемдең*
*Нур шәүләһе, илһамы һөйгән йәрҙә.*
*Ғүмер — өлкә булғанда, мин бер яҡтың,*
*Алтын нуры түгелгән көн менән айҙың,*
*Аҡкоштоң аҡкүлгә ҡунған көндә*
*Булыр микән ҡомарланған балаҡайың!*
*Шунда көйҙөң ҡылына баҫыр инем,*
*Һаклап килгән серемде асыр инем,*
*Һөйгән йәнем, яҡын дуҫым, йәш йәнемдең*
*Яндарында мәңге бергә йәшәр инем.*

**Алматы,1938 йыл.**

***

*Ҡаҙаҡтың йыры һәм өләңен*
*Байраҡтай күтәреп киләм;*
*Көнсығыш аласа асманын*
*Төндөктәй алып ташланым.*

## Айһылыу

*Ишегең алды ағын һыу,*
*Иртә тор ҙа, Айһылыу,*
*Ағын һыуҙа битең йыу, —*
*Таңғы йоҡоң һирпелер.*

*Ҡупшы билең бик һылыу,*
*Алдың иген, киң баҫыу,*
*Эшкә яраған һылыу,*
*Тауҙай йәнең елпенер.*

*Ай, Айһылыу, Айһылыу,*
*Һинән артыҡ ҡай һылыу?*
*Ҡыҙҙар тыуһын бик сибәр!*
*Тип бағынды ел, тиҙәр.*

**1949 йыл.**

## Алматы

*Килдем һине һағынып,*
*Алтын оям — Алматым,*
*Киң урамда баҫам ныҡ*
*Мин — бер сәсән һалдатың.*

*Ут һәм тимер талашҡан*
*Килдем майҙан түренән;*
*Ер ҡушам тип көр ҡушҡан*
*Яуҙы еңеп килдем мин.*

*Һағынышын һалдаттың*
*Һин һорама, мин әйтәм:*
*Китте сығып бер оҫҡон*
*Күкрәгемдән, йөрәктән.*

*Көлкө-йәшем аралаш,*
*Сәсән дә бит йәш бала;*
*Йыуан үҙең, тыныслан,*
*Алтын бишек — Астана.*

*Йөрөйөм юртып, ҡыҙып,*
*Баҫмаған урам ҡуймай;*
*Шыбырлаша япраҡ;*
*Ташы ла ялт-йолт ҡарай.*

*Ниндәй матур ғүмер, тип*
*Ҡарай бирәм өңөлөп.*
*Яҡшы ниәте менән*
*Киләсәк килә көлөп.*

## Мәктәп – кәмә, белем – диңгеҙ

*Мәктәп — кәмә,*
*Белем — диңгеҙ,*
*Барыр ергә*
*Тиҙ етәбеҙ!*
*Аҙашмайбыҙ*
*Оло юлда,*
*Илемдең*
*Тыуы ҡулда!*
*Капитандар —*
*Мөғәллимдәр,*

*Йәш моряктар —*
*Йәш сабыйҙар,*
*Ҡотло булһын сәфәрҙәрең,*
*Мыҡты булһын ҡатарларың!*
*Туғандарым,*
*Туғандарым*
*Тороп сафта,*
*тәртип һаҡла!*

*Тирбәлегеҙ тулҡындарҙа,*
*Кәмә бөйөк, ҡурҡыу бармы?*
*Күк диңгеҙҙән көлмәй үтеп,*
*Аҡтарығыҙ ғүмер киңен,*
*Хазинаһын бәрәкәнең,*
*Ҡыҙыл тулы илең өсөн,*
*Ҡыҙыҡ дәүер, ғүмер өсөн*
*Ҡыҙһын һинең күкрәк көсөң,*
*Мәктәп — кәмә, белем — диңгеҙ,*
*Тынмай алға йүгерәбеҙ,*
*Беҙ етмәгән ҡырый ҙа юҡ!*
*Һөнәр, белем диңгеҙендә,*
*Аҙашмайым оло юлда,*
*Илемдең тыуы ҡулда!*

**1948 йыл.**

## Әллә...

*Әллә минең мөхәббәтем хәрәмме?*
*Әллә күң(е)лем һин тигәндә һаранмы?*
*Әллә минең кешелек кәм*
*Дуҫ булыуға һеҙҙең кеүек әҙәмгә?*

*Әллә һинән башҡа йәрҙе һөйҙөммө?*
*Һинән урлап йөрәктә сер йыйҙыммы?*
*Әллә мөмкин, дошман һүҙен күп күреп,*
*Сабырһыҙҙан юҡ нәмәгә көйҙөңмө?*

*Әллә, бәлки, тотолдомо алтын көн,*
*Ай ҡарайып, баҫтымы ҡап-ҡара төн?*
*Әллә, бәлки, ташып яткан дарьяға*
*Көйөк төшөп, ҡапланымы күк төтөн?*

**Урал, 1935 йыл.**

**Ҡаҙаҡсанан Әхәт СӘЛИХОВ**
**тәржемәләре.**

# *Рухи тамырҙарыбыҙ*

## БЕЛЕМ ҺАНДЫҒЫ

*(Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге*
*Милли китапхананың нигеҙләнеүенә 175 йыл тулыу айҡанлы)*

Китап, китапхана... Ниндәй ҙур мәғәнәгә эйә был һүҙҙәр!

*«Ап-асыҡ тор һәр ваҡытта, эй, китап, баҡһам һиңә,*
*Ысын, асыл нигеҙле ерҙән куп белемдәр бир миңә!»*



*Һүрәттә: Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана.*

— тип яҙған Шәйехзада Бабич «Эй, китап!» тигән шиғырында. Ә китапханасылар — олатайҙарҙың быуаттар төпкөлөнән ҡағыҙҙарға, туҙҙарға, китаптарға яҙып ҡалдырған мираҫын, уй-фекерҙәрен, тарихын, васыяттарын, шағирҙарҙың, яҙыусыларҙың йөрәктәренән сыҡҡан һүҙҙәрен халыҡҡа еткереүселәр, һаҡлаусылар, таратыусылар. Бына нимә ул китапхана.

«Китапханалар — кешелектең хәтер һандығы, — тигән Д. Лихачёв. — Мәҙәниәттә уларҙың өлөшө бик ҙур... Китапхана йәшәй икән, халыҡ та йәшәй тигән һүҙ, китапхана ябыла икән, халыҡ та юғала, сөнки унын үткәне лә, киләсәге лә юҡҡа сығасаҡ». Хорезмда, Бохарала III быуатта уҡ китапханалар булғаны, Әбүғәлисинаның (980 — 1037йй.) Бохаралағы батша һарайы китапханаһында бик оҙаҡ ғилми китаптар уҡыуы билдәле. Тимәк, төрки халыҡтарҙа китапханалар борон-борон замандарҙа уҡ булған.

Башҡорт халҡында ла китапҡа ихтирам ҙур. Яҙма китаптар, туҙға яҙылған мәғлүмәттәр, тирегә уйылған шәжәрәләр дин әһелдәрендә, бик абруйлы ырыу башлыҡтарында һаҡланған, һәм был баһалап бөткөһөҙ яҙмаларҙы, китаптарҙы уҡыу мөмкинлеге ихтирамлы аҡһаҡалдарға ғына бирелгән.

Башҡортостанда тәүге китаптарҙың барлыҡҡа килеүе, әлбиттә, ислам диненең таралыуына бәйләнгән. Мосолман миссионерҙары Ғәрәбстандан, Персиянан, Болгариянан, Урта Азиянан үҙҙәре менән ғәрәп графикаһындағы ҡулъяҙма дини әҙәбиәт килтерә. Ислам диненә тиклемге китап өлгөләре башҡорт тамғалары һәм таштарға ырып яҙылған «балбал» таштар ғына беҙҙең заманғаса һаҡланған, ә уйғыр алфавиты менән яҙылған китаптар һаҡланмаған. XVI быуаттан башлап көнсығыш ислам мәктәптәренә оҡшаш тәрбиәүи уҡыу

йорттары үҫешә башлай. Урындағы мәсеттәр эргәһендә мәктәптәр һәм мәҙрәсәләр асыла. Уҡымышлы башҡорттар араһынан абыҙҙар уҡытыу-тәрбиә эштәре менән шөғөлләнә. XVIII быуаттың аҙағына Ырымбур губернаһында уларҙың иҫәбе йөҙҙән ашып китә. Иң ҙур һәм алдынғы белем усаҡтары булып Стәрлебаш, Ҡарғалы мәҙрәсәләре тора. 1865 йылға Көньяҡ Уралда 600-ҙән ашыу мәҙрәсә һәм мәктәп иҫәпләнгән, уларҙа 20 меңдән ашыу уҡыусы булған. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: М. Биксурин, М. Аҡмулла, Ғ. Соҡорой, Р. Фәхретдинов, М. Ғафури, Ш. Бабич, К. Иҙелғужин, А. Инан, Ә. Вәлиди кеүек дәүләт эшмәкәрҙәре, ғалимдар, дин әһелдәре, шағирҙар — барыһы ла мәҙрәсәлә белем алған, ә ҡайһы берҙәре шунда үҙҙәре лә уҡытҡан.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең «Хәтирәләр» китабында бына нимә тип яҙа: «1906 йылда атайым мәҙрәсәһенең бер мөйөшөндә, «халыҡ китапханаһы» тип атап, китапхана асты. Уға китап алыу өсөн аҡса йыйҙым. Газеталарҙың килтерелеүен тәьмин иттем. Бәғзе газеталар уларға хәбәрҙәр ебәреүем арҡаһында буш килә ине. Мәҫәлән, Петербургта сыҡҡан «Өлфәт» һәм ғәрәпсә «Әт-Тәлмиз», Ҡазандан «Баян ул-хаҡ» һәм «Йолдыз», Ырымбурҙан «Ваҡыт», Әстрәхандан «Иҙел», Баҡынан «Иршад» газетаһы менән «Фәүзат» журналы килә ине. Ҡырымдан «Тәржеман» газетаһын атайым электән алдырып килде. Шулай уҡ русса «Биржевые ведомости» газетаһы һәм «Нива» журналы килде. Ҡазанда баҫылған барлыҡ ҡаҙаҡса китап һәм брошюраларҙы алдырҙым... Китапханабыҙға китап килтереү өсөн Орскиҙағы «Шәреҡ» һәм Ташкенттағы «Средняя Азия» исемдәге китап лавкалары менән бәйләнеш урынлаштырҙым...»

XIX быуат башында Ҡазанда ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән «Азиат типографияһы»ның асылыуы ҡулъяҙма китаптарға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы һис тә кәметмәй. Борайҙа 1907 йылдың 6 февралендә булған фажиғә хаҡында полиция яҙмалары һаҡланған: «Стражник Першин баҙар буйлап йөрөгәндә, алдына бер нисә дини мосолман китабын һатыуға теҙеп һалған башҡортто күреп, һис нәмә аңламаған көйө, китаптарҙы тотоп ҡараған була һәм йыртып ҡарға ырғыта. Башҡортҡа бынан тайырға ҡуша. Дини китапҡа ҡарата шундай мөғәмәләне күргән башҡорттарҙың асыуы ҡабара, һәм Першин башҡа полицейскийҙәр менән бынан ҡасырға мәжбүр була...»

Хөкүмәт әһелдәренең башҡорт китабына ҡарашы совет власы урынлаштырылғандан һуң да әллә ни үҙгәрмәй. Мәҙәни революция ваҡытында әллә күпме ҡиммәтле, баһалап бөткөһөҙ китаптар йыртылып, яндырылып, сүплеккә ырғытыла. Уҡый-яҙа белмәгәндәр ғәрәп, фарсы телендә яҙылған китаптарҙың барыһын да Ҡөрьән китабы тип баһалай һәм уларҙы юҡҡа сығара. Аҙаҡ «Башҡорт, татар халыҡтарына алфавитты революция килтерҙе» тигән ялған мәғлүмәттәр таратыла.

Рәсәйҙә тәүге китапханалар XI быуатта Ярослав Мудрый заманында барлыҡҡа килә. 1586 йылда Өфө ҡала статусы ала һәм башҡорт ерҙәренең башында воевода торған административ үҙәккә әйләнә. XVI быуатта бында Мәскәүҙән баҫма китаптар килтерелә башлай. Урыҫ әҙәбиәте классигы Сергей Тимофеевич Аксаков заманында, шәхси китапханаларҙан тыш, ҡала кимәлендәге китапхана булмай. Бөйөк яҡташыбыҙ «Багров ейәненең бала сағы» тигән китабында бына нимәләр яҙа: «Беҙҙең өйгә ҡаршы йортта, өлкән йәштә булһа ла, буйҙаҡ бай С.И. Аничков йәшәй ине. Уны, бик аҡыллы һәм хатта ғалим, тип тә һөйләйҙәр... Ул ата-әсәмдән минең китапҡа ҡарата бик ихтирамлы булыуым һәм уҡыу менән ҡыҙыҡһыныуым, тик уҡырға китаптарҙың аҙлығы хаҡында ишетеп ҡала. Аничков минең ниндәй китаптар уҡыуымды һорашып, бик ҡәнәғәт була һәм миңә китаптар бәйләме бүләк итә... О, бәхет!!!»

1830 йылда Ирекле иҡтисади йәмғиәт президенты, билдәле экономист адмирал Мордвинов эске эштәр министрына ебәргән хатында ҙур губерна үҙәктәрендә китапханалар булдырыу ихтыяжы тураһында яҙа. Был фекер хөкүмәт тарафынан хуплана, тик уның өсөн ҡаҙнанан бер тин дә бүленмәй. Сауҙагәрҙәр һәм дворяндарҙан аҡса йыйыу иҫәбенә генә асырға рөхсәт ителә. Урындағы етәкселәрҙең китапхана асырға теләктәре лә булмай. Губернатор былай тип яуап бирә: «Шул мәғлүм булһын: әле Өфөлә халыҡ йөрөп уҡырлыҡ китапхана булдырыу мөмкинлеге юҡ, аҡса етмәгәнлектән түгел, бында әле уҡыу менән шөғөлләнерлек кешеләр юҡ. Өфөлә йәшәүсе дворяндар һәм чиновниктар үҙ ваҡытын фәҡәт хеҙмәткә бағышлай, башҡа ҡатлам кешеләренә иһә китап уҡыу менән шөғөлләнеүҙең кәрәк булыу-булмауы әлегә бөтөнләй билгеһеҙ...» 1835 йылда ғына мәғариф министры С. С. Уваров Ырымбур генерал-губернаторы В. А. Перовскийҙан китапхана асылыу-асылмауы хаҡында мәғлүмәт һорай. Шул уҡ йылда ҡалала тәүге түләүле шәхси китапхана асыла. Һәр теләгән кеше, 6 — 10 һум түләп, китапты өйөндә уҡыу мөмкинлеге ала. Ниһайәт, 1836 йылдың 25 мартында халыҡ өсөн тәүге дәүләт китапханаһы ишектәрен аса. Ул Дворяндар йыйылышы бинаһында урынлаша.

Дәүләт китапханаһынан башҡа, 1868 йылда Өфөлә шәхси китапхана ла асыла (хәҙерге Ленин урамындағы «Знание» китап магазины). Уның хужаһы — китап менән һатыу итеүсе сауҙагәр Н.К. Блохин. XX быуат башында ҡала китапханалары ситтән килтерелгән баҫмалар менән генә түгел, Өфөнөң үҙендә эшләй башлаған алты нәшриәттә сыҡҡан китаптар менән дә байытыла. Урындағы башҡорт халҡы өсөн тәүге китапхана тип 1910 йылда асылған, «Көнсығыш лираһы» тип аталған һәм Оло Ҡазан урамында урынлашҡан китап йортон әйтергә була. 1917 йылдың башында Өфө губернаһында халыҡты 340 китапхана, шул иҫәптән 13 ҡала һәм 327 ауыл китапханаһы, хеҙмәтләндерә.

Граждандар һуғышы китапханалар эшенә бик ҙур зыян килтерә. 1918-1919 йылдарҙа Өфө ҡалаһы дүрт тапҡыр ҡулдан-ҡулға күсә. Китапханаларҙың фонды ҙур зыян күрә. «Ғәлиә» мәҙрәсәһенең, гимназияларҙың китапханалары юҡҡа сыға. Шәхси китапханалар ҙа шундай уҡ яҙмышҡа дусар ителә. Мәҫәлән, Әхмәтзәки Вәлидиҙең дә шәхси китапханаһы юғала. Ошо ваҡиға хаҡында ул былай яҙа: «3-сө полк сигенгәндә бик үкенесле ваҡиға булды: минең китапханам юғалды. Ул полктың мөлкәте менән бергә ун ете һандыҡта Ырымбурға ебәрелгәйне. Шул мөлкәт тейәлгән вагон Кинель станцияһында — ҡыҙылдар, һуңынан чехтар ҡулына эләгә. Себерҙә ул ҡабаттан ҡыҙылдарға күсә һәм Иркутск ҡалаһы университеты китапханаһына тапшырыла. Унда минең тарафтан ентекләп йыйылған төрк гәзиттәре, Ҡырымда 1883 йылдан баҫылған «Тәржеман» гәзитенең тулы йыйылмаһы бар ине. Урта Азияла булған ваҡытта тапҡан фарсы телендәге тарихи сығанаҡтарҙың бер өлөшөн генә Советтар менән татыулыҡ урынлаштырылғас ҡайтарып ала алдым. Ләкин бөтә баҫма әҫәрҙәр архив менән бергә юғалды. 1954 йылда Кембриджға (Бөйөк Британия — **Ф.Ғ.**) халыҡ-ара конгресҡа килгән урыҫ ғалимдары раҫлауынса, архивтың төп өлөшө ошоғаса Иркутск университеты китапханаһында һаҡлана».

1921 йылдың 9 июнендә Өфөлә губерна ғилми китапханаһы асыла. Тәү тапҡыр ошо яҡтың библиографияһын индереү, йыйыу, һаҡлау һәм уҡыусыларға ғилемдең төрлө өлкәһенән әҙәбиәт тәҡдим итеү бурысы йөкмәтелә. Киләсәктә ул милли китап һаҡлағыстарҙың береһе булып күҙаллана. Ғилми китапхана фондының нигеҙен Губерна статистика комитетының, элекке




*Китапхана фондының китаптар күргәҙмәһе.*

рухани семинарияһының һәм реаль училищеның, земство ҡарамағындағы педагогия училищеһының китапханалары тәшкил итә. Иң ҡиммәтле һәм йөкмәтке яғынан иң ҡыҙыҡлыһы булып Дашковтарҙан килгән китаптар тора (Дмитрий Васильевич Дашков — алдынғы ҡарашлы кеше, В. А. Жуковскийҙың, П. А. Вяземскийҙың, А. С. Пушкиндың дуҫы һәм фекерҙәше, Петербург Фәндәр академияһының маҡтаулы ағзаһы).

1922 йылдың 14 июнендә Башҡорт АССР-ының баш ҡалаһы Өфөгә күсә. Китапхананың үҫеше 1925 йылдан һуң башланып, ул ҡаланан республика ҡаҙнаһы ҡарамағына күсерелә. Артабан ул БАССР-ҙың Ғилми үҙәк китапханаһы тип атала, етәксеһе итеп Артемий Золотарёв тәғәйенләнә. «Золотарёв китапханала тотош революция яһаны, белгестәр араһында уның абруйын күтәрҙе. Белешмәләр эшен яйға һалды, тыуған яҡтың библиографияһын төҙөүгә, мотлаҡ экземпляр алыуға өлгәште. Ысын ғилми китапхана итеп кенә ҡалманы — уны Милли китап һаҡлағысҡа әүерелдерҙе», — тиелә архив материалдарында.

Китапхана фондының тулы йыйылмаһын туплауға көнсығыш әҙәбиәте белгесе, ғилми хеҙмәткәр, аҙаҡ китапханалар берләшкәс, Милли китапхананың башҡорт бүлегенең етәксеһе Г. Г. Әхмәров бик күп көс һала. 1928 йылда Мәжит Ғафури «Яңауыл» гәзитенең 53-сө һанында «Матбуғат хазинаһы» тигән мәҡәлә баҫтыра. Унда халыҡ шағиры былай тип яҙған: «Өфөләге «Бөтә Башҡортостан мәркәз китапханаһы» хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп үтеү тейеш кеүек күренә. Кереү менән күңелгә матурлыҡ биргән, татар, башҡорттарҙың был көнгә саҡлы бөтә матбуғатын йыйып өлгөрөү өҫтөнә, бер нисә мең томдарса Шәреҡ әҙәбиәте һәм иҫке әҫәрҙәр менән байытылған был китапхана ҡаланың нәҡ уртаһында балҡып тора. Уҡыусы йәштәр һәм ғилми тикшереүселәр һәр ваҡыт тулып торған был ғилем йорто һуңғы йылдарҙа ысынлап та матбуғат хазинаһына әйләнеп, төрлө ҡатлам уҡыусыларының һәр бер теләктәренә яуап бирерлек бер рәүешкә әүерелеп бара.

Хәҙер бында татар, башҡорт телдәрендә сыҡҡан төрлө китаптарҙы табып була. Сөнки һәр бер яңы әҫәр сығыу менән алып барыла. Шулар өҫтөнә СССР-ҙағы төрки-татар телендә сығып та, ғөмүми мәсьәләләрҙән бәхәс итә торған һәр бер ауылда газета-журнал алып барыла... Иҫке газеталарҙан «Тәржеман» газетаһы, «Шура», «Аң», «Фәсер йәдит» журналдарынан башлап һәр береһе төпләнеп йыйылып ҡуйылған. Шәреҡ әҙәбиәтенән хәҙерге көндә бик һирәк табыла торған «Шаһынан», «Шәйбани намә», «Йыһаннамә» кеүек надир әҫәрҙәр булыу менән бергә, тарихтан «Тарих камил», «Ибнү әсир» кеүек әҫәрҙәр бар...Европа китапханаларында булған фәнни юл менән алға китеп, эшсән халыҡ балаларының аң-белем ала торған ғилем шишмәһе алғы урын алыр, тигән матур теләктә ҡалабыҙ».

Йылдан-йыл китапхана үҫә, тулыландырыла. 1959 йылда китапханаға яңы

бина төҙөлә, һәм 1960 йылда ул Н. К. Крупская исемен йөрөтә башлай. Мөхәммәт Хажи улы Закиров (ул саҡта Н. Крупская исемендәге Республика китапханаһы директорының фәнни эштәр буйынса урынбаҫары) «Ағиҙел» журналының 1968 йылдың 6-сы һанында былай яҙа: «Башҡортостанда китапханаларҙың таралыуына аҙсылыҡ милләттәрҙең Федерация масштабында үткән кәңәшмәләре ныҡ булышлыҡ итте. 1924 йылдың башында һәм урталарында китапхана работниктарының Бөтә Рәсәй съездары булып, улар милли республикаларҙа һәм өлкәләрҙә китапхана төҙөлөшөнөң ҙур программаһын билдәләне, китап фондтарын комплектлау, милли уҡыусылар менән эшләү буйынса практик тәҡдимдәр бирҙе. Был осорҙа китапхана работниктарын төп милләт халҡынан әҙерләү мәсьәләһе ҡатмарлы булды. Башҡортостан политик мәғариф органдарын китапханасы кадрҙар менән тулыландырыу сығанаҡтарының береһе булып уҡытыусылар торҙо. Китапхана эшенә тәүге милли кадрҙар — М. Әмиров, В. Таһиров, Б. Еникеев һәм башҡалар килде. Улар китапхана эшенә үҙҙәренең бөтә ғүмерҙәрен бағышланылар...

...Район һәм ауыл китапханаларының эшен яҡшыртыуҙа Н.К. Крупская исемендәге республика китапханаһының методик һәм библиографик ярҙамы ҙур әһәмиәткә эйә. Республика китапханаһында культура төҙөлөшөнә күп энергияларын һәм көстәрен биргән өлкән йәштәге хеҙмәткәрҙәр эшләй. Улар араһында РСФСР-ҙың атҡаҙанған культура работнигы Суфия Хәлиловна Мамлеева, БАССР-ҙың атҡаҙанған культура работнигы Зәйнәп Ноғомановна Ғимранова һ.б. бар. Бөгөн китапхана һәр хеҙмәтсән, студент, уҡыусы өсөн тормош ихтыяжына әйләнде...»

1988 йылда, республика эсендә тәжрибә рәүешендә, Н. К. Крупская исемендәге китапхана балалар һәм үҫмерҙәр китапханалары менән берләштерелде. 1992 йылда ошо ғилем һәм белем хазинаһына бөтә донъяға билдәле яҡташыбыҙ ғалим Әхмәтзәки Вәлиди исеме һәм Милли китапхана статусы бирелде. Арҙаҡлы тарихсы исеме бирелеүе уның исемен мәңгеләштереү менән генә бәйләнмәгән, был — Бөтә Рәсәй һәм төрки донъяһында ғына түгел, бөтә донъя ғилем өлкәһе кимәлендәге тәрән мәғәнәгә эйә сара. Бөйөк ғалимдың бөтә ғүмере, тормошо китапҡа бәйләнгән, яңынан-яңы ҡулъяҙмалар эҙләүгә, өйрәнеүгә, башҡорт халҡының һәм башҡа төрки халыҡтарҙың тарихын яҙыуға бағышланған.

Бөгөн Милли китапхананың фондында Әхмәтзәки Вәлидиҙең эмиграцияға тиклем, 1909 — 1920 йылдарҙа, нәшер ителгән хеҙмәттәренең һаҡланыуы — уның ғорурлығы. Мәшһүр яҡташыбыҙ китаптарының иҫәбен байытыу, ошо байлыҡҡа яңынан-яңы, ошоғаса билдәһеҙ яҙмаларҙы өҫтәү, уның библиографияһын төҙөү һәм тулыландырыу, китаптарының электрон варианттарын эшләү — бына ошолар БР Милли китапханаһы эшмәкәрлегенең «Башҡорт халҡының хәтере» тигән программаһын бойомға ашырыу буйынса эшмәкәрлегенең бер өлөшө булып тора.

«Башҡорт халҡының хәтере» буйынса ни нимәләр эшләнгән һуң? Беренсенән, Милли китапхананың ике бүлеге ошо программаны тормошҡа ашырыу өҫтөндә эшләй. Икенсенән, Милли китапхана хеҙмәткәрҙәре квартал һайын һирәк осрай торған ҡулъяҙма һәм баҫма башҡорт китаптарын йыйыу өсөн сит өлкәләргә сыға. Әйтергә кәрәк, 2009 йылда ғына 60-тан ашыу һирәк осрай торған юғары баһалы баҫмалар һәм ике ҡулъяҙма китап табыу бәхете тейҙе. Өсөнсөнән, «Башҡорт халҡының хәтере» программаһын тормошҡа тулыһынса ашырыу өсөн заманса технологиялар менән эш итеү зарур. Бер генә дана булған һирәк осрай торған һәм иҫкергән китаптарҙы оцифровкалау. Ошо программаға ярашлы, 315 һирәк осраған китап, шул иҫәптән Әхмәтзәки Вәлидиҙең 55 хеҙмәте, оцифровкаланды.

Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана — республикабыҙҙың үҙәк китап йорто — халҡыбыҙҙың иң ҡиммәтле милли байлығы. Бында иң ҙур һәм киң мәғлүмәттәр тупланған. Уның фондында 20 телдән ашыу 3,3 миллион баҫма һаҡлана. Китапхананың электрон каталогында 247,3 мең яҙма тупланған.

Милли китапхананың үҙенсәлеге иң беренсе сиратта башҡорттар һәм Башҡортостан тураһындағы мәғлүмәттәрҙе, ниндәй телдә һәм ҡайҙа нәшер ителеүенә ҡарамаҫтан, йыйыу, һаҡлау, уҡыусыларға еткереү, «Башҡорт халҡының хәтере» фондында мәңгелеккә һаҡлау. Фондының ҙурлығы буйынса Милли китапхана Рәсәй Федерацияһында һигеҙенсе урында тора һәм йыл һайын 40 меңдән ашыу документ менән тулыландырыла. 1996 йылда йыйыу, һаҡлау һәм ғилми эшкәртеү маҡсатында ҡулъяҙма һәм һирәк осрай торған китаптар бүлеге асылды. Ғәрәп, фарсы, иҫке төрки телдәрендә 220 ҡулъяҙма, Ҡөрьәндең рус телендә сыҡҡан 1716 йылғы тәүге тәржемәһе, XIII быуатта ғәрәп телендә нәшер ителгән Ҡөрьән, фәлсәфәүи, халыҡ медицинаһы, тел ғилеме, хоҡуҡ буйынса XV-XVI быуаттарҙа яҙылған ҡулъяҙмалар һаҡлана. Уларҙың 13 меңе — ғәрәп графикаһы менән баҫылған китаптар, яҡынса 4 меңе — латин графикаһында. Алтын кеүек бөртөкләп йыйылған һирәк осрай торған ҡулъяҙмаларҙың барыһын да һанап бөтөрөү мөмкин түгел. 2007 йылда фонд материалдары буйынса «Башҡорттар тарихы» тигән китап нәшер ителде.

Китапханасылар республика кимәлендә уҙғарылған бер генә саранан да ситтә ҡалмай. Төрлө күргәҙмәләр, яҙыусылар, арҙаҡлы шәхестәр менән осрашыуҙар үткәрәләр, юбилей саралары, буклеттар, методик ҡулланмалар, проспекттар нәшер итәләр, төрлө ярыш-марафондар уҙғаралар.

Заманса технологиялар яғынан, әлбиттә, китапхана иң алғы рәттәрҙә, тиһәм, яңылышмам. 2011 йылдың 1 ғинуарына һирәк осрай торған китаптарҙың 550 берәмеге, «Башҡорт халҡының хәтере» программаһы буйынса 205 баҫма оцифровкаланған. Электрон китаптарҙы һаҡлау өсөн яңы сервер ҡуйылған. Милли китапхана фондына йыл һайын егерме меңдән ашыу баҫма алына: төрлө мәғлүмәт сараларында тупланған китаптар, ваҡытлы матбуғат баҫмалары, патент-техник документтар һ.б.

«Башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге» фондында 130 меңдән ашыу һаҡлау берәмеге иҫәпләнә. Республикабыҙҙың арҙаҡлы шәхестәренең үҙ ҡулдары менән бүләк иткән автографлы шәхси коллекциялары баһалап бөткөһөҙ хазина булып тора. «Сит телдәр бүлеге»ндә 22 телдә документтар, китаптар тупланған. Бүлек 50-нән ашыу сит ил ваҡытлы матбуғат баҫмаһы алдыра. «Нота һәм тауыш яҙҙырыу бүлеге»ндә 75 меңдән ашыу ноталы баҫмалар, грампластинкалар, аудио-видеоматериалдар, башҡорт композиторҙарының 2,5 меңдән ашыу ноталы ҡулъяҙмалары ҡәҙерләп һаҡлана.

Әлеге ваҡытта китапхананың дүрт корпусына йыл һайын 75 меңдән ашыу кеше йөрөй. Шулай уҡ китапхана эсендә балалар һәм үҫмерҙәр өсөн уҡыу үҙәктәре эшләп килә. Китапханасылар балаларҙы, йәштәрҙе матур әҙәбиәт өлгөһөндә тәрбиәләү, үҙаңын үҫтереү, әҙибиәтебеҙ аша Тыуған илгә һөйөү уятыу, төрлө милләт вәкилдәре араһында дуҫ йәшәүҙе хуплау, бөйөк шәхестәребеҙҙең тормошон өйрәнеү, пропагандалау, тарихи ҡомартҡыларҙың электрон варианттарын булдырыу, уны заманса варианттарҙа халыҡҡа еткереү маҡсатын тормошҡа ашыра.

**Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА.**

## *4 декабрь – Дәүләт Думаһына һайлау көнө*

# ВӘҒӘҘӘЛӘР ГӨЛЛӘМӘҺЕ

Бишенсе саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаттарының полномочиелары декабрҙә тамамлана. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһының алтынсы саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлауҙы тәғәйенләгән 4 декабргә лә күп ҡалманы. Уға граждандар мандатына дәғүә иткән сәйәси фирҡәләр нисек килә? 14 августа уҡ «Утро. Ру» Интернет гәзите Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты (ДРХФ) һәм «Берҙәм Рәсәй»ҙең буласаҡ һайлауҙар айҡанлы башҡарған эшмәкәрлеге тураһында хәбәр итте. Халыҡ фронтына махсус программа әҙерләгән Социаль-иҡтисади һәм сәйәси тикшеренеүҙәр институты директоры, Сыуашстандың элекке президенты Н. Федоровтың мәғлүмәттәре буйынса, ДРХФ илдең 83 төбәгендә 1 миллиондан ашыу кешенең фекерен өйрәнеп, системаға һалған. Был эштә 600 меңләп белгес ҡатнашҡан һәм 15 меңләп тәҡдимде комплекслы программаға индереү буйынса эш атҡарған.

Власть фирҡәһенең һайлау алды программаһы башҡаларҙыҡынан етди айырыла. Мәҫәлән, сәйәсәт өлкәһендә «Берҙәм Рәсәй» Белоруссия һәм Ҡаҙағстан менән таможня берлеген артабан үҫтереү, берҙәм иҡтисади зона булдырып, Европа союзына өлгәшеү йүнәлешендә эшләргә вәғәҙә итә. Инновациялар нигеҙендә тулайым эске продукттың йыл һайын 6-7 процентҡа артыуына өлгәшеп, киләһе биш йылда уҡ донъяның иң эре иҡтисади төркөмөнә инеү – власть фирҡәһенең иҡтисади программаһында төп урын биләгән пункт. Яңы технологияларға таянып эшләгән 25 миллион яңы эш урыны – был маҡсатҡа «Берҙәм Рәсәй» 20 йылда өлгәшергә ниәтләй.

Армия менән флотты тулыһынса ҡайтанан ҡоралландырыу иһә – яҡындағы 5 – 10 йылда ғәмәлгә ашырылырға тейешле маҡсаттарҙың береһе. Октябрь баштарында Силәбе өлкәһенең Сыбаркүл районында хәрби уҡыуҙарҙа ҡатнашҡан Д. Медведев был хаҡта: «Беҙ оборонаға сығымдарҙы бер нәмәгә ҡарамай бүләсәкбеҙ», – тип белдерҙе.

Федераль Йыйылыштың түбәнге палатаһында мандаттарҙы күберәк эләктереп үҙ хөкүмәтен ойоштороу маҡсатын ҡуйған сәйәси фирҡәләрҙең программаһы бай, сыбар йөкмәткеле һәм башлыса «һул» ҡарашлы һайлаусыға төбәлгән. Мәҫәлән, КПРФ һәм «Рәсәй патриоттары», «Ғәҙел Рәсәй» стратегик тармаҡтарҙан алынған килемдәрҙе граждандар араһында ғәҙел бүлеү проблемаһын ҡуҙғата. Коммунистар иһә хөкүмәт төҙөүҙе үҙ ҡулдарына ала ҡалһа, хатта сеймал сәнәғәте, электр энергияһы, металлургия, машиналар, самолеттар эшләү предприятиеларын дәүләт ҡулына аласағын асыҡтан-асыҡ белдерә. Сөнки шунһыҙ эшһеҙлекте бөтөрөү, сәнәғәтте, айырыуса ауыл хужалығын ҡайтанан ҡоралландырыу, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау һәм мәҙәниәт өлкәләрендәге хәлде яҡшыртып булмаясаҡ. Либерал-демократтар сеймал, электр энергияһы, алкоголле эсемлектәр, тәмәке сауҙаһына дәүләт монополияһы индереү буйынса әүҙемлек күрһәтергә вәғәҙә итә.

Аграр сәйәсәт был юлы коммунистар менән «Ғәҙел Рәсәй» программаларында ғына ныҡлы сағылыш тапҡан. КПРФ ҡаҙнаның 10 – 15 проценты күләмендә финанс

ярҙамы менән тармаҡты заманса техника менән ҡоралландырыу, коллектив хужалыҡтарҙы тергеҙеү бурысын ҡуйһа, «Ғәҙел Рәсәй» иһә ауыл хужалығы продукцияһына өҫтәп түләү, тармаҡҡа дәүләт ярҙамын 10 процентҡа еткереүҙе хәстәрләйәсәк. Әйткәндәй, илдә элекке колхоздарҙы тергеҙеү тәжрибәһе бар икән. Башҡортостан коммунистарының лидеры Р. Гардановтың мәғлүмәттәре буйынса, Удмурт Республикаһында бөгөн туғыҙ колхоз эшләй.

КПРФ шулай уҡ яңы финанс сәйәсәте тәҡдим итмәксе. Үҙәк, Тышҡы, Һаҡлыҡ, Төҙөлөш һәм Ауыл хужалығы банкылары дәүләт ҡарамағында буласаҡ. Шулай уҡ иҡтисади һәм социаль үҫешкә ярҙам иткән коммерция банкыларын да улар ябырға йыйынмай. Ә иҡтисадты ҡиммәтле кредит менән быуған финанс ойошмаларына урын булмаясаҡ.

Сәйәси фирҡәләрҙең һайлау алды программаларында иң ҙур урын алған пункттар социаль сәйәсәткә арнала. Мәҫәлән, «Рәсәй патриоттары» яҡын йылдарҙа граждандарҙың тормош сифатын Төньяҡ Европа илдәре кимәленә еткереү буйынса эшлекле саралар күрергә вәғәҙә итә. «Ғәҙел Рәсәй» тулайым эске продуктта эш хаҡының өлөшөн хәҙерге 24 проценттан 60-ҡа еткереү кәрәклеген билдәләй. ЛДПР фекеренсә, хеҙмәткә сәғәтләп түләү мәсьәләһен хәл итеү отошло. Мәҫәлән, 2014 йылға тиклем кәмендә 50, артабан 100 һумдан да кәм түләмәҫкә. Либерал-демократтар ғалим, уҡытыусы, табип кеүек һөнәр эйәләренә илдәге уртаса эш хаҡынан ике тапҡыр күберәк түләү кәрәклеген иҫкәртә.

Һалым сәйәсәте буйынса яңғыраған ҡайһы бер үткер фекерҙәр был тармаҡта хәлдең һаман көйләнмәүе хаҡында һөйләй. «Ғәҙел Рәсәй» программаһында сит илгә сығарылған финансҡа махсус һалым индереү, «Берҙәм Рәсәй» ҡулланыуға, бай граждандарҙың күсмәҫ милкенә һәм мөлкәтенә һалым, «Рәсәй патриоттары» килем күләменә ҡарап үҫә барыусы прогрессив һалым индереү кеүек күптән хәл ителергә тейешле мәсьәләләрҙе күтәрә. Власть фирҡәһе, барыһын да уҙҙырып, киләһе йылдарҙа рәсәйҙәрҙең килемен 1,5 тапҡырға арттырырға вәғәҙәләй.

Хеҙмәт эйәләренең хоҡуҡтарын яҡлау буйынса КПРФ һәм «Рәсәй патриоттары» программаларында етди пункттар күренә. Коммунистар ғәмәлдә совет власы ҡаҙаныштарын ҡайтарыу өсөн көрәшәсәген белдерһә, «Ғәҙел Рәсәй» профсоюздарҙың ролен көсәйтергә, хеҙмәтсәндәрҙең хоҡуҡтарын боҙған етәкселәргә ҡарата административ яуаплылыҡтың ҡатырағын ҡулланырға, «Рәсәй патриоттары» эшһеҙлекте бөтөрөп, лайыҡлы тормош өсөн көрәшергә вәғәҙә итә.

Федератив ҡоролошто тергеҙеү, төбәктәр һәм урындағы үҙидара органдарының хоҡуҡтарын киңәйтеү буйынса иң эшлекле пункттар – Берләшкән социал-демократтар фирҡәһе «Яблоко» программаһында. Унда республикалар президенттарын ғына түгел, төбәктәр башлыҡтарын һайлап ҡуйыуға кире ҡайтырға саҡырыла. Федерация Советы ағзаларының, солох судьяларының да граждандар тарафынан һайланыуына өлгәшергә кәрәк. Һалымдың күпселек өлөшө урындарҙа ҡалырға һәм халыҡҡа файҙа килтерергә тейеш. Мәхкәмәнең бойондороҡһоҙлоғона өлгәшеү өсөн граждандарҙың властарға ялыуын закон нигеҙендә ҡарай алған Административ мәхкәмәләр ойоштороу, судьяларҙы судьялар коллегиялары тәҡдим итеүе тәртибендә Федерация Советында раҫлау маҡсатҡа ярашлы. Мәхкәмәләр рәйестәрен һайлау, уларҙың ике сроктан да күберәк эшләүен сикләү, присяжныйҙар тарафынан ҡаралған эштәр исемлеген киңәйтеү һ.б. тармаҡтың эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһаласаҡ, тиелә социал-демократтар программаһында.

Төбәк башлыҡтарының граждандар тарафынан һайланыуын тергеҙеү, федератив принциптарҙың үтәлешенә өлгәшеү теге йәки был дәрәжәлә «Ғәҙел Рәсәй», «Рәсәй патриоттары» программаларында күтәрелә. «Төбәктәр хоҡуҡтары ҡыҫыла, Рәсәй унитар дәүләткә әүерелә бара»,– тиелә «Рәсәй патриоттары» программаһында. Ә

бына йәй баштарында уҡ буласаҡ һайлауҙарға «Урыҫ мәсьәләһе»н күтәреп барасағы хаҡында белдергән ЛДПР фирҡәһе, киреһенсә, милли республикаларҙы бөтөрөү, Рәсәйҙе унитар дәүләткә әйләндереү өсөн сығыш яһай. Әйткәндәй, «урыҫ мәсьәләһе»н либерал-демократтар ғына түгел, хатта КПРФ та ҡуҙғатып, был темаға конференция үткәреп ташланы. Йәнәһе, урыҫтар илдә иң ҡыйырһытылған халыҡ иҫәбендә. Ә бит империяның «арҡа һөйәге»н тәшкил иткән милләтте ваҡ халыҡтарҙың кәмһетә алыуы бер ҙә ышандырмай. Шул уҡ ваҡытта милли проблема ҡуҙғытыусылар уның ниндәй сүрәттә сағылыш табыуы, кемдәр йәки ниндәй социаль, сәйәси төркөмдәр уға ғәйепле икәнлеген атап әйтмәй. Шулай булғас, буш урында яу ҡуптарыу менән бер кем дә отмаясағы, ә низағ сыға ҡалһа, яҡшыға килтермәйәсәге көн кеүек асыҡ түгелме ни? Нисек кенә булмаһын, бында ла инициативаны «Берҙәм Рәсәй» үҙ ҡулына алырға өлгөрҙө. Сентябрь баштарында Урыҫ конгресы башлығы, Рәсәйҙең НАТО-лағы илсеһе, әйтергә кәрәк, илдә «иң абруйлы урыҫ» Дмитрий Рогозин Мәскәүгә килеп, власть фирҡәһе өсөн тауыш бирергә саҡырҙы ла кире Брюсселгә китте.

Рәсәй граждандарына вәғәҙәләр гөлләмәһе тәҡдим ителә. Дөрөҫ, улар араһында күптән көн тәртибендә йөрөгәндәре лә юҡ түгел. Мәҫәлән, эшҡыуарлыҡты үҫтереү тураһында хәбәр 90-сы йылдарҙан бирле көн үҙәгенән төшкәне юҡ. Тик һөҙөмтәһе генә күҙгә салынып бармай. Социаль сәйәсәт тураһында ла шуны әйтергә мөмкин, сөнки йәшәү минимумын тәүлегенә 150 һумдан һалған бер генә держава ла юҡ. Ошо йәһәттән Дәүләт Думаһына «Ғәҙел Рәсәй» фирҡәһенән барасаҡ депутат Елена Мизулинаның фекере айырыуса иғтибарға лайыҡ. Рәсәйҙә эшләп йөрөгәндәр араһында ла фәҡирҙәр аҙ түгел, ти ул. Профессионал булыу ғына файҙа килтермәй, сөнки бай һәм йоғонтоло таныштарың юҡ икән, аҡсалы эшкә урынлаша алмайһың. Фәҡирлекте бөтөрөү өсөн хеҙмәт хаҡына реформа үткәреү фарыз. Иҡтисади стандарт тамаҡ аҫрау ғына түгел, ғаиләне ҡарау, торлаҡ һатып алыу, балаларҙы уҡытыу кеүек ихтыяждарға ла етергә тейеш.

Сәйәси фирҡәләр программаларында мәҙәниәт, мәғарифты үҫтереү буйынса ла пункттар бар. КПРФ совет системаһын тергеҙеүҙе вәғәҙә итһә, ҡалғандар дөйөм белемде бушлай биреү, ғөмүмән, белем алыуҙы һәр кемдең хәленән килерлек кимәлгә килтереүҙе хәстәрләйәсәген белдерә. Ә бына ошо өлкәләргә финанс ярҙамы күрһәткән граждандарға (меценаттарға) ҡарата социаль һалым мәсьәләһен «Яблоко» фирҡәһе генә күтәрә.

Һайлау алды вәғәҙәләре үтәлерме? Әллә депутаттар мандатты кеҫәләренә һалыу менән ул турала онотормо? Ошо айҡанлы 2007 йылда ҡабул ителгән «Путин пландары – партия пландары» тигән документ иҫкә төшә. Унда Рәсәй граждандарына юғары сифатлы тормош, суверенлы демократияның үҫеше, меценаттарға ташламалар, педагогик хеҙмәткәрҙәргә юғары эш хаҡы, тәбиғи монополияларға реформа, аграр хужалыҡты, ғөмүмән, ауыл инфраструктураһын үҫтереү, торлаҡ төҙөлөшөн көсәйтеү, туҙған йорттарҙа йәшәүселәрҙе уңайлы өйҙәргә күсереү һ.б. вәғәҙә ителгән. Шулай уҡ Рәсәй дәүләтселеген нығытыу, йәштәр сәйәсәте үткәреү, граждандар йәмғиәтен үҫтереү иҫәбенә илдә фәҡирҙәр юҡҡа сығасаҡ ине.

Әлбиттә, беҙгә сәйәси фирҡәләрҙең төп үҙенсәлеге – киң ҡатлам граждандарға таянмауын да иҫәптән сығарырға ярамай. Һайлаусыларҙың яҡлауына таянмай тороп, уларҙың программаларындағы пункттарҙың да ғәмәлгә ашасағы шикле. Шуға күрә 4 декабрҙә һайлауға барып, үҙ мөнәсәбәтегеҙҙе белдереү генә етмәй, һәр кемдең үҙе яҡлаған сәйәси фирҡәгә социаль терәк булып әүерелеүенә өлгәшеү фарыз.

**Мәхмүт ХУЖИН.**





**ҠОТЛАЙБЫҘ!**

*Башҡортостан Президенты Указына ярашлы, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, яҙыусы-ғалим* ***Суфиян ПОВАРИСОВ «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы»****, күренекле шағир, йәмғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты* ***Кәҙим АРАЛБАЕВ «Башҡортостандың халыҡ шағиры»*** *тигән исемгә лайыҡ булды. Янып-илһамланып эшләүсе әҙиптәребеҙҙең башҡорт әҙәбиәтенә индергән тос өлөшө хөкүмәтебеҙ тарафынан юғары баһаланыуы һөйөнөслө. «Ағиҙел» журналы уҡыусылары, ҡәләмдәштәре исеменән уларҙы мәртәбәле исемдәре менән ихлас ҡотлайбыҙ, илһамлы ижад, сәләмәтлек, оҙон ғүмер теләйбеҙ!*

**„Ағиҙел"селәр.**

# *Әҙәби-мәҙәни мөхит*

***

**Бәләбәй.** Сыуашстандың халыҡ шағиры Яков Ухсайҙың тыуыуына 100 йыл тулыу байрамына БР-ҙың мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев етәкселегендә бер төркөм яҙыусылар, мәҙәниәт һәм китапхана хеҙмәткәрҙәре килде. Улар араһында Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ирек Кинйәбулатов, филология фәндәре кандидаты, шағир Александр Леонидов һәм башҡалар бар ине. Сыуашстандан иһә мәҙәниәт министры урынбаҫары Вячеслав Фошин етәкселегендәге делегация ҡатнашты. Сыуашстандың халыҡ шағиры Порфирий Афанасьев, шағирә Светлана Азамат, Яков Ухсайҙың ҡыҙы Елена Ухсай, артистар килгәйне.

Әҙәби осрашыуҙар Ыҫлаҡбашта Яков Ухсай һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан һәм шағирҙың музейын ҡарауҙан башланды. Унан һуң ауыл мәҙәниәт йортонда йылы юбилей кисәһе уҙҙы. Бәләбәй ҡалаһындағы сарала район хакимиәте башлығы Юрий Мурмилов, Ыҫлаҡбашта ауыл хакимиәте башлығы Олег Беляев сығыш яһаны.

***

**Өфө**. Халыҡтар дуҫлығы китапханаһы, Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы айҡанлы, Сыуаштандың халыҡ шағиры Яков Ухсайға арналған әҙәби кисә ойоштурҙо.

Кисәгә Я. Ухсайҙы күреп белгән ҡәләмдәштәре, Калинин районындағы 41-се сыуаш мәктәбе директоры Леонид Михайлов, „Канаш“ йәмғиәтенең сыуаш мәҙәниәте бүлеге етәксеһе Юрий Михайлов һәм башҡа ҡунаҡтар килде.

***

**Шаран.** Башҡорт мәҙәниәте көндәрендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назар етәкләгән делегация: Риф Мифтахов, Таңсулпан Ғарипова, Рәмил Йәнбәк, Марсель Сәлимов, Лилиә Сәғиҙуллина, Фәниә Ғәбиҙуллина, Радик Хәкимйән, Рафаил Хафизов ҡатнашты. Район хакимиәте башлығы Илгиз Мәғҙән улы Сәмиғуллин ҡабул иткәндән һуң әҙиптәр Түбәнге Зәйет мәктәбендә, Шаран сәнғәт мәктәбендә сығыш яһаны. Иртәгәһенә улар „Батыр“ балалар баҡсаһын ҡараны, Ерекле мәктәбендә Ибраһим Абдуллин музейы менән таныштты һәм мәҙәниәт йортонда халыҡ менән осрашты. Ошонда уҡ ветеран уҡытыусы Флүрә Иғдиеваның „Мәңге халыҡ хәтерендә“ тигән китабының исем туйы ла үтте.

Йомғаҡлау кисәһе Ямаҙыбаш ауылында уҙҙы. Район хакимиәте башлығының инеш һүҙенән һуң байрамды яҙыусылар дауам итте. Бөтә сараларҙа ла район хакимиәте етәксеһе урынбаҫары И.Л. Ғәзизова, мәғариф бүлеге етәксеһе М.З. Әхмәҙуллин, мәҙәниәт бүлеге етәксеһе А.И. Ғабдуллин, мәғлүмәт-аналитик бүлек етәксеһе Р.Х. Мусин, район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Й.Я. Арыҫланов ҡатнашты.

***

**Ҡырмыҫҡалы.** Район мәҙәниәт һарайында яҙыусы, журналист, популяр йырҙар авторы Рәсих Ханнановҡа 80 йәш тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисә уҙҙы.

Әҙипте ҡотларға Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Марсель Сәлимов, ғалим-педагог Әхәт Ниғмәтуллин, „Ҡыҙыл таң“ гәзите мөхәррире Фаил Фәтхетдинов, композитор Рим Хәсәнов, башҡа ҡунаҡтар килде. Кисәлә Рәсих Ханнанов шиғырҙарына яҙылған йырҙар яңғыраны. Юбилярҙы район хакимиәте башлығы урынбаҫары И. Ғәлиәхмәтова ҡотланы.

***

**Хәйбулла.** Районда уҙған Башҡорт әҙәбиәте көндәре С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбайға арналды. Кисәләрҙә әҙиптең Өфөнән килгән ҡәләмдәштәре: Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, шағир Ирек Кинйәбулатов, БДУ профессоры Тимерғәле

Килмөхәмәтов, „Йәшлек“ гәзите хәбәрсеһе Мөнир Ҡунафин ҡатнашты. Уларҙы район хакимиәт башлығы Рөстәм Хәйруллин ҡабул итте.

Быҙаулыҡ, Байғусҡар, Аҡъярҙағы 1-се, Мәмбәт урта мәктәптәрендә, район мәҙәниәт йортонда әҙәби осрашыуҙар сәхнә оҫталарының концерт номерҙары менән аралашып барҙы.

***

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуған көнө инде алтынсы йыл унһыҙ уҙғарыла... Шағир ижадына һәм тормош юлына арналған Хәтер кисәләренең иң әһәмиәтлеһе, әлбиттә, Республика Президенты Рөстәм Хәмитовтың шағирҙың торған фатирына килеүе, уның балалары һәм туғандары менән йылы осрашыуы булды.

Президент Мостай Кәримдең эш бүлмәһен, шәхси китапханаһын ҡараны, шағирҙың ҡыҙы Әлфиә Кәримова, улы Илгиз Кәримов менән фекер алышты, әҙиптең яҡты рухын иҫләне.

Мостай Кәримгә һәйкәл әҙерләүгә конкурс тамамланды һәм һәйкәл 2012 йылда ҡуйыласаҡ, тип вәғәҙәләне Рөстәм Хәмитов. Шулай уҡ яҙыусының тыуған ерендә, Шишмә районы Келәш ауылында йорт-музей төҙөү ҙә күҙаллана.

...Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһына Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев етәкселегендә әҙиптәр ҙур әҙәби кисә уҙғарҙы. Гимназия уҡыусылары Мостай Кәримдең шиғырҙарын уҡыны, төрлө әҫәрҙәренән өҙөктәр күрһәтте. И. Кинйәбулатов, Ф. Туғыҙбаева, Й. Ильясова, Т. Ғәниева, Г. Искәндәриә, З. Ҡотлогилдина остаздарына арналған шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе.

Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбай етәкселегендәге шағирҙар төркөмө М. Кәримдең тыуған яғы – Шишмә районына барҙы. И. Кинйәбулатов, Тойғон, Х. Юлдашев, М. Ҡунафин, Д. Шәрәфетдинов, Мостай Кәримдең улы Илгиз Кәримов Келәш, Ҡара Яҡуп, Дурас һәм Шишмә ҡасабаһының 3-сө, 4-се, 5-се мәктәптәрендә әҙәби осрашыуҙар уҙғарҙы.

Район үҙәгендә бөйөк яҡташтарына арналған хәтер кисәһе сәнғәт мәктәбендә үтте.

***

**Туймазы.** Башҡорт әҙәбиәтенә тиҫтәнән ашыу әҙипкә ҡанат ҡуйған төбәктә уларҙың иҫтәлеген һаҡлау буйынса һөҙөмтәле саралар күрелә. Октябрь айында күренекле драматург һәм йәмәғәт эшмәкәре Әсғәт Мирзаһитовҡа – 90, әҙәбиәт белгесе, публицист Суфиян Сафуановҡа – 80, ауыл хужалығы фәндәре докторы, прозаик Наил Ҡотдосовҡа 70 йәш тулған булыр ине... Ошо юбилейҙар айҡанлы мәрхүм әҙиптәрҙең ҡәберҙәренә сәскәләр һалынды, педагогия колледжында, район үҙәк китапханаһында, Ҡандра урта мәктәбендә, Йәрмөхәмәт мәктәбендә ҡәҙер һәм хәтер кисәләре уҙғарылды. Осрашыуҙар барышында ҡалала әҙәби музей ойоштороу, урамдарға әҙиптәрҙең исемдәрен ҡушыу буйынса тәҡдимдәр әйтелде, һағышлы иҫтәлектәр һөйләнде.

Осрашыуҙарҙа Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, Союздың татар яҙыусылары берекмәһе рәйесе Марис Нәзиров, „Ағиҙел“ журналы хеҙмәткәре Сабир Шәрипов, район-ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Сергей Подоприхин, район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Фәндил Мөхәмәтдинов, ветерандар советы рәйесе Адунис Фәйзуллин, үҙәк китапхана директоры Әлфиә Шәйҙуллина, „Ветеран Башкортостана“ гәзитенең директор урынбаҫары Нурислам Вәлиев, Башҡорт дәүләт аграр университетында элек Наил Ҡотдосов менән бергә эшләгән ғалим-педагогтар, ошо уҡ Йәрмөхәмәт ауылында тыуған композитор Әкрәм Дауытовтың ҡыҙы Заирә Шәрипова, төбәктәге яҙыусылар, халыҡ таланттары ҡатнашты.

***

**Төрөк Республикаһы** Төньяҡ Кипр баш ҡалаһы Левкошала төрки донъяһы әҙәби журналдары вәкилдәренең „ТӨРКСОЙ“ ойошторған IV конгресында „Ағиҙел“ журналы исеменән шағирҙар Фәнил Күзбәков менән Гөлназ Ҡотоева ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Һүҙ төрки телендәге әҙәбиәт торошо, уның үткәне, киләсәге, тәржемә мәсьәләләре, әҙәби журналдар тураһында барҙы. Бындай йәнле аралашыу ҡәрҙәш халыҡтарҙың рухи донъяһын асыҡлау, уртаҡ проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләү, әҙәбиәт аша илдәр араһында дуҫлыҡ күперҙәре һалыу өсөн бик тә кәрәк.